РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫ МӘҒАРИФ ҺӘМ ФӘН МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ ПРОФЕССИОНАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ
ДӘҮЛӘТ МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
«М. АҠМУЛЛА ИСЕМЕНДӘГЕ
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ»
БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ МӘҘӘНИӘТЕ КАФЕДРАҺЫ
ФОЛЬКЛОР ҮҘӘГЕ

ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ҠАРҺҮҘЕ

Филология факультеты студенттары һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт укытыусыларына тәғәйен укыу ҡулланмаһы

Икенсе киҫәк

Өфө 2011

УДК 80
ББК 82.3 (Рос=Баш)
С 75

*М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының уҡытыу-методик советы ҡарары менән баҫыла*

**Сөләймәнов Ә.М.** Башҡорт халҡының ҡарһүҙе [Текст]: филология факультеты студенттары һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт уҡытыусыларына тәғәйен уҡыу ҡулланмаһы. Икенсе киҫәк. – Өфө: БДПУ нәшриәте «Вагант», 2011. – 200 б.

Уҡыу ҡулланмаһының был өлөшөнә башҡорт халҡының көләмәстәре, риүәйәттәре һәм легендалары, шулай уҡ эпик ҡомартҡылары хаҡындағы бүлектәр индерелгән. Һәр бүлек һорауҙар һәм эш менән тәьмин ителгән.

Ҡулланманы филолог студенттар менән аспиранттарҙан тыш, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт уҡытыусылары, шулай уҡ башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадының ҡабатланмаҫ ҡомартҡыларына битараф булмаған башҡалар ҙа файҙалана ала.

Рецензенттар: **Ғ.С. Ҡунафин,** филол. фәнд. д-ры, проф. (БДУ);
**Ф.Ғәлиева-Әхәтова,** филол. фәнд. д-ры, әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәр (РФА ӨФҮ Этнологик тишеренеүҙәр институты)

ISBN 978-5-87978-668-2
ISBN 978-5-87978-609-5

© БДПУ нәшриәте «Вагант», 2011
© Сөләймәнов Ә.М., 2011

ФЕДЕРАЛЬНОЕ АГЕНТСТВО ПО ОБРАЗОВАНИЮ
ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ВЫСШЕГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ
УНИВЕРСИТЕТ им. М.АКМУЛЛЫ»

НАУЧНО-ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКАЯ ЛАБОРАТОРИЯ
ЭТНОПЕДАГОГИКИ И НАРОДНОГО ТВОРЧЕСТВА
(ЦЕНТР ФОЛЬКЛОРА)

АХМЕТ СУЛЕЙМАНОВ

# ПОВЕСТВОВАТЕЛЬНЫЙ ФОЛЬКЛОР БАШКИРСКОГО НАРОДА

Учебное пособие
для студентов-филологов, преподавателей литературы и культуры

Часть вторая

Уфа 2011

УДК 80
ББК 82.3 (Рос=Баш)
С 75

*Печатается по решению учебно-методического совета Башкирского государственного педагогического университета им.М.Акмуллы*

Сулейманов А.М. Повествовательный фольклор башкирского народа [Текст]: учебное пособие для студентов-филологов, преподавателей литературы и культуры. Часть 2. – Уфа: Изд-во БГПУ «Вагант», 2011. – 200 с.

В эту часть учебного пособия вошли главы о кулямасах-анекдотах, риваятах-преданиях и легендах, а также эпических памятниках башкирского народа. Каждая глава в отдельности снабжена контрольными вопросами и заданиями.

Пособием могут пользоваться не только студенты и аспиранты-филологи, преподаватели языка, литературы и культуры, но и все, кто интересуется уникальными памятниками устно-поэтического творчества башкирского народа.

Рецензенты: Г.С. Кунафин, д-р филол. н., проф. (БГУ);
Ф.Галеева-Ахатова, д-р филол.н., ведущий научный сотрудник (Института этнологии УНЦ РАН).

ISBN 978-5-87978-668-2
ISBN 978-5-87978-609-5

© Издательство БГПУ «Вагант», 2011
© Сулейманов А.М., 2011

# I БҮЛЕК. КӨЛӘМӘСТӘР

Көлкөлө күренеш хаҡында беҙ, ғәҙәттә: “Эй, мәрәкә!” – тип әйтәбеҙ. – “Торғаны анекдот!” – тип тә өҫтәп ҡуйыусанбыҙ.

Нимә һуң ул "анекдот"? Ул "anekdota" тигән грек һүҙенән тыуған. Был һүҙ башта "киң публикаға бығаса билдәле булмаған" тигәнде, ә китап баҫыу мәҙәниәте таралғас, "бығаса ташҡа баҫтырылмаған" тигәнде аңлатҡан. Торараҡ "иҫәпкә алынмаған" "ҡыҙыҡлы факт, ваҡиға йә хәлдәр" тигән мәғәнәлә ҡулланыла башлаған. Фәндә һәм йәнле телдә "анекдот" терминының ерегеп китеүенә Прокопий Кесарийский[1] тигән күренекле тарихсы, сәбәпсе булған. Византия императорҙары тормошона бәйле төрлө мәрәкәләрҙе ул "анекдот" исеме менән ташҡа баҫтырған булған. Шунан күрмәксе, күренекле шәхестәр ураһындағы һәр төрлө ҡыҙыҡлы хикәйәләр, мәрәкә хәлдәр хаҡындағы ҡарһүҙ "анекдот" исемен ала, аҙағыраҡ (XVI быуаттың икенсе яртыларында) ҡыҙыҡлы ситуацияға, мәрәкә фаразға нигеҙләнгән, күләм йәһетәнән ыҡсым юмористик һәм сатирик сәсмә әҫәрҙәрҙең барыһын да ошо термин менән атап йөрөтә башлағандар (30, 57). XVIII быуаттан башлап нәк ошо мәғәнәһендә был атама рус йәмғиәтендә лә ҡулланыла башлай һәм фольклорына ла ерегеп ҡала. Рустар аша башҡа халыҡтарға, шул иҫәптән башҡорттарға ла күсә.

Башҡорттарҙың көнсығыш мәҙәниәте менән таныш булғандары иһә элек-электән шул уҡ мәғәнәлә "латифа" һүҙен ҡулланыр булған. Ғәрәп теленән ингән был һүҙ беҙҙеңсә "шаяртыу", "мәрәкәләү", "нәфис" тигән мәғәнәне бирә.

"Латифа" терминының башҡорт теленә ерегеүенә төрлө юлдар менән фарсы, ғәрәп менән төрөктәрҙән килгән китаптар нығ булышҡан. Күрәһең, шуғалыр ҙа Ғ.Вилданов 1926 йылда баҫылған бер мәҡәләһендә ҡыҫҡа күләмле юмористик сәсмә әҫәрҙәрҙе “латифа" тип атағандыр. Әммә ул уны "мәҫәл", "ҡисса" ише атамаларҙың синонимы кеүек тә ҡулланған (12, 20–24).

“Латифа” термины төрки халыҡтарының күптәренә ереккән. Тик, әгәр уйғыр ҡәрҙәштәребеҙ шуны ғына үҙ итһә, үзбәк, әзриҙәр унын менән бер рәттән “анекдот” тигәнде лә “тотона”. Төрөкмән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һуңғыһына өҫтөнлөк бирә (40а). Башҡорт менән татар халыҡтары телмәрендә лә был ят термин ҡулланылғылай. Шулдай ҙа хәҙер был ике халыҡ үҙ милли атмаһын үҙ күреңкерәй. Фәндә иһә тик шуныһы ғына, йәғни беҙҙә - “көләмәс”, күршеләрҙә “мәҙәк” тигәне генә ҡулланыла.

Славян халыҡтары ла, шул иҫәптән рустар ҙа "анекдот" атамаһы менән бер рәттән элек-электән "побасенка", “жарты", "усмешки",

---

[1] Прокопий Кесарийский (500 - 565-се йылдар тирәһе) тарихҡа Юстиниан I тигән император булараҡ (Византия) мәғлүм булған Велисарий тигән полководецының (504 – 565-се йылдар тирәһе) кәңәшсеһе вазифаһын атҡарыусы яҙыусы. “Юстиниан ҡоролмалары”, император ғаиләһе хъаҡында “Йәшерен тарих” тигән китаптар уның ҡулы менән яҙылған.// Советский энциклопедический словарь. – М.: СЭ, 1986.- С. 205, 1063,

"гумарэски", "фацеции", "фрашки" тигән терминдарҙы ла ҡулланған. Шуның кеүек, XIX быуатта татар теленә ителгән ғәрәп, фарсы, төрөк латифалары “мәҙәк" ("миҙәк") тигән атама менән тәҡдим ителә. Беҙҙә лә боронғо уҡымышлылар “латифа", "мәҙәк" тигән әҫәрҙәрҙе айырым төбәктәрҙә шул яҡҡа ғына хас милли атамалар менән атап йөрөтөр булған. Мәҫәлән, үҫәргәндәр, һәр хәлдә, уларҙың хәҙерге Хәйбулла районындағылары әле лә "көлкө һөйләү", "әңгәмә", “әңгәмәһе бер тоҡ" тиҙәр. Күбәләк башҡорттары (Учалы, Әбйәлил районлары) иһә "тәләкәс" йә "тәләкә" (ә тәләкә оҫтаһын "тәләкә кеше", “тәләкәсел") тиҙәр. Ҡайһы бер төбәктәрҙә (мәҫәлән, Ишембай, Бөрйән тарафтарында) "мәрәкәләү", "шаяртыу" мәғәнәһендә "кәләмәсләү" тип әйтеүсәндәр.

Ғ.Амантайҙың билдәләүенсә, һүҙ барған жанр йәнле телдә "көләмәс" тип тә йөрөтөлөр булған. Ә уның замандаштарынан Ғ. Вильданов был атаманы әлеге көндә беҙ "көлдөрөк" (“небылица”) тип белгән жанрға ҡарата ҡулланған (12, 20–24 ). Шуныһы хаҡ: Көнбайышта – “анекдот”, Яҡын Көнсығышта һәм урта Азияла “латифа” тигән атама менән мәғлүм был уймаҡ жанр XX быуаттың 30-сы йылдарынан алып башҡорт фольклор ғилемендә “көләмәс” тип атала башлай.

## 1. Көләмәстәрҙе өйрәнеү тарихынан

Йәнле ауыҙ-тел ижады репертуарында иң популяр ҡарһүҙ жанры булыуына ҡарамаҫтан, көләмәстәрҙе йыйыу, өйрәнеү, баҫтырып сығарыу тәнгәлендә эш әлегәсә бик әҙ башҡарылған. XX быуат баштарында Ырымбурҙа сыҡҡан "Шура" журналында татар мәҙәктәре менән бер рәттән башҡорт көләмәстәре лә баҫтырылған. Заман рухын сағылдырған көләмәс өлгөләрен йыйынтыктарға тәү башлап Шәйехзада Бабич, унан Булат Ишемғол индергән (25; 2). Артабан был эште Ғәлимов Сәләм, Әхнәф Харис менән Кирәй Мәргәндәр дауам итте(9, 197 – 199; 7, 249–274; 20, 56-69; 21, 143–150). 1930 йылдан башлап көләмәстәр, һирәкләп булһа ла,“Сәнәк” – “Һәнәк”, “Үктәбер” – “Әҙәби Башҡортостан” – “Ағиҙел”, “Пионер” – “Аманат” журналдарында, “Ҡыҙыл Башҡортостан” – “Совет Башҡортостаны” – “Башҡортостан”, “Йәшлек”, “Башҡортостан пионеры” – “Йәншишмә” тигән республика, шулай уҡ район гәзиттәрендә, айырыуса уларҙың үҫмерҙәр менән бала-сағаға тәғәйендәрендә баҫыла килә. Тик шуныһы, көләмәстәр ваҡытлы матбуғатта берҙән, паспортһыҙ (ҡасан, кемдән, кем тарафынан яҙып алыныуы әйтелмәйенсә), икенсенән, ныҡ ҡына әҙәбиәтләштерелеп баҫтырыла. Шул арҡала уларҙың ҡайһыһы фольклор, ҡайһыһы индивидуаль ижад емеше булыуын айырыуы ла ҡыйын. Өсөнсөнән, уларҙың күптәре башҡорттоң менталитетын, милли юмор тойғоһон иҫәпкә алмайынса, сит телдән алынған насар тәржемәләрҙән ғибәрәт.

Ә инде фольклор йыйынтыҡтарында әкиәттәр менән аралаш баҫылған көләмәстәрҙең дөйөм һаны ике йөҙҙән дә артмай ине.

Ғөмүмән, илебеҙҙең фольклор ғилемендә һуңғы осорғаса көләмәскә (анекдотҡа) үҙ аллы жанр итеп ҡараманылар. Шул сәбәптән улар, ғәҙәттә, юмористик (сатирик) әкиәт йыйынтыҡтарына индерелеүсән (21, 25). Көләмәс жанрына бындай мөнәсәбәттән, бары ун һигеҙ томлыҡ (китаптан торған) "Башҡорт халыҡ ижады" тупламаһының 1275 көләмәстән торған китабын әҙерләгәндә генә, арыныуға юл алынды. Ул китап 1985 йылда донъя күргәйне. Ә 1991 йылда шуларҙың 1003-ө рус телендә сыҡты (8; 6, 136–420 ).

Үҙ аллы жанр булараҡ көләмәстәр XX быуаттың 20–30-сы йылдарында уҡ тикшеренеүселәрҙең (Ғ.Вилданов, Ғ.Амантай) иғтибарын йәлеп итһә лә, эш уларҙың атамаһын асыҡларға, сиктәрен билдәләргә тырышыуҙан ары уҙмай. Көләмәстәргә ғилми билдәләмә тәүләп Ким Әхмәтйәнов тарафынан бирелде (43, 83–84). Ә уларҙы өйрәнеү эше, асылда, Кирәй Мәргәндең ғилми эшмәкәрлеге менән бәйле. Ул көләмәстәрҙең “ҡыҫҡа күләмле”, “мотлаҡ көлкөлө”, “ғәҙәттә көтөлмәгәнсә тамамлана торған сюжетлы” әҫәрҙәр икәнен хәтергә төшөрөп, уларҙы тематик яҡтан, дөрөҫөрәге, хеҙмәтләндергән мөхите һәм тәғәйенләнеше йәһәтенән, (1) ижтимағи-социаль йүнәлештәге, (2) тормош-көнкүреш, (3) ғибрәтле тигән өс төркөмгә бүленеүен билдәләне. Шуның менән был жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙең популяр герой (мәҫәлән, Алдар Күҫә, Ерәнсә сәсән, Шомбай, Хужа Насретдин) тирәһенә ойошоп, тотош циклдар хасил итеүен дә әйтеп үтә. Көләмәстәрҙең художестволы үҙенсәлектәре хаҡында һҙ алып барғанда, уларҙың тормош-көнкүреш әкиәттәренә, мәҡәлдәргә, йомаҡтарға яҡын тороуына, сағылдырылған көлкөлө ситуацияларҙың бары бер детале, бер ваҡиғаһы менән хушһыныуына иғтибар иткән (22, 165–188; 23, 82–87). Шул рәүешле ул башҡорт көләмәстәрен ғилми яҡтан өйрәнеүгә нигеҙ һалды. Көләмәстәр томына ингән текстарҙың һан һәм төрлөлөк яғынан күплеге инеш рәүешендә яҙылған мәҡәләһендә был юлдарҙың авторына көләмәстәрҙең жанр күренештәре (жанровые разновидности), тематик төркөм-төркөмсәләре, тормош-көнкүреш әкиәттәре менән мөнәсәбәте, поэтикаһы хаҡында сағыштырмаса аныҡыраҡ фекер йөрөтөргә форсат бирҙе (37, 15–16; 38, 57–58; 8, 6–22; 6,14–39). Халыҡ-ара күрһәткестәр буйынса һуңғыларын асыҡлауҙа Л.Г.Барагтың хеҙмәте ҙур булды(6, 14–19, 449). Көләмәс жанрына һуңғы ваҡытта Ғ.Б. Хөсәйенов та иғтибар итте һәм уға билдәләмә бирҙе. Йөкмәткеһе йәһәтенән уның биләдәләмәһе К.Ә Әхмәтйәновтыҡынан айырылмай (42а, 81–82).

Көләмәстәрҙе йыйыу, баҫтырыу, өйрәнеү тарихы әлегә ошоларҙан ғына ғибәрәт.

## 2. Көләмәстәрҙең килеп сығышы

Көләмәстәрҙең килеп сығышы мәсьәләһенә беренсе булып Кирәй Мәргән иғтибар иткәйне. Уның ҡарашынса, жанр булараҡ улар

новеллистик һәм сатирик тормош-көнкүреш әкиәттәренән айырылып сыҡкан (22, 172–176). Был фекер, асылда, XIX быуат урталарында, рус фольклорсыһы Ф. Буслаев тарафынан әйтелгән концепцияға нигеҙләнә. Уның буйынса, халыҡ ижадында бер жанр икенсеһенән ярала һәм уға алмашҡа килә була (1, 62–63). Уның концепцияһының йоғонтоһо рус фольклористикаһында тәүгеләрҙән булып анекдот хаҡында яҙған А. Пельтцерҙың ҡарашында ла ныҡ һиҙелә. Айырма шунда ғына: әгәр Ф. Буслаев эпостан (былинанан) – әкиәт, әкиәттән көлкөлө новелла (анекдот) хасил була тиһә, А. Пельтцер, тормош ваҡиғаһына нигеҙләнеү ихтималын кире ҡаҡмаҫтан, анекдот мәҡәлдән, мәҫәлдән барлыҡҡа килә, тигән (30, 68–70). Бәхәс юҡ, был юл менән дә көләмәстәр тыуа. Анығыраҡ әйткәндә, мәҫәлдән тыуған сүрәттә лә, мәҡәлдән тыуыуы икеле: көләмәстән мәҡәл килеп сығыуы иһә бик ихтимал. Ләкин үҙенсәлекле жанрҙың гениезисын шулай ғына аңлатыу – уның үҙаллы формалашыу мөмкинлеген инҡар итеү булыр ине.

Көләмәстәрҙең барлыҡҡа килеү дәүере мәсьәләһендә лә әле телгә алған концепция менән килешеү ауыр. Ф. Буслаевтың ҡарашынса, мифтан былиналар йәки тарихи йырҙар бүленеп сығыуы татар-монгол иҙеүе дәүеренә тап килә (1, 62–63). Бынан шул аңлашыла: әгәр ҙә мәгәр былиналарҙан әкиәт һәм мәҡәлдәр айырылып сыға икән, уларҙан анекдот-көләмәстәр яралыуы тағы ла һуңғыраҡ тарихи осорға ҡарай. Бындай “эволюционизм” тәҡғлимәте менән, әлбиттә, килешеп булмай. Күренекле этнограф А.М. Золотарев, тормош-көнкүреш хикәйәләренең" ("житейско-бытовой рассказ"), йәғни юмористик әкиәттәр менән көләмәс башланғыстарының “ҡатмарлыраҡ, синкретик йөкмәткеле" (тылсымлы) әкиәттәр менән бер дәүерҙәрәк, анығыраҡ итеп әйткәндә, синфи йәмғиәткә тиклем үк тыуыуын таный. Иң боронғо “тормош-көнкүреш хикәйәләре" тәүтормош кешеләре көтөүенә алмашҡа килгән дуалистик йәмғиәтте сағылдырыусы игеҙәк ике ағай тураһындағы мифтарҙы мыҫҡыллау (пародиялау) маҡсатында сығарылған (19, 297 ) Е.М. Мелетинский ҙа шундайыраҡ фекерҙә тора. Унынса, тәүтормош дәүеренең синкретик ижадында "мифтар, мифологик быличка-әкиәт" ялалғылары менән бер рәттән көнкүреш әкиәт-көләмәстәре лә булған. Улар өлөшләтә культур геройҙар тураһындағы мифтарҙан үҫеп сыҡкан, өлөшләтә иң боронғо әкиәт ялалғыларының (прасказки) айырым элементтарын үҙләштергән, өлөшләтә хәйләкәр трюктар яһаусы мут культур герой тураһындағы дуалистик мифтар өлгөһөндә үҙаллы барлыҡҡа килгән (27, 23–57 ).

Һәр халыҡтың боронғо йола байрамдары комик күренештәрҙе лә үҙ эсенә алған. Көнбайыш халыктары үткәрә торған карнавалдарҙа, церемониялдарҙа, Иранда һәм Урта Азияла, аҙаҡ беҙҙең яҡтарҙа ла ислам дине ингәнгә тиклем үткәрелер булған науруз байрамдары мәлендә (20-22 мартта, көн менән төн тигеҙләшкәндә) маскалар

кейелгән, уйын-көлкө, мәрәкәләр ойшторолған. Һәр йыл ут көнөндә (30 ноябрҙа) Иранда "Күҫә (һирәк-һаҡал. –Ә.С.) байрамы" уҙғарылған. Бындай мәлдәрҙә пародияға, иронияға ҡоролған тамашалар күрһәтелгән. Рустарҙағы скоморохтар, төрөктәрҙәге "ҡарагөздар" (күләгә театрҙары) ла шундай уҡ функция атҡарған (16, 10–31).

Мәрәкәләшеү менән аралашҡан уйындар, пародияға, иронияға ҡоролған йолалар борон башҡорттарҙа ла булған, уйындарҙа комиклыҡҡа ныҡ иғтибар ителеүе, ундай йолаларҙы атҡарғанда, уйындарҙы башҡарғанда, һәр кемдең мәрәкәне, иронияны, пародияны күтәрергә тейешлеге, шартҡа күнмәүсегә "хөкөм сығарыу", "яза биреү" тәртибе лә шул турала һөйләй, һабан туйҙарында, һырғатуйҙа, никах туйҙарында ҡара-ҡаршы төртмә йырҙар йырлашыу, таҡмаҡ әйтешеү; ҡоҙа-ҡоҙасаларҙы, еҙнәй менән еңгәләрҙе мәрәкәләүҙәр; туй йолаһының башында уҡ, йәғни яусынан, димсенән башлап, егет яғынан килгән төп ҡоҙаларҙы хурлап, сәнскеле таҡмаҡтар әйтеү, никах туйы ваҡытында бүләккә һаран ҡоҙаларҙы баштарына күҙле ҡарын, таҙғарын кейҙереү менән ҡурҡытыу; сеңләү ваҡытында яусыны, димсене ҡоҙағыйҙы, кейәүҙе карикатур планда тасуирлаусы һүҙҙәр әйтеү; киске уйындарҙа, мәжлестәрҙә төртмә таҡмаҡтар әйтешеү; кемдең кем булыуына ҡарамай, кешенең ҡылығына, кәүҙәһенә, төҫ-башына, урынһыҙ һәм уңайһыҙ әйтелгән һүҙенә күа), Науруз, Нардуған, Сөмбәлә байрамдарындағы, уйын-көлкөгә, пародиялауға ҡоролған Ишәле-Ләмәзтамаҡ йыйыны кеүек байрамдарҙағы мәрәкәләр шуға миҫал була алыр ине.

Һуңғы ваҡыттарғаса тәүтормош кимәлендә йәшәгән халыҡтарҙың этнографияһы һәм фольклорын күҙәтеү нигеҙендә яһалған һығымталар (А.М. Золотарев, Е.М. Мелетинский, Д.С. Лихачев, М. Колин Тренбул), халыҡтың "көлкө донъяһынан" килтергән миҫалдар башҡорт көләмәстәренең дә килеп сығышын күҙалларға мөмкинлек бирә. Дуалистик характерҙағы мифологик аң менән туранан-тура бәйле тулы ҡанлы башҡорт көләмәстәрен хәҙер табыуы ситен. Шулай ҙа Атабыҙ Ғәҙәм (Әҙәм) менән Инәбеҙ Һауаның һыу сәпсектәренең нисек мөхәббәт уйыны ҡороуҙарына ҡарап, түлләнеүгә форсат табыҙарында; “Урал батыр” эпосындағы Шүлгәндең бер туған ҡустыһы Урал ҡылған изге эштәрҙең киреһен атҡарыуында (юха ҡотҡоһона бирелеп, тыйылған ҡанды эсеүе арҡаһында, теге яуыз зат маңлайына сирткән һайын, төрлө януар ҡиәфәтен ала барыуында), ул булдыра алған эште булдыра алмауында (етмеш батман ауырлығындағы ташты Урал батыр ер аяғы-ер башында ятҡан Әзрәҡә иленә еңел генә ырғыта алһа, уны, күтәреү түгел, ҡумшыта ла алмайынса, Шүлгәндең Һомай атлы ҡыҙ алдында хур булыуында), сала-сарпы булһа ла, көләмәскә хас комик башланғыстар сағыла биреп ҡалыуын танымау яҙыҡ булыр ине. Хатта ки бөгөнгө ауыҙ-тел ижады репертуарындағы көләмәстәребеҙҙе шул дуалистик ҡараш

күҙлегенән иғтибарлаңҡырап күҙҙән кисергәндә, уның ҡалдыҡтары әле лә һаҡланып ҡалыуы күҙәтелеүенә төшөнөргә була.

Көләмәстәрҙә, уларҙа хатта бер генә персонаж сығыш яһағанда ла, мотлаҡ ике яҡ сәкәләшә (бәрелешә, төкөшә, алыша): зирәклек йә хәйләкәрлек менән бешмәгәнлек, бер ҡатлылыҡ ҡапма-ҡаршы ҡуйыла; шул сифаттарға эйә булыусыларҙың берәйеһе текста туранан-тура телгә алынмаған сүрәттә иһә, ул барыбер күҙ уңында тотола.

“Урал батыр” эпосының сәсмәүер версияһы буйынса, тыйылған ҡанды эсергә Шүлгәнде юха ҡоторта. Теҙмәүер формаһындағы версияһында юха күһәтелмәй. Сөнки эпосты ижад итеүселәр, Шүлгәнде тоғро юлдан яҙҙырып, атай тыйыуы менән иҫәпләшмәүгә ҡоторотоусыны был юлайы тыңлаусыларының күҙаллай алыуына иҫәп тотҡандар, “сәйнәп ҡаптырыу”ҙы кәрәк тип тапмағандар. Ни өсөн тигәндә, яҡшы ата балаһы әгәр ҙә мәгәр яҙыҡ эш ҡылһа, башҡорт әле лә: “Шайтан ғына ҡотортҡан инде. Шулай булмаһа, шундай яҡшы атанан тыуып, шундай яҙыҡ эш ҡыламы кеше?! ” – тип әйтә. Элек тә щулай иткән. Шайтан тураһында төшөнсә, уның образы исламға эйәреп килеп ингән. Уға тиклем, “Урал батыр”ҙың сәсәмәүер версияһындағы кеүек, милли мифологиябыҙҙа, инаныс һәм инанмыштарыбыҙҙа аҙҙырыусы зат вазифаһын юха атҡарған, әлбиттә. (Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: юха образының бирелеше йә, туранан-тура бирелмәһә лә, күҙалланышы (тыңлаусыларҙың күҙаллауына иҫәп тотолоуы) – эпостың боронғолоғона, һәр хәлдә, бабаларыбыҙ исламды ҡабул иткәнгә тиклем үк ижад ителеүенә бер дәлил ул).

Быны ла дуалистик миф традицияһының һаҡланыуына миҫал тип иҫәпләргә була. Көләмәс персонаждарының репликаһы менән хәрәкәтенең, ғәҙәттә, икәүҙән үтмәүен дә нигеҙҙә шулай аңлатырға була торғандыр.

Заманалар алышына килә, мифологик аң һүрелә бара, фольклорҙың башҡа жанрҙары кеүек үк, боронғо көләмәстәр ҙә яңы осор талаптарына яраҡлаша барғандар, яңы мәғәнә алғандар, персонаждарының составы ла, социаль йөҙө лә үҙгәрә килгән. Яңы осорҙоң эстетик зауығына яуап бирә алмаҫтайҙары йәнле репертуарҙан төшөп ҡалған, онотолған. Көләмәстәр, көндәлек тормошта булып торған комик ситуациялар, көлкөлө фразаларға, мәрәкә өсөн әйтелгән уйҙырмаларға нигеҙләнеп тә, барлыҡҡа килә башлаған.

Көләмәс жанрын борон-борондан новеллистик, сартирик һәм юмористик әкиәттәр, көлдөрөктәр ҙә “туйындырып” торған: уларҙың автономия хоҡуғына эйә булған айырым тематик мотвтары үҙаллылыҡ алған сүрәттә, улар көләмәс репертуарын тулыландыра (Айырым көләмәстәр бер тема, бер герой тирәһенә ойошоп, киреһенсә, йә новеллистик йә сатирик, юмористик әкиәт, көлдөрөк сюжетын төҙөү өсөн материал хеҙмәтен үтәүе лә ихтимал).

Лаҡап, мәҡәл һәм ярым мәҡәлдәрҙең (Кирәй Мәргәнсә, тапҡыр һүҙҙәрҙең) аңлатмаларынан да (Пельтцер, әйтмешләй, мәҡәл һәм ярым мәҡәлдәрҙең "фекер тослоғон" юғалтыуҙары, йәғни мәғәнәүи яҡтан шыйыға төшөүе һөҙөмтәһендә лә) көләмәстәр хасил була.

Йор һүҙле кешеләр йыш ҡына үҙҙәренә таныш элекке көләмәстәрҙе яңы шарттарға яраҡлаштырусан. Электән дә популяр көләмәс геройын яңы заманға күсереү һөҙөмтәһендә лә, яңы көләмәстәр уйлап сығарыусан. Хужа Насретдиндың шәкерт сағындағы мәрәкәләре тураһындағы көләмәстәрҙе хәҙерге мәктәп тормошона ҡулайлаштырыу, уның колхозға инеүе, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуы тураһындағы көләмәстәр, мәҫәлән, шундайҙарҙан.

Көләмәстәр, шулай итеп, әле лә актив ижад ителеүсе популяр жанрҙар рәтенә инә.

3. Көләмәстәрҙең миллилеге һәм социаль йөкмәткелеге

***а) Көләмәстәребеҙҙә башҡа халыҡтарҙың ошондай уҡ жанры менән типологик оҡшашлыҡтар күҙәтелгәне***

Башҡорт халыҡ көләмәстәренең йөкмәткеһендә, формаһында юмор үҙенсәлегендә башҡа халыҡтарҙың ошондай уҡ жанры менән байтаҡ уртаҡлыҡтары һәм оҡшашлыҡтары бар. Ул уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтарҙың күптәре үҙенең үҫеш юлында кешелек йәмғиәтенең бер төрлөрәк стадиялар үтеүе, бер төрлөрәк ихтыяж кисереүе һәм оҡшаш ситуацияларға юлыҡҡан сүрәттә, уларҙы хәл итеү өсөн, бер төрлөрәк ысулдар файҙаланыуы һ.б. менән аңлатыла. "Бай менән алйот" көләмәсе (8, №16) халыҡ-ара әкиәт, көләмәс күрһәткестәрендә “Ишекте нығ һаҡла" тип теркәлгән тематик мотивҡа (микросюжетҡа) ҡоролған. Иҫәр ишекте бүгәненән һурып ала ла үҙе менән алып йөрөй: ныҡ һаҡлай, йәнәһе. Был микросюжет рустар, белорустар араһында ла (СУС 1009), башҡа халыҡтарҙа ла (АТ 1009) киң таралған. "Мулла менән ялсы" көләмәсенең (8,№19) аҙашы – "Үтә тырыш хеҙмәтсе" микросюжеты (хеҙмәтсе иртәнге ашты, төшкөнө, кискене бер юлы ашай ҙа йоҡларға ята: киске аштан һуң йоҡлайҙар бит, йәнәһе) – рус украин, белорус йыйынтыҡтарында күп тапҡырҙар баҫылған анекдот, жарттар иҫәбенә инә (СУС 1561). Донъя фольклорында ул да бик популяр (АТ 1561). Рус теленә тәржемә ителгән 1003 башҡорт көләмәсенең 42-һе типологик оҡшаш сюжеттарға нигеҙләнгән (6, 449).

***б) Уртаҡ сюжеттар***

Фольклорҙың башҡа күп кенә жанрҙары менән сағыштырғанда, көләмәс бик өлгөр һәм бик йылғыр жанр. Ул милли, социаль сиктәрҙе лә, дәүләт һәм ижтимағи ҡоролош сиктәрен дә еңел генә аша сыға ала. Бер милли ерлектә тыуған көләмәс икенсе халыҡтың эстетик талаптарына ла хуш килһә, уның варианттары шунда ерегеп китә. Хужа Насретдин тураһындағы көләмәстәрҙе кемдәр генә белмәй

икән. Тикшеренеүселәрҙең раҫлауынса, ул 1206 йылда Төркилә, Анкаранан көнбайыштараҡ ятҡа Биврихсаралағы Хорто ауылындағы Абдулла тигән имам ғаиләһендә донъяға килә була, 1392 йылда үлә (был датаны шик аҫтына алыусылар ҙа бар). Уның ҡәбере кесе Азиялағы Аҡшәһәрҙә икән. Баҡсаланмаһа ла, уға ҡапҡа ҡуйылған, ҡапҡаһына йоҙаҡ эленгән, ти[2]. Уның көлкөлө образы Марокконан Ҡытайғаса, Себерҙән Ғәрәп ярым утрауына тиклемге арауыҡта йәшәгән төрлө-төрлө халыҡтар ижадында (36,16), шул иҫәптән төрки халыҡтарының (үзбәк, төрөкмән, төрөк, әзербайжан, ҡаҙаҡ, башҡорт, татар, нуғай, ҡарағалпаҡтарҙың һ.б.) көләмәс, мәҙәк, латифаларында популяр.

Хәҙерге заманда төрлө халыҡтарҙың аралашыуы көсәйгән саҡта, рус теле суверенлы дәүләттәрҙә, республикаларҙа һәм уларҙың берләшмәһендә уртаҡ аралашыу теленә әүерелгәндә, көләмәстәр әлкәһендә милләт-ара алыш-биреш тағы ла интенсивыраҡ була бара. Башҡорт фольклорынла шул ерлектә ерегеп ҡалған көләмәстәр (сюжет ҡына түгел) иҫәбенә Бөйөк Ватан һуғышы, һалдаттар, талиптар, төрлө белгестәр тураһындағылар миҫал (8, №№286–341).

***в) Милли юморҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәре***

Фольклор әҫәрҙәренең тыуыу, йәшәү законсылыҡтары менән аңлатылған уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтар көләмәстәрҙең милли йөҙө юҡ тигәнде аңлатмай әле. Әммә был хәҡиҡәтте танымау осраҡтары ла бар. Уҙған быуат ахырында рус анекдоттары хаҡында махсус хеҙмәт яҙыусы А. Пелтцер менән А. Сумцов был жанрҙың миллилеген инҡар иткән (30; 40). Уларҙың ҡарашын беҙҙең осорҙа У.Б. Далгат тәнҡитләп сыҡҡайны. Әммә үҙе көләмәстәрҙең миллелеген таныһа ла, ул И. Снегиревтың XIX быуат урталарында уҡ әйткән фекеренән ары китә алманы. Ә Снегиревтың "Рус мәрәкәһе хикмәтле, эскерһеҙ һәм күңелле, ләкин зәһәрле түгел* асыуһыҙ; ҡайһы саҡта ул йәш аралаш үҙ эсенән дә, үҙенең хәсрәтенән дә көлә" тигән һүҙҙәрен (15,183–184) башҡа халыҡтарҙың көләмәстәренә ҡарата ла ҡулланып була. Шуға күрә ул билдәләрҙе көлкөлөлөктөң һәм, ғөмүмән, комиклыҡтың милли үҙенсәлеге тип булмай.

"Милли юмор уның предметынан уҡ башлана, ти Ю. Борев (11,65). Дөрөҫөндә лә шулай. Мәҫәлән, "Сәфәр айы кеүек" (8, №874) тигән

[2] Һуңғы мәғлүмәт, комик эффект тыуҙырыу маҡсаты менән аңлатылған уйҙырманан ғибәрәт. Уның шулай икәненә был юлдар авторының үҙенә инанырға тура килде. 2008 йылда БДУ доценты Ғәйнислам Ибраһимов менән бергә уға, Хужа Насретдиндың тыуыуына 800 йыл тулыуға бағышлап, Аҡшәһәрҙә уҙғарылған халыҡ-ара ғилми симпозиумда ҡатнашыу насип булғайны. Ҡаланың уртаһында ҙур зыярат. Уның оло ҡапҡаһынан инеү менән, бик ҙур түңәрәк беседканы хәтерләтеп,әллә ҡайҙан уҡ күренеп ултырған төрбәгә юлығаһың. Хужа Насретдин ошонда ерләнгән. Төрбә тимер текмә менән уратылған. Ә ҡәбер үҙе, был яҡтарҙағы йола буйынса, ҡапҡасы өй ҡыйығына оҡшатып эшләнгән ҙур һандыҡты хәтерләтә. Уның өҫтө аяттар яҙылған келәм менән ябылған. Уға ел-ямғыр ҡағылырлыҡ түгел.

башҡорт көләмәсендәге һуңлап ҡына кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың ишек төбөндә ятҡан этте тибеп: "Һин дә, Сәфәр айы кеүек, һуҙылдың да яттың!" – тип әйтеүенең мәғәнәһен аңлау (тимәк, көләмәстең комик эффект тойоу) өсөн, башҡорттарҙың боронғо йолалары, атап әйткәндә, туй йолалары һәм инаныстары хаҡында хәбәрҙар булыу шарт. Ул йола буйынса, никахланған ҡыҙҙы кейәү йортона, Сәфәр айы үткәс кенә, оҙатыр булғандар. Унда ла, әгәр кейәү кеше ҡалымын (мәһәрен) түләп бөткән булһа ғына. Түләп өлгөрмәһә, кәләше ата йортонда уҡ бала-сағалы булып китһә лә, уға йәйен ҡышын кейәүләп йөрөү менән генә, йәғни аҙнаның билдәле көндәрендә генә, унда ла кеше аяғы һил булғас ҡына, ҡарттар ятып бөткәс кенә уның янына килеп, йоҡлап китеү менән генә хушһынырға тура килгән. Кейәүләп йөрөгәндә, йәғни ҡалымын түләгәнгәсе, кейәүгә кеше күҙенә салыныу, ҡайны-ҡәйнәһе менән күрешеү ҡәтғи тыйылыуы топонимикала ла, йырҙарҙа ла сағылған. Мәҫәлән, тимер юл яғынан Салауат районы Тирмән ауылына барғанда, сауҡалыҡ үтәһең. Шундағы бер ташты бөгөн булһын Кейәүташ (Кейәү ташы) тиҙәр. Бөрйән районы Яңы Монасип ауылынан үрҙәге үҙәкте Кейәү үҙәге тип атағандар. Уларҙың икеһе лә иртәрәк килгән кейәүҙәрҙең, Ҡояш батып, ҡарттар ятып, әҙәм аяғы һил булғанын көтөп торор урыны булған. Ошо йоланы һәм уның менән иҫәпләшмәүсе кейәүҙәрҙе күҙ уңында тотоп, төртмә телдәр тарафынан заманында бына быҙдай йыр ҙа сығарылған:

Аҡ келәттең келәһен,
Элә белмәй, эләһең.
Шәфәҡ батмай, ҡарттар ятмай,
Килә белмәй, киләһең!

Көләмәстә ҡарый (ҡарт) ҡыҙҙың эткә әйтелгән бер репликаһынан һәм бары бер хәрәкәтенән "Сәфәр айы кеүек һуҙылдың да яттың!" – тип әйтеүенән һәм бер генә хәрәкәтенән кейәүенең ҡалымын түләп бөткән икәне лә, бары сәфәр сығыуҙан (бында иренең йортона күсеүҙән) тыйылып торорға ҡушылған айҙың үтеүен көтөргә генә ҡалыуы ла, аңлашыла. Ләкин репликаның мәғәнәһе быныҡ менән генә сикләнмәй. Унда кәләш булыуға һуңлап ҡына өлгәшкән ҡыҙҙың ошоғаса "ҡарт (ҡарый) ҡыҙ", йәғни "үтмәй ултырған ҡыҙ" тигән исем күтәреүҙе ауыр кисереүе лә, кейәүләп йөрөгән йәрен, бер күргәндән тағы күргәнгәсә, тәҡәтһеҙ һағынып, танһыҡлап өлгөрөүө лә, тиҙерәк, оҙатылып, уның менән гел бергә булырға теләүе лә, гел шуны ғына уйлап йөрөүе лә әйтелгән. Шулай итеп, ”Сәфәр айы кеүек” тигән әҫәрҙе көләмәс тип ҡабул итеүгә бары башҡорт йолаһын һәм ҡарт ҡыҙ хәлен аңлаған кеше генә өлгәшә ала. Ундайҙар өсөн был әҫәр – әҙ әйтеп тә, күпте аңлатыуға өлгәшә алыуы көләмәс, хатта көләмәстең дә көләмәсенә миҫал.

Тағы бер миҫал. "Шәриғәт хөкөмө" тигән көләмәстә (8, №27) иң мөһиме шул: бер һарыҡҡа талашыусы ике ир уны үҙ ҡулдары менән

муллаға тоттора, ул иһә, бер ҙә аптырап тормай, был мәхлүкте ялан ҡул менән түгел, сапан салғыйы менән эләктереп, китеп тә бара. Башҡорттоң боронғо йолаһы хаҡында хәбәрдар булмаған кеше: “Икәү була тороп та, мулланың был ҡылығына тегеләр ниңә ҡаршылыҡ күрһәтмәйҙәр икән? Етмәһә, елкәләрен тырнап тороп ҡалалар?” – тип уйларға мөмкин. Ә йоланы белгәне, быға тамсы ла аптырамаясаҡ. Йола буйынса, йә инселәп, йә бүләк йә һатып бирелгән тояҡлы малды алыусы уны яланғас ҡул менән тоторға тейеш түгел. Яланғас ҡул менән тотоу – "яланғаслыҡҡа", ырыҫтың китеүенә, үрсемдең бөтәүенә килтерә, тип белгән боронғолар. Көләмәстә, ирекһеҙҙән, шул йола теүәл үтәлә. Бына ни өсөн тегеләр тик тороп ҡалған икән. Бында шәриғәттең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Ике бәхәссене төп башына ултырткан персонаждың мулла тип исемләнеүе лә шартлы. Был билдәләр атеизмды алға һөргән дәүергә яраҡлаштырып, кемдер тарафынан яһалма рәүештә социалогизацияларға тырышыуынан килә.

Шулай итеп, “Сәфәр айы кеүек", "Шәриғәт хөкөмө"ише көләмәстәрҙәге юморҙың әрәсәһенә шул көләмәстәрҙе тыуҙырған халыҡтың йолалары хаҡында мәғлүмәт булмай тороп, төшөнөүе ситен. Бар хикмәт ана шул йолала икәнен иҫәпкә алмау сәбәпле, икенсе көләмәстә замана көләмәссеһе мулланан “шәриғәт хөкөмө һеҙгә хөкөм түгелме ни?!" тигән реплика әйттергән. Асылда, бында шәриғәт хөкөмө түгел, ә йола хөкөмө хаҡында һүҙ бара. Шуны иҫәпкә алмау мулланы яманларға тырышыуға, көләмәсте социалогизациялауға килтергән дә инде. Ысынлап та, туған әҙәбиәт буйынса мәктәп дәреслек-хрестоматияларында һүҙ ошо көләмәскә ҡағылғанда, унда мулланың ҡомһоҙлоғона баҫым яһалды. Дөрөҫөндә, мулла тип аталған персонаж, йола хөкөмөн үҙ маҡсатында файҙаланылып, ике оңҡотто төп башына ултыртыусы ҡәҙимге бер хәйләкәр тибын кәүҙәләндерә генә. Һарыҡҡа талашыусылар аңдарына килә лә ул, тик үтә һуң була. Һарыҡтың муйынын сапан салғыйы менән уратып тотҡан мулла: "Хәҙер һеҙгә һарыҡ та юҡ, ыҙғыш та юҡ – башығыҙ тыныс ҡалды", – тип китеп барғас, ни өсөн талаш күтәреүсе теге икәү, бер-береһенә ҡарашып: "Шәриғәт хөкөмө" (беҙҙеңсә, йола хөкөмө. – Ә.С.) шулай була икән дә ул!" – тиешеп аптыраšта ҡала? Ни өсөн улар һарыҡты мулланан тартып алмай? Бары, һуңлап булһа ла, аңдарына килеүҙәре арҡаһында, асыҡ ауыҙ булыуҙарына төшөнөүҙәре "мал тоттороу" йолаһын атҡарыу тәртибен иҫтәренә төшөрөү арҡаһында, әлбиттә. Милли йоланың үҙенсәлектәрен белмәгән кеше өсөн "Сәфәр айы кеүек" "Шәриғә хөкөмө" ише көләмәстәр – юмор менән бер ниндәй уртаҡлығы булмаған уймаҡ хикәйә генә ни бары.

Көләмәстәргә хас милли комик пафосҡа уның тел үҙенсәлектәре лә сәбәпсе була. Ундай көләмәстәрҙе икенсе системалағы телгә тәржемә итә башлаһаң, уларҙың көләмәслелегенән бер ни ҙә ҡалмай. "Ат!" көләмәсендә, мәҫәлән, "ат" һүҙе ике мәғәнәлә, "йылҡы малы" һәм "атыу" һүҙенең бойороҡ һөйкәлеше мәғәнәһендә ҡулланылған. Шуны

иҫәпкә алмаған хәсрәт һунарсы иптәшенең: "Болан түгел, үҙебеҙҙең атыбыҙ" – тигән мәғәнәлә: "Ат! Ат!" – тип ҡысҡырыуын атырға ҡушыуҙы аңлатҡан бойороҡ һөйкәлеше, тип белеп, ҡар яуып тороу арҡаһында, асыҡ күренмәгән алдағы ҡарасҡы болан икән, тип уйлап, үҙҙәрнең атын атып үлтерә. Рус теленә тәржемә итһәң, был көләмәс тә комик пафостан мәхрүм, мәғәнәһе самалы уймаҡ хикәйәгә генә әүерелер ине. "Культуралы һөйләшмәксе", "Бергә тормайҙар", "Әкиәт башы", "Уфаға барып, Өфөнән ҡайтыу", "Балтаһы һыуға төшкән" (8, №524, 689, 706, 1184, 1188) көләмәстәре лә шундайҙар иҫәбенә инә.

Бер үк социаль төркөм кешеһе тураһында сығарылған көләмәстәр төрлө милли мөхиттә сатира йә юмор пафосының кимәле буйынса ла айырылырға мөмкин. Дингә бәйле көләмәстәрҙе генә алайыҡ. Динселәрҙән көлөүсе башҡорт көләмәстәрендә, мәҫәлән, фарсыларҙың шул уҡ темаға ҡараған латифалары менән сағыштырғанда, сатираның көслөрәк бирелеүе күренә. Сөнки исламды X быуатта уҡ ҡабул итһәләр ҙә, башҡорттар XIII быуатта Әбү Хәмид Әл-Ғарнати, XIX быуатта С. Рыбаков, XX быуатта халык шағиры Мостай Кәрим һ.б. бидәләүенсә, дингә фанатиктарса ышанмағандар. Ә фарсыларҙа дин әле лә көслө. Шуға ла, дин әһелдәре латифаларҙа "зәһәр пародияланһалар" ҙа, пародистар үҙҙәре элек-электән күпселектә “дини культты ихтирам итеүсе һәм уға, мөкиббән китеп, инаныусы кешеләр булған" (16, 11)

Көләмәстәрҙең миллилеге һүҙ оҫталарының традицион репертуарында, жанр төрҙәрендә, персонаждар составында, тарихи билдәләрҙә, һүрәтләү сараларында, күрше жанрҙар менән бәйләнеш үҙенсәлектәрендә лә сағыла. Тимәк, көләмәстәрҙең миллилеге халыҡтың тарихи үткәненән, этнографияһынан, теленән, характерынан, эстетик тәжрибәһенән. этнопсихологияһынан, ҡыҫҡаһы, менталитетынан айырылғыһыҙ.

А. Пельтцер анекдоттарҙың синфилығын танымаған, хатта уны инҡар иткән. Ул, анекдоттарҙа ғибрәтлелек юҡ, ә сатира уларҙың күбеһенә хас тип иҫәпләгән. Уныңса, анекдот бары "мәрәкә өсөн мәрәкә" булып ҡына ҡала (30, 65–68 ). Бындай ҡараш менән дә килешеп булмай. Көләмәстәр дөйөм кешелеккә хас кәмселектәрҙән генә көлдөрөү, шулар хаҡында уйландырыу менән генә сикләнмәй, айырым социаль төркөмдәрҙең, синыфтарҙың позицияһынан тороп, икенсе социаль төркөмдәрҙең, синыфтарҙың үҙҙәренә оҡшамаған яҡтарын, кәмселектәрен комик планда фашлай.

### 4. Көләмәстәрҙең жанр сиктәре

#### *а) Көләмәс һәм әкиәт*

Көләмәстәрҙең килеп сығышы һәм үҫеш эволюцияһы тотош фольклорҙың жанрҙары тарихынан айырылғыһыҙ. Көләмәстәр айырыуса көнкүреш әкиәттәре менән яҡын мөнәсәбттә тора. Был яҡынлыҡ уларҙың

тәүтормош дәүеренең синкретик ижадынан бер мәлдәрәк айырылыуында, бер үк темаларҙы үҙләштереүендә лә, комик эффект тыуҙырыусы бер үк поэтик алымдарҙы файҙаланыуҙарында ла күренеүе хаҡында, "Тормош-көнкүреш әкиәттәре" бүлегендә әйтелгәйне инде. Унда көләмәстәрҙең тормош-көнкүреш әкиәттәре сюжетын хасил итеүсе “төҙөлөш” материалы – тематик мотив хеҙмәтен башҡара алыуы ла, шул мотивтарҙың, тормош-көнкүреш әкиәттәре сюжетынан айырылып, көләмәс жанрына күсергә мөмкинлеге лә билдәләнгәйне. Көләмәстәр йыйынтығындағы "Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ тәкәне бәрәсләткәне"(8, №74) көләмәсенең сюжеты – "Ерәнсә сәсән менән хан”, “Ерәнсә сәсән хикмәттәре" тигән новеллистик әкиәттәрҙең; “Әрмет егеттәренең аталарын танығаны" (8, №602) "Һарттарҙың күгәүенгә яу асҡаны" (8, №592) көләмәстәренеке "Бер туған өс иҫәр" тигән сатирик әкиәт сюжеттары составында бар.

***б) Көләмәс һәм көлдөрөк***

Көләмәстәр менән көлдөрөктәр араһында ла яҡынлыҡ күҙәтелә. Икеһенә лә көлдөреүсәнлек хас. Көлдөрөктәрҙең дә күләм йәһәтенән көләмәстәр кеүек йыйнаҡ булғандары осрай. Ләкин көләмәстәрҙән айырмалы рәүештә, көлдөрөктәр һәр саҡ тулы сюжетлы була. Бер нисә көлдөрөк, бергә ойошоп, күләмлерәк көлдөрөк хасил итеүҙәре лә мөмкин. "Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны" көлдөрөгө шулай хасил булған, Уның составына. "Ҡуян аулаусылар", "Тыумаған ҡуян балаһын тотоусылар", "Һунарсы Төхвәтулла", "Һунарсы хикмәттәре" ише үҙаллы көлдөрөктәргә хас сюжеттар ингән.

Көләмәстәр менән көлдөрөктәр араһындағы айырма бигерәк тә ысынбарлыҡты сағылдырыу принциптарында асыҡ күренә. Көлдөрөктәр тормошто, тиҫкәреһен тышҡа өйләндергән кеүек, булмағанды – бар, тип, бойомға ашмаҫты – бойомға ашҡан, тип һөйләй (үҫмәгән ҡыуаҡ төбөнән сығып ҡасҡан ҡуянды тыумаған һунарсы аулай), шуның менән көлдөрә. Ә көләмәс геройы ҡәҙимге шарттарҙа күрһәтелә, һүҙҙәрҙе ирекһеҙҙән ("Ҡабалан Сәлих", "Бер һәнәк утын", 8, №№55, 526) йә юрамал бутап һөйләүсе ("Яхъя бабайҙың ҡышын йәшел сиҙәмдә май ашағаны", "Яхъя бабайҙың эләгеп йығылғаны" (8, №№237, 238) беҙҙе көлдөрә. Шул көлөү алабарманлыҡтан һаҡ булырға һабаҡ бирә, аҡты ҡара, ҡараны аҡ тип еңмешәлнеүҙең мәғәнәһеҙлеген иҫкәртә. .

***в) Көләмәстрҙең өлгөрлөгө, мәҡәл менән мөнәсәбәте***

Заманының үҙгәрештәренә бик һиҙгер һәм өлгөр жанр булған көләмәстәр репертуары әлеге көндә лә байығыу өҫтөндә. Көләмәстәрҙең күптәре айырым төпкөлдәге мөхиткә таянып, урындағы халыҡ араһында ғына билдәле була. Донъя фольклорында уларҙың варианттарын осратыу ситен. Әкиәт һәм көлдөрөктәр репертуары иһә тарайһа тарая, киңәйеү кисермәй.

Әкиәтте, көлдөрөктө махсус башҡаралар, ә көләмәс махсус һөйләнергә лә, ниндәйҙер фекерҙе раҫлау йә инҡар итеү өсөн, телмәр

контексында ла ҡулланырға мөмкин. Телмәрҙә ҡулланылыуы уларҙы мәҡәл, ярым мәҡәл (поговорка) һәм лаҡап һүҙҙәргә яҡынлаштыра. Шуға ла көләмәс менән мәҡәл телмәр контексында бер-береһен еңел генә алмаштыра ала. Алмаштырышыуҙың шундай үҙенсәлеге лә бар: көләмәс төп фекер һалынған бер фразаға тикләм ҡыҫкартылырға, .мәҡәл иһә, кинәйәһе асылырлыҡ итеп, киңәйтелергә мөмкин. Көләмәстәрҙе мәҡәл менән тамамлау, ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең тарихын (ә ул йыш ҡына көләмәс төҫөн ала) һөйләү ғәҙәте был ике жанрҙың шул үҙенсәлегенән килә лә инде ("Иҙәне ер булһа ла, егете ир булһын", "Һаҙамыҡ ерҙең ағасы", "Оноткан" (8, №№105, 432,646).

Мәҡәлдәр телмәр контексында йәки зирәклек, сәсәнлек бәйгеһендә генә ҡулланыла. Ә көләмәс, әйткәнебәҙсә, әкиәт һымаҡ, үҙаллы ла башҡарыла. Тик, әгәр әкиәтте, ҡояш батҡас ҡына һөйләр булһалар, көләмәс һөйләү ҡәтғи регламентлаштырылмаған: уны юлда ла, ялда ла, табында ла, көндөҙ ҙә, кисен дә; йәйлап әҙерләнеп тә, ҡапылғара ла һөйләргә ярай. Шуға ҡағышлы бер һамаҡ та бар:

Әле генә мейесемә
Ҡуйған инем бәрәмәс.
Шул бәрәмәс бешкәнгәсә,
Һөйләшәйек көләмәс.

Көләмәс жанрына билдәләмә биргәндә, тикшеренеүселәр, ғәҙәт-тә, уның киҫкен кульминацияға ҡоролған бер эпизодлы көлкөлө, фәһемле йыйнаҡ хикәйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыусандар: О. Амбай-ниц (5, 9), В.Г.Гусев (14, 127), Дж.Дорри (16, 32), Кирәй Мәргән (22, 165 ), Н.Османов (33, 5 ), А.П.Пельтцер, (30, 65) Ф.М.Хатипов (42, 20), К.Әхмәтйәнов (10, 22, 23-сө б.), А.Г.Яхин (44, 3.), Ғ.Б. Хөсәйенов (42а). Көләмәс (анекдот, мәҙәк, латифа) хаҡында һүҙ алып барыусылар шулай уҡ уның (йә ваҡиғаның) көтөлмәгәнсә тамаланыуын да билдәләүсән). Эйе, һаналған һыҙыттырҙың бөтәһе лә көләмәстәргә ысынлап та хас. Тик шуныһын айырып әйтергә кәрәк: көләмәс жанры көлкөлө күренештәр менән генә сикләнмәй. Ғөмүмән, "юморҙың бурысы көлдөрөү генә түгел" (17), "сатирик өсөн тамашасының көлөүе мотлаҡ түгел. Уның уйлыныуы мөһим" (34). Көлкөлө булмаған хәлдәрҙе сатира йә юмор күҙлегенән баһалау ҙа көләмәс тыуыуға сәбәпсе булыусан. Шуға күрә, көләмәскә билдәләмә биргәндә, көлкөлөлөктө үтә абсолютлаштырыу дөрөҫ үк булмаҫ ине.

Шул яғы ла бар: күптәрҙе көлдөргән көләмәс, ҡайһы бер кешеләрҙе көлдөрмәҫкә мөмкин. Киреһенсә булыуы ла ихтимал. Шуға ла Ю. Боревтың: “Көлөү – һәр саҡ шәхси реакция”, - тип әйтмеүе менән бик тә хаҡлы (11, 10). Бер социаль ҡатлам, бер этник берекмә (сообщество) өсөн көлкөлө тойолған күренеш башҡалар өсөн мәғәнәһеҙ тойолоуы ла ихтимал.

Күҙәтеүҙәрҙән сығып, көләмәс жанрына яҡынса шундай билдәләмә бирергә булыр ине: *бер комик ситуацияға йә тапҡыр яуап-репликаға, йә һүҙ уйнатыуға ҡоролған йәки бүтән фәһемле тормош фактын, кешеләрҙең характер үҙенсәлеген сатира йә юмор күҙлегенән баһалаған һәм сюжеты сиселер сиселмәҫтән (диалог осланмаҫтан), көтөлмәгәнсә тамамланған уймаҡ сатирик йә юмористик уймаҡ хикәйәне көләмәс тип атарға була..*

5. Көләмәстәрҙең тематик төркөмләнеше

Тематик яҡтан да, персонаждар яғынан да көләмәстәр ифрат күп төрлө. Шуға ла жанрҙы төркөмләгәндә, тикшеренеүселәр, нигеҙҙә, ошо ике билдәнең йә береһен генә йә икеһен дә иҫәпкә алырға тырыша. Кирәй Мәргән, мәҫәлән, ижтимағи әһәмиәтенә ҡарап, башҡорт көләмәстәрен шундай төркөмдәргә бүлә:

1. Ижтимағи-социаль йүнәлештәге көләмәстәр. Уларға социаль тигеҙлеккә, иҙеүгә, байҙарға, муллаларға ҡаршы йүнәлтелгән сюжеттар ҡарай;

2. Тормош-көнкүреш көләмәстәре. Бынығына ул "көндәлек тормошта осрай торған кәмселектәрҙе һәм айырым шәхестәрҙә күренгән тиҫкәре яҡтарҙы (ялҡаулыҡ, аңралыҡ, һаранлаҡ, ҡурҡаҡлыҡ һ.б.) фашларға йүнәлтелгән" сюжеттарҙы индерә;

3. Ғибрәтле көләмәстәр. "Был осраҡта, – ти, ғалим, – ниндәй ҙә булһа бәләкәс кенә тормош картинаһы (сюжет) аша ғибрәт алыу, фәһем биреүҙе маҡсат итеп ҡуйған көләмәстәр күҙ уңында тотола" (22, 132–133; 23, 83).

Татар мәҙәктәрен төркөмләгәндә, Х. Мәхмүтов та, асылда, ошо уҡ юлды һайлаған (29, 119–120). Күренеүенсә, бындай төркөмләүҙә (авторҙар уны тематик яҡтан төркөмләү тип атаһалар ҙа) үлсәмдәр (критерийҙар) берлеге принцибы һаҡланмаған: берсә социаль типтар, берсә мөхит, кешенең ҡылыҡ сифаттары, берсә пафос иҫәпкә алынған. Тағы шул: ике ғалим да аңралыҡ менән ахмаҡлыҡты башҡа тиҫкәре һыҙаттар рәтенә ҡуялар. Бынығы – бер. Икенсенән, төркөмдәрҙең эске бүленешендә аңралыҡ менән ахмаҡлыҡтың антонимы булған зирәклек (отҡорлоҡ, хәйләкәрлек) айырып күрһәтелмәгән. Дөрөҫ, зирәклек, хәйләкәрлек сифаттары тураһындағы көләмәс-мәҙәктәр барлығын улар икеһе лә инҡар итмәй. Кирәй Мәргән, мәҫәлән, "билдәле булыуынса, көләмәстәрҙең үҙәгендә (күпселектә) үткер һүҙле, йор тәбиғәтле һәр һорауға тапҡыр яуап бирә алыусы ябай кеше (хеҙмәтсе, көтөүсе, таҙ) образы тора" (22, 173), ти. Шундай геройҙар (Алдар Күҫә, Ерәнсә, Шомбай, Хужа Насретдин) тирәһендә көләмәс циклдары хасил булыуын әйтә. Х. Мәхмүтов иһә бындай мәҙәктәр татарҙарға ла хас икәнен билдәләй, һәм үҙе төҙөшкән йыйынтыкта уларҙы "зирәк, тапҡыр, хәйләкәр кешеләр" тигән бүлектә бирә. Әммә Кирәй Мәргән кеүек, ул да үҙенең мәҡәләһендә зирәклек,

тапкырлык, хәйләкәрлек тураһындағы көләмәстәрҙе үҙе үк айырған тематик төркөмдәргә нишләптер индермәгән.

***а) Бер үк персонаж тибының төрлөсә аталмышы***

Көләмәстәрҙе төркөмләгәндә, беҙҙең ҡарамаҡҡа, уларҙың түбәндәге мөһим билдәһе иҫәпкә алынырға тейеш. Беренсенән, бер үк көләмәстең бер вариантында сатира объекты – хан, икенсеһендә – мулла, өсөнсөһөндә хәҙерге замандағы берәй ришүәтсе йә бюрократ, олигарх, коррупмен тип бирелергә; бер осраҡта Хужа Насретдин тип исемләнгән герой, икенсе осраҡта – Ерәнсә сәсән, өсөнсөһөндә – айырым регионға ғына билдәле боронғо хәйләкәр, дүртенсеһендә – беҙҙең берәй зирәк замандашыбыҙ итеп күрһәтелергә мөмкин. Икенсенән, бер үк социаль типҡа ҡараған персонаждар, хатта бер үк исемле (Ерәнсә сәсән, Алдар, Хужа Насретдин ише) геройҙар ҙа көләмәстәрҙең берәүҙәрендә хәйләкәр, откор, зирәк кеше итеп, икенселәрендә бер ҡатлы рәүешендә кәүҙәләндерелеүе мөмкин. Был үҙенсәлектең тамыры дуалистик ҡараштарға барып тоташа. Бында жанрҙың тормошсанлығының, реализмды үҙ итеүенең һөҙөмтәһе лә сағылырға мөмкин. Тормошта акыллы кеше лә үҙ ихтиярынан тыш бер ҡатлы кеше хәленә ҡалғылай бит. Көләмәс ошо хәҡиҡәткә лә тоғро. Бер социаль типтың бер үк шәхестең ике төрлө һынландырылышы кемдең кемде кем итеп күрергә һәм күрһәтергә теләүенән дә килеүе ихтимал. Шул уҡ ваҡытта ундайҙар юмористик әкиәттең иҫәр булып ҡыланыусы геройы һымаҡ эш итеүе лә мөмкин. Иртәгә ахыр заман етә, тип, Хужа Насретдиндың яңғыҙ кәзәһен һуйҙырған шәкерттәр өсөн уның күндәмлеге лә, уларҙың кейемен яғыуы ла иҫәрлек булып тойола. Ә Хужа был ғәмәлдәрҙе ҡылыуға юрый бара: заман ахыры килеп еткәс, йәнәһе, кәзә нимәгә лә, кейем нимәгә хәжәт. Тимәк, тыштан ҡарағанда, иҫәр булып ҡыланыуы, асылда, Хужаның хәйләкәрлегенең бер билдәһе генә була.

*Ғөмүмән, көләмәстәрҙә зирәклек (тапкырлыҡ, отҡорлоҡ, хәйләкәрлек, уяулыҡ) бер ҡатлылыҡҡа (оңҡотлоҡҡа, аңралыҡҡа, мәүешлеккә һ.б.) ҡаршы ҡуйыла; зирәклек һәр саҡ хуплана, бер ҡатлылыҡ хурлана.*

Шунан сығып, йәғни геройҙың төп характер һыҙатына – икенсе төрлө әйткәндә, әҫәрҙең эстетик йөкмәткеһенә ҡарап, көләмәстәрҙең иң элек ике ҙур төркөмөнә: 1) зирәктәр (отҡорҙар, хәйләкәрҙәр); 2) бер ҡатлылар тураһындағы төркөмдәргә бүлергә мөмкин. Былай иткәндә, кемдең көлөргә маһир икәнен, кемдең көлкөгә ҡалдырылыуын һәр төркөм эсендә айырып күрһәтеү ҙә етә.

***б) Ерәнсә сәсән менән Хужа Насретдин һәм уларға яҡын типтар хаҡындағы көләмәстәр***

Көләмәстәрҙә зирәктәр һәм хәйләкәрҙәр төрлө мөхиттә, йәғни теләһә ниндәй социаль төркөм вәкиле итеп күрһәтелеүгә ҡарамаҫтан,

халыҡ уларҙы үҙенең таянысы, яҡлаусыһы итеп баһалай. Ерәнсә сәсән, мәҫәлән, шундай геройҙарҙың иң киң билдәлеһе. Көләмәстәрҙә ул башҡаларҙан үҙенең һынсыллығы, тапҡырлығы, ғәҙеллелеге менән айырылып тора. Ул кинәйәләп һөйләшергә ярата. Шул юл менән үҙенең зирәклеген дә күрһәтә, башҡаларҙы ла һынай. Ә ундай һынауҙы Ерәнсәгә кәләш булырлыҡ сәсән ҡыҙ кеүек зирәктәр генә уңышлы үтә ("Ерәнсәнең сәсән ҡыҙ менән әйтешкәне", "Ерәнсә сәсәндең өйләнеүе"(8, №96, 97).

Көләмәстәр Ерәнсәне вазифалы кеше, йәмәғәтсе итеп таныштырыусан: әле ул хан янында күрһәтелә, әле хөкөм сығарыусы судья роленә индерелә, һарай тирәһендә йөрөгән Ерәнсә тормош-көнкүреш әкиәттәрендә кәңәш бирмәй – һабаҡ бирә, дөрөҫөрәге, уның арт һабағын уҡыта ("Ерәнсәне язанан ҡотолғаны", "Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ тәкәне бәрәсләткәне" һ.б.(80, №№76, 77, 81).

Үҙенең аҡыллылығы, зирәклеге менән Ерәнсә сәсән XVI быуатта йәшәгән һинд батшаһы Әкбәрҙең кәңәшсеһе Бирбалды хәтерләтә (18, 52–55, 60, 62, 186–188).

Ерәнсә сәсән көләмәстәренә "Бирғәле сәсәндең Закир Рәмиевта ҡунаҡта булғаны", "Күк төймә", "Сәсән ҡыҙ", "Зирәк килен", "Кер", (8, №№ 101, 103, 104, 106, 107) кеүек көләмәстәр яҡын. Уларҙың күптәрендә ҡатын-ҡыҙ зирәклеге данлана.

Хәйләкәрҙәр башҡаларҙы уңайһыҙ хәлгә ҡалдырырға ярата. Йыш ҡына үҙҙәре лә шундай хәлгә тарып ҡуя. Тик былдай саҡта ла улар юғалып ҡалмай, ҡотолоу юлын таба белә. Шул типтағы хәйләкәрҙәрҙең иң атаҡлыһы – донъя күләмендә дан алған Хужа Насретдин.

Хужа Насретдин тәкәббер хакимдарҙы көлкөгә ҡалдыра, ришүәтселәрҙе мәсхәрәләй, закон менән ирекле эш итеүсе хөкөмдарҙарҙы пародиялай, байҙарҙы төп башына ултырта, үҙе шәриғәт һағында тороп та, изге вазифаһына тап килеп бөтмәгән динселәрҙән дә әсе көлә.

Әйтелгәненсә, Ерәнсә сәсән дә, Хужа Насретдин дә бер ҡатлыларса ҡыланғылап ҡуя. Былдай ике төрлөлөк донъя фольклорында киң билдәле Әбүнувас, Әхмәт аҡай, Бирбал, Кәминә, Ким Сон Даль ише зирәктәргә һәм хәйләкәрҙәргә лә хас. Әгәр ундай геройҙарҙың йүләрлектәре тураһындағы көләмәстәрҙе башҡаларынан айырып ҡараһаҡ, улар беҙгә, ысынлап та, бер ҡатлылыр кеүек тойолор ине. Әммә махсус башҡарылғанда, көләмәстәр, ғәҙәттә, шәлкем-шәлкем һөйләнелә. Һөҙөмтәлә, зирәклеге, хәйләкәрлелеге менән һоҡландырыған ундай геройҙарҙың бер ҡатлылыҡтары, башҡалар кәңәшенә мохтажлыҡтары иҫәрлекте, юғалып ҡалыусанлыҡты пародиялау мәғәнәһен бирә. Шул иһә уларҙың күркәм сифаттарын тағы ла байыта төшкәндәй итә. Шуға күрә лә Ерәнсә сәсән, Алдар, Хужа Насретдин ише геройҙар

тирәһендә ойошҡан көләмәстәрҙе бер шәлкем (цикл) итеп ҡарау хәйерле.

Халыҡта "һәр ауылдың үҙ Хужа Насретдины була" тигән һүҙ бар. Сираҡан йәки Һилаҡан (Учалы районы), Сәйфулла, Ағзам (Бөрйән), Яхъя (Мәсетле) ише "кәмит" кешеләр тураһындағы көләмәстәр шул турала һөйләй ҙә инде.

Хәйләкәр кейәү, хәйләкәр врач, хөкөм эштәре тураһындағы һ.б. көләмәстәр ҙә үҙенсәлекле шәлкемдәр хасил итә.

Бошонмаç һалдат тураһындағы көләмәстәр араһында мөһимлеге яғынан Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арналғандары нык айырыла. Улар – беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың патриотизмының, героик традицияларға тоғролоғоноң сағылышы. "Теле бар", "Күсәгилеш", "Дошманды һанамайҙар", "Фашистарға мөнәсәбәт" ише көләмәстәр бына шундай һығымта яһарға форсат бирә лә инде (8, №№298–301).

***в) Бер ҡатлылар тураһындағы көләмәстәр***

Физик һәм физиологик яктан нормаль кеше лә тормошта йыш ҡына, ирекһеҙҙән, комик ситуацияға тарый, урынһыҙ һүҙ ыскындыра. Бер ҡатлылар тураһындағы көләмәстәрҙең күптәре шуларға нигеҙләнә. Ундай көләмәстәрҙең уйҙырмаға ҡоролғандары ла етәһе. Ләкин ике осраҡта ла, телдән телгә күсә килә, уларҙың геройы айырым кешеләрҙе түгел, йәмғиәттәге, социаль төркөмдәге, ғаиләләге урынына ҡарап, билдәле бер типты һынландыралар. Бында мөхәббәттән башы әйләнгән егеттәр, үтә иçәпсел ҡыҙҙар оялсан йә тупһыҙ кейәүҙәр, эш рәтен белмәүсе килендәр, таҙалыкты, тартыныуҙы белмәç ҡатындар, хурлыҡты ғорурлыҡ тип белеүсе ирҙәр алға баçа.

Йәш яғынан айырылыусы бер ҡатлылыр сығыш яһаған көләмәстәр ҙә байтаҡ. Шулар араһында ҡарттар тураһындағылары ҡыҙыҡ. Улар ҡаттарҙың ғүмер буйы тупланған тәжрибәләренең яңы шарттарға яраҡһыҙ булыу осраҡтарын сағылдырыусан. Шуға күрә лә килендең – килен, кейәүҙең – кейәү булғаны өсөн генә көлмәгән кеүек, ҡарттар тураһындағы көләмәстәр ҙә ҡартлыҡты түгел, ә ҡартлыҡ сәбәпсе булған бер ҡатлылыктан ғына көлә. Көләмәстәрҙе һуҡырҙарҙың, һаңғырауҙарҙың, һаҡауҙарҙың уңайһыҙ хәлгә ҡалыуҙары хаҡында ла (8, №№503–521) шулайыраҡ әйтергә булыр ине.

Бер ҡатлылар тураһындағы көләмәстәрҙең айырым шәхестәргә, тотош колекктивҡа тағып йөрөтөлгәндәре лә бар. Конкретлаштырыуҙарына ҡарамаçтан, улар ҙа типик геройҙар кеүек хәтерҙә ҡала. Һүҙҙе бутап һөйләүсе Алтынбай (8, №№522, 523), русса фәстереүсән Яҡуп ҡарт (8, №№537, 538) үҙһүҙле Әпкәдир (8, №№545–547) һәм ауылдар тураһындағы көләмәстәрҙең геройҙары – ана шундайҙарға миçал.

### *г) Башҡорт габроволары (ауылдар) тураһындағы көләмәстәр*

Ауылдар тураһындағы көләмәстәр беҙҙә һәр районда тиерлек осрай. Мәҫәлән, Әбйәлил районында – Аһылай (Өскүл); Учалыла – Амангилде (Соҡот, Сәнсәр), Бөрйәндә – Иҫке Монасип (Һарт), Байғаҙы; Ишембай төбәгендә – Әрмет, Баймаҡта – Туҡтағол, Күсей, Иҫән; Хәйбуллала – Аҡъюл менән Аҡнаҙар; Архангель һәм Белорет яҡтарында Төрөкмән ауылы кешеләре хаҡында көләмәстәр һөйләргә яраталар (8, №№ 548–611). Бындай ғәҙәт башҡа халыҡтарҙа ла бар. Мәҫәлән, Францияның – Абдеры, Англияның – Норфольк, Германияның – Шильды, Болгарияның, мәғлүм булыуынса, – Габрово, Ирандың Казвин ҡалаһының; Рәсәйҙең – Пошехон, Францияның – Пломбир, Рюо, Брест, Жеморе, Соксюра, Вентропа, Мениля, Германияның – Бюзум, Гиршау, Кисдорфен, Фокбек, Сирияның Гальбуна ауылының кешеләрен элек-электән иҫәрҙәр, бер ҡатлылар тип мәрәкәләйҙәр (40, 123–132 16;36;24).

Ауылдар тураһындағы көләмәстәр бер ҡатлылар төркөмөнә ҡараған башҡа көләмәстәрҙән үҙҙәренең килеп сығышы, тәғәйенләнеше, йәшәү рәүештәре менән ныҡ айырыла.

Тикшеренеүселәр асыҡлауынса, борон, дуалистик йәмғиәттә үк, ырыуҙар һәр саҡ бер-береһен мәрәкәләй, мыҫҡыллай, үсекләй торған булған (19, 289). Был хаҡта А.В. Луначарский бына ни тип яҙған: "... мәҙәниәттең бик тә түбән баҫҡысында бергәләшеп көлөшөп алыу йолаһы атҡарылыр булған. Ул – ... ырыуҙы ырыуға, бер ҡәбиләне икенсеһенә ҡаршы ҡуйыуҙа күҙәтелгән: ике ҡәбилә бер-береһен көлкө бәйгеһенә саҡырыр булған" (26, 534 ). Бер ҡала, ауыл кешеләре тураһында көләмәс һөйләү шул боронғо йоланан ҡалған.

Әлегәсә тупланған материалдарҙан сығып фекер йөрөткәндә, ауылдар тураһындағы көләмәстәр араһында Соҡот йәки Сәнсәр шәлкеме мөһим урын алып тора. Тематикаһы буйынса уларҙың барыһы ла көнкүреш хәлдәренә бәйле. Уларға шундай һыҙаттар хас: сәнсәрҙәр (соҡоттар), эштең аҙағына тиклем уйлап еткермәүҙәре, хәл-ваҡиғаны бер яҡлы баһалауҙары йәки үтә "рационализатор" булыуҙары арҡаһында, уңайһыҙ хәлгә тарый.

Аһылай (Һарт, Өскүл), Иҫке Монасип (Һарт), Байғаҙы, Әрмет, Күсей, Туҡтағол, һ.б. ауыл көләмәстәре күп яҡтан Сәнсәр шәлкеменә тартым, ә бына Аҡъюл менән Аҡнаҙар көләмәстәрен ике ауыл әйтеше тип ҡарарға булыр ине. Сөнки уларҙың йәнле булмыштары шулай. Мәҫәлән, Аҡнаҙарҙан берәйһе көлкөгә тарый икән, аҡъюлдар шуны эләктерә һалып алып, шаштыра биреп, көләмәс хәленә еткереп, шунда уҡ халыҡҡа сығара. Аҡъюл ауылдарының мажараһы аҡнаҙарҙар ғүмер бирер көләмәстәргә нигеҙ була. Бер үк теманың ике ауыл араһында "сайкалыуы" ла шуны сағылдыра. Аҡъюлдар, бүре тип, ҡолондо бәреп үлтерһә ("Аҡъюл бүреһе", 8, №573), ә ысын бүрене ҡомаҡ тип уйлаһа

("Тағы бер крис", 8, №574), аҡназарҙар ташты айыу тип, этте бүре тип көлкөгә ҡала("Аҡназар айыуы", "Аҡнаҙар бүреһе", 8, №№579, 580).

Ике ауыл халҡының бер үк көләмәс сюжетын бер-береһенә "япһарыу" хәлдәре лә осрай. Мәҫәлән, "Ни күрмәне был баш (8, №585) көләмәсенең геройы, аҡназарҙарса – Аҡъюл кешеһе, ә аҡъюлдарса – Аҡназар кешеһе.

Әйтешкә материал етмәһә, был ике ауыл халҡы көлкөлө ситуацияны үҙҙәре махсус "ижад итә" ("Аҡъюлдарҙың кәбән кәртәләгән", "Аҡнаҙар кәбәне" (8. №576, 578). Шуныһы мөһим: бындай көләмәстәр үҙ-ара дошманлашыу тойғоһо уятмай, бәлки мәрәкәләшеп йәшәүҙе генә аңлата.

Ауылдар тураһындағы көләмәстәр араһында халыҡ-ара билдәле сюжеттар ҙа осрай.

***ғ) Көләмәстәрҙең ваҡ тематик төркөмсәләре***

Башҡорт халҡының көләмәстәр репертуары әле телгә алынғандары менән генә сикләнмәй. Йә зирәклек (отҡорлоҡ: хәйләкәрлек), йә бер ҡатлылыҡ сифатына ғына эйә булған йәки бер осраҡта үҙен хәйләкәр, икенсе юлы бер ҡатлы итеп күрһәтеүсе бер үк геройҙар сығыш яһаған, тематик яҡтан да төрлө-төрлө булған көләмәстәр тағы ла бик күп. Милли репетуарҙың үҙенсәлегенән сығып, башҡа халыҡтарҙыҡынан (һәр хәлдә рус анекдоттары һәм татар мәҙәктәренән) айырмалы рәүештә, *башҡорт көләмәстәрен, төп герой тибы принцибынан сығып,* шартлы рәүештә түбәндәгесә төркөмләргә булыр ине:

1) хакимдар байҙар, муллалар, дингә, хөрәфәткә ышаныусылар;
2) зирәктәр, хәйләкәрҙәр;
3) бер ҡатлы кешеләр;
4) ауылдар;
5) туған-тумаса, дуҫ-иштәр;
6) ир менән ҡатын;
7) маҡтансыҡтар, шапрыныусылар, алдаҡсылар;
8) ялҡауҙар, эшкә яуапһыҙ ҡараусылар;
9) уғрылар;
10) эскеселәр, тәмәкәселәр;
11) бюрократтар, ришүәтселәр, ялағайҙар;
12) һарандар;
13) зауыҡһыҙҙар, мәғлүмәтһеҙҙәр;
14) тәрбиәһеҙҙәр;
15) теленән табыусылар тураһындағы көләмәстәр.

## 6. Көләмәстәрҙең жанр төрҙәре

Башҡорт халыҡ ижадында көләмәстәр составына ингән әҫәрҙәр тематика, герой тибы йәһәтенән генә түгел, жанр билдәләре

йәһәтенән дә үҙенә күп төрлө әҫәрҙәрҙе берләштерә. Уларҙы “көләмәстәрҙең жанр төрҙәре” (жанровые разновидности) тип билдәләргә була. Ошо яҡтан ҡарағанда, көләмәстәрҙең берәүҙәрендә комиклыҡ пафосы, икенселәрендә ғибрәтле-нәсихәти башланғыс өҫтөнлөк ала, өсөнсөләрендә шул ике һыҙат бер нисбәттәрәк килә. Тәүгеләренә – “асылы менән көләмәстәр” (рус кешеһе был урында, ”собственно анекдоты”, тип әйтер ине), икенселәренә – “сәсмә нәсихәттәр”, өсөнсөләренә – “йомаҡ–көләмәстәр”, дүртенселәренә – “сәсмә мәҫәлдәр”, дүртенселәренә – “лаҡаптар”, бишенселәренә – “һүҙ уйнатҡыстар”, һуңғыларына “мәрәкә хикәйәләр” инә.

***Асылы менәнән көләмәстәр.*** Быға тиклем, асылында, тап шундай көләмәстәр хаҡында һүҙ барҙы. Шул күҙәтеүҙәрҙән генә сығып, фекер йөрөткәндә лә, көләмәстәрҙең был жанр төркөмөнөң төп билдәһе юмор йә сатира икәне яҡшы аңлашыла булыр.

***Сәсмә нәсихәттәр (хикмәттәр).*** Был атама "нәсийх" тигән ғәрәп һүҙенән алынған. Беҙҙеңсә ул вәғәз һөйләү, өгөтләү, яҡшылыҡҡа өндәү тигәнде аңлата (рустарҙа притча). "Өгөтләүсе" әҫәр булыуына ҡарамаҫтан, был мотив сәсмә нәсихәттәрҙә, ғәҙәттә, тура бәреп әйтелмәй, ә кинәйәләп еткерелеүсән.

Сәсмә нәсихәттәр айырыуса әхлаҡ темаһын үҙ итә. Улар ыңғай күренештәрҙән өлгө, киреләренән фәһем алырға саҡыра. "Юғалтыу", "Килен һынау", "Аҡыл бетеүе"(8, №1122–1124) ише сәсмә нәсихәттәрҙә әхләҡи проблемалар аҡыллы кешенең һүҙенә ыңғай реакция, йәғни позитив күренештәр аша хәл ителһә, "Бер ғаиләлә", "Кешегә баҙ ҡаҙыһаң, үҙең төшәрһөң" (8, №1126–1127) ише сәсмә нәсихәттәрҙә лә шул уҡ проблемалар негатив күренештәрҙе һүрәтләү аша сиселә. Нәсихәттәр, ғөмүмән, борон-борондан халыҡтың яҙылмаған әхләҡи кодексын иллюстрациялау өсөн файҙаланылған. Шуға күрә лә халыҡ педагогоикаһында мөһим урын алып торған.

***Йомаҡ-көләмәстәр*** тыңлаусыларҙың логик фекерләү ҡеүәһен һынау, фәһем биреү маҡсатында һөйләнә. Ошо яғы менән улар нәсихәттәргә яҡын тора. Тик уларҙан айырмалы рәүештә, йомаҡ-көләмәстәр һорау менән тамамлана, һорауҙың комик характерҙа булыуы шарт ("Нимә һауҙы?", "Ҡайҙа йәшәй?" (8, №1133, 1134).

Йомаҡ-көләмәстәрҙе борон, кешенең зирәклеген һынау өсөн, мәжлестәрҙә, йыйындарҙа һөйләр булғандар. “Ҡуңыр буға” эпосының Сәғит Мирасов тарафынан Шаһишәриф Ҡаһымов тигән кешенән яҙып алған вариантынан аңлашылыуынса, бындай көләмәстәр кейәү егеткә никах алды һынауы үткәреү өсөн дә файҙаланылған. Бәйгелә лә, билһынашта ла еңеп сыҡҡан, йәғни етеҙлеген, бил көсөн һынауын уңышлы үткән Ирәндекте зирәклектә лә һынау маҡсатында бер аҡһаҡал унан:

– Ошо ҡаҙанда ит күпме, һөйәге күберәкме? – тип һорау бирә. Егет:

– Һурпаһы, – ти үҙенең яуабында. Артабан был диалог шулай дауам итә:

– Итте утын бешерәме, төтөнмө ?

– Ит ҡапҡан ни тапҡан ? Һөйәк кимергән ни емергән ?

– Ит ҡапҡан тамаҡ туйҙырған, һөйәк ҡапҡан аҡыл арттырған. (БХИ. 3-сө том: Йола фольклоры. – Өфө, 1998. – 304-се б.)

***Мәҫәлдәр.*** Аллегорияға ҡоролоуҙары менән мәҫәлдәр хайуандар тураһындағы әкиәттәргә оҡшаһалар, персонаждарҙың аҙлығы (улар, ғәҙәттә, икәүҙән үтмәй), күләменең ыҡсымлығы, комик пафосы менән берәүҙәре асылы менән көләмәстәргә, икенселәре сәсмә нәсихәттәргә тартым була.

Мәҫәлдәрҙең тематик ҡоласы киң. Улар халыҡ-ара проблемаларҙы күтәртеүсе ижтимағи күренештәрҙән алып ғаилә-көнкүреш хәлдәренә тиклемге аралыҡтағы күренештәрҙе сағылдыра. "Кемгә йәннәт?" (8. №1136) мәҫәлән, провокацион шау-шыуға маһир сит ил пропагандаһын пародиялаһа, "Башһыҙ бригадир", "Бәйләнгән" (8, №1137, 1138) тигәндәре ил эсендәге проблемаларға алып ҡайта һәм колхоз эшенә илке-һалҡы ҡараусыларҙы, яуапһыҙ етәкселәрҙе, "Төлкө менән ҡуян", "Тауыҡтар талабы" (8, №1140, 1141) тибындағылары формализм күренештәрен шелтәләй. Мәҫәлдәрҙә йәнле персонаждарҙың күбеһе, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙәгесә, билдәле бер характер һыҙатын (ишәк – үҙ һүҙлелекте, йылан – зәһәр яуызлыҡты, гөбөргәйел (ташбаҡа) – ығышлыҡты, һ.б.) кәүҙәләндерә. Ә бына бүре, төлкө, ҡуян кеүек кейектәр төрлө мәҫәлдә төрлө сифатҡа инә. Мәҫәлән, бүре берсә – тупаҫ зат ("Ажары ҡайтҡан ҡуян, 8, №1146), берсә – төлкөнө оторлоҡ хәйләкәр ("Сит тел белеүҙең файҙаһы", 8, №1168) хәлендә күрһәтелә. Ҡуян – берсә бүрене хур итерлек хәйләкәр ("Башҡаса булдыра алмайым", 8, №1167), берсә иҫәр ("Ҡуян хәйләһе", "Ныҡ ултырҡан", 8, №№11655 1166), берсә бушҡа ғәйрәтләнеүсе ролен атҡара ("Үҙ өйөндә ҡуян дә шәп", 8, №1154).

Халыҡтың сәсмә мәҫәлдәрендә серәкәй, тараҡан кеүек бөжәктәр ҙә ("Филде типкән серекәй", "Тараҡан берҙәмлеге", "Тараҡан яуы", 8, №№1156, 1171, 1172), хатта һыу, торомбаш, күлдәк, силғау (8, №№1160, 1174) кеүек йәнһеҙ әйберҙәр ҙә, абстракт төшөнсәләр, мәҫәлән, сир ҙә ("Төрткө менән бабай", 8, №1178) һ.б. ҙа йәнләндерелергә һәм тәғәйен персонаж хеҙмәтен үтәргә мөмкин.

***Һүҙуйнатҡыстар.*** Мәрәкәләшкәндә, бары ҡыҙыҡ өсөн генә лә, хатта мәрәкәләшеүҙе күҙ уңында тотмағанда ла, кешеләр йыш ҡына һүҙ уйнатыу, тел көрмәлдереү, ярым-ярты яуап, реплика, ымлыҡ менән һөйләшеү алымдарын ҡулланыусан. Шуларға ҡоролған күренештәрҙе һүҙуйнатҡыстар тиҙәр, Һүҙуйнатҡыстар ымлыктар һәм

интонацияны төрләндереү ярҙамында мәғлүмәт биреү принцибына ("Кем – кем?", "Аңлаштылар", 8, №№1185, 1186 ), өсөнсөләре һөйләмдәге һүҙҙәрҙең урындарын алмаштырыу юлы менән бер үк фекерҙе ҡабатлауҙарынан тора ("Ике ағайҙың эш бүлешкәне", "Төҙәтмә", 8, №№1182, 1183).

Бер үк ижекте, нигеҙ һүҙҙе, омонимдарҙы ҡабатлауҙан яһалған һүҙуйнатҡыстар ҙа бар ("Балтаһы һыуға төшкән", "Сана ҡарамалатыу", 8, №№1188, 1190).

Көләмәстәр кеүек үк, һүҙуйнатҡыстар ҙа гел генә мәрәкәне, көлдөрөүҙе генә маҡсат итеп ҡуймай. Уларҙа ла кешеләрҙең яҙмышы, үҙ-ара мөнәсәбәте, ынтылыштары, кисерештәре сағыла. "Кем кемде туҡмай?" һүҙуйнатҡысында ҡарсыҡтың "Ҡара әле, ҡарт, һинең малай менән минең малай беҙҙең малайҙы туҡмайҙар" (8, №328) тигән һүҙҙәрендә тотош бер ғаиләнең биографияһы, ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәр: бабайҙың ҡасандыр ҡатыны үлеп, яңғыҙ улы менән тороп ҡалыуы, уллы тол ҡатынға өйләнеүе, ир менән ҡатындан уртаҡ ир бала тыуыуы, эйәрсәндәрҙең шул бала (тимәк, уртаҡ туған) менән татыу түгеллеге, сөнки уның донъяһы теүәл – атаһы ла, әсәһе лә бар, ә ағайҙары – ярым етем; етмәһә, кинйә бала булараҡ, минорат йолаһы буйынса, атай кеше ҡорған бөтә донъя малы, барлыҡ мөлкәт киләсәктә уларға түгел, уға ҡала икәнлеге – тимәк, конфликттың осо йәшерелгән.

Һүҙуйнатҡыстар халыҡ педогогикаһында элек-электән зирәклекте һынау, логик фекерләүҙе үҫтереү йәки тел сарлау, мәрәкәлешеп алыу маҡсаттарында ҡулланылыр булған. Шул уҡ ваҡытта, әле телгә алынған миҫалдарҙан күренеүенсә, улар тыңлаусылрҙың милли йола ҡанундарын, тарихты белеүен һәм, ғөмүмән, мәғлүмәтле булыуын талап иткән. Тимәк, уларҙың танып белеү әһәмиәте лә бар.

***Лаҡаптар.*** Лаҡап – ғәрәп һүҙе. Ул "ҡушамат" (“псевдоним”) тигәнде аңлата. Әммә йәнле башҡорт телендә ул ике мәғәнәлә йөрөй. Берәүҙең комик ситуацияла абайламай ыскындырған һүҙе ҡушаматҡа әйләнә. Ындай лаҡаптар яһалышы һәм функцияһы яғынан ике төргә бүленә. Бер төркөмө айырым фразалар рәүешендә була һәм фразеологизмдарҙы алмаштыра ала. Уларҙың ҡайһылары кемдеңдер һүҙҙәрен ҡабатлау рәүешендә ("Һиҙҙеңме, Исхаҡ!", "Әһә, Әфлисун!", "Анау икән, тиһәм, бынау икән"(8, №№1193, 1198, 1200), ҡайһылары берәүҙең ҡыланышын икенсе кешенекенә тура сағыштырыу ("Ябалаҡ муллаһы кеүек, туранан йөрөйһөң икән", "Эшең Дәмир күпере кеүек кенә булған" (8, №№1195,1219), ҡайһылары ситләтеп сағыштырыу формаһынды була ("Иҙрис май ашамай ул" (8, №596).

Лаҡаптарҙың икенсе төркөмө ҡушаматтарҙан (ялған исемдәрҙән) тора, йәғни үҙенең төп мәғәнәһендә ҡулланыла. Уларҙың берәүҙәре ҡушамат эйәһе әйткән һүҙҙән яһала ("Әсикмәк", 8, №1233), икенселәре кешенең холҡон ҡылыҡһырлаусы ҡушаматтарҙан тора ("Хуш ауылым

Ғәббәс", "Урыҫ Әхмәр", 8, №№1201, 1238), өсөнсөләре ҡушамат исем тағыуҙы маҡсат итмәй генә әйтелгән һүҙҙән яһала ("Дәүмалай, 8, №1226).

Ваҡыттар үткәс, ҡушамат ижадсыһына кире ҡайтырға ла мөмкин. Берәү ҡыҙыл табанлы быйма кейеп килгән түрәне "Күгәрсен тәпәй" тип атай, аҙаҡ "авторҙың" үҙен шул исем менән йөрөтә башлайҙар ("Күгәсен тәпәй" (8, №1220).

Әйтелгән һүҙ күҙ уңында тотмаған әйбер, күренеш, кеше хаҡында ассоциация тыуҙырыуы ла ихтимал. Шул ерлектә лә лаҡап исем хасил була. Берәүҙән яңы өйөнә ҡасан сығасағын һорағас, тегеһе: "Франтонды бөтөрәм дә инәм инде", тип әйтер урынға: "Французды бөтөрәм дә инәм",– тип ысҡындырыуы арҡаһында, уға "Кутузов" тигән лаҡап-исем тағыла.

Лаҡаптар бер һүҙ менән кешене ҡылыҡһырлау, аҙаштарҙы бер-береһенән айырыу өсөн ҡулланыла. Улар кешегә ғүмерлеккә бирелә. Хатта үҙе был яҡты донъянан киткәс тә, лаҡап-исем онотолмай, эйәһенең нәҫеленә күсерелә, хатта этник төркөмсәнең (ара, аймаҡтың) атамаһы булып та ҡала.

Лаҡаптар – афористик жанрҙар менән көләмәстәр араһында торған күренеш. Синтаксик яҡтан теүәл конструкцияларҙан торған контекста мәҡәлдә, айырым һүҙбәйләнештән торғандары, шул иҫәптән лаҡап-исемдәр тапҡыр һүҙ (идиоматик берәмек) функцияһын атҡара. Тик билдәле бер төбәктә, айырым мөхиттә генә (бер ауылда, урамда, коллективта ғына) аңлайышлы булғанға, ситтән килгән кешегә уларҙың мәғәнәһе тиҙ барып етмәй. Шуға лаҡаптарҙы локаль афоризмдар тип атарға булыр ине. Шул локаллек уларҙы ят кеше алдында йәшерен тел сараһы итеп ҡулланыу мөмкинлеге бирә. Ошо яғы лаҡаптарҙы йомаҡтарға ла яҡынайта. Ят кешегә төшөндөрөү өсөн, лаҡаптың килеп сығыуын аңлатыу талап ителә. Шундай аңлатмалар көләмәс төҫөн ала ла инде.

***Мәрәкә хикәйәләр.*** Көндәлек тормошта булып торған төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр тураһындағы хикәйәләрҙең ҡайһы берәүҙәре лакап, көләмәс рамкаһына ғына һыймай, улар бер ни тиклем риүәйәтте лә, хәтирә жанрын да төҫмөрләтә. Ләкин мажаралылыҡ, комик пафосы, реалистик йөкмәткеһе менән улар көләмәстәргә яҡын. Бындай хикәйәләрҙе шартлы рәүештә хикмәттәр һәм мәрәкә хәлдәр тураһында халыҡ хикәйәләре тип атарға була.

Мәрәкә хикәйәләрҙең дә геройы көләмәстәрҙеке кеүек йә хәйләкәр, йә ирекһеҙҙән (ҡайһы саҡта ысын) бер ҡатлы кеше була. Хәйләкәр герой, ғәҙәттә, алдау юлын файҙалана. Көләмәс йә сатирик әкиәт геройы кеүек, уның алдашыуы ла ғәҙеллек урынлаштырыу сараһы тип баһалана. Фәҡир егеттең үҙен бай тип танытып, бай ҡыҙын алыуы малға ярлы хеҙмәт кешеһенең аҡылға бай икәнлеген иҫбатлау сараһы

("Атайсал егетенең кәләш алғаны", 8, №2145), Суфиян тигән егеттең, әбейҙәр кейеме кейеп, кейәүгә бирелгән һөйгәнен алып ҡасыуы ("Суфиян менән Мәрхәбә", 8, №1246) мөхәббәте менән башҡаларҙың иҫәпләшеүенә ирешеү сараһы кеүек аңлашыла.

Геройҙың бер ҡатлылыҡ сифаттары, ғәҙәттә, һунар ваҡиғаларына ("Мөгөҙлө айыу", 8, №1255), техниканы ("Ҡолғана, донъя болғана!", 8, №1256), сит телде белмәүгә ("Ыҫ килен", "Әтҡол башҡортоноң русса һөйләшкәне", 8,№1260, 1261), хөрәфәттәргә ышаныуға ("Мөхәмәтғәленең ауға сыҡҡаны", "Мөхәмәтғәленең шүрәле эҙе күргәне", 8,№1265, 1266) бәйле мажараларҙа асыла.

Көләмәстәр өсөн ваҡиғаның тулы бирелеүе шарт түгел. Ә мәрәкәләр өсөн ваҡиғалылыҡ – тәүшарт.

Мәрәкә хикәйәләр, көләмәс, бәйет, хәтирәләр кеүек үк, оператив булыуҙары менән айырылып тора. Уларҙың ваҡыт һынауын үтеп, конкретлыҡ билдәләрен юғалтҡандары көләмәстәргә, юмористик һәм сатирик әкиәттәр репертуарына күсергә мөмкин.

### 7. Көләмәстәрҙең поэтикаһы

Көләмәстәрҙең поэтикаһы ла, дөйөм жанрҙың үҙе кеүек үк, беҙҙә әлегә махсус өйрәнелгәне юҡ. Фольклорсыларыбыҙҙан был жанрға сағыштырмаса ныҡ ғарап иғтибар иткән ғалим Кирәй Мәргән иһә көләмәстәрҙә хикәйәләү формаһы, гипербола, литота кеүек алымдарҙың ҡулланылышы, комиклыҡ эффекты, мәҡәл һәм йомаҡтарға мөнәсәбәтлелек хаҡында әйтеп китеү менән генә сикләнде (22, 184–186). Көләмәс поэтикаһының ҡайһы бер яҡтары бер ни тиклем ошо юлдарҙың авторының хеҙмәттәрендә яҡтыртылды (8, 18–22; 38; 39). Башҡа халыҡтарҙың фольклор ғилемендә лә был жанр поэтика күҙлегенән әлегә ихлас өйрәнелмәне. Шул уҡ ваҡытта күҙгә күренерлек күҙәтеүҙәр ҙә юҡ түгел. Был осраҡта А. Пельтцер, Г. Пермяков, А. Яхин, Ф. Хатипов, Х. Мәхмүтов, У. Далгат, О. Амбайниц, Дж. Дорри, В.М. Сидельников кеүек тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәре күҙ уңында тотола (30; 31; 44; 42; 29; 15; 16; 35). Бигерәк тә Х. Мәхмүтов, Дж. Дорри, айырыуса У. Далгат, Ф. Хатипов менән А. Яхиндарҙың мәҙәк, латифаларҙың комиклыҡ поэтикаһы хаҡындағы күҙәтеүҙәр иғтибарға лайыҡ булырлыҡ. Башҡорт көләмәстәренең аҙаштары булған побасенки, анекдоттар һуңғараҡ дәүерҙә һөйләү-фольклор клишалары типологияһын семиотика күҙлегенән тикшереүгә бағышланған хеҙмәттәр хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була (Г.П. Пермяков (31,32); С.Н. Муратов (28). Әммә лингвистарҙың аналитик һәм синтетик клише күҙлегенән былдай әҫәрҙәрҙе тикшеренеүҙәренең фольклор ғилемендә ҡулланылыу мөхите сикле. Сөнки бары форма менән мауығып, лингвистар уларҙың идея-эстетик ҡиммәтен артҡы планға күсерә. Әммә, башҡорт көләмәстәренең поэтикаһын тикшергәндә, башҡа

халыҡтарҙың фольклорындағы ошондай уҡ жанрҙың поэтикаһына ҡағылышлы хеҙмәтәрҙә тупланған тәжрибә кеүек үк, лингвистик пландағылары менән дә иҫәпләшмәү хилафлыҡ булыр ине.

*а) Көләмәстең диалогтан тороу ихтималы*

Көләмәс поэтикаһы тәңгәлендәге күҙәтеүҙәрҙе бәхәслерәк яҡтан башлағы килә.

Көләмәстәрҙә бер эпизод, дөрөҫөрәге, ысынбарлыҡта булған йә булырҙай ваҡиғаның, оҙайлы мөнәсәбәттәрҙең ҡыҫҡа бер эпизоды ғына бирелеүен күптәр таный. Мәгәр, ғәҙәттә, шунда уҡ көләмәстәрҙең күптәренең диалогҡа ҡына ҡоролоуын иҫкәртеүсәндәр. Был фекерҙе тәүгеләрҙән булып XX быуаттың 20-се йылдары башында Р.М. Волков әйткән (13, 374). Көләмәс һәм диалог мәсьәләһенә ҡағылышлы фекерҙәрҙең әрәсәһе шуға ҡайтып ҡала: йәнәһе, "диалог эпизодты, ситуацияны сағылдыра алмай". Ләкин көләмәс диалогта ниҙер асыҡлауҙы маҡсат иткән һорау-яуаптан ғына түгел, ә, ғәҙәттә, шәхес-ара мөнәсәбәтле һорау һәм яуаптарҙан тора. Бындай диалог үҙенә тиклем үк төйнәлгән һәм артабан дауам ителәсәк, сиселәсәк ваҡиғаның, ситуацияның бер өлөшөн үҙ эсенә ала. Үҙ сиратында уныһы үҙенә етә килгән ваҡиғаға сәбәпсе булырға, йәғни уның тәүге быуынын тәшкил итергә мөмкин. *Быныһы – бер.*

*Икенсенән,* "диалогҡа ҡоролған көләмәс" тигән һүҙ үҙе үк шартлы. Сөнки теләһә ҡайһы көләмәсте лә ремаркаларын ҡыҫҡартып йә бөтөнләй төшөрөп, шау диалогҡа ғына ҡалдырып һөйләргә мөмкин. Миҫалға "Көләмәстәр" йыйынтығындағы ремаркаһыҙ бирелгән "Мулла менән түгел" тигән көләмәсте алып ҡарайыҡ.

– Өләсәйең үлгән, тиҙәр. Нисек күмдегеҙ? Мулла менәнме?

– Юҡ, яңғыҙын (8, №1102).

Аңлашыла ки, бында көләмәслек яуапҡа бәйләнгән. Ул яуапты биреүсенең бала кеше булыуы ла аңлашыла. Ремаркалар менән байытып, был көләмәсте былайыраҡ та һөйләп булыр ине: "Бер малай (әйҙә, ул дүрт йәшлек Әхсән булһын, ти) ҡалаға килгән. Ҡалала йәшәгән фәлән бабай уның менән осрашҡас, йөҙөнә бик ҡайғылы төҫ сығарып:

– Өләсәйең үлгән, тиҙәр, нисек күмдегеҙ? Мулла менәнме? – тип һораған, ти. Малай аптырап киткән. Берсә ағаһына, берсә еңгәһенә ҡарап алған да бабайға текәлгән. Уның ҡараштары: "Аҡ һаҡаллы ҡарт булғанһың, шуны ла белмәйһеңме?!” – тигәндәй булған. Ахырҙа ул сит кеше алдында үҙен саҡ ҡулға алғандай, һығылып ҡына:

– Юҡ, яңғыҙын, – тине лә, ти, үҙенең уйына тотондо, ти". Ошо көләмәсте тағы әллә нисәгә төрләндереп һөйләргә булыр ине. Ҡыҫҡаһы, "диалогҡа ҡоролған" көләмәстәрҙе лә эпизодҡа ҡоролған тип ҡарап була. Тимәк, көләмәстәрҙең ике төрө тураһында һүҙ бар икән, уларҙа эпизодттың ике төрлө бирелеүе: береһендә конфликттың персо-

наждар хәрәкәтендә, икенсеһендә – персонаждарҙың һүҙҙәрендә (диалогында) асыҡланыуы һәм сиселеүе күҙ уңында тотолорға тейеш.

Конфликт, диалогта билдәләнеп (асыҡланып) сиселеше һуңғы яуапҡа, репликаға тура килгән көләмәстәр композицияһының структураһы йәһәтенән күп төрлө булыуы менән айырылып тора. Был күп төрлөлөк ремаркаларҙың ҡулланылышына, репликаларҙың иҫәбенә, бәхәсләшеүселәрҙең ҡайһыһы ҡасан телгә килеүенә бәйләнгән.

***б) Көләмәстә ремарка – һорау бәйләнеше***

Аңлашылыуынса, көләмәстәрҙә, ғәҙәттә, ике персонаж була. Сюжет, дөрөҫөрәге, бер тематик мотив рәүешендәге микросюжет шул икәүҙең әйтешенә ҡорола ла берәүһенең тапҡыр йә бер ҡатлы яуабы, йә урынһыҙ ысҡындырылған репликаһы менән тамамлана. Әгәр инде персонаждар икәүҙән күберәк булһа, уларҙың береһе, ғәҙәттә, бәхәсте хәл итеүсе, дәғүәселәргә хөкөм сығарыусы, уларҙы баһалаусы ролен атҡара. Ундай саҡта көләмәс ремарка – һорау – ремарка – яуап сылбыры хасил итеп, бәхәсте хәл итеүсенең (йә дәғүәселәргә хөкөм сығарыусының, йә уларҙы баһалаусының) репликаһы менән тамамлана. “Атаһына аҡыл биргән", "Әнәһен эҙләгән" көләмәстәре бына шуға миҫал (8, №№255,264).

Бер генә персонажлы көләмәстәр ҙә була. Ундай көләмәс, ғәҙәттә, ремарка–репликанан тора. Көләмәслек яңғыҙаҡтың шул реплика–монологы менән билдәләнә. Бына "Культуралы һөйләшмәксе" көләмәсе: "Бер йәш ҡатын күршеһенә йомошҡа ингән дә: "Күрше, йомортҡағыҙ булһа, күкәй биреп тороғоҙ әле?” – тигән. (8, №524). Бындай көләмәсте *монолог–көләмәс* тип кенә атарға ла булыр ине. Ә конфликт диалогта билдәләнеп, һуңғы яуап–репликала сиселгән көләмәстәрҙә *диалог–көләмәс* тип йөрөткәндә лә ярай.

***в) Көләмәстең күләме үҙгәреүсән***

Көләмәстәр тураһында һүҙ барғанда, бигерәк тә уларҙы әкиәттәр менән сағыштырғанда, тәүгеләренең күләм яғынан ҡыҫҡалығына, баҫым яһаусандар. Ләкин ҡыҫҡалыҡ (ыҡсымлылыҡ) йә оҙонлоҡ (күләмлелек) жанрҙы билдәләүҙә йәки был ике жанрҙы бер-береһенән айырыуҙа төп үлсәм була алмай. Миҫалға "Ҡоро ҡалған" (8, №280) көләмәсен генә алып ҡарайыҡ. Уның китапҡа ингән варианты сюжет бөтөнлөгөнә лә эйә, етмәһә, күләме улай-былай әкиәттәренде көнләштермәле. Әҫәр экспозициянан башлана: "Элегерәк заманда (сағыштырығыҙ: әкиәт "Борон-борон заманда ...," – тип башланыусан. – Ә.С.), бер адвокат үҙе яҡларға тейешле булған ғәйепләнеүсегә былай тип өйрәткән, ти: "Һинең ғәйебең, бик ҙур, егет. Был бәләнән ҡотолғоң килһә, башыңды тилегә һал. Суд ваҡытында нимә тип һорамаһындар: "Ну, так что же?!” – тип, гел бер генә һүҙ менән яуап ҡайтар ҙа ултыр!. Яҙанан ҡотолған сүрәттә, был кәңәше өсөн адвокат ни һораһа, ғәйепләнеүсе шуны бирергә вәғәҙә

иткән". Бындай экзпозициянан һуң сюжет йәйелеп китер, тип өмөт итәһең. Әммә ул өлөштөң "Мулла менән түгел"дәгесә ремаркаһыҙ диалогтарҙан тороуы көләмәсте ыҡсымлай ҙа ҡуя. Ул диалогты ситләтелгән телмәр (мәҫәлән, "судья нимә генә һорамаһын, ғәйепләнеүсе "ну, так что же?!" һүҙен ҡабатлап тик ултыра, ти") рәүешендә лә биререгә була. Шул арҡала йөкмәтке йәһәтенән көләмәс даими ҡалһа ла, күләм ыҡсымланыр ине. Ә экспозицияны "ҡыҫыу" уны тағы ла ыҡсымлата. Тимәк, көләмәстең күләме үҙгәреүсән. Был үҙенсәлек һөйләүсегә лә, тыңлаусыға ла, һөйләү шарттарына ла бәйләнгән.

Конфликттың асыҡланыуында һәм сиселеүендә персонаждарҙың хәрәкәте мөһим роль уйнаған көләмәстәрҙә, ғәҙәттә, сюжеттың бөтә компонененттары ла була һәм эҙмә-эҙлекле бирелә, йәғни тәүҙә экспозиция, унан төйөнләнеш, шунан һуң кульминация, ахырҙа сиселеш килә. Ә инде айырым компоненттар, мәҫәлән, экспозиция менән төйөнләнеү, кульминация менән сиселеш бер-береһе менән тап килергә лә мөмкин. "Ерәнсә сәсән менән Тимерхан батша" (8, №73) көләмәсендә батша Ерәнсә сәсән алдына хәл иткеһеҙ мәсьәлә ҡуя: йәйәү ҙә килмәҫкә, юлдан да килмәҫкә, һарайға килеп ингәс, ултырмаҫҡа ла, ике аяғында тормаҫҡа ла. Ерәнсә елле кәзә тәкәһенә атланып, юл ҡырлап китә, һарайға ингәс, һыңар аяғында тора: "Бына ... бүләк", – тип ҡулын һона, батша алам тиһә – усындағы турғайҙы осора ла ебәрә... Ерәнсәнең батша ҡуйған мәсьәләне хәрәкәттә хәл итеүе – бер үк ваҡытта кульминация ла, сиселеш тә.

***г) Көләмәстәрҙә аҡыллылар (зирәктәр, хәйләкәрҙәр) тибы менән бер ҡатлылар тибының ҡапма-ҡаршы ҡуйылғаны***

Көләмәстәрҙә персонаждарҙың образы индивидуалләштерелмәй. Хатта конкрет исем менән йөрөтөлгәндәре лә дөйөмләштерелгән образ, бары *тип* булып ҡына ҡала. Сөнки бер үк герой көләмәстең төрлө варианттарында төрлөсә исемләнергә мөмкин. Геройҙың "бер әбей", "бер бабай", "бер кеше" кеүек уртаҡлыҡ исемдәр менән аталыуы ла дөйөмләштереүҙең бер ысулы тип ҡаралыуға хаҡлы. Ғөмүмән, көләмәс өсөн – индивидуалләштереү түгел, типиклаштырыу мөһим.

Был йәһәттән көләмәстәргә шундай үҙенсәлектәр ҙә хас. *Беренсенән,* һәр көләмәстә тиерлек аҡыллылар (зирәктәр, хәйләкәрҙәр) тибы менән бер ҡатлы кешеләр тибы ҡапма-ҡаршы ҡуйып күрһәтелә. *Икенсенән,* шул уҡ *типтар* билдәле социаль төркөм хаҡындағы көләмәстәрҙә конкретыраҡ һынланыш ала. Мәҫәлән, "Яҡшы ғәҙәт" көләмсе Ерәнсә-сәсәндең яҡшылыҡ эшләргә яман кешеләрҙән дә өйрәнеүен ("Мин уларға ҡарайым да киреһен эшләйем”. 8, №56), "Ниңә ҡарарағa?" – тигәне сәсән булып танылыр был кешенең кесе йәштән үк тапҡыр һүҙле булыуын беләбеҙ. "Атымды ҡарап тор әле", – тигән байҙан ул аттың ҡасын китмәҫ мал икәнен белгәс: "Улай булғас, ниңә ҡарарға?” – тип

яуап бирә (8, №58). "Ыҙғыштан һуң" көләмәсе иренең аҡылға килеренә өмөт итеүсе ҡатынды алғы планға ҡуя: ире, уға өйләнеп, алйот булыуына үкенгәс, ҡатын: "Быны мин беләинем, ләкин, аҡылға ултырырһың, тип өмөт иткәйнем", – ти. (8, №206).

Әгәр инде Ерәнсә сәсән тураһындағы көләмәстәр шәлкемен (һәр хәлдә, баҫылғанын) тулы хәлендә күҙҙән кисерһәк, аҡылға зирәк, дипломаттарса нескә фекерләүсе, ғәҙел хөкөмдар, тоғро ир, ил намыҫын һынландырыусы сәсәндең типик образы балҡып китер ине.

"Ыҙғыштан һуң" көләмәсен "Көләмәстәр" йыйынтығындағы "Ир менән ҡатын" рубрикаһы менән билдәләнгән бүлектәге көләмәстәр контексында ҡараһаҡ, унда ғүмер буйы бер түшәкте, бер ҡашыҡты уртаҡлашыусы, әммә ғүмер баҡый үҙ-ара аңлаша алмаусы ғаилә башлыҡтарының типик образы һынланғандай булыр.

***ғ) Көләмәс сюжетының зирәк менән зирәк, хәйләкәр менән хәйләкәр бәйгеһенә ҡоролғаны***

Ҡайһы саҡта тапҡырлыҡ һәм отҡорлоҡ бәйгеһенә зирәк менән зирәк, хәйләкәр менән хәйләкәр, зирәк менән хәйләкәр сыға. Бындай саҡта уҙағын һынап ҡараусы йәғни зирәклек, хәйләкәрлек, мутлыҡ бәйгеһен кем асып ебәрә, шул үҙе төп башына ултыра. Алдар һәр саҡ Ерәнсә сәсәнгә: " Минең бер һорауыма яуап бирһәң, һиңә – йөҙ һум. Яуап бирә белмәһәң, һинән йөҙ һум", – ти ҙә башындағы сәс төгөнөң иҫәбен һорай. Көләмәсте диҡҡәт менән тыңлаған кеше шуға иғтибар итергә тейеш: бер генә һорау бирәсәген әйтеп, Алдар үҙенең уҙағы Ерәнсәгә ирек ҡуя. Ә унһы был форсатты бик оҫта файҙалана: башына ниндәй һан килә, шуны әйтә лә ҡуя. "Башыңда, – ти, – бөтәһе мең ике йөҙ ҡырҡ туғыҙ бөртөк сәс бар", – ти. Ерәнсә, өс, тиһә лә, Алдар унның менән бәхәскә керә алмаҫ ине. Ун, тиһә лә. Сөнки был урында яуаптың дөрөҫ йә яңылыш булыуы мөһим түгел. Иң мөһиме – формаль яғы: һорау мотлаҡ яуап талап итә. Яуап бирелә, ә унның мәғәнәһендә эш юҡ. Көләмәстә Алдар: "Теүәл шунса сәс булыуын ҡайҙан белдең?" – тип һорай. Шунның менән үҙе үк шартты боҙа. Ерәнсәгә: "Быныһы инде – икенсе һорау", – тип әйтергә генә ҡала. Тимәк, зирәклектә арҙаҡлы Ерәнсә сәсән хәйләкәрлектә ат ҡаҙанған Алдарҙы төп башына ултырта ("Алдарҙың Ерәнсә сәсәндән отолғаны", 8, №93).

"Ерәнсә сәсәндең Алдарҙан отолғаны" (8, №94) тигән көләмәстә иһә, исеме менән үк аңлашылыуынса, һөҙөмтә әле әйткәндең киреһе булып сыға. Был ике көләмәсте йәнәш ҡарағанда, шул иғтибарға ташлана. Халыҡ, әйтерһең, юрый ғына зирәктең зирәге тигән даны сыҡҡан Ерәнсәне атаҡлы хәйләкәр менән сағыштырып ҡарай. Бер осраҡта – береһен, икенсе юлайы – икенсеһен алға сығарып, уларҙы интелектуаль яҡтан тиңгәреп ҡуя. Шунның менән уларҙың бер-береһенә торошлоҡ итерлек зиһене камил әҙәмдәр икәнен күрһәтә. Шулай зирәк менән хәйләкәрҙе тиңгәреүҙә халыҡтың уларҙы тиң яратыуы сағыла.

Ерәнсә сәсәндең ҡыҙ күҙләүе тураһындағы көләмәстәрҙә лә ошондай уҡ мөнәсәбәттәрҙе аңғарырға була. Дөрөҫ, әле генә ҡаралған ике миҫалдан айырмалы рәүештә, уларҙың бөтәһендә лә һуңғы яуапты зирәк ҡыҙ бирә ("Ерәнсәнең сәсән ҡыҙ менән осрашҡаны", "Ерәнсәнең сәсән ҡыҙ менән әйтешкәне", "Ерәнсәнең өйләнгәне", "Ерәнсәнең кәләш алғаны", 8, №№95–98). Ҡарамҡҡа, көләмәстәр зирәк ҡыҙға өҫтөнлөк биргән кеүек. Әммә әйтелгән көләмәстәрҙең финалы был фекерҙән кире ҡайтырға мәжбүр итә. Унда Ерәнсәнең сәсән телле зирәк ҡыҙҙы оҡшатыуы, унының отҡорлоғон хуплауы, уны кәләш итеп алырға ниәтләүе (ҡайһы берҙә алып ҡуйыуы) тураһында әйтелә. "Әһә, был ҡыҙ миңә ҡатынлыҡҡа ярай икән", – тип уйлаған да Барсынбикәне кәләш итеп алған, ти". Бына шулай тамамлана, мәҫәлән, "Ерәнсәнең кәләш алғаны" көләмәсе (8, №61). Быңдай көләмәстәрҙең башында уҡ Ерәнсәнең кәләшлеккә ҡыҙ күҙләргә сығып китеүе тураһында әйтелеүсән. Тимәк, башҡа көләмәстәрҙән айырмалы рәүештә, быңдай осраҡтарҙа иң аҙаҡ ҡыҙҙың сәсәндәр сәсәне булған Ерәнсәнең ауыҙын ябырлык һүҙ әйтеү-әйтмәүен белдереү – төп маҡсат түгел. Уның төп маҡсаты – Ерәнсә сәсәндең үҙенә кәләшлеккә "кандидат" ҡыҙҙың зирәклек кимәлен, йәғни ошо йәһәттән үҙенә тиңме, түгелме, шуны асыҡлау. Шуға ла көләмәстең ҡыҙ әйткән тапҡыр яуап менән тамамланыуы – бер ҙә генә Ерәнсәнең еңелеүен раҫлау түгел, ә уның зирәклеге менән үҙ тиңен табыу һәләтен раҫлау. Ҡыҙҙың мәргән яуабы, шуға күрә лә – төп мәсьәлә талап иткән яуап ул. Тимәк, ҡарамаҡҡа, ҡыҙға өҫтөнлөк бирелгән кеүек булһа ла, бында ла беҙ "персонаждарҙың интеллектуаль мөмкинлектәрен тиңгәреү" принцибының бойомға ашыуы менән осрашабыҙ.

***д) Бер ҡатлылар һәм иҫәрҙәр әйтешенә нигеҙләнгән көләмәстәр***

Әле һүҙ барған принцип зирәктәр менән хәйләкәрҙәрҙең бөтөнләй киреһе булған бер ҡатлылыр һәм иҫәрҙәр тураһындағы көләмәстәрҙә лә күҙәтелә ("Өс һаңғырау", "Ҡоҙағый ҡайҙа бара?", 8, №№514, 516). Ике ҡоҙағый тураһындағы көләмәскә туҡталайыҡ. Көләмәстә уларҙың береһенә лә өҫтөнлөк бирелмәй. Сөнки уларҙың икеһе лә – бер ҡатлы. Дөрөҫ, уңайһыҙ хәлгә төшөүҙәре һаңғыраулыктарынан килә. Әммә көләмәс өсөн быньң принципиаль әһәмиәте юҡ. Хәйер, һүҙҙе башлаусы ҡоҙағый унһыҙ ҙа үҙен бер ҡатлы итеп күрһәтеп, өлгөрә.Ҡултығына миндек ҡыҫтырып китеп барыуын күрә тора: "Ҡоҙағый, ҡайҙа бараһың? Мунсағамы?" – тип һорау биреүе, шундай фекер тыуҙырып өлгөрә лә инде. Икенсеһенең иһә: "Ю-юҡ, мунсаға", – тип яуап биреүе, силәгенә күрә – ҡапҡасы, тигәндәй, һуңғыһының тәүләп һорау биреүсенең ише икәнен аңлата.

Ошо урында көләмәс тамам булырға ла мөмкин. Әммә тәүге ҡоҙағыйҙан тағы бер реплика әйттерелә: "Ә-ә-ә, мин мунсаға бараһыңмы, тип уйлаһам!". Быныһы иһә уның бер ҡатлы икәнлегенә шик ҡалдырмауға

тәғәйен контроль-реплика. Шул "контроль-реплика" былай ҙа көслө генә асылған комик эффектты бермә-бер тағы көсәйтә төшә генә. Унының художестволы тәғәйенләнеше лә шул.

*е) Комик эффект тыуҙырыуға булышыусы алымдар*

Көләмәстәр кеше тормошоноң бөтә яҡтарын да байҡай, барыһын да йә сатира, йә юмор күҙлегенән баһалай. Уларҙың комик эффект тыуҙырыу палитраһы бик тә бай.

Комик эффект тыуҙырыу алымдарының нисек ҡулланылышы көләмәстәрҙәге типиклаштырыу принцибына бәйләнгән: йәғни комик эффект тыуҙырыу алымдарының берәүҙәре – тапҡырлыҡты хуплаусы көләмәстәрҙә генә, икенселәре – бер ҡатлылыҡты хурлаусыларында, өсөнсөләре – ике төркөмдә лә ҡулланыла.

*I. Тапкырлык, зирәклек, хәйләкәрлек сифаттарына эйә булған герой сығыш яһаған көләмәстәргә кинәйәле һөҙөмтә хас. Кинәйәләүгә шундай алымдар сәбәпсе була:*

1) уй йомоп һөйләшеү (Тыуған яғына китергә теләй”, Өйҙәге һымаҡ”, “Һәләтле һатыусы";

2) башҡа кеше (башҡа нәмә) тураһында һүҙ алып барып, эргәләге йә үҙен күҙ уңында тотоу ("Иҫенә төшөрә", "Кеше күңелле ир" (8, №935);

3) тура мәғәнәһендә әйтелгән һүҙярҙамында унын күсмә мәғәнәһен аңлатыу ("Кемдең эсе янғанын Алла ғына белә"(8, №145);

4) партнерҙың һүҙен, ҡыланышын, логикаһын унын үҙенә ҡаршы файҙаланыу("Сәлләле кеше", "Кем кемдән көлгән?"; 8, №№136, 257);

5) геройҙың яуабы менән ҡылған эштең көтөлгәнгә тура килмәүе ("Мәсәлимов һүҙ һорай", 8, №318);

6) бер үк һүҙҙең йә тар мәғәнәлә, йә киң мәғәнәлә, йә бер юлы ике мәғәнәлә ҡулланылыуы ("Ниңә ҡарарға?"; 8, №91);

7) файҙалы булғаны өсөн, уйҙырмаға ышанған булып ҡыланыусыны "зарарлы" уйҙырма менән төп башына ултыртыу ("Хужаның байҙы отканы", 8, №128);

8) раҫлап, хуплап әйтелгәндең нигеҙен юҡҡа сығарыу ("Брак ебәрмәй");

9) кире күренештән ыңғай йәки ыңғайҙан кире һығымта яһау ("Танылған автор", "талант", "Ни өсөн ҡунаҡты оҙаталар?");

10) һөҙөмтәне – сәбәп, сәбәпте һөҙөмтә итеп ҡарау ("Һағынһалар");

11) һынамаҡ өсөн кире кәңәш биреү (Сираҡан, Сәйфулла көләмәстәренең күбеһе), һ.б.

*II. Беркатлылыктан көләүсе көләмәстәрҙә комик эффект, ғәҙәттә, алогизм ярҙамында тыуҙырыла. Алогизмға түбәндәгеләр миҫал::*

1) йәнһеҙ әйберҙәрҙе – йәнләндереп, йәнлеләрен кешеләштереп күҙ алдына килтереү ("Хужа баҙарҙан ҡайта", "Хужаның эткә бурысҡа биргәне" (8,№№173, 174);

2) сәбәп – һөҙөмтә бәйләнешен бутау ("Музейҙа", "Хужа шатлана");

3) геройҙы үҙ фаразына (уйҙырмаһына) үҙе ышаныуы ("Хужаның хазина тапҡаны (8, №184);

4) метафораны, метонимияны ғәмәлләштереү ("Мыйыҡ" (8, №314);

5) төш менән өндө бутау ("Хужа Насретдин төшөндә", "Төш"(8, №№204, 205));

6) бер осраҡҡа яраҡлы ысулды (тәжрибәне), икенсе осраҡтарға күсереү ("Хужа ҡыҙ бирә" (8, №172);

7) күренеште, һүҙҙе баһалағанда, уларҙың асылын (сәбәбен, маҡсатын) иҫәпкә алмау ("Концертта", "Эш кешеһе");

8) тышҡы билдә буйынса, оҡшатыуға нигеҙләнеп кенә, фекер йөрөтөү ("Иң ҡарт музыка ҡоралы";

9)геройҙың сит телде белмәүе, үҙенсә аңлауы; белмәгән көйөнсә, сит телдән отоп алған һүҙҙе урынһыҙ ҡулланыуы, буталап маташыуы ("Орскийға бармам!", "Русса өйрәнеүселәр" (8, №№540, 1089);

10) күпте өмөт итеп, әҙҙән буш ҡалыу ("Хөкөм" (8, №283);

11) үлсәм төшөнсәләрен бутау ("Хужаның үлсәме", "Хужа Насретдин ҡатынына урын биргән");

12) хыялды бойомға ашҡан итеп белеп, шуға ысынлап ышаныу ("Көн элек илаған");

13) өлөштө бөтөндән мөһимерәк күреү ("Хужа Насретдиндың дağа тапҡаны" (8, №154);

14) үҙендә булмаған сифатты бар тип күрәһтергә маташыу ("Белдекле ир", " Эсперанто "һ.б.).

Һаналған ике төркөмдө бер-береһе менән сағыштырғанда, I төркөмдәге алымдарҙың күбеһе II төркөмдәгеләренең киреһе булыуы асыҡлана. Мәҫәлән, отҡорҙар, зирәктәр үҙҙәренең уҙаҡтары тура мәғәнәлә әйткәнде күсмә мәғәнәгә күсерһәләр (I,3-сө осраҡ), бер ҡатлылар, киреһенсә, күсмә мәғәнәлә әйтелгәнде туранан-тура аңлай (II,4-се осраҡ); үҙҙәренә файҙалы булғаны өсөн генә, хәйләкәрҙәрҙең уйҙырмаһын реаллек тип ҡабул итеүселәр аҙаҡ үҙҙәренә зыянлы уйҙырмаға ла ышанырға тейеш булалар (I, 7-се осраҡ); бер ҡатлы герой иһә башҡаларҙы ла алдай, үҙенең алдағанына үҙе лә ышана(II,3-се осраҡ) һ.б.

*III. Зирәктәр, хәйләкәрҙәр тураһындағы көләмәстәрҙә лә бер ҡатлылыр хаҡындағыларында ла ҡулланыла торған комик эффект тыуҙырыусы уртаҡ алымдар:*

1) яңғыраштары оҡшаш йә омоним һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе яңылыш аңлауы арҡаһында, бер ҡатлы герой көлкөгә ҡала ("Ат!", "Лыбырҙамай, эс" (8, №№599, 1051), ә хәйләкәрҙәр юрый яңылыш аңлаған кеше булып ҡылана ("Хужа һалып ашаған");

2) шаяртып әйтелгән һүҙҙе, иронияны бер ҡатлылар ысынға алһа ("Кейәү, ҡәйнә, врач", 8, №478), отҡорҙар ысынға алған кеше булып ҡылана ғына ("Хужаның ишәген ҡазый иткәндәр, ти");

3) һөйләмдә һүҙҙәрҙең урынын алмаштырыу йә берәй һүҙҙе төшөрөп ҡалдырыу берәүҙәрҙе бер ҡатлы хәлгә ҡуя ("Быҙауҙы үгеҙ ашаған", 8, №531), хәйләкәр герой иһә бындай буталышты махсус файҙалана ("Яхъя бабай көләмәстәре", 8, №№235, 238);

4) герой үҙ фекерен үҙе кире ҡаға ("Ирлегемде итәм",8, №460);

5) шаштырыу алымдарының ҡулланылышы ла көләмәс геройының ниндәй типҡа ҡарауына ярашлы ике төрлө комик эффект бирә. Мәҫлән, самаһыҙ шаштырырға яратыусы ҡатындың һүҙенә ҡарағанда, ул үҙенең оло улынан йәшерәк булып сыға ("Йәш ҡатын"). Был бер ҡатлылыҡ, әлбиттә. Шаштырыу алымы ике хәйләкәрҙең тел сарлауы, алдашыуҙа ярышыуҙары тураһындаы көләмәстәрҙә лә ҡулланылыусан ("Ике алдаҡсы", "Ҡайҙа эҫерәк", 8, №№728, 729).

***е) Бер көләмәсте форма һәм тематик яҡтан система хасил итеүсе башҡалары контесында ҡарауҙың әһәмиәте***

Ҡайһы саҡта теге йәки был уртаҡ алымдың ҡулланылышының ниндәй һөҙөмтә биреүенә (иҫәрлектән, бер ҡатлылыҡтан көләме, әллә отҡорлоҡто, хәйләкәрлелекте хуплаймы икәненә) төшөнөүе бик үк еңелдән булмай. "Тура әйтергә ярата" көләмәсен (8, №259) алып ҡарайыҡ. "Тура әйтергә яратам", – тигән кешенән нимәне яратмауын һорағас, ул: "Тура әйткәнде," – ти. Торғаны – башватҡыс! Ул кешеләр берәүҙәр хәйләкәрҙе, икенселәре йүләрҙе танырға мөмкин һәм ике яҡ та хаҡлы булыр. Тағы – башватҡыс! Бындай "бәхәсле мәсьәләләрҙе" хәл иткәндә, "тауышҡа ҡуйыу" принцибы үҙен аҡламай, әлбиттә. Әгәр инде уны башҡа көләмәстәр системаһында ҡараһаҡ, мәсьәлә ярайһы асыҡланыр. Ысынлап та, "Тура әйткәнде ярата" көләмәсе кеүек миҫалдарҙы хәйләкәрҙәр тураһындағы көләмәстәр урталышында йәки геройы урынына популяр хәйләкәрҙәр исемен ҡуйып ҡараһаҡ, ул хәйләкәрлекте хуплаусы көләмәс кеүек ҡабыул ителер ине. Әгәр инде уны бер ҡатлылыр тураһындағылар рәтендә, етмәһә, геройын берәй танылған иҫәр исеме менән алмаштырһаҡ, ул иҫәрҙәр тураһындағы көләмәс һымаҡ тойолор ине. Был миҫал беҙҙе шундай һығымтаға килергә мәжбүр итә*: һәр көләмәс үҙаллы художестволы берәмек булһа ла, уның мәғәнәһе, поэтик үҙенсәлеге, форма һәм тема йәһәтенән тотош система хасил итеүсе башҡа жанрҙаштары контексында ҡарағанда ғына, башҡа көләмәстәр контексында ғына тәрәнерәк асылырға мөмкин.*

*ж) Тел саралары һәм һамактың комик эффект тыуҙырғаны*

Көләмәстәрҙең комик эффектка ирешеүенә һүҙ уйнатыу, тел көрмәлдереү алымдары ла, Ерәнсә сәсән, Хужа Насретдин, Алдар, Сираҡан (Һилаҡан), Бер Сәнсәр (Соҡот) ише популыр көләмәс геройҙарының исемдәре лә булыша.

Көләмәсте көләмәс иткән комик эффект тыуҙырыу алымдары юғарыла телгә алынғандары менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Башта иҫкәртелгәненсә, улар ифрат күп төрлө. Тик көләмәстәрҙе тикшереп кенә лә, ғөмүмән, комиклыҡ поэтикаһы хаҡында тулы бер энциклопедик хәҙмәт яҙырға ла булыр ине.

Көләмәстәрҙә, айырыуса сәсмә нәсихәттәрҙә поэтик сара рәүешендә мәҡәлдәр ҡулланылырға ла мөмкин. Мәҡәлдәр һөйләнәсәкте алдан иҫкәртеү йә һөйләнгәнгә һығымта яһау хеҙмәтен атҡара.

Көләмәс поэтикаһында, ярҙамсы ролдә булһа ла, йыр, таҡмаҡ, һамаҡ, бәйеттәр файҙаланылған осраҡтар ҙа күҙәтелә. "Сираҡандың мулла булғаны" көләмәсендә һәм уның варианттарында, мәҫәлән, доға урынына юҡ бар һүҙҙе һамаҡлап, ауырыу казак байын "имләүсе", иптәше был мутлыҡты фаш итеп ҡуймаһын тип, уны шулай тип иҫкәртә:

Мифтахетдин, сығып көл,
Атҡа бесән һалып кер:
Был байҙарҙы юнырбыҙ –
Бер бот онло булырбыҙ...(8, №95).

Сираҡандың ауыҙынан сыҡҡан был һамаҡ көләмәстә йәшерен тел сараһын үтәй. Шулай итеп, шиғри юлдар, ҡарамаҡҡа, комиклыҡ менән бер ниндәй уртаҡлығы булмаһа ла, вазифаһы йәһәтенән көләмәстә комик эффект тыуҙырыуға тәғәйенләнгән һәм шул тәғәйенләнеш аҡлана.

* * *

Көләмәс – йыйнаҡ халыҡ сәсмәүере. Тик айырым осраҡтарҙа ғына бер теҙмә форма ҡалыбына һалыныһғандары ла осраштыра. "Көләмәстәр" йыйынтығына индерелгән "Русса өйрәнгәндә" көләмәсе – шуға миҫал (8, №1089). Уның варианттары араһында теҙмә юллылары ла, сәсмә әҫәр формаһындағылары ла бар.

Ғөмүмән, көләмәс – идея тематик яҡтан да, поэтика йәһәтенән дә бик оригиналь жанр. Унда халыҡтың философияһы ла, педагогикаһы ла, үткәне лә, бөгөнгөһө лә, яҡты идеалдар рәүешендә киләсәге лә сағыла. Шуға ла улар беҙгә эстетик ләззәт биреү менән генә сикләнмәй, халҡыбыҙ тарихы тураһындағы мәғлүмәтебеҙҙе лә байыта.

ӘҘӘБИӘТ

1. Азадовский М.К. История русской фольклористики. – М.: Учпедиз., 1963. Т.2. –364с.

2. Алласыз көлү / төҙ. Булат Ишемгулов. – Уфа, 1930.

3. Амантай Ғ. Башҡорт көләмәстәренең төҙөлөшө // Башҡортостан. – 1935. – 29 дек.
4. Амантай Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө, 1960. – 180 б.
5. Амбайниц О. Предисловие // Латышские народные анекдоты / сост. К.Арайс. – Рига: Изд-во АН Латв.ССР, 1963.
6. Башкирское народное творчество / сост. А.М.Сулейманов; вступит, статья и коммент. Л.Г.Барага и А.М.Сулейманова. – Уфа 1991. – Т.6. Шуточные сказки и кулямасы. – 465 с.
7. Башҡорт халыҡ ижады: 3 томда / төҙ. Ә.Харисов. 2-се том. – Өфө, 1959. – 183 б.
8. Башҡорт халыҡ ижады: Көләмәстәр / төҙ., баш һүҙ, иҫкәрмәләр авт. Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө, 1985. – 384 б.
9. Башҡорт халыҡ әкиәттәре / төҙ. Ғ.Сәләм. – Өфө, 1939. – 199 б.
10. Башҡорт әҙәбиәте: 8-се класс өсөн дәреслек / Ә.Харисов, К.Әхмәтйәнов. – Өфө 1982.
11. Борев Ю. Комическое. – М.: Искусство, 1970. – 269 с.
12. Вилданов Ғ. Төрөк милләттәре әҙәбиәттәрен тикшереү һәм уларҙың йәкүне // Башҡорт аймағы. – 1926. – №2–3. – 3–20 –се б.
13. Волков Р.М. Сказки. Розыскания по сюжетосложению народной сказки. – Харьков: Госиздат Украины, 1924. – Т. 1– 236 с.
14. Гусев В.Г. Эстетика фольклора. –М.: Наука, 1976. –320 с.
15. Далгат У.Б. Фольклор и литература народов Дагестана. – М.: Изд-во Восточной литературы, 1964. –206 с.
16. Дорри Дж. Персидская сатирическая проза: Традиция и новаторство. – М : Наука, 1977. – 216 с.
17. Думбадзе Н. С юмором не расставайтесь // ЛГ. – 1978. – №4 .
18. Забавные рассказы про великомудрого и хитроумного Бирбала, главного советника индийского падишаха Акбара. – М.: Наука, 1978. – 270 с.
19. Золотарев А.М. Родовой строй и первобытная мифология. – М.: Наука, 1964. –328 с.
20. Кирәй Мәргән. Һуғыш фольклоры. – Өфө, 1944.
21. Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ көләмәстәренең жанр үҙенсәлеге тураһында // Әҙәбиәт, фольклор, әҙәби мираҫ. – Өфө, 1975. – 1-се кит.–143–150-се б.
22. Кирәй Мәргән. Мәңгелек шишмә. – Өфө, 1978, – 189 б.
23. Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: Юғары укыу мәктәптәренең филология факультеттары өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәрр. Ә.М.Сөләймәнов. – Өфө, 1981. – 232 б.
24. Книга о простаках: Дахо-наме. – М., 1948,
25. Көлкө капчыгы / Жыючысы Ш.Бабич. – Уфа, 1916.

26.Луначарский А.В. О смехе // Соч. Т.8. – М.: ГИХИ, 1967. – С. 531–538.

27. Мелетинский Е.М. Происхождение героического эпоса: Ранние формы и архаические памятники. – М.: Восточ. лит., 1963. – 462 с.

28.Муратов С.Н. Устойчивые сочетания в тюркских языках. – М., 1961.

29. Мәхмүтов Х. Татар халык мәҙәкләре // Татар халык ижаты / төз. Х.Ш.Мәхмүтов, А.И.Садикова; искәрмәләрне әзерл. А.И.Садикова. – Казан, 1979.

30. Пельтцер А. Происхождение анекдотов в русской народной словесности // Сборник Харьковского историко-филологического общества. – Харьков, 1899. – Т. II. – С. 57–177.

31. Пермяков Г.А. От поговорки до сказки: Заметки по общей теории клише. – М.: Наука, 1970.

32. Пермяков Г.Л. Проделки хитрецов / сост., вступ. ст. и общ. ред. текстов Г.Л.Пермякова. – М.: Наука, 1972.

33. Персидские анекдоты / пер. с персид. Н.Османова. – М.: Изд-во вост. лит., 1963.

34. Райкии А. Я верю в человека, человечество, человечность // ЛГ. – 1982. – 1 янв.

35. Сидельников В.М. Идейно-художественная специфика русского народного анекдота // Труды Университета Дружбы народов.– М., 1964.- Т.4: Вопросы литературоведения. Вып.1.

36. Соп Иван. Ходжа Насретдин // Курьер (ЮНЕСКО). – 1971. – Май.

37. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре // Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 4-се кит. / төҙ. Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. С.Ә.Галин. – Өфө, 1981.

38. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре / яуаплы мөхәрр. Ғ.Б.Хөсәйенов. – Өфө,1990. – 272 б.

39. Сулейманов А.М. Башкирские анекдоты о жителях местных селений // Фольклор народов РСФСР. – Уфа, 1986. – С. 135–138,

40. Сумцов Н.Ф. Анекдоты о глупцах // Сборник Харьковского историко-филологического общества. – Харьков, 1899. Т. 11. – С. 119–315.

40a. Turk dunyasi ortak edebiyati: Turk dunyasi ortak edebiyat Kavramalari ve Termineri Ansiklopedik sozlugu / Baskan Dr. Sadik Tural. – Ankara: FYK Ataturk Kultur Baskanligi, 2001. – Gild 1. – 574 s.

41. Харитонов М.С. Многоликий Насретдин // Двадцать три Насретдина. – М.: Наука, 1978, – С. 5 – 36.

42. Хатипов Ф. Эпик жанрлар. – Казан, 1978. – 144 б.

42a. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2006. – 81 – 82-се б.

43. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге.– Өфө,1965.– 259 б.
44. Яхин А.Г., Бакиров М.Х. Фольклор жанрларын система итеп тикшерү тәжрибәсе: Мәҙәкләр, бәетләр. – Казан: КДУ нәшриәте, 1979. – 198 б.

**Һорауҙар һәм эш**

1. Башҡа халыҡтарҙағы аналогтары хаҡында әйтеп,башҡорт көләмәстәренең өйрәнелеү кимәлен билдәләгеҙ.
2. Көләмәс һәм уның донъя халыҡтарына хас аналогтарының килеп сығышы хаҡында ниндәй ҡараштар бар, һеҙ уларҙың ҡайһынының хуплайһығыҙ?
3. Милли юмор йәки юморҙың миллилеге хаҡында һеҙ ни уйлайһығыҙ?
4. Көләмәстәрҙең миллилеге һәм социаль йөкмәткелеге нисек билдәләнә?
5. Көләмәстәрҙең жанр сиктәре: улар фольклорҙың ниндәй жанрҙарына яҡын, улар менән нисек “алыш-биреш” итә?
6. Көләмәстәрҙе ниндәй принциптарҙан сығып төркөмләйҙәр? Һеҙ үҙегеҙ уларҙы нисек (ниндәй принциптан сығып) төркөмләр инегеҙ? Тематик һәм жанр билдәләре принцибынан сығып төркөмләүгә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ: ҡайһылай төркөмләүгә өҫтөнлөк бирер инегеҙ?
7. Көләмәстәрҙең жанр төрҙәрен әйтеп бирегеҙ. Һеҙҙең яҡтарға, студент, ҡала тормошона хас лаҡаптар, көлмәстәр, мәрәкә хәлдәр, нәсихәттәр хаҡында әңгәмә ҡороғоҙ. Шундайҙарҙан үҙегеҙ ишеткән, белгәндәрегеҙҙе яҙып бирегеҙ.
8. Нимә ул комиклыҡ поэтикаһы? Көләмәстәргә ниндәй поэтик үҙенсәлектәр хас? Комиклыҡ эффекты ниндәй алымдар ярҙамында тыуҙырыла?
9. Юмор, сатира, ирония, пародия, сарказм хаҡында әҙәби энциклопедияларҙан, әҙәби һәм фольклор терминдары һүҙлектәренән үҙегеҙ аңлағанса билдәләмәләр яҙып алығыҙ. Үҙ-ара көләмәс һөйләшеү: берәү бер көләмәс әйтә, ҡалғандар был әҫәрҙе нимә көләмәс итеүен аңлата.

# II БҮЛЕК
# ЛЕГЕНДАЛАР ҺӘМ РИҮӘЙӘТТӘР

Фольклор ғилемендә халыҡ ижадының әкиәт, көләмәс, инанмыш, шулай уҡ хәтирәләр рәтенә инмәгән сәсмә әҫәрҙәрҙең жанр сиктәрен, булмышын билдәләү һәм уларҙы атап йөрөтөү тәңгәлендә элек-электән фекер айырымлыҡтары, буталсыҡтар йәшәп килгәне мәғлүм. Башҡортостан халыҡ мәғарифы комиссариатының әҙәбиәт йыйыу бүлексәһе тарафынан 1921 йылда баҫтырып сығарылған белдереүҙә был жанрҙар ҡисса, ү ә ҡ а е т, риүәйәт, «халыҡ ҡаһармандары хаятынан алынған... һәм төрлө дәүерҙәге тарихи ваҡиғалар тураһындағы хикәйәләр» тип исемләнгән. Әммә белдереүҙе иғлан итеүселәр ул атамаларҙы йөрөткән формаларҙың жанр билдәләре хаҡында бер ни ҙә әйтмәгән. Халыҡ ижады өлгөләрен йыйыусылар өсөн 1922 йылда сығарылған тәүге ҡулланмала ундай әҫәрҙәрҙе билдәле бер төркөмдәргә бүлеүгә ынтылыш яһала. Унда «Салауат, Алдар, Сура, Ҡараһаҡал, Ғабдулла кеүек боронғо батырҙар тураһында һөйҙәүсе», йәғни тарихи характерҙағы әҫәрҙәр «ҡарһүҙ – иртәге»нән айырып, риүәйәттәр тип, ер-һыу атамаларының аңлатмалары «йылғалар, күлдәр, тау-таш, соҡорҙар, ағастар исеменә мүтәғәллит хикәйә» тип аталған. Әммә был бүленеш фольклор менән ҡыҙыҡһыныусылар араһында яҡлау тапмаған. Славян телле фольклорҙы өйрәнеү ғилемендә “легенда”, “предание”[3] тип йөрөтөлгән әҫәрҙәрҙең башҡортса аналогына ҡағылышлы хеҙмәттәрендә һәр автор белдереүҙә һәм ҡулланмала күрһәтелгән терминдарҙы ирекле ҡулланған, үҙенсә аңлатҡан, һәр кем уларға үҙе аңлаған төшөнсәне тағырға тырышҡан. Һөйләнә торған әҫәрҙәрҙең барыһын да дөйөмләштереүсе уртаҡ ҡарһүҙ (ҡарыһүҙ) термины менән шул жанрҙарҙың һәр береһен атап йөрөтөү ғәҙәте лә булған. Мәҫәлән, Ғәбделәхәт Вилданов батырҙар тураһындағы тарихи характерҙағы әҫәрҙәрҙе тарих тип тә, хикәйә тип тә, аҙаҡ килеп, әкиәт, иртәге йәки ҡарһүҙ тип тә билдәләгән. Хәбибулла Ғәбитов та үҙенең хеҙмәттәрендә жанр атамаларын ҡулланыуҙа принципиаллек күрһәтмәгән. Бөгөнгө беҙ әкиәт тип белгән сәсмә ижад төрө күренешен дә (вид), иртәк тип таныған «Ҡуҙыйкүрпәс», «Алып батыр» кеүек әҫәрҙәрҙе лә ул ҡараһүҙ (хикәйә) тип атаған. Был, моғайын, жанрҙар араһындағы сикте айырып еткермәүҙән килгәндер. Сәғит Мирастың “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡуңыр буға”,

[3] Легенда (legenda)– латин һүҙе. Ул, изгеләрҙе иҫкә алғанда, уларҙың тәржемәи хәле хаҡында укыуға тәғәйен текст тигәнде аңлатҡан. Фольклор ғилемендә лә тәүҙәрәк христиан яҙмаһы менән бәйле ауыҙ- тел әҫәрен шулай атап йөрөткәндәр. Тора-бара, уларҙан тыш, төрлө ваҡиғаларҙы, тәбиғәт күренештәрен фантастик юҫыкта сағылдырыусы сәсмә әҫәрҙәрҙе легенда, тип атай башлайҙар. “Предание” (русса; украинса - “переказ”, белорусса - “паданне”) ике мәғәнәгә эйә:1) булып үткән ваҡиғалар, элекке реаль шәхестәр хаҡында ҡағыҙға теркәлмәгән, телдән генә һөйләп йөрөтөлгән, художестволы уйҙырмаһында фантастика өҫтөнлөк итмәгән сәсмә әҫәр; 2) сәсмә һәм поэтик формала үткән хәлдәр тураһындағы телдән мәғлүмәт биреү (8, 128, 275).

“Ҡарасәс” кеүек иртәктәрҙе “башҡорттарҙың аусылыҡ дәүерендәге» боронғо тормоштарын асып биреүсе әкиәттәр”, тип, Д. Юлтыйҙың хатта йыр тарихтарын да әкиәт тип атауына ла шул сәбәпсе булған, әлбиттә. Әйтелгәненсә, бәйән итеүгә ҡоролған әҫәрҙәрҙе тарихи Башҡортостандың көньяғында йәшәүсе башҡорттар әле лә “ҡара һүҙ”, “ҡарһүҙ” тип кенә белә.

Нисек кенә аталып йөрөтөлмәһендәр, бындай әҫәрҙәрҙә телгә алынған хәл-әхүәлдәр, ваҡиғалар, күренештәр, хатта фантастика менән һуғарылған сүрәттә лә, мотлаҡ ҡасандыр тормошта булған хәл тип аңлатыла һәм улар тыңлаусы тарафынан да шулай ҡабул ителеүгә дәғүә итә. Шуға нигеҙләнеп, 30-сы йылдарҙан башлап, башҡорт фольклорсылары төрлө атамалар урынына “легенда” терминын ғына ҡуллана башлағандар. Был яңылыҡ термин буталсығынан ҡотолорға форсат бирә, әлбиттә. Шул уҡ ваҡыта ул үҙ нәүбәтендә икенсе буталышҡа юлыҡтыра. Сөнки уларҙың баштан-аяҡ фантастик уйҙырмаға ҡоролғаны ла, конфликттың сиселешендә фантастика, тылсым хәл иткес роль уйнағаны ла, тормошта ысынлап та булған йә булыуы ихтимал ваҡиғаға, реалистик уйҙырмаға нигеҙләнгәндәре лә, ирекһеҙҙән, бер жанрға индерелде. Шунан ҡотолоу ниәтенән уларҙың тәүгеләрен “әкиәт-легенда” (Н.К. Дмитриев, М.Х. Минһажетдинов, Ә.М. Сөләймәнов), ә “легенда” тигәндә, һуңғыларын ғына күҙ уңында тоттолар. Шул уҡ ваҡытта легенда термины менән бер рәттән, йә уның синонимы рәүешендә йә рус фольклористикаһындағы “предание” мәғәнәһендә (К. Мәргән, Ә. Харис),“риүәйәт” термины ла ҡулланылғыланы. Бара-тора, аныҡыраҡ әйткәндә, нигеҙҙә, XX быуаттың 70-се йылдары башынан, ғәрәпсәнән тәржемә иткәндә, “борон үткән хәл-ваҡиғаларҙы бәйән итеүсе (улаҙың дөрөҫлөгөн дәлилләүсе) хикәйә” мәғәнәһендәге тап ошо термин башҡорт фольклор ғилемендә нығынып ҡалды.

*Шулай итеп, әкиәт, көләмәс, инанмыш һәм хәтирәләр рәтенә инмәгән, бәйән ителгән ваҡиғалар, нисек кенә ғәҙәттән тыш итеп тасуирланмаһын, улар тормошта ысынлап та булған, тип раҫлаусы ҡарһүҙҙәрҙең баштан-аяҡ фантастик уйҙырмаға ҡоролғандары йә сюжет конфликтының сиселешендә фантастика, тылсым хәл иткес роль уйнағандары – барыһы легенда тип, тормошта ысынлап та булған йә булыуы ихтимал ваҡиғаға, реалистик уйҙырмаға нигеҙләнгән ҡарһүҙҙәрҙе риүәйәт тип билдәләргә була.*

## 1. Легенда һәм риүәйәттәрҙең килеп сығышы

Легендалар тәүтормош община ҡоролошоноң иң боронғо дәүерҙәрендә үк барлыҡҡа килә һәм формалаша башлай. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге һәм космостағы күренештәрҙең барлыҡҡа килеүе, көтөлмәгән һәм даими рәүештә улар кисергән үҙгәрештәрҙең

сәбәптәрен аңлап етмәү арҡаһында, боронғо бабаларыбыҙ уларҙы ғәҙәттән тыш мөмкинлектәргә эйә булған изге йә яуыз көстәрҙең ихтыярынан килә, тип, фараз иткән. Үҙҙәре тәбиғәттең стихиялы күренештәренә тарыһалар бабаларыбыҙ уларҙы  яуыз көстәр менән бәрелешеү кеүек, ә көнкүрештәренә, уй-теләктәренә һәм ниәт-маҡсаттарына ҡулай булғандары уларға изге көстәрҙең теләктәшлеге, ярҙамы һымаҡ тойолған. Ошо урында тағы бер тапҡыр Карл Маркстың хыял менән фараз итеүгә өлгәшеү кешелектең артабанғы үҫешенә ғәйәт ҙур этәреш яһаусы ҡаҙаныш булыуы, шул арҡала “миф, легенда һәм риүәйәттәрҙең яҙылмаған әҙәбиәтен тыуҙыра” башлауы (16, 270 – 271) хаҡында әйткәнен хәтергә төшөрмәй булмай. Тирә-йүнде үҙләштергәндә, ниҙелер белергә, шул иҫәптән космос һәм тәбиғәт серҙәренә төшөнөргә тырышып, фараз нигеҙендә оҙайлы тарихи процеста барлыҡҡа килгән мифологик ҡараштар, төрлө инаныуҙар легендаларға һут биреп торған. Легендаларҙың, миф традицияһы буйынса, этиологик мотивлы, йөкмәткеһенең шартлы һәм фантастик уйҙырмалы булыуы, ҡайһы саҡта шуларҙың реалистик башланғыстар менән үрелеп килеүе ана шул сәбәптәргә бәйләнгән. Әйтелгәндәрҙән шул аңлашыла: легендалар тәүбашта мәғлүм идеяға (халыҡ инанған дини, ижтимағи, әхлаҡи ҡараштарға, инаныстарға) яраҡлашып, ысынбарлыҡты шуның аша яҡтыртыр булған, үҙе лә халыҡтың донъяға ҡарашына йоғонто яһаған, инаныстар тыуыуына сәбәпсе булған.

Кеше менән тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәт мифтарҙа тәбиғәт стихияһын, ғаләм көстәрен кәүҙәләндереүсе серле заттарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте формаһында образлаштырылһа (Айҙағы ҡара таптарҙы, ҡасып барыусы һигеҙаяҡ һәм уны баҫтырыусы йыртҡыс, тип; Кесе етегәнде, тимер ҡаҙыҡҡа (Тимерғаҙыҡ йондоҙо) бәйле Ағат (Аҡбуҙат) менән Һаратты алты бүре баҫтырыуы, тип аңлатыу – шуға миҫал), легендаларҙа төп герой урынын халыҡ батыры ала бара.

Тәбиғәттең әлегә аңлашылмаған зыянлы менән алышыусы батыр ҙа тиңдәшһеҙ ҡеүәтле һәм ғәйрәтле баһадир итеп кәүҙәләндерелгән. Урал тигән батырҙың Ерҙе тәҡәтһеҙ ҡыҙҙырып, кешеләргә көн итергә ирек бирмәгән ике ҡояштың береһен атып төшөрөүе, шул арҡала Ерҙә Урал тауы, Күктә Ай хасил булыуы, бер генә Ҡояш ҡалыуы хаҡындағы мифологик легенда ана шуның бер өлгөһө булыр.

Тәбиғәтте үҙләштерә барыу һөҙөмтәһендә, кеше менән тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәт әкренләп шул батырҙың серле ҡара көстәр менән алышы һәм уларҙы еңеп сығыуы рәүешендә сағыла башлай. Һәр төрлө әфаттарға сәбәп ҡылыусы, бер ҡорал да ала алмаған әүермәнде, яйын табып, үксәһенә атып үлтергән һунарсы хаҡында В.И. Даль яҙып ҡалдырған легенда – ана шуға баҙыҡ миҫал. Егеттең әүермәнде еңеү серен белеүе – кешелектең тәбиғәт серҙәренә төшөнөү хаҡындағы

хыялын йә шул хыялдың ғәмәлгә ашмышының образлы сағылышы кеүек аңлашыла. Аңлашылыуынса, мифологик ҡарашҡа, инаныҫҡа нигеҙләнһә лә, тәбиғәт сөрҙәренә тәрәнерәк үтеп инә барған һайын, уны образлаштырыусы йән эйәләрен һүрәтләгәндә лә, уның менән көс һынашыусы батыр образын кәүҙәләндергәндә лә, бабаларыбыҙ аңында сама тойғоһо өҫтөнлөк итә башлауы ла сағыла был легендала. Зыянлы зат менән алышыусы батыр тәбиғи кеше ҡиәфәтен алған. Һәм ул үҙенең сихри дошманын физик көс менән түгел, ә аҡыл, таһыл һәм хәйлә менән дә еңә.

Был һыҙаттар иһә – тормош тәжрибәһе туплай килә, кешеләрҙең тәбиғәт серҙәренә тәрәнерәк үтеп инә барыуы һөҙөмтәһе. Тимәк, бында кешелек үҫешен үҙ эсенә алған тотош тарихи процесс сағылыш тапҡан.

Мөлкәт тигеҙһеҙлеге йәмғәиәттә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ҡырҡыулаштыра, уларға синфи-социаль ҡаршылыҡтар төҫө бирә. Шул хәл легендаларға ла үҙенең мөһөрөн һала: борон «иң тәүҙә тәбиғәттең серле көстәрен генә сағылдырған фантастик образдар хәҙер килеп ижтимағи билдәләр (атрибуттар) ала һәм тарихи көстәрҙең вәкилдәре булып китә» (17, 329). “Ҫанайҫары менән Шайтанҫары” тигән топонимик легенданың бер версияһы буйынса егет шайтандар менән алыша. Рус батшаһы үткәргән колонизациялау сәйәсәте заманы күҙлегенән ҡарағанда, шайтандар йөҙөндә башҡорттоң аҫаба ерен тартып алыусыларҙы танырға була. Әммә тора–бара шайтан образы рус генералы образы менән алмаштырылған. Әйтерһең дә, Мең башҡорттары үҙҙәренең был легендаһын туранан-тура марксизм классигынан өҫтә килтерелгән фекеренә яраҡлаштырғандар ҙа, колонизация шарттарында уны махсус рәүештә яңыса интерпретациялаған.

Ижтимағи әһәмиәте булған төрлө хәл-ваҡиға, мажараларға юлығыусыларҙың йә шаһиттарҙың улар тураһындағы иҫтәлек-хикәйәләре (рус фольклористикаһында уларҙы «устные рассказ», “сказ”, “быль” тиҙәр) халыҡ араһында тиҙ таралыусан. Ул хикәйәләр телдән телгә, быуындан-быуынға күсә килә, тәүбаштағы осраҡлы деталдәрҙән ҡотола, яңыларын ҡабул итә бара, ғөмүмән, ниндәйҙер дөйөмләштереү төҫөн ала. Шуларҙың ваҡыт һынауы үткәндәрен беҙ риүәйәттәр тип атайбыҙ ҙа инде. Үҙаллы жанр булараҡ риүәйәттәрҙең әүҙемләшә башлауы ла тап бына шул синфи йәмғиәт эсендә барлыҡҡа килгән легендаларҙа реалистик башланғыстар көсәйеү күҙәтелгән дәүерҙәргә тап килә.

Әлбиттә, телдән-телгә күсә-күсә, легендалар ҙа бер көйө генә һаҡланмаған. Ваҡыт үтә килә, улар ҙа өҫтәлеүҙәргә, ҡыҫҡартылыуҙарға, яңысараҡ аңлатыуҙарға дусар ителгән. Эстетик ҡараштар камиллаша барған һайын, боронғо ысынбарлыҡта, тәбиғәт, космос күренештәрен “аңһыҙ рәүештә художестволы үҙләштереү булып барлыҡҡа килгән”

фантастик уйҙырмалар, легендалар бара-тора эстетик әһәмиәт ҡаҙана башлай һәм ысынбарлыҡты аңлы рәүештә художестволы үҙләштереү кеүек ҡабул ителә. Һуңғараҡ ижад ителгәндәрендә фантастика, нигеҙҙә, шулар өлгөһөндә ҡуллана башлаған.

Миф традицияһы буйынса, легендалар этиологик мотивты үҙ күргән кеүек, риүәйәттәр ҙә унан баш тартмай. Билдәле булыуынса, әкиәт менән көләмәстәрҙә лә этиология билдәләре осраштырғылай. Осраштырғылай ғына. Сөнки әкиәт менән көләмәстә уның булыуы – шарт түгел. Була ҡалһа иһә, ул бары комик эффект тыуҙырышыусы өҫтәлмә сара хеҙмәтен генә үтәй. Легенда, риүәйәттәр менән эш икенсерәк тора. Этиологик мотив, уларҙа жанр хасил итешеүсе сара вазифаһын атҡара.

Шулай итеп, *әгәр легендалар, ғәҙәттә, ысынбарлыҡ күренештәрен инаныстар күҙлегенән, йәғни билдәле бер ҡарашҡа, алдан билдәләнгән идеяға яраҡлаштырып үҙләштерһәләр йә үҙҙәре үк инаныстарға сәбәпсе булһалар (шул сәбәпле уларҙа уйҙырмалылыҡ шартлылыҡҡа, фантастикаға, мөғжизәлеккә нигеҙләнһә), риүәйәттәрҙә бары ҡасандыр тормошта ысынлап та булған йә булыуы ихтимал хәл-ваҡиғалар хаҡындағы мәғлүмәтте тыңлаусыларға йәнле итеп еткереү, уларға аңлатма биреү маҡсат итеп ҡуйыла. Шуға ла легендаларҙан айырмлы рәүештә, риүәйәттәр реалистик ҡарһүҙ булып ҡала.*

Шуныһын да әйтергә кәрәк, легендаларға хас фантастика алымдарын файҙаланған риүәйәттәр ҙә осраштырғылай. Тик улар геройҙың эшмәкәрлегенә мәғәнәлелек биреү, уға иғтибар иттереү сараһын ғына үтәй, әҫәрҙең төп йөкмәткеһе бары бер реаль ерлектән айырылмай, йәғни фантастик уйҙырма риүәйәттең үҙ тәбиғәтенән килмәй.

Легенда һәм риүәйәттәрҙең тематикаһы күп төрлө. Улар, этностың килеп сығышы, атамаһы мәсьәләләренән, уның көндәлек тормошонда булып торған һәм булыуы ихтимал тип иҫәпләнгән хәлдәрҙән алып, ижтимағи әһәмиәте ҙур булғандарын да, йәғни көнкүреш кимәлендәге һәм тарихи ваҡиғаларҙы ла үҙ эсенә ала. Тематик принциптан сығып, шартлы рәүештә уларҙы эрерәктән дүрт төркөмгә бүлергә мөмкин: этнонимик һәм этногенетик, топонимик, триихи легендалар һәм риүәйәттәр һәм тормош-көнкүреш легенда, риүәйәттәре.

## 2. Этнонимик һәм этногенетк легендалар һәм риүәйәттәр

*Йола хоҡуғы буйынса, борон-борондан һәр аҫаба башҡорттоң үҙ нәҫел-нәсәбенең аталышын, тамыры ҡайҙан килеп сығыуын, тармаҡлана-тармаҡлана, ҡайҙарға барып сығыуын белеүе фарыз тип иҫәпләнгән.* Быны иһә яҙылмаған шул ҡануниәттең өс талабының иң беренсеһе тип белгәндәр. Икенсеһе – “йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу

һәм өсөнсһө – хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе, өләндәрҙе белеү” тигәне менән дә иҫәпләшкән бабаларыбыҙ (20, 190). Хандар тураһындағы риүәйәт, өләң, тигәндәй. Ҡайһы бер башҡорт ырыуҙары (уларҙың олоһо ла кесеһе лә) үҙенең килеп сығышын йә бейҙәрен Сыңғыҙ ханға мөнәсәбәтле тип белә. Мәҫәлән, юрматылар үҙҙәренең Сәсле дәрүиш бейҙәренә тиклемге, ун бер ырыулы Мең ҡәбиләһе Урадас бейгә тиклемге хандарҙы һанап киткәндә, һүҙҙе Сыңғыҙҙан башлар булған; үҫәргәндәр раҫлауынса, Туҡсаба улы Мөйтән атлы мәшһүр бейҙәре Сыңғыҙ хандың вәзирлек алып, уның янында ултырған, ә Табындың Майҡы атлы бейе уның уң яғынан урын алған (7, 31, 51, 81; 24, 267). “Сыңғыҙнамә”лә әйтелеүенсә, айырыу билдәһе итеп һәр башҡорт ырыуына Сыңғыҙ хан ағас, ҡош, оран, тамға, һауыт (?) тәғәйенләй: Табындың ағасы – ҡарағас, ҡошо – ҡарағош, ораны – “Салауат!”, тамғаһы – һепертке тамға; шул тәртиптә Меңдеке – ҡайын, ҡарсыға, “Алас!”, ҡош ҡабырғаһы; Тамъяндыҡы – тирәк, ҡарға, “Тутыя!”, ырғаҡ; Ҡыпсаҡтыҡы – ҡарама, бөркөт, “Туҡсаба!”, тараҡ (24, 269–270). Ят кеше осраһа, сик һаҡсыһы атылған уҡ алырлыҡ аралыҡтан уҡ үткенсене күреп ҡалһа, уның исем–шәрифтәрен һорашканға тиклем, ырыуын, уның билдәләрен белешер булған. Кенәз Ҡоҙаш улы Мең иле кенәзе Ейәнбакты әйтмешләй, “белеңезләр, ғафил булмаңызлар, ғәкыллы аңлар, ғәкылсызның бер ҡолағындин керүб, берсендин чығар” (7, 50–51), ырыуын, уны хасил итешеүсе ара (йә аймаҡ, тармыт, зат, нәҫел) тип йөрөтөлгән этник төркөмсәләрен, уларҙың этнонимик, этногенетик легенда, риүәйәттәрен белмәгән, милли эпик ҡомарткыһы булмаған ҡәүемдәр АҠШ халҡы кеүек йыйылма халыҡты тәшкил итә булыр. Йә бөгөнгө биләмәләренә улар, классик эпик дәүер[4] тарих төпкөлөнә киткәс кенә, ерегеп, милләт, халыҡ булып шунда формалашҡан булыр.

Генетик яҡтан башҡорт этнонимик һәм этногенетик легенда, риүәйәттәренең күптәре мәжүсилек дәүеренә барып тоташа. Беҙҙең көндәргәсә килеп еткән иң боронғо этнонимик һәм этногенетик легендаларҙа халыҡтың мифологик ҡараштарының саткылары һаҡланған. Шуға ла фантастик уйҙырмалылыҡ – быңдай әҫәрҙәр өсөн типик билдә, тигәндә лә ярай. Замандар үтә килә, этник төркөмдәрҙең килеп сығыуына сәбәпсе булған боронғо реаль хәл-ваҡиғалар үҙҙәренең конкрет һыҙаттарын юғалтҡанлыҡтан йә этник сығышты затлыраҡ та, боронғораҡ та итеп күрһәтеү маҡсатынан махсус рәүештә, шул факт, күренештәрҙе аңлатыу өсөн, фантастикаға мөрәжәғәт иткәндәр. Формаһы менән фантастик булһалар ҙа, уларҙа

[4] Классик эпик дәүер, көнбайыш һәм рус фольклоры үлсәмдәре менән әйткәндә, нигеҙҙә, XIV быуатта тамалана . XVII быуат баштарынаса иһә лек ижад ителгән эпик ҡомарткылар эшкәртелә (мәҫәлән рус былиналары менән шулай була. Ҡар.: Аникин В.П. Русский богатырский эпос. – М., 1964. - С. 22 - 23.). Башҡортта эпик дәүер XVIII быуат аҙаҡтарынаса һуҙыла.

билдәле бер тарихи факттың (процестың) төп һыҙаттары һаҡана. Һуңыраҡ барлыҡҡа килгән этник төркөмдәрҙең аталышы, сығышы хаҡында һүҙ барғанда иһә, реализм тойғоһо өҫтөнлөк итә. Шул сәбәптән ундай мәғлүмәттәр риүәйәттәр төркөмөн тулыландыра.

Этнонимик һәм этногенетик легендалар репертуарында башҡорт халҡының килеп сығыуын аңлатыуға дәғүә иткән әҫәрҙәр күп осрай. XVIII - XIX быуаттарҙа Башҡортостанды өйрәнеүсе П.И. Рычков, В.И. Даль, В.С. Юматов, М.В. Лоссиевский кеүек күп кенә рус тикшеренеүселәре лә уларға иғтибар иткән. Был төркөмгә ингән әҫәрҙәрҙең бер өлөшө халҡыбыҙҙың күпмелер компоненты "ҡан (хан) заманынан уҡ" (йәғни борон-борондан) төйәк иткән Уралға "башҡорт" этнонимын бүләк иткән ҡәүемдәрҙең көньяҡтан күсеп килеүен бәйән итә («Башҡорт» исеменең сығышы», «Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан», «Башҡорт» һүҙе нисек килеп сыҡҡан», «Бүреле йылғаһы», «Ете ырыу» һ. б.). Башҡарылышы, йөкмәткеләре менән бер ни тиклем айырылһалар ҙа, "Ата-бабаларыбыҙ бүрегә эйәреп, Урал тигән яңы ил тапҡан, шуға күрә үҙҙәрен "башҡорт" тип атаған" тигән тематик мотив уларҙың барыһына ла уртаҡ. "Бүре баш булып килә. Шулай булғас ни өсөн халыҡтың этнонимы "башбүре" түгел, ә "башҡорт"? Ошо урында шундай һорау тыуа. Абдуҡадир Инан (Фәтхелҡадир Сөләймәнов) әйтеүенсә, табу ҡануны һаҡланған дәүерҙә бик күп халыҡтар әле беҙ "бүре" тигәндең үҙ телдәрендәге эквивалентын икенсе һүҙ менән атағандар: немецтар "ҡарышлауыҡ-ҡорт" мәғәнәһендәге һүҙ ҡулланһа, поляктар немец телендәге "der Wolf" ("бүре") һүҙен, Тарихи Башҡортостан Мәскәү дәүләте менән берләшкәндән һуң Уралға килеп ереккән рустар, башҡорт менән татарҙан күрмәксе, был йыртҡысты "бурюк" тип атаған, ә беҙҙең бабаларыбыҙ, башҡа төрки ҡәрҙәштәребеҙ кеүек үк, уны "ҡорт" һүҙе менән алмаштырған. Ни өсөн шулай иткән? Был осраҡта бабаларыбыҙ сағыштырыу, метафора, өлөшө аша әйберҙең үҙе хаҡында төшөнсә биреү – метонимия тигән поэтик саралар (троптар) менән эш иткән. Хикмәт ниҙә? Хикмәт шунда: "бүре", тип әйтер урынға, уның ҡойроғона иғтибар иттергәндәр. Бүре сапҡанда, ҡойроғо, ҡарышлауыҡты (ҡортто) хәтерләтеп, тирбәлеп бара. Бүренең ҡойроғон ҡортҡа (ҡарышлауыҡҡа) сағыштырып (ҡорт һымаҡ), шунан "ҡорт" тигән метафора килеп сыҡҡан. Ул метафорала бүренең ҡойроғо ғына (бөтөндөң бер өлөшө генә) күҙ уңында тотола. Шуға күрә ул һүҙ, асылда, метонимия мәғәнәһенә эйә булған. Уйғырҙар бөгөн булһын бүрене ҡорт ти. Башҡортта ул "ҡош-ҡорт" тигән ҡушма һүҙ составында ғына һаҡланып ҡалған.

Һүҙ барған биш легенда, асылда, бер үк әҫәрҙең версияларынан тора. Улар барыһы ла берҙәм рәүештә бер үк идеяны алға һөрә: имеш, “башҡорт” этнонимын алып килеүсе ҡәүемдәр – бүре арҡаһында ғына Уралға юлыға. Был раҫлау хәкиҡәткә тап килмәй, әлбиттә. Шулай ҙа был легендалаҙа тарихи дөрөҫлөктөң образлы сағылышын инҡар итеп булмай. Сөнки ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының ( мәҫәлән, Бөрйән, Мең, Әй, Төрөкмән, Төрөкмән-Ҡыпсаҡ һ.б.) Уралға көнъяҡтан күсеп килеүе мәғлүм. Ошо тарихи факттың образлы сағылышы тигәнебеҙҙең төбөндә боронғо инаныс, бүрене изгеләштереү, уның культын тотем кимәленә күтәреү, тимәк, мифологик ҡараш төҫмөрләнә. Ошо яҡтан ҡарағанда, тәүбашта образлылыҡ, эстетик баһа менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмаған, сакраль ҡарашты сағылдыра был тотем, йәғни мифик зат. Бөгөнгө эстетик аңыбыҙ кимәленән генә уны беҙ художестволы образ рәүешендә күҙаллайбыҙ. Ошо яҡтан ҡарағанда, кешеләргә бүренең ярҙамы әкиәттәргә хас алымды хәтерләтә. Тик хәтерләтә генә. Билдәле булыуынса, әкиәттәрҙең геройы ауыр хәлгә тарыһа, уға төрлө йән эйәләре ярҙамға килә. Әммә ундай изге заттар унда “һин миңә – мин һиңә” принцибы буйынса эш итә, йәғни уларҙан изгелек күргәнсе, әкиәт геройы үҙе уларға изгелек ҡылырға йә уларҙың шартын үтәргә тейеш. Легендала иһә бүре бер ниндәй шартһыҙ (“бушлай”) ярҙам итә. Тимәк, уның изгелеген әкиәт ҡалыбы менән генә баһалап булмай. Был иһә бүрене бабаларыбыҙҙың изгенән дә изгерәк зат тип таныуынан килә. Изгенән дә изге заттың аҙашҡан кешеләргә ярҙамы – уның уларҙы изге зат тип таныуы. Бына ниндәй идея аңлашыла “Ата-бабаларыбыҙ бүрегә эйәреп, Урал тигән яңы ил тапҡан, шуға күрә үҙҙәрен “башҡорт” тип атаған” тигән тематик мотивтың тел төбөнән (рустар был урында, подтексынан, тип әйтер ине). Бынан боронғо бабаларыбыҙҙың үҙҙәрен Урал һынлы гүзәл илгә ябай ғына юлдар менән түгел, ғәҙәттән тыш сәбәптәр арҡаһында юлығыусы ҡәүем, тип раҫлауы һәм шуға башҡаларҙы, шул иҫәптән тыңлаусыларҙы ла, инандырыу өсөн, ҡулланылған художестволы алым икәнен таныйбыҙ. Шулай булғас, боронғо кешеләрҙең аңынса, изге заттарға изге йән эйәһе табып биргән ил дә, шул арҡала барлыҡҡа килгән ырыуҙар союзы ла («Ете ырыу», «Башҡорттар») изге һаналырға тейеш булған. Тимәк, легенданы ижад итеүселәр, боронғо халыҡтың аңы тыуҙырған образға мөрәжәғәт итеп, уның ярҙамында ырыуҙарҙың берҙәм йәшәргә тейешлеген, тыуған ерҙең ғәзиз булыуын художестволы итеп әйтеп биргәндәр. Был иһә уны халыҡ педагогикаһының тәрбиәүи маҡсаттарына бик тә ярашлы иткән.

Был сюжеттарҙа әйтелеүенсә, “беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, бүре артынан бара торғас, бик матур туғайлы йылғаларға, урманға, емешлеккә, йәшеллеккә бай ергә килеп сыҡҡандар”, унда тауҙар күккә олғашып торған. Бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда, быны Тыуған илдең матурлығына ода, халыҡтың уны эстетик баһалауы һөҙөмтәһе, тип

ҡабул итергә булыр ине. Әммә иғтибар итегеҙ: тасуирланған пейзаж картинаһы ваҡиғаға фон хеҙмәтен үтәү менән генә сикләнмәй. Ул – яңы табылған ерҙең мал көтөү, балыҡ тотоу, ҡортсолоҡ, Хоҙай бушлай биргән емеш-еләк йыйыу кәсебе менән шөғөлләнеүсе бабаларыбыҙ өсөн уңай һәм ҡулай урын булыуы күҙлегенән һоҡланыу менән, икенсе төрлө әйткәндә, эстетик яҡтан да, утилитар йәһәттән дә бер үк ваҡытта баһаланышы ла.

Бәләкәйерәк этник төркөмдәрҙең (ара, ймаҡ тармыттарҙың) килеп сығышын тасуирлаған сюжеттарҙа ла инә затлы мифик персонажар осраштырғылай. Улар, ғәҙәттә, кеше менән ғаилә мөнәсәбәттәренә инә. «Бүреләр тоҡомо» легендаһында инә бүре, ҡыҙға әйләнеп, һунарсы менән донъя көтә. Ҡыуандыҡ районындағы (Ырымбур өлкәһе) Хәйбулла районындағы (Башҡортостан) Һаҡмар Бүреһе (Наҙарғол) ауылындағы бүреләр араһы кешеләре үҙҙәренең сығышын бына шул никахҡа бәйләй. «Биреләр араһы», «Дүрмән», «Шүрәлеләр араһы» легендаларында иһә теге йәки был нәҫелдең (араның) сығышы – шүрәле, бире (бәрей) кеүек зыянлы мифик заттар менән башҡорт егете ҡауышыуының һөҙөмтәһе, тип аңлатыла.

Былдай легендаларҙың сюжеты, ғәҙәттә, шулай ҡорола. Ваҡиға реаль ерлектә башлана. Унда герой кем булыуы асыҡлана. Артабан, әҫәрҙәрҙең идея йөкмәткеһенә ярашлы рәүештә, ул ғәҙәти булмаған шарттарға ҡуйыла. Сюжет үҫеше геройҙың ошо шарттарҙы еңеп сығыуы менән билдәләнә. “Бүреләр тоҡомо”нда герой Үҫәргән ырыуы кешеһе итеп күрһәтелә. Күсенеп йөрөүенән уның ҡәҙимге күсмә малсылыҡ менән көн итеүсе башҡорт икәненә төшөнәбеҙ. Былар барыһы ла – ҡәҙимге реаль шарттар. Әйтерһең, беҙ ҡәҙимге риүәйәт менән генә эш итәбеҙ. Егеткә инә бүре осрауы ла тәбиғи. Әммә артабан ошо реаль ерлек фантастика менән алышына. Хатта инә бүренең кешесә һөйләшә белеүе беҙҙе әкиәт донъяһына алып инеп киткәндәй була. Уның әүермән зат булып сығыуы шул донъяға төпкәрәк индергәндәй итә. Егет атырға уҡталһа, инә бүре телгә килеп: “Атма мине, ҡойроғомдан тотоп ергә һуҡ!” – тип үтенә. Шул үтенестең үтәлеүенә – теге һин дә мин һылыу ҡыҙға әйләнә. Реаль заттың мифик зат менән ҡауышыуы шуға күрә лә “тәбиғи” хәл кеүек ҡабул ителә. Ә инде бөгөн булһын үҙҙәрен бүреләр заты тип иҫәпләүселәрҙең мәғлүм реаль ауылдарҙа йәшәп ятыуы, ҡәҙимге үҫәргәндәрҙән бер ниҙәре менән дә айырылмауы беҙҙе йәнә реаль тормошҡа алып ҡайта.

Мифик зат менән егет кешенең ҡауышыуынан таралған затттар тураһындағы легендалар ҙа идея йәһтенән тотош халыҡтың килеп сығышы һәм этнонимы тураһындағы легендалар менән ауаздаш: улаҙың да “тел төбөнән” теге йәки был этник тркөмсәне ғәҙәттән тыш нәҫел итеп күрһәтергә тырышыу аңлашыла. Легендаларҙа мифик заттар ни тиклем генә көслө булмаһын, кешеләрҙең ихтыярына

буйһонорға мәжбүр. Уларҙа боронғо кешеләрҙең тәбиғәт стихияһын уҙ файҙаларына ҡулайлаштыра барыуының сағылышын күреү ҡыйын түгел. Шулай итеп, әкиәтте хәтер ҙа, бындай легендалар реаль тарихи ерлектән айырылмайҙар .

Милләт эсендәге бәлкәй этник төркөмдәрҙең һәм уларҙың этнонимының килеп сығыу тарихының күпселеге риүәйәт рәүешендә йәшәй. Мәсәлән, Әбйәлил районындағы ҡаҙаҡтар араһы барымталар ваҡытында ҡаҙаҡтарға әсирлеккә төшкән башҡорт егете Төлкөбай (икенсе вариантта Ҡотдос) менән ҡаҙаҡ ҡыҙы Тайтулдан ҡалған нәсел тип аңлатыла («Ҡаҙаҡтар араһы»). «Юрматы», «Тәлтем» этнонимдәренең килеп сығыуын аңлатыусы риүәйәттә лә («Юрматы, Тәлтем ырыуҙары») ваҡиғалар конкрет ерлектә тасуирлана. Бындай әсәрҙәрҙә уйҙырмалылыҡ булған хәлдә лә, уға фантастика төсө бирелмәй.

Художестволылыҡ йәһәтенән этнонимик, этногенетик легенда һәм риүәйәттәр төрлө кимәлдә. Сюжетлылары менән бер рәттән, ара, ырыу йәки халыҡтың килеп сығыуын ҡыҫҡаса хәбәр итеүгә генә ҡоролғандары ла етәһе.

Шулай итеп, этногенетик легендаларҙа халыҡ фантазияһының үҙенсәлектәре, эстетикаһының законсалыҡтары, унын аңы һәм рухи-әхлаҡи ҡараштары сағыла, хеҙмәт кешеләренең өмөттәренә, хыялдарына ярашлы идеялар үткәрелә.

3. Топонимик легендалар һәм риүәйәттәр

Топонимик легендалар ҙа, топонимик риүәйәттәр ҙә борон-борондан тәбиғәттәге, йәмғиәттәге төрлө хәл-әхүәлдәрҙе, ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе, айырым факттар тураһындағы иҫтәлектәрҙе конкрет, урын атамалары һәм уларҙың аңлатмалары менән мәңгеләштереү һөҙөмтәһендә тыуған.

Ер-һыуҙың булмышына, аталышына аңлатма биреү – легенда, риүәйәттәргә, ғөмүмән, хас билдә. Тик, әгәр был жанрҙарҙың башҡа тематик төркөмдәренә ингән әсәрәҙәрәҙә географик урын, уның атамаһы, нигеҙҙә, хикәйә ителгән ваҡиғаның дөрөҫлөгөнә ышандырыу маҡсатында дәлил өсөн генә телгә алынһа, топонимик легендаларҙа, риүәйәттәрҙә уларға аңлатма биреү төп маҡсат итеп ҡуйыла. Шул сәбәптән ер-һыуға бәйле аңлатмалылыҡ, тематик төркөм билдәһе булыу менән бер рәттән, был төркөмдөң үҙаллы бер жанр күренеше (жанровая разновидность) икәнен айырып тороусы күрһәткес хеҙмәтен дә үтәй.

Аңлатмаларының характерына, тематикаһына ҡарап, топонимик легенда, риүәйәттәрҙе үҙ нәүбәтендә түбәндәгесә төркөмсәләргә айырырға була:

1. Мифология менән бәйле барлыҡҡа килгән топонимик легендалар.

2. Урындың үҙенсәлеген, тәбиғи шарттарын аңлатыусы топонимик легендалар һәм риүәйәттәр.

3. Ауыл тарихтары.

4. Тарихи характерҙағы топонимик легендалар һәм риүәйәттәр.

5. Көнкүреш хәлдәрен сағылдырған топонимик легендалар һәм риүәйәттәр.

***а) Мифология менән бәйле топонимик легенда һәм риүәйәттәр.***

Үҙҙәрен аҙым һайын һағалап торған хәүеф-хәтәрҙән һаҡланыу теләге һөҙөмтәһендә, боронғо бабаларыбыҙ сикһеҙ ғәйрәтле алыптар хаҡында легендалар ижад иткән. Уларҙың күптәре беҙгә топонимик легендалар рәүешендә килеп еткән. Алпамышаларҙың бик дәү һәм үтә ғәйрәтле итеп күҙ алдына килтергәндәр. Уларҙың булмышы легендаларҙа хәрәкәттәре, ҡылған ғәмәлдәре, эҙҙәре, ҡәберҙәре хаҡындағы мәғлүмәттәр аша күҙаллана.Алпмаыша бейек-бейек ҡарағайҙарҙы ла аша баҫып, урманды үлән урынына тапап йөрөй, ер һөрөп йөрөгән ҡәҙимге кешене һуҡаһы аты-ниһе менән бергә усына һыйҙыра ала (“Алпамыша ҡәбре”).

Легенданың ышандырыу бурысын да онотмаған боронғолар. Һәм уның булмышы хаҡында әйтелгәндең дөрөҫлөгөн конкрет урын һәм уның атмаһы менән “мөһөрләп ҡуйғандар”: Алпамыша ҡәбере бер бәләкәй тау ҡәҙәрле (“Алпамыша ҡәбере”), уның ҡынйырағынан ҡойолған ҡомдан ике тау хасил була (“Алпа ҡомо айыратау”), итегенән ҡубып төшкән балсытарҙан тауҙар теҙеме барлыҡҡа килә (“Мусик тауҙары”), ял итергә ултырған еренән үҙе үк ҡая-ташҡа әүерелә (“Алпамыша ташы”). Ул тау-таштың ҡайһы тарафта урынлашыуы ла мәғлүм: тәүгеһе Архангель районында, икенсеһе – Илеш ерендә, өсөнсөһө – Мәсетле тарфтарында, дүртенсеһе – Әбйәлилдә.

*Гигант кеше ҡиәфәтендәге алпамышалар хаҡындағы топонимик легендалар башҡорттар йәшәгән күп тарафтарҙа билдәле.* Ул заттарҙың ҡәберҙәре хатта ер аяғы – ер башында ятҡан Тышҡы Башҡортостанда ла, йәғни халыҡтарҙың бөйөк күсеше дәүерендә (IX быуат аҙағында) венгрҙар менән килеп, Дунай буйын үҙләштергән башҡорттар араһында ла билдәле булған. XII быуаттың тәүге яртыһында улар янында булып киткән ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмид әл-Ғарнатиға уларҙың ҙур-ҙур ҡәберҙәрен күрһәтәләр. Сәйәхәтсе уларҙы үҙ илендәге мифик Ад тигән боронғо бер ҡәбиләнән булған гигант кешеләр менән сағыштыра

Болғар илендә ғәйәт ҙур кәүҙәле кешене осратыуы хаҡында әйткәненә ҡарағанда, ҡасандыр бындай алып затлы кешеләр йәшәүенә сәйәхәтсе үҙе лә ныҡ ышанған булырға тейеш. Ысын булһа, шул зат хаҡында ул: «Мин уның биленән генә инем. Ул бик көслө: салынған атты тотоп алып, күҙ асып йомғансы, һөйәктәрен һындыра, тиреһен һыҙыра һала ла тарамыштарын ботарлап ташлай. Мин балта менән дә уны был тиклем йәһәт тураҡлай алмаҫ инем. Болғар батшаһы уға ҡалҡан эшләтеп

биргән, һуғышҡа барғанында, ул уны йөк арбаһына һалып йөрөтөр булған. Ә тимер турҡаһы нәҡ ҙур ҡаҙан. Ул бер көслө ир күтәргеһеҙ ғәләмәт ныҡ имәндән яһалған суҡмар менән һуғыша... Ә төркиҙәр (йәғни булғар менән башҡорттар. – Ә.С.) уны хөрмәтләйҙәр һәм ихтирам итәләр» (21, 30, 43).

Әл-Ғарнатиҙың, алып затынан булған кешеләрҙең ҡәберенән ҙур-ҙур һөйәктәр табылыуы, уларҙың алғы тешенең тамыры ғына ла 5,5 килограмм тарта, ә бер енсек һөйәге яңғыҙ кешенең көсө еткеһеҙ булған, тип әйтеүе лә унын алпамышалар хаҡындағы легендаларға ихлас ышаныуы хаҡында һөйләй. Француз ғалиме Ж. Барлуаның әйтеүенсә, эре һөйәкле боронғо мустандарҙың һөлдәһен фәндә лә великандарҙыҡы тип аңлатырға тырышыу хәлдәре булған (3, 40–42). Фән тиклем фәндә шундай хаталаныу хәлдәре булғас, заманына күрә уҡымышлы зат иҫәпләнгән Әл-Ғарнати легенданы ысынға алғас, ҡәҙимге кешеләргә ни һан.

*Күп кенә халыҡтарҙың мифологияһында һыу аҫтынан йылҡы сығыу мотиве осрай.* Боронғо бер грек мифы диңгеҙ батшаһы Посейдондың Афина халҡына һыу аҫтынан ат сығарып биреүе тураһында һөйләй. Элекке Римда диңгеҙ илаһы Нептунды йылҡы малын ҡурсалаусы тип тә йөрөткәндәр. Атаҡлы «Мең дә бер кисә» китабында ла “йылҡы малының һыу аҫтынан сыҡҡаны” мотивы бар. Был мотивҡа ҡоролған топонимик легендалаҙы башҡорттар араһында әле лә осратырға була. Мең ҡәүеменең Асылыкүлгә бәйле топонимик легендалар буйынса башҡорттарҙың затлы йылҡы малы Асылыкүлдән сыҡҡан, Бөрйән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары иһә ала төҫтәге йылҡы – Шүлгәндән сыҡҡан мал тоҡомо, тип иҫәпләр булған. Икенсе төрлө әйткәндә, Шүлгән мәмейәһенә яҡын ятҡан күлде лә элек Шүлгән күле тип йөрөткәндәр. Унан йылҡы малы сыҡҡанға, ул күл Йылҡысыҡҡанкүл тип атала була. Ике күлгә бәйле легенда сюжты киңәйтелгән тематик мотив сифатында эпосҡа ла (тәүгеһе – “Заятүләк меннән Һыуһылыу” иртәгендә, “Ҫанайҫары менән Шайтанҫары”, икенсеһе “Аҡбуҙат” эпик ҡобайыры менән “Ҡара юрға” иртәгенә) килеп ингән.

Икенсе бер топонимик легенда буйынса, Асылыкүл асыуланып, болара башлаһа, ерҙә бола сыға, һуғыш һәм ҡырылыш була. Шуға ла күлде Асыулыкүл тип йөрөткәндәр, ти. Тәүге ике легендала муллыҡ мөгөҙө хаҡындағы грек мифы менән уртаҡлыҡ һиҙемләнһә, Асыулыкүл тураһындағыһы – йәнһеҙ әйберҙе күл тиклем күлде, персонификациялауға, уны кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡыҫылышлы итеп күрергә теләүе сағыла.

Йәнһеҙ әйберҙе, шул иҫәптән географик объекттарҙы йәнләндереп, кешегә мөнәсәбәтле итеп күрергә тырышыу “Муйнаҡташ”, “Ҡариҙел менән Ағиҙел”, ”Ҡолоҡайташ”, “Тораташ”, “Мейесташ”, “Айыуташ” ише топонимик легендалар тыуыуға ла сәбәпсе булған.

Һуңғылары бер үк ваҡытта ер-һыуҙың үҙенсәлектәре хаҡындағы легендә һәм риүәйәттәргә яҡын.

*Йәнһеҙ әйберҙәрҙе йәнләндереп ҡарау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән топонимик легендаларҙа йыш ҡына һүҙ барған объекттар үҙҙәре үк әҫәрҙең геройы булып сығыш яһай.* Улар кешесә һөйләшә, бәхәсләшә, төрлө эмоциялар белдерә ала, шул уҡ ваҡытта кешенең ҡулынан килмәҫлек ҡөҙрәткә эйә була. Ике Инйәр ҡайһы яҡҡа табан ағыу турһында бәхәс итә. Иртә уянып, ашығып юлға сыҡҡаны, икенсеһенән ҙур булмаһа ла, шәп аҡҡанға – Оло Инйәр тип, яй ҡуҙғалып, әкрен аҡҡаны, ҙур булһа ла, Кесе Инйәр тип атала була. Был легенда «Ағиҙел менән Ҡариҙел» легендаһының бер версияһын хәтерләтә. Тик тәүге легендала йылға исемдәре аңлатылһа, «Ағиҙел менән Ҡариҙел»дә һүҙ ике йылғаның үҙәндәренең үҙенсәлеген аңлата. “Ҡанлыкүл” легендаһы бәйән итеүенсә, яу ваҡытында ҡойолған ҡан һарҡып төшөүҙән ерәнеп, күл ситкә осоп китә. “Асылыкүл” тигән атаманың килеп сығышын күлдең асулана белеүе һәм бәлә-ҡаза килеүен алдан әшәкртә белеүе менән аңлатыусы легенда ла ошо типтағы топонимик легендалар иҫәбенә инә. “Эт ҡиәфәтендәге таш” (В.И. Даль буйынса), “Йәй ташы”, “Ҡолоҡай таш” ишеләренең килеп сығышына иһә тәбиғәт көстәре менән идара итеү ихтималына инаныу сәбәпсе булған: улар ташты изгеләштереүҙе, уға һуғып, теләгән саҡта ямғыр яуҙырыу мөмкинлегенә инаныуҙы сағылдыра.

Шулай итеп, топонимик легендаларҙа мифологик башланғыс төрлө-төрлө мотив һәм образдар кимәлендә сағыла. Уларҙы хәҙер беҙ бронғоларҙың тәбиғәт серенә төшөнөргә, уны аңларға һәм аңлатырға тырышыуҙарының үҙенсәлекле образлаштырылшы кеүек ҡабул итәбеҙ.

***б). Географик урындың үҙенсәлеген, тәбиғи шарттарынаңлатыусы топонимик легенда һәм риүәйәттәр***

Башҡорттарҙа элек-электән урындарға исемде ундағы үҫемлектәр төрөнә, ҡош-ҡортона ер аҫты хазинаһына, тәбиғи булмышына (төҫөнә, рәүешенә ҡарап биреү ғәҙәте йәшәп килә. Ҡарағай эсе, Түңәрәк карағай, Суғуҫаҡ, Ереклекүл, Көртмәле, Ҡоҙғонташ, Айыулы йылғаһы, Ҡурғашлы, Өйрәкте (Өйрәкле) ҡаяһы, Рудалығабаҡ, Сар һырты, (Бөрйән), Бүреле йылғаһы (Баймаҡ), Ҡайынлыҫил, Суҡмуйыл, Киндерҙеуй, Бүтәгәле туғай, Йөҙ болан яланы, Тимерарҡа (Архангель районы), Тимербаш (Күмертау), Баҡырүҙәк, Алмас тауы (Әбйәлил), Алтынташ, Ҡалҡанкүл (Учалы), Терегмөш йәки Тиргәмеш (Хәйбулла), Оло Асы (Әлшәй), Асы (Белорет районы), Шаушаҡташ, Суҡыташ, Ҡыҙылташ, Ҡараташ һ. б. Шуның кеүек урын атамаларының мәғәнәһе махсус аңлатмаһыҙ ҙа аңлашылып тора. Megaындай топоним, гидроним, оронимдарҙың аңлатмалары, ғәҙәттә, үҙҙәренән үҙҙәре генә риүәйәт йәки легенда булыуға дәғүә итмәй. Шулай ҙа топонимик һәм башҡа легенда, риүәйәттәрҙе тикшергәндә, әһәмиәттәре юҡ, тип, уларҙы ситкә ҡуйырға ярамай. Берҙән, легенда, риүәйәттәрҙе тикшергәндә, улар

ярҙамсы материал ролен атҡара ала. Икенсенән, урындың тәбиғәте, формаһы, үҫемлектәре, ҡош-ҡорто, башҡаһы менән аңлатылған атамалар тураһында һүҙ сыҡҡанда, ҡайһы саҡта шул билдә һәм үҙенсәлектәргә бәйле, шулар арҡаһында килеп сыҡҡан хәл-ваҡиғалар ҙа иҫкә алыныусан. Йәш сағынан алып һалға йөрөгән Хисмәтуллин Әхмәт бабай (Бөрйән районы Нәби ауылы), мәҫәлән, Ағиҙелдәге Һалыуат ташы тураһында бына ни ти: “Ябаҡ ауылының түбәнге осо ҡаршыһында Иҙел ҡаяға эргәләп кенә, һыйынып ҡына аға. Һыуҙың аҫҡы яғын Һалыуат тиҙәр. Унда һыу эсенән ун яҡлап өй дәүмәллек таш сығып тора. Шуға бәрелеп, һыу шарҙап, үкереп ята. Элек өс ағай, шул ерҙә һалдары тирелеп, һәләк булған”. Урындың исеме үк һалсыны иҫкәртеп, хәүефләндереп тормалы: Һалыуат, йәғни һалды ватып торған урын. Әммә уның хаҡында һүҙ асҡанда, тыңлаусыларҙы һиҫкәндермәле фажиғаны телгә алып, риүәйәтсе урын атамаһының иҫкәртеү, хәүефләндереү функцияһын көсәйтеп ебәрә.

*Урындың үҙенсәлегенә аңлатма биргән саҡта риүәйәтселәр шунда үҙе ҡатнашҡан йә шаһит булған төрлө хәлдәрҙе лә хәтерләүсә*н. “...Ну, һалды туҙҙыра-а. Һал имен төшмәй унда. Төшһә лә, бик һирәк булалыр. Мин дә берерәт туҙҙым унда”(“Ҡоламаташ”. Бөрйән районы Нәби ауылы һалсһы Сәхиулла Мәрәсов ауыҙынан).

Шулай итеп, урындың үҙенсәлеге исеменән үк аңлашылып торһа ла, риүәйәтселәр шул үҙенсәлектәргә бәйле хәл-ваҡиғаларҙы хәтергә алып, тыңлаусының хис-тойғоһона йоғонто яһай һәм атама биргән төшөнсәнең хаҡ икәненә ныҒыраҡ ышандырыуға өлгәшә.

Бындай топонимик мәғлүмәттәр борон-борондан, теге йәки был урындың шарттарына нисек яраҡлашыу, нисегерәк итеп көнкүрештә уны файҙаланыу тураһында, тәжрибә уртаҡлашыу функцияһын үтәр булғандар.

Шуныһын да әйтергә кәрәк. Ҡарамаҡҡа, тезисты, ҡыҫҡа хәбәрнәманы хәтерләтеүсе бындай *топонимик риүәйттәрҙе ниндәй һөнәр кәсеп эйәһе һөйләүенә ҡарап, уларҙа шуға бәйле (специфик) үҙенсәлектәр күҙәтелә. Һалсылар, ҡыуғынсылар һөйләгәнендә – йылға буйының үҙенсәлектәренә,* һунарсыларҙыҡында – ҡыр йәнлектәре, ҡош-ҡортҡа, тау эшселәре башҡарғанында ер аҫты хазинаһына ҡарап, ҡорт көтөү менән танышы умартасы күҙлегенән сығып, йәғни үҙҙәренең конкрет күҙәтеүҙәренә, кәсеп тәжрибәләренә таянып, башҡаларға ҡарағанда, ентеклерәк тә, мәғәнәлерәк тә итеп һөйләй алалар. Тап шундайҙар һөйлгән мәғлүмәттәр тулы ҡанлы риүәйәт йә легенда формаһын алып та ҡуя. Ағиҙел буйындағы бер ҡаяның Ҡортҡунған тип аталыуын Хисмәтуллин Әхмәт ҡарт уның балауыҙ төҫөндәрәк булыуы һәм тишекләнеп бөтөүе менән аңлата. Мирасов Сәхиулла бабай әйтеүенсә лә, ул ҡаяның тишектәренә ҡорт ҡуныр булған. Ҡорттар һалсыларҙы имен үткәрмәй, баҫтырып ҡалғылаған. Борон ошо ҡаяла

Бабсаҡ олатай (ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙың бабаһы) бал йыйып йөрөгән. Текә ҡаяға менеп, төшөп йөрөгәндә, Бабсаҡ, Сәхиулла ҡарт әйтеүенсә, бер-береһенән 5–6 аҙымдағы уйымдарға баҫыр булған. Быға ҡарап, Бабсаҡтың мифик зат ҡиәфәтендәге легендар һынын күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел. Аңлашылыуынса, был риүәйәттә информанттың ҡортсо тәжрибәһе лә, һалсы күҙәтеүҙәре лә, үҙ ырыуының "Бабсаҡ менән Күсәк" тигән эпосы, шәжәрәһе менән хәбәрдар булыуы ла – бер уҫҡа йыйылғандай, барыһы, барыһы ла бер юлы бергә килгән.

*Урын атамаһының мәғәнәһен генә түгел, тәбиғи үҙенсәлеген дә фараз итеү юлы менән, уйҙырма ярҙамында аңлатыуҙар ҙа була.* Бындай аңлатмалар ҙа, ғәҙәттә, легенда формаһында бирелә. Был яҡтан Әбйәлил районы ерендәге Атауҙы күленең тоҙло булыуының серен аңлатҡан легенда бик үҙенсәлекле. Уның фабулаһы шунан ғибәрт. Бер ярлы һөнәрсе шундай тирмән эшләй, эйәһе ниндәй ризыҡ теләй, ул шуны сығарып биреп кенә тора. Аҙаҡ уны бер бай һатып ала. Бай ит тоҙларға тоҙ һорай ҙа, йәнәһе, тирмәнде ҡабат туҡтата алмай. Тирмәнде туҡтатырға теләп, күл уртаһында ҡармаҡ һалып ултырған һәнәрсе янына барғанында, кәмәһе түңкәрелеп, тирмән дә, бай үҙе лә һыу төбөнә китә. Тирмән һаман туҡтамай, тоҙ тартыуында, ти. Атауҙы күленең тоҙло булыуын бына шулай аңлатҡандар. Иғтибар менәнерәк ҡарағанда, тирмән образының функцияһы бының менән генә сикләнмәүенә төшөнөргә мөмкин. Йылҡы малы биргән Йылҡысыҡҡанкүл, Асылыкүл кеүек үк, тоҙ тартыусы тирмән дә беҙгә грек мифологияһынан таныш Муллыҡ мөгөҙөн (Рог изобилия) хәтерләтә һәм, шул мөгөҙ кеүек, халыҡтың сикһеҙ муллыҡ тураһындағы хыялын кәүҙәләндерә. Тоҙ башҡорт өсөн сакраль ризыҡ, изге байлыҡ иҫәпләнгән. Бынһы – бер булһа, икенсенән, батша хөкүмәте, тоҙ конторалыры асып, тоҙ юлдарына заставалар ҡуйып, тоҙ сығарыу, тоҙ таратыуҙы контролгә алғас (25, 40–42, 46–53 ), тоҙ башҡорт өсөн проблемаға әүрелә. Легендаға халыҡтың тоҙға ҡытлыҡ кисереүе сәбәпсе булыуы ла ихтимал.

Шуға иғтибар итәйек: серле тирмән ниндәйҙер илаһи көстәрҙең ҡөҙрәте менән түгел, ябай һөнәр эйәһе тарафынан эшләнә. Тимәк, муллыҡ тураһындағы хыял нигеҙһеҙ ҙә түгел, ул хеҙмәт кешеһенең ижади мөмкинлектәренең сикһеҙ булыуына инаныуға таянған.

*Атамалар географик урындың көн итеүгә уңайлылығын йәки уңайһыҙлығын баһалау рәүешендә лә барлыкка килергә мөмкин,* һәр нәмәгә бай, туҡ йәшәргә мөмкинлек биргән йылға Туҡ тип исемләнгән. Төрлө йәнлектәр әүрәп йәшәрлек тау Әүрәүҙе (аҙаҡ Әрүәрҙе) тип аталған, юлаусыға тамаҡ ялғап китергә йүн биргән йылға Ашҡаҙар тип аталыуында ла "Муллыҡ мөгөҙө" мотивы менән оҡшашлыҡ төҫмөрләнә. Ә инде уңайһыҙлығы менән теңкәһенә тейгән урындарға халыҡ уларҙың шул булмышын лайыҡ исем биргән: эшкәртеүе ҡыйын булған ташлы

туғайҙы – Аламатуғай тип, кешеләрҙе һәр сак хәүефләндереп торған тауҙы Ямантау тип исемләгән. Ғәҙәттә былдай топонимдарҙың аңлатмалары ла урын үҙенсәлеге тураһында ҡоро информация биреү менән генә сикләнмәй. Уларҙың араһында ла ярайһы уҡ өлгөргән легенда, риүәйәттәр бар.

*Ер-һыуҙы, бигерәк тә тау-ташты икенсе әйбергә оҡшатыуҙар ҙа уларҙың аталышына сәбәп була.* Ә инде шул оҡшатыуға фараз һәм хыялды ҡушып бирелгән аңлатмалар ҙа топонимик легенда йә риүәйәт формаһын ала. “Муйнаҡташ”, “Бәйғәмбәр ташы”, “Салауат менән Бүгәс батша ташы”, “Сыуалташ”, “Торataш” һ.б. легендалары шулай хасил булған. Алыҫтан ҡарағанда, ҡаяның – суҡайып ултырған эткә оҡшауы тәүгеһенә сәбәпсе булһа, икенсеһе таштағы уйпаттың кеше аяғы эҙенә, өсөнсөһө – таштағы уйымдарҙың ат тояғынан ҡалған эҙгә, һуңғылары таштың ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендәрәк булыуына нигеҙләнгән.

### в) Ауыл тарихтары

Һәр ауылдың – үҙ тарихы. Һуңғы ваҡытта, бигерәк Әнүәр һәм Клара Әсфәндиәровтарҙың “Ауыл тарихтары” тигән том-том китаптары донъя күрә башлағас, халыҡ, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!”, “Шәжәрә байрамы” кеүек тантаналар үткәреүгә әүәҫләнгән дәүерҙә ауыл тарихтарын яҙыуға ныҡ иғтибар артты. Уларҙың авторҙары, ғәҙәттә, архивтарҙа, баҫма сығанаҡтарҙан алынған материалдар менән генә эш итә. Ә хәтерле ҡарттар ауылдың нигеҙләнеше, исеме хаҡында быуындан-быуынға күсеп килгән мәғлүәттәрҙе риәүәйәт йә легенда рәүешендә һәйлгәндәргә бик үк иғтибар итеп бармайҙар. Иғтибар иткән сүрәттә лә, уларҙы ярҙамсы сығанаҡ итеп кенә файҙалананалар. Ауылдың яҙма тарихында, бигерәк тә уның совет осорона ҡағылышлыларында Гражандар һуғышы ваҡиғалары, колхоз төҙөү, нигеҙҙә, яңы власть үҙе индергән НЭП дәүерендә, бауырын ҡалкытып, урта хәллегә әүрелгәндәрҙе кулак тип, шуларға ҡаршы көрәш, Бөйөк Ватан һуғышы дәүере, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары, производство темалары өҫтөнлөк ала.

Ауылдың йәше, ғәҙәттә, баҫма сығанаҡтарҙа әйтелгән “впервые упоминается” нигеҙендә билдәләнә. Боронғо зыяраттарҙағы ҡәбер таштарындағы даталар, “Иҫке урын”, “Иҫке утар”, ”Фәләндең ҡышлауы”, “Фәләндең ултырышы” тигән төшөнсәләр, һәр башҡорт ихтилалы һайын караттар тарафынан меңәрләгән ауылдар яндырылыуы, йола буйынса, янған йорт урынына яңыһын һалыу тыйылыуы, рустарға хас ауыл стандарты ҡасан индерелеүе, уға тиклем башҡорттарҙың утар-утар булып ултырыуы, әле йәшәгән ауылдың йәше тәүге нигеҙ ташы ҡасан һалыныуынан түгел, халыҡтың ошо ергә ҡасан төпләнеүенән башланыуы, башҡаһы иҫәпкә алынмай. Һөҙөмтәлә, ауылдарҙың йәше яһалма рәүештә йәшәртелә. Ҡыуана-ҡыуана, үҙҙәренең тыуған ауылының 150, 200, уҙа барһа 300-350 йыллығын байрам итеү хәҙер ғәҙәт-йоланан үтеп, шау-шыуға,

дөрөсөрөге, модалы шоуға әүрелә башланы. Бәй, тирә-яҡҡа күҙ һалһаң, рус һәм башҡа ҡәүемдәрҙең ауылдары, эргә-тирәләге боронғо заводтар ҡартыраҡ булып сыға башланы. Шулай итеп, төптән уйламайынса, үҙ ауылдарыбыҙҙы йәшәртеп, аңғармаҫтан, үҙебеҙҙе үҙ илебеҙҙә килмешәккә тиңләй башланыҡ.

*Риүәйәт йә легенда рәүешендә һөйләнгән ауыл тарихтары башҡа топонимик легенда риүәйәттәрҙән ҡайһы яҡтары менән айырыла һуң?*

*Беренсенән,* ауыл тарихын һөйләгәндә, риүәйәтселәр, ғәҙәттә, һүҙҙе *уның географик урыны менән таныштрыуҙан башлай:* "Тәкәй ауылы Көсәнде йылғаһының уң яҡ ярына урынлашҡан булған…Ауыл бик уңайлы урынға ултырған. Ике яҡлап та тауҙар теҙелешеп киткән. Тирә-яҡта ваҡ-ваҡ күлдәр. Күлдәрендә төрлө балыҡтар" ("Тәкәй ауылы", 23). Бындай саҡта телгә алынған урын исемдәренә аңлатма бирә-бирә барыуҙары ла ихтимал.

*Икенсенән, кешеләр ауыл ҡорғансы, урын ниндәй хәлдә булған, шуға иғтибар иттерелеүсән.* Бындай саҡта, ғәҙәттә, ауыл һалыныр ер, әлегә бер кем тарафынан да үҫләштерелмәгән ҡырағай урын булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Мәҫәлән, Баймаҡтағы Ҡотлобай (Ҡыпсаҡ), Бөрйәндәге Ғәҙелгәрәй (Шүлгән), Архангелдәге Абзан кешеләренең ҡуйы ҡара урман эсенә килеп ултырыуҙары хаҡында мәғлүмәт бирелә. Урман шул тиклем ҡуйы, хатта бысҡы тыҡҡыһыҙ булған, тиелә Шүлгән ауылы тарихында. Шуның менән тик ошо ауыл халҡының ғына был тирәгә хужа булыуы иҫкәртелә.

*Өсөнсөнән, был ауыл урынына кешеләрҙең ҡасан, ниндәй сәбәптәр арҡаһында йә ниндәй маҡсат менән күсеп килеүҙәре әйтелеүсән.* Боронғо грек мифтарының береһендә Дардондың Ил атлы батшаһы һыйыр артынан барып, шул хайуан үҙ иткән урында Илион (Троя) ҡалаһына нигеҙ һала, Финикия батшаһы Агенорҙың Кадм тигән улы шул уҡ ысул менән Кадемия ҡалаһын ҡорорлоҡ урын таба (15, 233, 472). Шуныһын да әйтергә кәрәк. Кадмға һыйырҙы Аполлон юл күрһәтеп барыусы итеп бүләк итә, һәм ул ял итергә ятҡан ерҙә ҡалаға нигеҙ һалырға ҡуша. Илға иһә күрәҙәсе кәңәше буйынса, Фригия батшаһы сыбар һыйыр бирә. *"Малға эйәреп барып, ул үҙ иткән ерҙә ҡала һалыу" мотивы* ҡасандыр башҡорт фольклорында мәғлүм булғандыр. Сөнки борон уларҙың ерендә Башҡорт (хәҙерге Өфө урынында), Арҡайым, Һынташ (Силәбе өлкәһендә ҡалған башҡорт ерендә), Ҡараҡыя, Минжан (Минйән, Немжан), Мазира менән Ҡазира (Масыра, Ҡасра – Кама буйында), Бөрйән (Буржан Оло Иҙел-Волга түбәнендә) тигән, Тышҡы Башҡортостанда (Дунай буйында) ундан ашыу башҡорт ҡалаһы булған. Үкенескә ҡаршы, "Малға эйәреп барып, ул үҙ иткән ерҙә ҡала һалыу" мотивына нигеҙләнгән риүәйәттәр беҙҙең көндәргәсә һаҡланмаған. Уның байына (ҡарауы), әлеге мотив "мал артына барып, ул үҙ иткән урнда ауыл төҙөү" рәүешендә вариантлашҡан

мотивҡа ҡоролған риүәйәттәр әле лә осрап тора. Халыҡ-ара мәғлүм шул вариант үҙ нәүбәтендә тағы бер вариант хасил итә. Береһе буйынса, кешеләр малдарын юғалта ла, шуларҙы эҙләй торғас, улар төйәк тартҡан ерҙе үҙҙәре лә оҡшата һәм шунда күсеп килеп, яңы ауыл төҙөй. Ҡунаҡбай, Монай, Мырҙа, Иҙелбай ауылдары, мәҫәлән, шулай барлыҡҡа килә.

Яҡшы ер табыу өсөн, малдарҙы махсус рәүештә үҙ ирektәренә ҡуйып ебәреп, улар туҡталған урынды үҙләштереү һөҙмтәһендә ауыл хасил булыуы ла ихтитмал ("Ҡотлобай (Ҡыпсаҡ) ауылы тарихы").

Ҡорған өлкәһендәге Ялан-Ҡатай ырыуы башҡорттарының бер өлөшө, Уралды ҡалдырып, был яҡҡа малдары артынан килеп сыға. Малдар күл тирәһен үҙ итә. Былар ҙа шунда туҡталып, шунда ауыл ҡора ("Баҡай ауылы", "Тәмәк ауылы", 27, 88, 210).

*Дүртенсенән, ауылы хаҡында һөйләгәндә, мәғлүмәтле риүәйәтсеrange унда йәшәгән халыҡтың – ниндәй ырыуға, шуның ниндәй ара (аймаҡ, тармыт, зат) тигән ваҡ төркөмдәренә ҡарауын, уларҙың этнонимын асыҡлаусан.* Әлшәй районында йәшәүс Мең ҡәүеме араһында Ҡыпсаҡ нәҫелле башҡорттар ҙа бар. Улар йәшәгән ауыл ырыу исемен дә һаҡлаған: Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы тиҙәр уны. Уны һөйләүсе Ғәзизова Фариза (1913) уның тарихын бына нисек башлай:

Аҡыҡ-мәрйен кеүек теҙелеп киткән
Ҡыпсаҡ-дәрхәндәрҙең урамы.
Ағастары – ҡарама, ҡошо – бөркөт,
"Туҡсаба!"ҙыр уның ораны.

Шул уҡ районндағы Сапай ауылы Табын ырыуынан, Миәкәләге Сәтәй-Бөрйәнде – Бөрйән ырыуы, Тамьян-Таймаҫты Тамьян ырыуы кешеләре нигеҙләгән.

Ауыл халҡының этник составы хаҡында һүҙ барғанда, шәжәрәлр ҙә килтерелгеләй.

*Бишенсенән, ауылға нигеҙ һалыусы, уның тарихына күпмелер мөнәсәбәте булған шәхестәр, уларға бәйле ваҡиғалар айырым ауыл тарихтарында тотош сюжет хасил итеүсән.* "Сафар ауылы тарихы" башҡорттарҙың рус батшаһы менән килешеп, берләшәүгә аҙым яһауы хаҡында тарихи фактты үҙ эсенә алған. Илсеғол ауылы тарихын һөйләүсе Лоҡманов Ғирфан (1902) батшаға һалдат биреүҙән баш тартҡан Таңбулат батыр, Илсеғол ауылын нигеҙләгән Илсеғол, уның улы Бәкер, ейәне Сафуан Яҡшығолов, Яңы Илсеғолда партия ойошмаһы төҙөгөн Әлимғолов Нәғим, Якупов Фәтхелислам, Этҡолов Тимербәктең эшмәкәрлеген бәйән иткән.

Алтынсынан, ауыл тарихтарында шул ауылға нигеҙ һалыусының йәки уның нисәнселер быуынының уландары бүленеп сығып, яңы ауылға нигеҙ һалыуҙары хаҡында ла әйтелеүсән. "Абзан ауылы" риүәйәте, Уйыл буйынан ҡасып килгән Ҡумырыҡ тигән уҙамандың (риүәйәт уны,

Ҡуҙыйкүрпәстең иң оло ағаһы, тип таныштыра) туғыҙ улы күсеп ултырған ерҙә Тәүәкәс, Абзан, Көмәрле, Ҡыҙылъяр, Оҙондар, Тирәкле, Тимербай, Әтмәмбәт, Аҙау тигән туғыҙ ауыл төҙөлә (Архангель районы). Быңдай ауыл тарихтарына *"Табылдыҡ баланың, ир етеп, ғаилә ҡорғас, ситкә китеп, яңы ауыл ҡорғаны" мотивына ҡоролған риүәйәттәр* яҡын ("Мәмбәт ауылы", "Этәй ауылы", "Рәсүл ауылы").

Һуңғы төркөмсә риүәйәттәрендә *ер мәсьәләһе сағыла.* Ауыл киңәйә, үҫә килә һәм ситтән башҡорт еренә ябырылыусылар күбәйә башлаған дәүерҙә, ер биләр өсөн, башҡа сыҡҡан уландарын атай кеше махсус рәүештә ситкә күсереп ултыртыр булған. Ошо йөмләнән *"Үгеҙ тиреһе тиклем ер" тигән халыҡ-ара мотивҡа нигеҙләнгән риүәйәттәр* бик тә фәһемле. Үтәгән ауылы халҡынан килмешәктәр үгеҙ тиреһе тиклем ер алырға килешеү төҙөй. Был "еңел генә" шартҡа тиҙ күнгән халыҡ төп башына ултыра: тирене еп шиклле итеп телеп, килмешәктәр киң генә майҙанды ҡулдарына төшөрә. Был мотив саха-яҡут, эстон, ҡабарҙы,һинд, һинд-ҡытай, серб, датчан, швед, рус фольклорына мәғлүм (19, 207 – 229). Ул шулай уҡ әкиәтттәрҙә лә осрай һәм уларҙа сюжет хасил итешә (1).

*Ауыл тарихтарында әкиәттәргә хас мотив ҡулланылғас, легендаға тартҡан ауыл тарихтары осрауына аптырайһы түгел.* "Бишул" тигән ауыл тарихы буйынса, Аҙау ауылына нигеҙ һалыусы Аҙау ҡарттың бер улы шүрәле ҡыҙына өйләнә була ла, уларҙан биш ул тыуа. Шул "Биш ул" тигән һүҙ ауыл исеме булып китә.

Бына шулай ауыл тарихтары форма һәм йөкмәтке йәһәтенән дә, тәғәйенләнеше яғынан да күп төрлө топонимик риүәйәт һәм легенда рәүешен алған. Улар борон-борондан, шәжәрә кеүек үк, һәр кемсәнәгә ҡәҙерлә булған, Ватан тураһында башланғыс мәғлүмәттәр биреп, мөһим тәрбиә сараһы хеҙмәтен үтәгән.

## 4. Тарихи легендалар һәм риүәйәттәр

### *а) Легенда, риүәйәттәрҙең тарихилығы*

Быға тиклем әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, риүәйәттәр генә түгел, фантастика менән еңел генә эш итеүгә һәләтле легендалар ҙа бәйән ителгән хәл ваҡиғаларҙың дөрөҫлөгөнә ышандырырға, инандырырға тырыша. Ошо тырышлыҡтың үҙендә генә лә тарихилыҡ башланғысы сағыла. Сөнки ысынбарлыҡта булған хәлдәргә нигеҙләнәме ул, юҡмы, уларҙа халыҡтың билдәле бер тарихи дәүергә хас ҡараштары, теләктәре, хыял һәм өмөттәре үҙҙәренең эҙен һала бара. Тимәк, тарихилыҡ башланғысы уларға тыумыштарынан, тәғәйенләнештәренән үк хас. Тарихи риүәйәт, легендаларҙа иһә шул башланғыс ысынбарлыҡты сағылдырыу принцибына әүерелә. Әммә тарихи риүәйәттәр тарихи сығанаҡты, тарих дәреслеген алмаштыра алмай. Сөнки, фольклорҙың бүтән төр, жанр һәм жанр күренештәре

(разновидность) һәм уларҙың тематик төркөмдәренә хас төп һәм уртыҡ һыҙат уларҙа ла күҙәтелә: улар ҙа тарих һөйләүгә генә ҡайтып ҡалмай, ижтимағи әһәмиәтле хәл-ваҡиғаларҙы, айырым шәхестәрҙең эшмәкәрлеген халыҡтың донъяға ҡарашы, эстетик аңы аша үткәрә-үткәрә генә, һүрәтләй.

***б) Тематик яҡтан тарихи легенда һәм риүәйәттәрҙең күптөрлөлөгө***

Тематик яҡтан тарихи легенда, риүәйәттәр күп төрлө. Уларҙың беҙгә мәғлүмдәренең иң боронғоһо, моғайын, X быуатта Ғәрәп хәлифәте илсеһе Әхмәт ибн-Фадлан теркәп ҡалдырған ике легендар мәғлүмәттер. Беренсеһе бабаларыбыҙҙың мәжүсилеге хаҡында мәғлүмәт бирә. Һүҙ бығаса ла телгә алынған башҡорт дине хаҡында. Ғәрәп илсеһенә бабаларыбыҙ “Ҡыш раббыһы, Йәй рббыһы, Ер раббыһы”, тип ун ике раббыны әйтеп, Күктәгеһе Иң бөйөк Раббы икәнен төшөндөрәләр (12, 131 – 132). Күрәһең, бында һүҙ башҡорттарҙың һәр тәбиғәт күренешенең, һәр әйберҙең үҙ эйәһе (рухы) бар тип иҫәпләүе хаҡында бара. Тик, ят кешегә уларҙың бары ун икеһе хаҡында ғына ишетергә тура килгән. Үҙе исламды ҡабул итеп, сәйәхәте ваҡытында осраған бер ҡәүемде шул дингә күндерә-күндерә йөрөп, миссионер вазифаһын атҡарған был ғәрәп кешеһенә һәр нәмәнең эйәһе булыуына инаныу ғәжәп тойолған һәм шуға ла был ят бауыр уларҙы, ислам тәғлимәте күҙлегенән ҡабул итеп, раббы тип атаған. Ә “раббы” рус кешеһенең “божество” тигәненә тап килә. Икенсе яҡтан, ул Аллаһы Тәғәләнең туҡһан туғыҙ исеменең береһе иҫәпләнә икән. Әхмәт ибн-Фадланға, моғайын да, мәжүсилеккә нигеҙләнгән ошондай легендар мәғлүмәттән тыш, теге йә был раббы-эйәгә бәйле төрлө хәлдәр хаҡында тулы ҡанлы легенда ла ишеттергәндәрҙер. Һәр хәлдә, әлеге көндә лә информанттарҙың легенда, риүәйәт һөйләү прцесын күҙәтеү тәжрибәһе һәм, үҙҙәренең торна культына инаныуын иллюстрациялап, бабаларыбыҙҙың ғәрәп мосафирына легенда һөйләүе шулай уйларға ерлек бирә.

Башҡорттар торнаны тота килеп изгеләштермәгән. Унығы ла мәжүси ҡараштар менән нигеҙләнә. Ә уның буйынса, йәнәһе, башҡорттар бер яуҙа бик ауыр хәлдә ҡалғанда, торналар тубы, дошмандары өҫтөнә ташланып, уларҙы ҡасырға мәжбүр итә. Аңлашылыуынса, бында тарихилыҡ мәжүсилек тыуҙырған тотемистик ҡараш рәүешендәге мифик башланғыс менән бергә бер ҡатнашма тәшкил итә.

Ибн-Фадлан, әйтелгәнсә, башҡорттарҙың тарихына һәм мәжүсилегенә ҡағылышлы легендар башланғыслы мәғлүмәтәрҙе X быаттың тәүге сирегендә яҙып алған. Беҙгә килеп еткән саф тарихи риүәйәттәр ҙа сама менән шул замандарҙа теркәлә башлаған. Мәҫәлән, “Болғарҙар менән башҡорттар” тигән тарихи риүәйәттә бәйән ителеүенсә, был ике ҡәүем йәнәш кенә йәшәгән. Башта был әҫәр ҙә башҡорттарҙың мәжүси

булыуын тәкрарлай. Артабан болғарҙарҙан күрмәксе, уларҙың да исламды ҡабул итеүе хаҡында хәбәр итәлә. Рәсми документтар буйынса, башҡорттар был тарихи аҙымды X быуатта яһай. Тимәк, был яҡтан да риүәйәттең тарихилығы конкретлаша.

***в) Урал тигән ватанды яҡлап, хан баҫҡынсылары менән көрәш тураһындағы риүәйәттәр***

Әгәр хронологик эҙмә-эҙлелеккә килтереп ҡараһаҡ, артабан һүҙ XII – XIV быуаттар тирәһен сағылдырған риүәйәттәр хаҡында барырға тейеш. Ә был дәүер монгол баҫҡынсыларының ер тетрәтеп йөрөгән сағына тура килә. Ысынлап та, “Бөрйәндәр хан заманында”, “Биксура”, “Бошман-Ҡыпсаҡ батыр”, “Аҡман-Тоҡман” ише тарихи риүәйәттәрҙә Сыңғыҙ хан һәм уның вариҫтары заманында болғар һәм башҡорт халыҡтарының ауыр хәлгә тарыуы бәйән ителә. Монголдар, “Урал, Иҙел буйҙарын, Ҡаҙан тирәһен баҫып” алып, Болғар дәүләтен ҡыйрата. Сыңғыҙҙың башҡорт ырыуҙарына оран, ҡош, ағас, тамға биреүе “Бөрйәндәр хан заманында” риүәйәтендә ошо мәлгә күсерелә. “Сыңғыҙнамә” менән сағыштырғанда, был акт анахронизм булып килеп ингән, әлбиттә. Әммә анахронизмдың да үҙ логикаһы бар. Ул башҡорттарҙың яуға үҙ теләктәре менән түгел, Сыңғыҙ тарафынан йәлеп ителеүен нигеҙләү өсөн ҡулай.

Монгол яуы дәүерен сағылдырған риүәйәттәрҙә уларҙың йыртҡыслыҡтары йән тетрәткес факттар менән йөпләнә. Ыҡтың аръяғында күсенеп йөрөгән Ҡарағай-Атайҙы нәҫел-нәсәбе алдында туҡмайҙар, “ат тубығынан ҡалҡыуыраҡ булған барлыҡ ир затының башын ҡырҡалар, ҡатын-ҡыҙҙы әсир итләр” (”Биксура”).

***в) Бояғым хан менән грекатың мифик батшаһы Арксей һәм Аҡһаҡ Тимер менән Зевс улы Персий тураһындағы төрлө дәүер, төрлө этник ерлекле риүәйәт менән миф уртаҡлығы***

Хандарҙың аяуһыҙлығы, ҡанһыҙлығы “Бояғым хан” риүәйәтендә тағы ла тетрәндергес итеп фаш итәлә. Күрәҙәсенең, быйыл ғоманлы булған ҡатындарҙың береһенән тыуған ир бала башыңа етер, тигәне буйынса Бояғым хан биләмәһендәге бөтә ауырлы ҡатындарҙың да эсен ярҙыра. Был мотив “Аҡһаҡ Тимер”, “Фасыл фи бәйән дастан Аҡсаҡ Тимер” тигән дастанда ла бар. Тик тәүгеһендә йөклө ҡатындарҙы тапап сығалар, һуңғыһы буйынса иһә, исемләп әйтелгән бер генә йөклө ҡатынды тапайҙар. Әммә дастанда әйтелгәнсә, “тәҡдирне тәкбир берлән бозмаҡ” мөмкин түгел: сюжеттың өс вариантында ла ҡорһағы яралы бер ҡатын тыумаҫ элек үк аяғынан яраланған, шуға күрә ғүмере буйы аҡһаҡ ҡаласаҡ улан тыуҙыра. Ир еткәс, ул, ысынлап та, яуыз хандың башына етә.

Күрәҙәсенең Бояғым ханға әжәле хаҡында юрауы Арксий тигән грек батшаһының әжәле яңы тыуған ейәне йөҙөндә киләсәген хаҡында оракул әйткәнде хәтерләтә. Башҡорт риүәйәтенән айырмаһы шунда ғына: оракулдың юрауы юш килмәһен өсөн, Арксий Даная атлы ҡыҙын

ир-ат күҙенә эләкмәҫлек итеп бикләп тота. Әммә Зевс алтын ямғыр сифатында уның янына үтеп инә. Шул илаһтар батшаһынан ауырға ҡалған Даная тыуҙырған Персийҙы әсәһе менән бергә, ҡумтаға һалып, ағыҙып та ҡарайҙар. Ләкин улар балыҡсылар тарафынан ҡотҡарыла. Ир еткәс, әсәһенең тыуған иленә ҡайтҡан Персий аңғармаҫтан олатаһын үлтерә (15, 397 – 400). Башҡорт риүәйәтендә лә грек мифында ла күрәҙәсе йәки оракулдың яман юрауы юш килмәһен өсөн, Бояғым хан һәм Арксий батша көнәлгәре күргән саралар бер-береһенә оҡшамаған. Әммә уларҙың маҡсаты бер: ике хаким да күрәҙәсе һәм оракул әйткән заттың ҡулынан үлгеһе килмәй. Әммә, ҡарамаҡҡа, ҡулдарынан килгән бөтә һаҡланыу саралары ла уларҙы көнәлгәре прогнозланған әжәлдән ҡотҡара алмай. Төрлө ваҡытта, мифик дәүер емеше булған грек мифы ла, XIV быуатта (Аҡһаҡ Тимерҙең ғүмер йылдары: 1336 – 1405) булған тарихи ваҡиғаны бәйән иткән башҡорт риүәйәте лә, йыр һүҙҙәре менән әйткәндә, “маңлайҙарға яҙған хаҡ яҙмышын юйып ҡына булмай ҡул менән” тигән фекергә килтерә. Ошо уртаҡ идея төрлө дәүерҙә һәм төрлө этник ерлектә тыуған ике әҫәрҙе типологик яҡтан яҡынлаштыра ла инде.

***г) Аҡһаҡ Тимерҙең ҡанһыҙ булғаны, таркауҙарҙы еңгәне, берҙәмдәрҙән ҡурҡҡаны***

Тыуыр-тыумаҫтан ҡылыстан үткәрелгәс, логик яҡтан фекерләгәндә, хан булып алғас, Аҡһаҡ Тимер үҙе бик тә кешелекле булыр кеүек тойола. Әммә киреһенсә килеп сыға. Әгәр “Учалы” тигән топонимик риүәйәт буйынса, ҡыҙ бирмәгән өсөн, башҡорт йәйләүҙәрен пыран-заран килтерһә, “Аҡһаҡ Тимер” тигәнендә ул “ҡала артынан ҡала алған, уға ҡаршылыҡ күрһәтә алмағандар”.

Башҡорттоң аҫыл ир-егете баҫҡынсылар менән йән аямай һуғыша. Биксура, Сураман батыр, уның ҡатыны, уландары Аҡман менән Тоҡман монгол илбаҫарҙарына баш эйергә теләмәй йәндәрен фиҙа ҡылһа, Бошман батыр ҙа шундай уҡ ҡаһарманлыҡ ҡыла. Әсирлеккә юлыҡҡан Бошманға хан, әгәр ҙә, баш эйеп, үҙенә тоғро хеҙмәт итһә, ғүмерен һаҡларға вәғәҙә бирә. Әммә батыр ғорур рәүештә:“Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй!” – тип, дошмандың тәкдимен кире ҡаға һәм яза-яфалы әжәлен батырҙарса ҡабул итә. Риүәйәттең бер версияһы буйынса, ул монголдар менән алыша, икенсеһе буйынса, Аҡһаҡ Тимер – менән һәм уның ҡулынан үлә.

Һанап кителгән башҡа батырҙарҙың һәләкәте уларҙың да Бошман менән бер һүҙҙән булыуына дәлил. “Ҡараса менән Ҡаҙы батырҙар”, “Ҡырҡ нуғай батыры” тигән риүйәттәрҙә иһә Нуғай ханлыҡтарына ҡаршы көрәш мотивтары сағылған. “Аҡһаҡ Тимер” риүәйәтендә әйтелеүенсә иһә, бер ҡала халҡының берҙәмлеге арҡаһында, Аҡһаҡ Тимер уны ала алмай. Был фекер әҫәрҙә кинәйә менән еткерелә. Бутҡа ашаусы балалар, “табаҡ сығып ҡасмаһын тигәндәй”, уны тығыҙ итеп

уратып ултырғандар. Бер бала бутҡаның уртаһына ынтылғас, әсәһе: “Алдыңдағын аша. Аҡһаҡ Тимер кеүек, буйың етмәгәнгә үрелмә!” – ти.” Табаҡ тирәләй тығыҙ булып ултырыу – ҡала халҡының берҙәмлегенә ишара. Берҙәм булмаһалар, хан ебәргән шымсылар ҡаланың бирелмәүенең серен белә алмай, ыҙаларҙар инемени! Уртаға үрелеүсене әсәһенең тыйғаны, уның шымсыны күҙ уңында тотоп әйткәне, әлбиттә. Шул хәҡиҡәткә төшөнгән хандың ҡамауҙы кире алыуы – ҡала халҡының, ҡан сығармай, еңеүгә өлгәшеүе ул. Был иһә урындағы патриоттар еңеү тигән һөҙмтәле көрәшкә күтәрелһен өсөн, бары берҙәмлек кәрәк, тип әйтеү менән бер.

Шул уҡ ваҡытта, Бошман-Ҡыпсаҡ батырҙың да, Аҡман менән Тоҡмандың еңелеп ҡалыуы, ханға бүләктәр биреп, шуның һибәһенә биләмәләрен киңәйткән Мөйтән ишеләрҙең булыуы (“Мөйтән”), араға һатлыҡ йәндәр инеүе, берҙәмлектең етешмәүе менә дә аңлатыла риүәйәттәрҙә. Шуның менән улар ярҙамында бабаларыбыҙ берҙәмлеккә, тоғролоҡҡа саҡыра.

***ғ) Тарихи риүәйәттәрҙә әкиәт, миф һәм легенда башланғысы***

Дөрөҫлөгө тарихи сығанаҡтар менән дөрөҫләнмәле риүәйәттәрҙән булһалар ҙа, әле ҡаралған әҫәрәҙәрҙә тик легендаға йә әкиәткә генә йөҙ булырлыҡ билдәләр ҙә осрай: “Болғарҙар менән башҡорттар” тигәнендә өс табиптың өлкәне ҡаҙаған ҡыу таяҡ миндек итеп алмалы ботаҡтар ебәреп, япраҡ яра; Сыңғыҙҙың әсәһе күктән ингән, шуға ул изге заттан, ул “бәйғәмбәр хаяты Ғүмәр” йота алмаған тылсымлы төкрөктө йота; нуғайҙың Ураҡ батырын “уҡ та, һөңгө лә алмай”, үҙ ҡылысынан ғына үлә (“Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр”); ҡыпсаҡтарҙы йонсотоусы ҡалмыҡ ханы Ҡазанхан “үҙе яман көслө, оло кәүҙәле әҙәм булған. Башы ҡаҙан дәүмәле… Яурындары әллә нисә аршин. Ул бер ҡысҡырып ебәрһә, тау-ер һелкенеп ҡуйған, ти, аяҙ көндә болот ҡубып йә ҡар, йә ямғыр яуа башлар булған”. Тарихи шәхесте мифик ҡаһармандаҙың образын туҙырғында ғына файҙаланмалы һыҙҙаттар эйәһе итеп һүрәтләүҙең үҙ маҡсаты бар, әлбиттә: тәүгеһе Сыңғыҙхандың образын изгеләштереү, уны, башҡаларҙан юғарыраҡ, ғәҙәттән тыш итеп күрһәтергә теләүҙән килһә, дошман батырын ғәҙәттән тыш көслө һәм тылсым итеп күрһәтеү уны еңгән батырҙың бәҫен күтәреү өсөн кәрәк.

Тарихи риүәйәт булыуына ҡарамаҫтан “Абдрахман Аҡъегетов” риүәйәтендә был алым фантастика төҫөн алғылай. Абдрахманды дошмандың йәҙрәһе лә, ҡылысы ла ала алмай. Яуҙа ул мифтарға хас “дөлдөл толпар” менеп йөрөгән. Тыуған яғында Ҡырмыҫҡалы арҡаһынан ҡысҡырһа, тауышы Үтәгән ауылына ишетлеп торған. Буйы ике аршин ярым, яурыны ибәтәйһеҙ киң, ат көсөнә эйә булып, арыу-талыуҙы белмәгән Йәнһары батыр атҡан уҡ бер саҡрымдағы дошманды ла ала. Ул атһа, уғы хатта бер юлы ике кешене үтә сыға (“Йәнһары

батыр”). Бындай арттырыу, шаштырыу рухындағы уйҙырмалар ҙа риүәйәттә бер ҙә артыҡ элемент түгел. Улар ҙа – башҡорт яугирҙарының батырлығына, яу ҡырында таһыл менән алышыуҙарына һоҡланыу тойғоһон образлаштырыу, хәҡиҡәтте раҫлау сараһы. Ә һоҡланыусылар кем, тигәндә, үҙ халҡыбыҙ ғына түгел, башҡорттар яу менән үткән юлда осраған бар Көнбайыш Европа халҡы, шул иҫәптән, улар менән йөҙмә-йөҙ килеп алышҡан француздар һәм уларҙың генералдары менән маршалдары ла күҙаллана. Башҡорттарҙы юҡҡа ғына “Төньяҡ амурҙары” тип атмаған бит улар.

### *д) Оло Ватанды яклап көрәшкә күтәрелеүҙе сағылдырған риүәйәттәр*

Быға тиклем күҙҙән кисерелгән тарихи риүәйәттәрҙә Ватан, Тыуған ил төшөнсәһе башҡорт өсөн Урал образында дөйөмләштерелһә, Тарихи Башҡортостан Мәскәү дәүләте менән Иван IV-нең “жалованная грамота”лары йөҙөндәге договор нигеҙендә берләшкәндән һуң, ул изге төшөнсәнең йөкмәткеһе киңәйә һәм тәрәнәйә төшә. Хәҙер инде Тыуған ил тигәндә, Рәсәй күҙ уңында тотола.

Берләшкән дәүерҙә Тарихи Башҡортостан менән Мәскәү дәүләтенең паритет булыуын, башҡорт күтәрелештәренең төп маҡсаты шул ике илдең договорлы мөнәсәбәтенең Үҙәк тарафынан бер яҡлы боҙолоуына ҡаршы йүнәлтелеүен әлегәсә танымай, уларҙы йә реакцион хәрәкәт, йә тик милли-азатлыҡ көрәше тип баһалаған бер мәлдә, халыҡ был мәсьәләгә үҙ ҡарашын йыр, риүәйәт һәм хатта эпосында ла аныҡ билдәләгән. “Ихтилалсы башҡорттарҙың батшаға ярҙамға килгәне” тигән риүәйәттә[5] әйтелеүенсә, башҡорттар нәүбәттәге ихтилалға күтәрелгәндә, Рәсәй батшалығы сираттағы Ҡырым һуғышы менән мәж килгән. Батша ғали йәнәптәре: “Башҡорттарым, ярҙамға килегеҙ!” – тигәс, бабаларыбыҙ антын һәм Оло Ватанды хөрмәт итеү йөҙөнән башҡорттар баш тартмаған. Әммә үҙ яуабында былай тигән, ти: “Ярар, батша хәҙрәттәре. Уртаҡ Ватан яҙмышына хәүеф янағанда, беҙ уны яҡлашырбыҙ. Әммә һин шуны бел: уртаҡ дошманды тар-мар иткәндән һуң, беҙ һиңә ҡаршы көрәште дауам итәсәкбеҙ!” Бер ҡатлылыҡҡа тиң бындай асыҡлыҡты, дошмандарын: “Иду на вы!” – тип алдан иҫкәртеүсән рус кенәзе Святославты иҫәпкә алмағанда, Рәсәй тарихы бөтәнсә белмәй. Рәсәй составынан сығыуҙы маҡсат итеп күтәрелгән булһалар, башҡорттар шулай тип иҫкәртеп торор инемени?! Юҡ, әлбиттә. Әле әйтелгәнде Байыҡ сәсәндең алтын һүҙе лә, шуны ишеткән

[5] Был тарихи риүәйәтте авторға 1990 йылда ТТӘИ-ң фольклор һәм сәнғәт бүлеге мөдире Нур Талип улы Зарипов (1925 - 1997) һөйләгәйне, үҙ сиратында быны уға тарих фәндәре кандидаты Әбүбәкер Нуриян улы Усманов (1910 - 1982) ауыҙынан ишетеү насип булған.

халытың үҙе лә ҡеүәтләй. Рәсәй яҙмышын француз агрессияһы ҡыл өҫтөнә ҡуйған сакта сираттағы рус батшаһы ла башҡорттарҙан ярҙам һорай. Күптән түгел генә Салауат яуын ҡанға сәсәтеп баҫтырған батшалыҡҡа ярҙам итергәме-юҡмы? Халыҡ ошондай дилемма алдында ҡалғанда ғына, пәйҙә булған Байыҡ сәсән мәсьәләне еңел генә сисә лә ҡуя. Ул, Тарихи Башҡортостан Мәскәү дәүләте менән берләшкәндә, Аҡ бей батша таныған хоҡуҡтарҙы иҫкә төшөрөп тормаҫтан, шул хоҡуҡтарҙы таныуы бәрәбәренә рус батшаһы алып барған яуҙарҙа ҡатнашырға олатайҙар алған бурыстың ант менән нығытылыуын:

Олатайҙар дихайға[6]
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла, тип Аҡ батшаға
Бушҡа тик ант бирмәгән! (6, 286) –

тип, анттың изге төшөнсә булыуын, уның үтәлеүе фарыз икәнен халыҡ хәтеренә төшөрә. Ант хаҡындә әйткәнен, Мәскәүгә яу асыусы французмы, кем булһын, "ситтән килгән ят булыр, … үҙе Сыңғыҙҙай эт булыр", тип, халыҡ кире уйламаҫлыҡ итеп, "кәртәләп" үк ҡуя. Был осраҡта ла шуны иҫәпкә алыу зарур: Байыҡ сәсән үҙе башҡорт болаларында, шул иҫәптән Салауат яуында ла ҡатнашҡан, тимәк, батшаға ҡаршы сығыш яһаған, шул арҡала, эҙәрләүҙәрҙән ҡасып йөрөгән ҡарт көрәшсе булған. Бына шулай башҡорт халҡы батшалыҡҡа ҡаршы яу асыу – Рәсәй менән яулашыу түгел, тип белгән, уртаҡ Ватандың бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәш менән батшалыҡтың үҙенә ҡаршы ҡорал күтәреүҙе бутамаған. Шуға ла башҡорттар француз яуына ҡаршы дәррәү күтәрелә һәм:

Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен –
Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Табалмайҙар эҙҙәрен, –

тип, Рәсәй тигән Уртаҡ һәм Оло Ватандың азатлығын рус халҡы менән бергәләп яҡлап алып ҡалыуына башҡорттарҙың сикһеҙ ҡыуаныуы ла – шул фекергә иш янына ҡуш.

Рәсәй тигән Оло Ватанды ят бауырҙарҙан һаҡлау өсөн, башҡорт халҡының дәррәү күтәрелеү ғәҙәте бигерәк тә ана шул 1812 йылғы Ватан һуғышы темаһына бағышланған риүәйәттәрҙә тәрән мәғәнәле итеп асылған. Улар, ғәҙәттәр, йыр тарихы рәүешендә һөйләнелә. Йыр тексы – риүәйәттең, риүәйәт йырҙың йөкмәткеһен тулыландырып килә. "Икенсе әрме", "Ҡаһым түрә", "Абдрахман" (йәки "Абдрахман Аҡъегет") – ана шундай синкретик әҫәрҙәргә миҫал. Тәүгеһе, тотош бер эпик ҡомартҡы һымаҡ, пролог тип аталмалы экспозициянан башлана. Унда рус батшаһының бик ауыр хәлдә ҡалыуы, мәсхәрәле рәүештә

[6] Дихайға - буштан-бушҡа.

Мәскәүҙән сығып китергә мәжбүр булыуы хаҡында һүҙ бара. Ошо йәһәттән был әҫәрҙең экспозицияһы “Ҡаһым түрә” риүәйәтенеке менән оҡшаш. Айырма шунда ғына: “Икенсе әрменең” экспозицияһы, асылда, үҙе бер мини сюжетты хасил итә. Уны “Французлдың һуғыш асҡаны, рус батшаһының Мәскәүҙән сығып ҡасҡаны, башҡорттар йөҙөндә таяныс тапҡаны”, тип кенә атарға ла булыр ине. Был мини сюжет йәшерен фольклорлылыҡ алымын ҡулланыуға ҡулай булып сыҡҡан. Классик әкиәттәрҙә, улар был ижад төрөнөң ниндәй жанрына ҡарауына ҡарамаҫтан, герой ауыр хәлгә ҡалғанда, ҡош-ҡорттан берәү йә берәй аҡыл эйәһе уға ярҙамға килә. Дошмандан ҡурҡып, Мәскәүҙе ташлап ҡасыусы батшаның хәле ни хәтлем мөшкөл икәнен риүәйәттәге уның үҙ монологы бик һәйбәт әйтеп тора. Мәскәүҙән киткәс, ана нимә ти батша: “Ай, ата-бабам йөрөгән ер-һыуым! Шулай уҡ дошманға ҡалырһығыҙмы икән ни?! Ҡабат миңә һеҙҙе күреү насип булмаҫмы икән ни?!”

Тап ошо риторик һорау батша ауыҙынан сығыуға, уның алдында, әкиәт геройына аҡыл биреүсе ҡартты хәтерләтеп, уның алдында балыҡсы ҡарт пәйҙә була һәм уға “ат өҫтөндә ҡорҙай уйнаған, сабып килһә, елдәй гөжләгән, ҡая-таштарҙа аҡ кейектәй һикергән, шыр урманды өс бүкәндәй һанаған, юшанлы сағылдарҙы еҙ йыландай аралаған, бүре, айыуҙы ҡуй бәрәндәрҙәй ҡырған, саңғыла һыуҙағы балыҡтай йөҙгән башҡорт тигән халыҡ” барын әйтә. Дөрөҫ, риүәйәттең беҙгә килеп еткән вариантында әкиәттә мотлаҡ күҙәтелеүсе “һин – миңә, мин – һиңә”, йәғни “ярҙамға – ярҙам”, “изгелеккә – изгелек” принцибы күҙәтелмәй. Бәлки информанттың йә яҙып алыусының ғәйебе арҡаһында, текстан төшөп ҡалғандыр йә ни. Бәлки, аҡыллы кәңәш ишеткән батшаның: “Ай, ҡартым! Алтын табаҡтан бергә аш ейгән һанаттарым, мамыҡ түшәктә бергә ятҡан бисәм бирмәгән аҡылды бирҙең. Рәхмәт, ҡартым! ” – тип әйтеүе ул кәмселекте компенсациялай, ул – теләһә ниндәй бүләктән былайыраҡ киммәт тип иҫәпләнгәндер.

“Ҡаһым түрә” риүәйәтендә аҡыллы кәңәш биреүсе образы юҡлыҡҡа юҡ. Әммә риүәйәт менән таныша килә, уның йәшерен рәүештә үҙ эшен атҡарыуына төшөнәһең. Башҡорттарҙан ярҙам һорау уйына батшаның үҙе килеүе, шул уйын һанаттарының: “Дөрөҫ әйтәһең, батша хәҙрәт! Был эште (французды ҡыуыуҙы. – Ә.С.) булдырһа, шулар (башҡорттар. – Ә.С.) ғына булдыра инде,” – тип хуплауы аҡыл биреүсе ярҙамсы персонаж образына ихтыяж юҡ икәнен аңлата. Дөрөҫөрәге, кәңәшсе образы персональ рәүештә риүәйәткә индерелмәһә лә, экспозицияла уның роле үҙ эшен атҡара: уның функцияһы өлөшләтә – батшаның, өлөгшләтә һанаттарының елкәһенә төшә.

Әкиәт логикаһы буйынса, аҡыллы кәңәште тотоп, герой уңышҡа ирешә. “Икенсе әрме” риүәйәтендә иһә батшанан хәбәр алыу менән, “бөтә Урал халҡы йәшен һуҡҡандай, һиҫкәнеп киткән, бөтәһе лә аяҡ өҫтө

баҫҡан” тигән һүҙҙәр генә лә – “ил хакимы уңышҡа ирешкән”, тип әйтеү менән бер. Был һығымта тулыһынса “Ҡаһым түрә” риүәйәтенә лә ҡағыла. Унда ла, батшанан хәбәр килеп етеү менән, Башҡорт илендә “Күҙ асып йомғансы йыһан ғәскәр йыйылған. Йыйылышып, һуғышырға тип, юлға сыҡҡандар.” “Икенсе әрме” риүәйәтенең төп сюжеты, ошо әйтелгәнгә асыҡлыҡ индерергә теләгәндәй, “йыһан ғәскәр” йыйыу өсөн, ниҙәр эшләнгән, шуны һәм “бөтә Урал халҡы… аяҡ өҫтө баҫҡан” тигәнде иллюстрациялағандай итә. Уныһы иһә үҙ нәүбәтендә йола ҡанундарын үтәү юҫығында бирелә. Яу кәрәк-ярағы булған ҡорал, юл аҙығын күмәкләп әҙерләү – асылда, өмәнән, яуға китеүселәрҙе оҙатыу иһә – йыйындан ғибәрәт. Йыйын картинаһы – тотош бер театраль күренеште хәтерләтә. Унда классик драма, театр ҡанундары талап иткән ваҡыт, урын, персонаждар составының берлеге принцибы ла күҙәтелә. Персонаждарҙың диалогы йыр текстары рәүешендә бирелә. Йырҙар хор менән башҡарыла. Әбей-һәбей үҙҙәренең йыр-алғышы менән ир-егеттең “йылдары… айҙай тиҙ үк үтеп, иҫән йөрөп, еңеп ” ҡайтыуын теләй; бисәсәсә “ҡоштар үтһә, … сәләм килә, тиеп үк йыраҡтан”, тип көтәсәктәрен белдерә; ҡыҙҙар “еҫкәгәндә, аңҡыр илегеҙ, ил намыҫын бергә шул бүләктә йөрәгегеҙҙә бергә һаҡлағыҙ”, тип, вәғәҙә билгеһе итеп ҡулъяулыҡ, янсыҡ бүләк итә; ата-әсә “сал бөркөттәй талғын бул сапҡанда, дошманыңды ҡыйрат яй белеп”, тип теләк теләй; сәсәндәр Урал батырҙан, Ҡараһаҡалдан, Салауаттан өлгө алырға саҡыра. Яуға китеүселәр иһә үҙ нәүбәтендә уларҙың данына дан өҫтәргә вәғәҙә бирә. Ошо йәһәттән егеттәр хорындағы

“Ата-бабаларҙың ҡанын һыулап
Үҫкән сауҡаларҙан уҡ юнып…”,

“Быуын-быуын үткән батырҙарҙың
Һүҙен тыңлап, йырҙар йырларбыҙ”, –

тигән һүҙҙәр иғтибарҙы тарта. Тәүгеһе мәшһүр “Урал” йырындағы

“Эй, Уралым, һинән ҡырҡып алһам,
Ат ҡыуыр ҙа яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары”

тигән йән тетрәндергес һүҙҙәрҙе хәтергә төшөрә. Ҡырҡҡан саҡта, талдан тамған ҡан образына “Урал йөҙөндә һынландырылған Ватанынын һаҡлап быуын-быуын һәләк булған башҡорт батырҙарының, һанынын һанап, осона сыҡҡыҙ”, “был ер улар ҡаны менән һуғарылған, шуға ла ул ғәзиздән ғәзизерәк” тигән мәғәнә һалынған. Тимәк, шул ҡандан һут алып үҫкән сауҡанан уҡ юныу – бер яҡтан, Илем, Ватаным, тип һәләк булған батырҙар традицияһының күсә килешенә ишара булһа, икенсе яҡтан, “Эскадрон” тигән йырҙың, ат ҡушарлап, Наполеон яуына ҡаршы сапҡан лирик геройының:

Урал ғына ҡошо, ай, һандуғас,
Ат менгәндә, моңло һайраның.
Ҡындан алып Алмас ҡылысымды
Урал ташҡайына ҡайраным, –

тигәненең аналогы икәне яҡшы аңлашыла. Ә был һүҙҙәр – башҡорт егете Урал атлы изге Ватаны еренән, ошо изге ерҙе быуын-быуын ҡурсалаған батырҙарҙың ҡаһарманлыҡ традицияһынан көс ала, шуға ла ул, батыр, тип әйтеү менән бер.

Йырға "Урал батыр" эпосынан мәғлүм Алмас ҡылыс образының килеп инеүе иһә, батырлыҡ традицияһының башын мифик дәүерҙәргә алып барып ялғағандай итә. "Ҡаһым түрә", "Абдрахман Аҡъегетов" тигән риүәйәттәрҙең ҡаһармандары йөҙөндә тап ана шул традицияны дауам иттереүсе батырҙарыбыҙ конкрет һынландырыла ла инде.

Риүәйәт буйынса, халыҡ үҙе һайлаған командир Ҡаһым түрә етәкселегендә башҡорттар французды Мәскәүҙән ҡыуа, уларҙың баш ҡалаһы Парижды алыу – уның батшаға әйткән тәҡдименең бойомға ашмышы. Мәскәүҙе азат иткәс, батшаның тынысланып ҡалыуы ла, көнбайышҡа походҡа, Ҡаһым түрә әйткән өсөн генә, яһалыуы ла – уйҙырма, әлбиттә.

Батырлыҡтарын баһалап, батша бүләк бирергә иткәндә, башҡорт яугирҙарының унан баш тартыуы уларҙың дан өсөн түгел, Ватан хаҡына һуғышыуҙарын, тимәк, ысын ватансы булыуҙарын раҫлай. ("Ҡаһым түрә", "Абдрахман Аҡъегетов").

***е) Тарихи риүәйәттәрҙә барымта һәм карымта темаһы.***

Тарихи риүәйәттәрҙең ҙур ғына бер өлөшө, бигерәк тә Тарихи Башҡортостандың көнъяғында, Урал аръяғында таралғандары, башҡорттар менән ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡалмыҡ ырыуҙары менән барымталашып, ҡарымталашып тороуҙарын бәйән итә. Әлбиттә, уларҙы тегендә лә, бында ла егетлек, етеҙлек, ҡыйыулыҡ сағылышы, тип тә баһалағандар. "Ерәнсә менән Бәндәбикә" риүәйәтендә әйтелеүенсә, ҡатыны тыйыуға ҡарамаҫтан, йәш сағында Ерәнсә сәсән ҡаҙаҡ далаһы яғына сабауыллауҙы бер ни ҙә күрмәгән. Мораҡай батыр өйҙә юҡта ҡаҙаҡ батырының килә килеп уның ҡатынын алып ҡасыуы ла – барымтасы яҡ күҙлегенән егетлек ("Мораҡай батыр").

Шулай ҙа ҡаҙаҡтарҙың яфа һалыуы халыҡ хәтерендә нығыраҡ һаҡланған. Был тема хатта 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡындағы риүәйәткә лә килеп ингән. "Ҡаһым түрә" риүәйәтенең Баймаҡ ҡалаһынан Вахитова Мәғәвиә (1905) һөйләгән варианты буйынса, француз яуын атҡарғандан һуң, батша, Ҡаһым түрәне полковник дәрәжәһенә күтәреп: "Тағы һеҙгә нимә кәрәк?" – тип һорай була. Башҡорттар: "Беҙҙе ҡаҙаҡ ыҙалатмаһын ине," – тиҙәр.

"Ҡаҙаҡ ыҙалатыуы"мотвы риүәйәттәрҙә шулай сағыла: уландары өйҙә юҡта, килеп баҫып, Тәүәш ҡартты үлтереп, бер киленен алып

ҡасалар (“Тәүәш”); башҡорттарҙың йылҡы көтөүен ҡыуып алып китәләр, арттарынан төшкән ҡырҡ башҡорт егетен ҡыралар, Әүбәкер батыр ғына имен ҡала (“Әүбәкер”); Ҡарабайҙы үлтереп, Күсәбикә атлы ғоманлы ҡатынын әсир итеп, мал-тыуарын Яйыҡ аръяғына ҡыуалар (“Күсем батыр”); Ябайһынсының Ерәнсәй сәсән тигән улын әсиргә алалар (“Ерәнсәй сәсән”) һ.б.

Бер сапҡынлыҡ та яуапһыҙ ҡалмаған, әлбиттә. Тәүәш ҡарттың уландары, ҡаҙаҡ далаһына сығып, үҙҙәренең төшөп ҡалғандан түгел икәнен күрһәтә. Ҡаҙаҡ байы ояһынан сығып ултырған йомранға атырға ҡуша: йәнәһе, башҡорттоң мәргәнлеген һынар өсөн, шарт ҡуя. Егеттәрҙең береһе тупаҡ уғы менән йомрандың башына тигеҙә. Шул мәргәнлекте күргән бай: “Малдары ла байлыҡтары ла кәрәкмәй, бөтә нәмәләрен биреп ҡайтарығыҙ!” – ти.

Әсирлектән ҡасып килгән Күсем дә ҡыуғынсыларҙың шартын үтәп, мәргәнлеген күрһәтеүе арҡаһында, имен ҡала. Уға йылға аръяғында торған ерҙән балдаҡ үтә атырға шарт ҡуйыла. Күсем бер атыуҙа шартты үтәй. Ҡаҙаҡ әсирлегенән ҡотолрға Ерәнсәйгә һынсыллығы ярҙам итә. Һынсыллығы арҡаһында, яңы тыуған ҡолондоң толпар буласағын белеп, уны үҙе ҡарап үҫтерә һәм бәйге ваҡытында, ҡасып ҡотола.

Шарт ҡуйыу, шарт үтәү йолаһы бына шулай ҡан ҡойошһоҙ ғына еңеүсене билдәләү, шул юл менән конфликтты тыныс хәл итеү сараһы булған.

Ҡан ҡойош булмаһын өсөн, ике яҡтан берәр батырҙы сығарып, ниндәй шарт ҡуйышһалар, шуның буйынса уларҙы көс һынаштырғандар. Атышыр булһалар, йәрәбә һалышҡандар йә ҡасып барыусыға беренсе булып атыу хоҡуғы биргәндәр. Дауыт батыр ҡаҙаҡтарҙы ҡыуып еткәс, ҡаҙаҡ батырына: “Ҡайҙа ҡасаһың? Мин һине атам!” – тигәс, тегеһе: “Юҡ. Мин атырға тейеш,” – тип атып ебәрә. Дауыт иһә уғының башын дүрткә ярып атыуы була – ҡаҙаҡ батырының күкрәген дүрт урындан тишеп сығыуы була. Икенсе ҡаҙаҡ батыры килеп етеп: “Нисә уғың бар?” тип һорай. Дауыт батыр берәү икәнен әйтә лә тегенең уҡ батманының бауын өҙә ата. Шул таһыллылығы баҫҡынсыларҙы талап алынған мал-тыуарҙы ла, Дауыттың әсирлеккә алынған еңгәһен дә ташлап ҡасырға мәжбүр итә (“Дауыт батыр”). Ҡалмыҡ барымтасылары менән бер бәрелештә Тәкәғашҡаның билһынашта ҡалмыҡ батырын еңеүе баҫҡынсыларҙың башҡаларын тырым-тырағай ҡасырға мәжбүр итә. Икенсе осраҡта уларҙың башлығын һөңгөгә алыуы ла башҡорт батырын шундай уҡ һөҙөмтәгә ирештерә (“Тәкәғашҡа”).

Ҡабат-ҡабат сапкын яһап, халыкты яфалап тороусы баҫҡынсыларҙы ҡамап алып, тик берәүһен генә имен ҡалдырыу йолаһы ла булған. Ул үҙ иленә ҡайтып, хәлде аңлатһын, бүтәнсә барымта сапмаһындар өсөн, сараһыҙҙың көнөнән шулай иткәндәр. Ғөмүмән алғанда иһә, варварлыҡ

дәүеренең бер реликты рәүешендә һакланып ҡалған был йола һәр яҡҡа ла иҡтисади һәм мораль яҡтан зыян ғына килтергән. Шуға ла ул риүәйәттәрҙә ул шелтә менән телгә алына. Үҙ-ара сапҡын яһашыуҙарҙың туҡтатылыуы, ғәҙәттә, Тарихи Башҡортотандың Рәсәй менән берләшеүе менән аңлатыла (“Тәкәғашка”, “Дауыт батыр”), ә инде шунан һуң да барымтаға барыусы булһа, уның яуапҡа тарттырылыуы хаҡында әйтелеүе лә был ҡырағай йолананы халыҡтың ек күреүенән килә. Риүәйәттәр унынын да сағылдырған (“Әүбәкер”, “Муйнаҡ ҡарт”).

***е) Риүәйәттәрҙә Башҡортостанды колонизациялауға ҡаршы йәки үҙәктең үҙе тәкдим иткән договарлы мөнәсәбәттәрҙе үҙе боҙоуына ҡаршы көрәш темаһы.***

Башҡортостанды колонизациялауға ҡаршы көрәш күп һанлы оригиналь сюжетлы риүәйәттәр тыуыуға сәбәпсе булған. Был тәңгәлдә иң элек ер проблемаһын күтәргән риүәйәттәр алғы планға күсә. Иван IV-нең үтенеүе буйынса, тарихи Башҡортостан Мәскәү дәүләте менән берләшкән дәүерҙә башҡорт ырыуҙары бейҙәренә ул тотторған “жалованная грамоталар” менән халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән үк килгән ергә аҫабалыҡ хоҡуғын таныһа ла, 1649 йылда батша Алексий Михайлович үҙенең “Соборное уложение”һы менән был хоҡукты нығытып, башҡорт ерҙәренең тейелмәҫлеген раҫлаһа ла , 1613 йылда тәхеткә килгән Романовтар династияһы XVIII быуат баштарынан алып Башҡортостанға ҡарата “глобаль колониаль сәйәсәт үткәрә башлай” (10, 7, 8, 17). Аҫаба ерен йә көс менән, йә башҡорттарҙы алдаштырып, тартып алыуҙар ”Үгеҙ тиреһе тиклем ер”, “Ер һатыу”, “Баярҙың ер алғаны” ише риүәйәттәрҙә “Үгеҙ тиреһе тиклем ер алыу” мотивы менән образлаштырыла .

Колонизаторҙарҙың ер алыуы темаһы бер төркөм риүәйәттәрҙә төп маҡсаты башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын таныған “Жалованная грамота” шарттарының, тимәк, Рәсәй менән Башҡортостан араһындағы договорлы мөнсәбәттәрҙең күҙәтелеүен талап иткән ихтилалдар темаһына олғаша. Был яҡтан бигерәк тә Салауат Юлаевтың эшмәкәрлеген сағылдырған әҫәрҙәр мөһим урын биләй. Билдәле булыуынса, “Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтар 1773–1775 йылдарҙағы крәҫтиән яуында әүҙем ҡатнашҡан. Пугачев ғәскәрендә башҡорттар, мишәрҙәр, татарҙар һ.б. рус булмаған халыҡтарҙың вәкилдәре күп булған, ләкин ҡатнашыусыларҙың һаны, сығыштарының масштабы, дөйөм көрәштә уйнаған ролдәре буйынса башҡорттар беренсе урында торған” (14, 110). Азатлыҡ даулап көрәшкә сыҡҡан башҡорт халҡы үҙенең араһынан Салауат Юлаевты юлбашсы итеп күтәргән.

Салауат Юлаев ихтилалдың башынан аҙағынаса Пугачевтың тоғро ярҙамсыһы булып, уға һәм үҙ халҡына хыянатһыҙ хеҙмәт иткән. Ихтилалдың төп көстәре Ҡаҙан яғына, унан Волга буйлап түбән таба йүнәлгән мәлдә, Башҡортостандағы крәҫтиән хәрәкәте Пугачевка

ҡаршы йүнәлтелгән хөкүмәт көстәренең бүлгеләнеүенә сәбәпсе булған. Хатта Пугачев тотолғас та, салауатсылар көрәште дауам иткән.

Башҡорт халҡы үҙенең милли батыры менән ғорурланған һәм уның тураһында йырҙар, риүәйәттәр, легендалар ижад иткән. Ләкин, властәрҙең ҡаты эҙәрләүҙәре һөҙөмтәһендә, уларҙың күптәре беҙҙең көндәргәсә килеп етә алмаған. Ихтилал баҫтырылғас, Салауаттың исемен телгә алыу ҙа сәйәси енәйәт һаналған. Хәҙерге Салауат районы уҙаманы  Солтанов Ғарифйән тигән кешенең бер йыйында Салауат батыр көйөн скрипкала һыҙҙырып йырлай башлауы була – Хөснулла урядник уны биш тәүлеккә ябып та ҡуя (25, 41–42). Н.В. Короленко ла крәҫтиән һуғышы етәкселәре хаҡында һөйләүҙең тыйылған булыуы тураһында яҙып ҡалдырған: Пугачев тураһында күпте белгән Наторий (Енаторий) Кузнецов тигән кеше: «Сәйәсәт тураһында һөйләргә ярамай», – тип, крәҫтиән батшаһын телгә алырға ла ҡурҡа (12, 433–435). Шулай ҡаты тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, ил ҡаһармандарын халыҡ онотмаған. Уларҙың исемен киләсәк быуындарға еткереү сараһын күргән. Ундай сара хеҙмәтен йыр, бәйеттәрҙән тыш, хәтирәләрҙән үҫеп сыҡҡан риүәйәттәр ҙә үтәгән.

*Салауат Юлаевка арналған риүәйәттәрҙең күбеһе геройҙың тормошондағы берәй эпизодты тасуирлауҙан ғибәрәт.* Шулар аша халыҡ уның характер һыҙаттарын аса. “Салауаттың ситтә йөрөп ҡайтыуы” тигән риүәйәттә, башҡорт ерен тартып алып, заводтар ҡороусы колонизаторҙарға ҡаршы күтәрелгән һуғыштан бер эпизод килтерелә. Был һуғышта Салауат үҙен халыҡ теленә инерлек батыр ир егет итеп күрһәтә. 16–17 йәштәрҙәге батырҙың геройлығы хаҡында риүәйәттә күпте күргән ҡарт ауыҙынан әйттерелә: “Салауаттың батырлығын күреп, хайран ҡалдым. Бына был бала – ир балаһы тиһәң дә, ир балаһы! Ул барып һуғыша башлаған ерҙә һис кем сыҙамай бит! Аты үлеп, атһыҙ ҡалғас та, күпме кешене ҡырҙы...” (4, 212). Исемһеҙ ҡарт был риүәйәттә халыҡ исеменән һөйләүсене кәүҙәләндерә. Шуға ла уның һүҙҙәре йәш батырҙы халыҡ баһалауы булып аңлашыла. Ҡарт: “Уны ил батыры яһарға кәрәк, мин уны изге юлға төшөрәйем”, – тип, Салауатты Пугачев янына алып китә. Тимәк, халыҡ ир-аттың ысынлап та ил батыры булыуын уның үҙ халҡы өсөн азатлыҡ көрәшенә күтәрелеүендә күргән һәм шуны «изге юл» тип атаған.

Һүҙ барған риүәйәт буйынса, ике-өс йылдан Салауат кире ҡайтып, атаһынан ғәскәр алып, Пугачевҡа барып ҡушыла. Асылда, эш былай торған: 1773 йылдың октябрендә, властарҙың бойороғо буйынса, старшина Юлай Аҙналин 80 (икенсе сығанаҡтар буйынса 95) кешелек отрядты улы Салауат етәкселегендә Стәрлегә ебәрә. Унда отряд Пугачевҡа ҡаршы барған генерал Карҙың карательный ғәскәренә ярҙамға ебәреләсәк башҡорт командаһына ҡушыла. Ләкин башҡорттар, Кинйә Арыҫланов менән уның туғаны Ҡотлогилде Абдрахмановтарҙың

өгөтөнә бирелеп, Пугачев яғына сыға. Салауат та улар менән була. Ноябрҙә Пугачев уны, ғәскәр йыйыу өсөн, иленә ҡайтара (14, 123).

*Шулай итеп, риүәйәттә “уйҙырмалылыҡ һәм анахронизм берлеге” тип аталмалы күренеш менән осрашабыҙ.* Ләкин был хәл әҫәрҙең идея художество ҡиммәтен төшөрмәй, киреһенсә, теманың тулыраҡ асылыуына булыша. Үҙендә халыҡ аҡылын туплаған ҡарттың һүҙҙәре һәм риүәйәттә Салауаттың 2 – 3 йылдан Пугачевҡа ғәскәр йыйып алыуы тураһында әйтелеүе һыналған батыр булып етешкәс кенә, геройҙың, халыҡ тиклем халыҡты оло көрәш юлына әйҙәрлек дәрәжәгә күтәрелеүен күрһәтеү өсөн, ҡулланылған художестволы сара ул.

*«Салауат телмәре» риүәйәтендә Салауаттың оҫта ойоштороусы, агитатор, сәсән булыуы асыла.* Салауатҡа халыҡтың аһ-зары таныш, уның хыялдары яҡын. Шуға ла, халыҡҡа өндәшкәнендә, кешеләрҙең йөрәгенә үтерлек тәьҫирле һүҙҙәр таба. Пугачевтың: ”Башҡорттар үҙ илдәрендә теләһә, ҡош булып осһондар, теләһә балыҡ булып йөҙһөндәр”, – тигәне Мәскәү батшаһы Иван IV “жалванная грамота”ларында юридик көскә әүерелгән вәғәҙәләре менән ауаздаш булған өсөн, уның һәр кем күңеленә хуш килерен яҡшы белә. Һәм уны халыҡҡа ихлас еткерә. Шуның менән бергә халыҡ батшаһының маҡсатниәттәрен дә аңлатып бирә: “Бүгәс батшамы, түгелме, уныһында беҙҙең эшебеҙ юҡ. Бүгәс түрәләргә, баярҙарға ҡаршы. Беҙгә шул етә”, – тип, тик, Пугачевҡа ҡушылып ҡына, уның менән бергә-бергә көрәшкә күтәрелгәндә генә, колонизаторҙарҙан күргән йәбер-золомдоң ҡонон, алырға мөмкин булыуын төшөндөрә.

*Пугачевтың вәғәҙәһендә крәҫтиән массаларының “яҡшы батша”, “халыҡ батшаһы” хаҡыдағы утопик ҡарашы ла сағылып ҡала ҡалыуын. Әммә эш унда түгел, ә Пугачев саҡырыуының шул хыялға тап килеүендә һәм ойоштороу көсөнә әүерелеүендә.*

Салауат үҙенең телмәрендә:“Туйҙа, майҙанда көрәшеп, кеше йығыу менән генә, кеше бәһлеүән була алмай, илен эйәртеп, ил ирке өсөн дошманын еңеп, ил күрке булыу – бына шул була бәһлеүәнлелеҡ”, – ти һәм:

“Батырмын тип кем әйтмәй –
Яу килгәндә йүне юҡ.
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй –
Яу килгәндә өнө юҡ” (26, 44) –

тип, шиғри телмәре менән халыҡты батырлыҡҡа, көрәшкәөндәй.

Халыҡ Салауаттың йырының ҡоралдаштарын дәртләндереү һәм ойоштороу һәләт, шул инанысын былай тип йырға һалған:

Салауаттың менгән кир аты
Батыр ғәскрҙәргә юл башлай.
Кир ат өҫөтөндәге Салауат,
Яуға дәртләндереп, йыр башлай.

Ҡара ғына урман, ҡараңғы төн,
Йәшен генә йәшнәй ялтырап.
Салауат та батыр йыр йырлаһа,
Дошмандары тора ҡалтырап.

Кир аттың юл башлауы менән Салауаттың яуға дәртләндереп йыр башлауы һәм ҡараңғы төндә ялт-йолт йәшен ялтырауы менән Салауаттың йырынан уҡ дошман ҡурҡыуы араһында эске йәнәшәлек, сағыштырыуға ҡоролған был йыр сәсмәүер рәүешендә Р.Г. Игнатьев теркәгән Салауат тураһындағы йыр менән ауаздаш. Әлегә беҙгә мәғлүм булмаған ул йырҙа Салауаттың телмәренең тәьҫир итеү ҡеүәһенә лә дан йырлана: Салауат “телмәр тотһа, телмәре күңелдәргә хуш килде; йыр йырлаһа, кешеләр яуға дәртләнде, яра һыҙлауын тойманы; аслыҡтан да ҡурҡманы, һалҡындан да ҡурҡманы; хатта, йәҙрә тейеүҙән, ҡылыстан, штыктан үлеүҙән дә ҡурҡманы; үлгәндә лә, шатлыҡ менән үлде” (10а, 81).

«Салауат телмәре» әҫәрендә лә башҡорттар, Салауаттың көрәшкә саҡырыусы поэтик телмәре менән рухланып, таланған, яндырылған ауылдарҙың күмерен үбеп, колонизаторҙарҙан үс алырға ант биреп, Пугачевҡа ҡушылырға китәләр.

Телмәр тотоу, йыр йырлау – бер эш. Әгәр лидер үҙе өндәгәнгә үҙ тоғро булмаһа, йыр менән дәртләндереүем дә етеп торор, тип, үҙе ситкә китһә, уны буш ҡыуыҡҡа ғына һанарҙар ине. Салауат иһә дөрөҫ һүҙ әйтеү, дәртле йыр йырлау менән генә сикләнмәгән. Яу ҡырында үҙе ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ өлгөһөнә әүерелгән. Дошманының хәлен хәлләп. атын-затын һорап тормаған, кәрәк икән ҡылыс алышта, кәрәк икән билһынашта, кәрәк икән ҡул һуғышында берәүгә лә ал бирмәгән. Уның шул шәхси батырлығы, таһыл менән алыша, һуғыша белеүе лә яуҙаштарын көрәшкә рухландырыр булған. «Салауат бик ҡеүәтле булған» тигән легендала уның сос, ҡеүәтле кеше булыуы гиперболик алымдар аша асыла. Яуҙа яраланып, ерҙә ятҡан ете ботлоҡ (йәғни 112 килолыҡ) Мөгөш тигән дуҫын ул, ат өҫтөндә сабып барышлай, һыңар ҡулы менән генә эләктереп, алдына һалып, алып ҡаса. Уның был сығышында батырлығы, бәһлеүәнлеге генә түгел, тәүәккәллеге лә, етеҙлеге лә һәм, әлбиттә, дуҫлыҡҡа тоғролоғо ла сағыла.

Салауаттың ҡеүәтле булыуы хаҡындағы икенсе бер әҫәр ҙә, асылда, тарихи легенданан ғибәрәт. Атыр уғы бөтөп, ҡамауҙа ҡалған Салауат елле генә бер сауҡаны йолҡа тартып алып, дошмандарын шуның менән дөмпәҫләй. Реаль тарихи шәхес булыуына ҡарамаҫтан, гипербола алымы ярҙамында Салауатты шулай ғәҙәттән тыш көс-ҡеүәт эйәһе тип күрһәтеү уны Урал, Минәй, Иҙел, Яйыҡ, Алпамыша ише мифик батырҙар образы менән танышлыҡтан, уны ла шул ҡаһармандар образы галереяһын тулыландырыусы тип күрергә теләүҙән килә, әлбиттә. Бына шул һүҙ барған әҫәрҙе тарихи легенда итә лә инде.

Салауат хаҡындағы халыҡ йырында "Ҡалҡанҡайы һәлмәк, уғы мәргән – Дошман яуын ҡырҙы шаулатып" тигән һүҙҙәр бар. Уларҙың хаҡ икәнен риүәйәт тә раҫлай. Яу башында килгән дошман батырының баштан-аяҡ тимер кейем менән көпләнгәнен күргәс, Салауат аптырап ҡалмай, маңлайында ғына асыҡ ҡалған урынға төҙәп атып ебәреүе була – "теге батыр атынан әйләнеп, тас салҡан йығылып төшкән. Был хәлде күреп, килгән яу кире ҡасҡан".

Тәүҙә яу башлығын атып йығып, ҡалғандарын ҡасырға мәжбүр итеү йә тимер кейемле дошмандың, кес кенә булһа ла, берәй асыҡ урынына ҡаҙалырлыҡ итеп уҡ ата белеү ҙә – батырлыҡ, таһыллылыҡ һәм мәргәнлек үлсәме иҫәпләнгән. Тарихи риүәйәттәрҙә ул шуға күрә лә ҡаһармандың тап шул һыҙаттарын асыусы үҙенсәлекле бер традицион художестволы алым вазифаһын үтәй. Бөтә тәненә тимер көпө кейеп килгән дошманын Муйнаҡ батыр ҙа саҡ ҡына асыҡ ҡалған сорҡолдайына ғына атып йығыр булған («Муйнаҡ ҡарт»). "Аҡъюл батыр" риүәйәтенең геройы бер баш ҡаты ҡорот менән баҫҡынсы ҡаҙаҡ батырының мейеһен сәсрәтә һуғыуы була – юлдаштарының ҡасыуы була. Тәкәғашҡа ла ҡалмыҡ яуын шул ысул менән кире бора. Тик уға уларҙың батырын еңеү ауырғараҡ тура килә. Ни өсөн тигәндә, дошман батыры, ҡарап тороуға ла, ҡот осмалы бәһлеүән була. Уны, етәк малы һымаҡ, арҡанлап ике яҡтан тотоп киләләр. Тәне майланған. Үҙе иһә, ер тырнап, үкереп килә. Ә Тәкәғашҡа, Ер-әсәнән көс-ҡеүәт алған Антейҙы Геракл нисек еңә, шуны хәтерләтеп, тегенең ике һәбәләгенән тотоп, һауаға сөйә. Батырҙарының мәсхәрәле еңелеүен күргән башҡа ҡалмыҡтар, алышһыҙ-ниһеҙ ҡасып китә. Салауат батыр ҙа, бер ни тиклем миф буяуы еҫе аңҡып торған легендар Муйнаҡ, Аҡъюл, Тәкәғашҡа батырҙар кеүек үк, бер үҙе яу ҡайтарған идеаль герой итеп кәүҙәләндерелә. Улай ғына ла түгел, хатта ки бер үҙе яу ҡайтарыусы әкиәт батырҙарын, эпик герой Алпамышаны, рус былинаһы ҡаһарманы Илья Муромецты хәтерләтә.

Ябай халыҡ Салауаттың изге эшенә теләктәшлек белдереп, ҡулынан килгән тиклем ярҙам итергә тырышҡан. Эҫем заводы эргәһендәге урманда осраған ҡарт («Салауат һәм урманда йәшәгән ҡарт») Салауатҡа, ҡайтып еткәнсе, асып ҡарамаҫҡатигән шарт менән бүләк бирә. Был бүләк – алтын булып сыға.

Салауат халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәшенә аяҡ салыусыларҙы, байҙарҙы аямаған. Ҡыйғы ауылы байы Абдулланы Салауат атып китә («Салауат байҙарға уҫал булған»); баш күтәреүселәргә ваҡытында аҙыҡ килтермәгән Көспәй байҙың яҙмышы ла шулай хәл ителә («Салауат приказы»). Шулай итеп, Салауат тураһындағы риүәйәттәр төркөмөнә ингән һәр бер әҫәр батыр образын төрлө яҡлап аса, уның героик биографияһын конкрет эпизодтарҙа күҙ алдына баҫтыра.

Крәҫтиәндәрҙең башҡа баш күтәреүҙәре кеүек үк, Пугачев менән Салауат етәкселегендәге ихтилалы ла еңелеүгә дусар була. Ләкин халыҡ

үткән көрәш юлын, көрәшкә әйҙәгән батырҙарын онотмаған, азатлыҡ тигән изге маҡсатҡа ирешеү теләге менән башланған эште дауам итеү хаҡында хыялланған. “Салауат улы”, “Салауаттың рус ҡыҙын кәләш итеүе”, “Салауат улы Хәсән” ише риүәйәттәр – шуға дәлил.

Нисә тапҡыр ихтилал күтәрмәһендәр, башҡорттар “Рәсәйҙән айырылыуҙы түгел, ә феодаль һәм милли иҙеүҙе йомшартыуға” ирешеүҙе төп маҡсат итеп ҡуйған (10б, 219). Бавбаларыбыҙҙың 1662 – 1664, 1681 – 1684, 1704 – 1711 йылдарҙағы ихтилалдарын тикшереп, тарихсылар шундай һығымтаға килә. Әйүкә вариҫы, үҙен Миндеғол тигән башҡортмон, тип, халыҡты ыҙғытҡан Шуну-Ҡараһаҡалдың авантюраһын иҫәпкә алмағанда, башҡорттарҙың бөтә ихтилалдарына ҡарата ла, шул иҫәптән “ҡатнашыусыларының иҫәбе буйынса рус булмаған халыҡтарҙан башҡорттар беренсе урында торған Пугачев ихтилалы”на (10, 332) ҡарата ла шулай тип әйтергә була. Шуның менән бергә Бүгәс яуының крепостной иҙеүгә ҡаршы йүнәлтелгәнлеге, күп милләтле булыуы, крәҫтиән массаһынан тыш, унда хеҙмәтсәндәрҙең бүтән социаль төркөмдәре вәкилдәре ҡатнашыуы, “үҙҙәренең антифеодаль көрәшендә башҡорттар хоҡуҡ һәм азатлыҡты рус һәм Рәсәйҙең бүтән халыҡтары менән бер сафта беренсе мәртәбә” даулауы ла билдәләнә яҙма тарихта (10, 332 - 333). Бында хаҡлыҡ бар, әлбиттә. Әммә, “А”, тигәс, ниңә, “Б”,. тип тә әйтмәҫкә. Крепостнойлыҡ башҡорттарҙа булмаған. Уларҙың тәүге сығыштары көсләп христианлаштырыуға ҡаршы булғанын әйткәс, ниңә һығымтала уны оноторға? Унан, башҡорттар, шул иҫәптән ихтилалға тиклем үк Салауат та ни өсөн заводдтарҙы, слобода һәм ҡәлғә-нығытмаларҙы ҡыйратып йөрөй? Ике һорауға үҙенән-үҙе бер яуап талап итеlә ләбаһаң. Ике осраҡта ла үҙенең “жалованная грамота”лары менән Иван IV таныған динебеҙҙең тейелмәҫлеге, ер биләүгә аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙ Романовтар дәүерендә тупаҫ рәүештә боҙола башлауға ҡаршы көрәшкән булып килеп сыға бит. Үҙенең вәғәҙәләренә тоғро булғаны өсөн, башбаларыбыҙ Аҡ бей батша тип атаған Иван IV биргән ул документ иһә договор статусына эйә булған. Шуныһына иғтибар итегеҙ: Һәр ырыу бейе алған ул грамотаны. Тимәк, Мәскәү тиклем Мәскәүҙең бөйөк кенәземен әле мин, тип тормаған Иван IV, берләшеп, уртаҡ дәүләт хасил итеү тураһында башҡорттоң һәр ырыуы йә ҡәбиләһе менән айырым-айырым, тимәк, Башҡортостан йә Тарихи Башҡортостан менән тип әйтергә яратһаҡ та, уның менән түгел, ә башҡорт халҡы менән договор төҙөгән[7]. Быны бер ҙә Мәскәүҙең дәрәжәһен төшөрөү, ваҡланыу, тип белмәгән. Ысын мәғәнәһендә дәүләтенең киләсәге хаҡында дәүләтсә фекер йөрөткән хаким ғына бындай аҙымға бара ала

[7] Исмаһам ҡалмыҡтарҙан өлгө алырға ине. Улар, Рәсәй дәүләтенә ирекле рәүештә Ҡалмығстан ингән, тимәйҙәр, ә, ҡалмыҡ халҡы ингән, тиҙәр. 2009 йылда шул тарихи акттың 400 йыллығын билдәләнеләр..

торғандыр. Иван IV үҙе иҫән сакта һәм, ғөмүмән, уның Рюриковичтар династияһы тәхеттә сакта "Жалованная грамота"лар рәүешендәге договор яҡшы күҙәтелә. Ул дәүерҙә башҡорттарҙың бола күтәрмәүе шуның менән аңлатыла ла инде. Тимәк, башҡорт ихтилалдарының төп маҡсаты Үҙәктең договорлы мөнәсәбәтттәрҙе күҙәтеүен талап итеүгә ҡайтып ҡала.

### 5. Тормош-көнкүреш легендалары һәм риүәйәттәре

Был төркөмгә боронғо башҡорттарҙың ғаилә эсендәге, ғаилә менән йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәренә,хужалығына, кәсебенә, этнографияһындағы үҙенсәлектәргә, шәхес яҙмышына, шәхес һәм йәмғиәт проблемаларына ҡағылышлы темалар тирәһенә ойошҡан легенда һәм риүәйәттәр ҡарай.

Элек башҡорт ырыуҙары, малдарын әйҙәп, яҡшынан яҡшыраҡ көтөүлектәр эҙләп, Оло Иҙелдән Алтайға тиклемге ареалда, "Урал" йырында әйтелгәнсә, "Арал диңгеҙенән Алтайғаса йәйрәп" ятҡан Башҡорт далаһында бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөр булғандар. Тора-бара яҙын – яҙлауға, йәйен – йәйләүгә, көҙөн – көҙләүгә күсә-күсә, көндәр һыуына башлауға, малдарына ҡурпы ашата-ашата, кире йәйләү, яҙлау аша ҡышлауға ҡайтыр булғандар. Шунан инде әкренләп ултраҡ тормошҡа күсеп, ер эшкәртеү кәсебен дә үҙ итә башлағандар.

***а) Малсы, игенсе яҙмышы, бигерәк тә күсмә тормош менән көн иткән хужалыҡ тәбиғәт шарттарына нык бәйле һәм һәр сак уларға бойондороҡло***

Яҡшынан яҡшыраҡ көтөүлек һәм тынысыраҡ ер эҙләп йә булмаһа малдарын үҙ иркенә ҡуйып, уларға эйәреп, ер аяғы – ер башына күсенергә лә тура килгән башҡорттарға. Шуға күрә иленән, ырыуынан айырылып, күсенеп китеүселәрҙе яңы урында гел генә уңыштар көтмәгән. "Һолтанбәк" риүәйәтендә бына шундай осраҡтарҙың береһе хаҡында һүҙ бара. Ғәйнә ырыуынан Һултанбәк тигән мал хужаһы, йылҡылары артынан барып, яңы урында йәшәргә ниәтләнә. Ләкин унда, саҡма ауырыуына осорап, күп кенә малы ҡырыла, һәм уға кире тыуған еренә ҡайтыуҙан башҡа сара ҡалмай. Риүәйәттә тура ғына әйтелмәһә лә, ырыуҙан айырылып китеүҙе халыҡтың хуп күреп етмәүе аңлашыла. Юҡһа айырым бер мал хужаһы менән булған осраҡлы хәлде иҫкә алып, телдән-телгә, быуындан-быуым, берәүҙең шәхси эше, тип, битараф булһа, халыҡ йыр ҙа сығарып тормаҫ ине. Ә был йырҙа, Һолтанбәккә теләктәшлек белдереүгә ҡарағанда, "Ҡаһарман кантон" йырындағы һымаҡ, уны үсәү нығыраҡ сағылған. Был аңлашыла ла. Сөнки, беренсенән, ул бай булған, икенсенән, ырыуын һанламай бер үҙе бер яры ситкә сығып киткән.

Беҙҙең Ялан илендә[8] шул
Һолтанбәктән байы юҡ.
Һолтанбәктән байы юҡ.
Хәҙер меҫкен йәйәү йөрөй –
Күскә[9] менер тайы юҡ.

б) ***Боронғо йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең сағылғаны***

Борон ҡыҙҙы айырым тирмәлә ҡушҡандар; кейәүҙе бейетмәйенсә, уның ҡулынан тәңкә алмайынса, ҡыҙ ҡуша торған тирмәгә индермәгәндәр («Уралбай»); ҡыҙ биреү ҡәрҙәшлеккә инеүҙе аңлатҡан («Әүәҙбикә», «Таштуғай»); сит баҫҡынсыларҙан һаҡланыю киптерергә элгәндәр, ергә һары май күмгәндәр («Күкбурҙай», «Ҡашҡар»); саҡма ауырыуы сыҡһа, ут яңыртыу йолаһын атҡарғандар; саҡма ауырыуын сусҡа киәфәтендә күҙ алдына килтергәндәр («Һултанбәк»).

Көнкүреш легенда, риүәйәттәрендә совет осорондағы тормош менән Октябргә тиклем тормош араһында эске сағыштырыуҙар үткәрелә. Ул саҡта ярлы халыҡтың ауыр көнкүреше, ерһеҙ, эшһеҙ ҡалып, михнәттәр сигергә мәжбур булыуына иғтибар иттерелә. Социаль һәм синфи мотивтар «Сибай», «Уралбай», «Кинйәбай» әҫәрҙәрендә шул күҙлектән сағылдырыла.

***в) Хазина эҙләүселәр репертуарынан***

Тормош-көнкүреш риүәйәт һәм легендаларының бер өлөшө хазиналар тураһында. Был типтағы әҫәрҙәргә тәүгеләрҙән булып Рәсәй Император фәндәр академияһы академигы Иван Лепехин (1740–1802) иғтибар иткән. Рәсәй провинциялары буйлап сәйәхәт иткәнендә, 1770 йылда ул Башҡортостанға ла һуғылып үткән. Уға башҡорттар Торатау тигән изге тауҙағы мәмерйәгә нуғай ханы ике дөйә йөгө тиклем алтын, көмөш һәм башҡа ҡиммәтле хазина йәшереүе тураһында риүәйәт һөйләйҙәр. Уны бер кем дә ала алмай. Сөнки эйәһе уны сихырлаған була. Торатауҙың изгеләштерелеүе менән иҫәпләшмәй, шунда хәжәтен атҡарған бер татар ҡаты язаһын ала: уның барлыҡ нәҫел-нәсәбе ҡорой (9, 21–22, 20).

Беҙгә мәғлүм сихырланған хазина хаҡындағы легенда һәм риүәйәттәр күҙлегенән ҡарағанда, И.Лепехин теркәгән нуғай ханы хазинаһы хаҡындағы риүәйәт менән нәҫел-нәсәбе ҡороған кеше хаҡындағы мәғлүмәт араһында туранан-тура бәйләнеш булыуы ихтимал. Шул сюжет менән П.М. Кудряшев (1797–1827) теркәгән сюжет араһында оҡшашлыҡ бар. Унда бәйән ителеүенсә, Бүлмәр (йәки Бүләр) ҡалаһында тәхет биләп торған Булғар иле хакимы үҙе еңгән бик күп илдәрҙән йыйған иҫәпһеҙ хазинаһына эйә булырҙай вариҫтары юҡлыҡтан, сихырлап, уны ер аҫты ҡоролмаһына йәшерә. Шуны ҡулға төшөрөргә

[8] Ялан иле – хәҙерге Ҡурған өлкәһендәге Ялан-Катай ырыуы.
[9] Күскә - күсенеп йөрөргә.

теләүселәргә тимер сынйыр менән сынйырланған ғәләмәт яман ҡара эт ташланыр булған. Анһат байығырға ниәтләнгән ундай хазина һәптәндәре, ҡоттары осоп, аҙаҡ аҡылдан яҙыр булған (13, 366).

“Башкирцы живучи между горами, и будучи отовсюду окружены заводами, имеют так же немалую склонность в приискивании руд. Однако редко обысканная ими руды объявляют по причине некоторых иногда случающихся притеснений от заводчиков, и рудоискатели нередко принуждены бывают от своих земляков разныя сносить угрозы, а временем и побои…” (9, 25). Заводсыларҙың да, үҙ яҡташтарының да мәғҙән эҙләүсе башҡорттарҙы ҡыҫыуы бик яҡшы аңлашыла. Беренсенән, колонизаторҙан, ғөмүмән, ниндәй игелек көтһөн инде башҡорттар?! Бары башҡорт булғаны өсөн генә лә, ҡыйырһытылыуға дусар ителгән улар. Икенсенән, ундай мәғдәнселәр, күтәрелеп китеп, киләсәктә конкурент булмағайы, тип тә шөрләгән заводсылар. Ә инде, өсөнсөн, үҙ кешеләренең аяҡ салыуы, хатта мәғдәнселәрҙе туҡмауы, уларҙың үҙҙәренә лә, зат-зориятына ла мәғҙән, хазина эйәһенең асыуы төшөр ҙә, шул демонологик зат көтөлмәгән фажиғәгә юлыҡтырыр, тип, инаныс күҙленән сығып эш итеүҙәре менән аңлатыла, әлбиттә. Тимәк, улар ата-бабаларынан ишеткән йә үҙҙәре белгән элекке “тәжрибәгә” таяныған. Бынан иһә хазина һәм уның эйәһе хаҡында риүәйәт, легенда, инанмыш һәм хәтирәләр башҡорттар араһында борондан популяр булған, тип һығымта яһарға ғына ҡала. Бындай әҫәрҙәр Тарихи Башҡортостан Мәскәү дәүләте менән берләшкәндән һуң колонизаторҙар яйлап-яйлап, әммә бик тә ихласлап башҡорт ерҙәрендә тау-завод промышленносы үҫтерә башлаған дәүерҙә, шул иҫәптән алтын һәм башҡа затлы мәғдән сығара башлау осоронда әүҙем ижад ителгән[10]. Был яҡтан “Асҡын алтыны” риүәйәте үҙенсәлекле. Урындағы алтын ятҡылғын, мәғдән белгестәре түгел, ә осраҡлы рәүештә ҡәҙимге ауыл әбейе аса. Тауыҡ бүтәгәһенән тапҡан “күҙ яуын алып торған таш”тың ни икәнен дә тәүҙә ул белмәй ҙә. Уның алтын икәнен башҡалар ғына төшөндөрә. Әбейҙең хазина менән ташты айырмауы – ябай халыҡтың, алтын да алтын, тип, “ах!” итмәүенә, уға иҫе лә китмәүенә миҫал. Байҙар иһә уның өсөн йән атып бара. Уның ҡарауы, Асҡында теге әбейҙең тауыҡ эсенән алтын табыуы була – әллә ҡайҙағы емтек еҫен тоя торған ҡоҙғондар һымаҡ, рус байҙары килеп тә етә, әбейҙең ауылдаштары ябай ысулдар менән алтын бөртөктәрен йыя башлаған урынды уратып та ала, прииска асып та ебәрә. “Аҡтау хазинаһы”, “Нух ҡарт хазинаһы”,“Шығман тауы” риүәйәттәре, хазина йәшерелгән йә алтын сығыр урын сихырлы булыуын белә күрә, уны үҙҙәре генә ҡулға төшөрөргә тырышыу

[10]Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәтте Барыс Ғайса улы Әхмәтшиндың монографияһынан (2) алырға мөмкин.

арҡаһында, сиргә һабышҡан йә имгәнеп ҡалған әҙәмдәр ҙә шундай уҡ ҡомһоҙ заттарҙан тигән һығымтаға килергә мәжбүр итә.

Хазина тураһындағы әҫәрәҙәр, әле әйтелгәндән аңлашылыуынса, сихырға инаныу менән һуғарылған. “Нух ҡарт хазинаһы” тигәнендә хазинаһын күмгән сағында уның хужаһы: “Был алтындарҙы, ниндәй ҙә булһа бер хайуанды ҡорбан иткәндә генә, алып булһын!” – тип кенә әйтә үҙенең тылсымле (магик) һүҙен. Артабан текста шундай аңлатма ла бирелә: “Имеш, бер нисә йыл үткәс, алтын күмелгән урындар, янып, хазинаға әйләнә. Хазинаның эйәһе була. Хазина эйәләре яратҡан кешеләренә йә өйрәк, йә һарыҡ, ҡайһыныһына бесәй булып күренә. Алған кеше ваҡытында килеп түләмәһә, хазина эйәһе уның өйөнә килеп һорай, имеш.”

Булғар ханы йәшергән хазина эйәһе яратмаған кешеләргә уҫал эт ҡиәфәтендә күренһә, Уралда ул старателдарға уҫал ҡара үгеҙ ҡиәфәтендә күренер булған. Тау-завод эшселәре фольклорын махсус тикшергән Б.Ғ. Әхмәтшиндың монграфияһында был темға тотош бер бүлек бағышланған (2, 105–112).

Шул уҡ фольклорсының күҙәтеүҙәре буйынса, Көнбайыш Европала ла, Уралда ла хазина ятҡан урында төндәрен зәңгәрһыу ут күренеүенә инанғандар (2, 119). 1966 йылда Ейәнсура районы Байыш ауылы Исхаҡова Зәйнәп (1902) һөйләгән “Хазина” тигән әҫәрҙә әйтелеүенсә, ут булып күренгән хазинаны алыр өсөн, бер шәкерт, китап кәңәше буйынса, ҡара тауыҡтың шаршамбы көн һалған йомортҡаһынан аҡ әтәс баҫтырып алып, хазина янған ергә ебәрә. Әсәһенең кәңәшен тотоп, шунда көл һибә лә унда ниндәй йән эйәһенең эҙе төшә, шуны ҡорбан итергә тейеш була. Баймаҡ районы Төркмән ауылы янындағы Туғажман тауында ла хазина уты күренер булған. Унда ла көл һибеп, шунда төшкән кәзә эҙенә ҡарап, кәзә ҡорбан итәләр (2, 124–125). “Аҡтау хазинаһы” тигәнендә көлгә һарыҡ эҙе төшә. “Нух ҡарт хазинаһы” риүәйәте Нух тигән ҡартҡа хазина эйәһенең өйрәк булып күренеүе хаҡында мәғлүмәт бирә.

Хазинаны ҡаҙғанда, ул алдан сихырланыуы арҡаһында, йә эйәһе риза булмаһа, ел-дауыл ҡубыуына ла инанғандар. Хазина ҡаҙыусы шәкертте ел-дауыл хатта осортоп алып китә (”Хазина”). Хазина эҙләүсе Хөснетдин мулла менән уның энеһен ел-дауыл “өйҙәре янына алып барып ташлай” (“Нух ҡарт хазинаһы”), алған алтынын ваҡытында түләмәгәне өсөн, хазина эйәһе кеше ҡиәфәтенә инеп, Нухтан алтын һорай. Был түләй алмағас, ен булып ҡағылып үтә – бабайҙың ярты кәүҙәһе йөрөмәҫ була (“Нух ҡарт хазинаһы”). Хазина тураһындағы ауыҙ-тел хикәйәләренең бына шулай инанс менән һуғарылыуы, ундай әҫәрҙәргә легенда, инанмыш (быличка) төҫө бирә.

Шуныһы характерле: легенда, риүәйәттәрҙә хазина ярлы, намыҫлы халыҡҡа бәхет килтермәй, фажиғәгә генә юлыҡтыра.

Аҡмырҙа, Йәноҙаҡ, Шәйхи тигән старателдәрҙең яҙмышы – шуға миҫал. Улар йә хазина эйәһенең шартын үтәргә онотоуҙары, йә унан фатиха алмайынса, ул сихри заттың биләмәһенә ҡул һалған өсөн, йә нәфселәрен тыя алмағанға хазинан ҡолаҡ ҡаға, уңышһыҙлыҡҡа, осрай, зәғифләнеп ҡала (“Шығман тауы”, “Нух ҡарт хазинаһы”, 2, 110 – 111).

Хазиналар тураһындағы башҡорт легендалары һәм риүәйәттәре художестволы әҙәбиәттә, бигерәктә Д.Н. Мамин-Сибиряк, П.П. Бажов ише күренекле рус яҙыусыларының әҫәрҙәрендә киң файҙаланылған. Хазина мотивы танылған башҡорт яҙыфусыһы Яныбай Хамматовтың «Бөртөкләп йыйыла алтын» романының төп мотивын тәшкил итә.

***г) Һатылған һәм әсир ҡыҙ яҙмышы хаҡындағы риүәйәттәр***

Тормош-көнкүреш риүәйәттәре араһында ҡатын-ҡыҙ яҙмышына бағышланған әҫәрҙәр ифрат күп. Был аңлашыла ла. Феодаль-патриархаль тәртиптәр, йола һәм шәриғәт ҡанундары уларҙың хоҡуктарын нык ҡыҫҡан. Шул уҡ ваҡытта башҡа мосолман халыҡтарының ҡатын-ҡыҙы менән сағыштырғанда, йәмғиәттә улар үҙҙәрен иркенерәк тотҡан. Шуны күҙ уңында тотҡан кеүек XIX быуат ахырында С.Г. Рыбаков былай тип яҙып ҡалдырған: ” В религиозном отношении башкиры – также верные сыны Ислама, но чуждые той фанатичности, какую встречаем у татар… Посещать мечети считается необходимым, хотя молодежь не обнаруживает ревность в этом отношении… Башкиры менее обнаруживают боязни за свою религию, чем татары. Спокойно рассуждают о своей и русской вере, не обнаруживая ни малейшей склонности возвеличивать свою, считая веры равными” (21, 15–16). Сөнки исламға X быатта уҡ инана башлаһалар ҙа, шәриғәт ҡанундарын үҙҙәренсә, традицион йола талаптарына яраҡлаштырыңҡырап ҡабул иткәндәр. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ир-ат менән бергә һунарға йөрөүе лә, яу ҡайтарышыуы ла (“Уҙаман апай”, “Ир-ҡыҙ”, “Йәнтүрә хикәйһе”, “Яубаҫар”); һәр төбәкәтә лә Ҡыҙҙар тауына уйынға сыҡканда, Ҡарға буткаһы байрамдарында ир-егет булып ҡылана алыуҙары ла (йыйындарҙа ярышҡан ир-ат кеүек, ҡолғаға үрмәләгәндәр, бил һынашҡандар, уҡ атышҡандар, йүгерешкәндәр, сабышҡандар, ҡурайҙа уйнағандар, өзләгәндәр) – шулар барыһы ла С.Г. Рыбаков әйткәнде дөрөҫләй. Шул уҡ ваҡытта унның: “В религиозном отношении башкиры – также верные сыны Ислама,” –тигәнен хуплағандай, ҡатын-ҡыҙҙы һатып ебәреү ҙә бер ни тормаған. Ҡатын-ҡыҙ яҙмышына бағышланған риүәйәттәрҙең байтағында ошо тема үҙәк урынды биләй. Былай ҙа хоҡуктары сикле был заттың әсирлектәге ғүмере моң-зар эсендә үткән. Шуға ла быңдай яҙмыштан ”Энйебикә” риүәйәте героиняһының утҡа төшөүҙе артыҡ күреүен аңлауы ҡыйын түгел. Унның зарлы-моңло йырында бына быңдай һүҙҙәр бар:

Әнкәй генәм, мине ник таптың,
Абзыҡайым, мине ник һаттың?

Мине аҡсаларға һатҡансы,
Дөрләп янған утка һалһаңсы.

Ғөмүмән, һатылған ҡыҙ яҙмышы хаҡындағы тормош-көнкүреш риүәйәттәре һағыш менән һуғарылған йырҙан айырылғыһыҙ. “Ғилмияза” риүәйәте – бына шуның баҙыҡ бер миҫалы була ала. Был риүәйәттә үсле кешеләр Ғилмиязаны сит ерҙәрҙә интегеүҙәргә дусар итә: улар уны һатып ебәрә.

Әҫәр менән танышҡас, йәш ҡыҙ варварлыҡ дәүеренең мәрхәмәтһеҙ ҡанундарының (ҡон алышыу, кеше менән сауҙа итеү) ҡорбаны булып хәтерҙә ҡала. Риүәйәттә Ғилмиязаның ҡаҙаҡ далаһында әсирлектәге трагик хәлен күҙ алдына килтерерлек деталдәр байтаҡ. Ул, бала саҡта уйнап үҫкән Атҡарғай тауын һағынып, илай, шул хаҡта йыр сығарып йырлай:

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан
Урал тауы битләп, көн битләп.
Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа ла, имгәкләп.

Сөнки ҡыҙҙың бала сағы, тимәк, ирекле көндәре, шул образ менән бәйләнгән. Атҡарғай тауы әҫәрҙә тыуған ерҙе кәүҙәләндерә. Ирек, бәхет төшөнсәһе лә шул тау образы аша бирелә. Шулай итеп, проза менән йыр бер-береһен тулыландырып килеп, тотош бер драматик картина тыуҙыра. Унда ҡыҙҙың тыуған илен ни тиклем һағыныуы, ирекkә һыуһауы йөрәк менән тоймалы, күҙгә күренмәле итеп һүрәтләнгәндәй була.

Һатылған һәм әсирлеккә юлыҡҡан Ғилмияза, Энйәбикә ише ҡыҙҙарҙың яҙмышы хаҡында һүҙ барғанда, риүәйәтселәр ҡот осҡос шундай бер деталде күҙ уңынан ысҡындырмаусан. Ул меҫкендәрҙең табанын телеп, шул яраға ваҡ ҡына итеп туралған ат ҡылы һалыр булғандар. Яра уңала. Әммә күп йөрөргә мөмкинлек бирмәй. Шуға ла Ғилмиязаның аяҡтары талһа, имгәкләп булһа ла, тыуған илгә ҡайтыу хаҡында әйткәне ике мәғәнәгә эйә. Ҡәбәхәтлектең сигенә етеп, әле әйткәнсә, ғүмер буйы интектерә торған язаға дусар иттереүҙәрен иҫәпкә алмаған сүрәттә лә, һатылған һәм әсир ҡыҙҙың тыуған илен ни тилем нык яратыуы, ҡайтыу теләгенең унда ни хәтлем көслө булыуы ифрат та уңышлы итеп образлы әйтелгән, тип һығымта яһарға булыр ине. Әгәр инде һатылыу мәсхәрәһе, әсирлектәге интегеүҙәре йөрәгенә һалған яранан тыш, табанында бетәү яра булыуын да иҫәпкә алһаҡ, ул “образлылыҡ”тың тетрәндергес булыуына төшөнөрбөҙ. Сөнки ундай яра менән ҡол ҡыҙҙың әллә ҡайҙа китә алмаҫына, иңгәкләмәй сараһы булмауына асыҡ төшөнөрбөҙ.

Ғөмүмән, “Ғилмияза”, “Энйебикә” ише риүәйәттәрҙә ирекһеҙ әсир ҡыҙ яҙмышы проблемаһы тыуған ил тойғоһо проблемаһы менән үрелеп килә. Ғилмиязаны ла, Энйебикәне лә тыуған илдә ни көтә? Улар

уны белмәйҙәр ҙә, уныһы уларҙы ҡыҙыҡһындырмай ҙа. Бары ҡайтыу, бары ҡайтыу теләге генә биләй уларҙы. Был ҡыҙҙар өсөн ирек һәм тыуған ил айырылмаҫ төшөнсә.

Ошо төшөнсә «Йәнифә» риүәйәте героиняһы өсөн дә актуаль. Тик уның художестволы хәл ителеше генә икенсе төрлө. Шул икенсе төрлөлөк ҡатын-ҡыҙ яҙмышы мәсьәләһенең дә икенсе төрлө яҡтыртылыуына сәбәпсе булған. Эш ниҙә һуң? Эш шунда. Төп героиня булған Йәнифә бала сағынан уҡ бәхетһеҙ. Ул бөтөнләй яҡлаусыһыҙ үкһеҙ етем бала була. Уны ла һатып ебәрәләр. Уны сит илдән килгән оло йәштәге һарт (үзбәк) сауҙагәре ала. Ҡарт менән йәш айырмаһының ҙур булыуы – етем ҡыҙ бала яҙмышына төшкән өҫтәлмә бәхетһеҙлек ул. Дөрөҫ, Йәнифә бәлиғенә инмәйенсә, ҡарт уның менән никахҡа инмәй тора. Әммә, ҡушылыусыларҙың урынын алмаштырыу менән ҡушылдыҡ үҙгәрмәй, тигән кеүек, был никахты кисектереүҙән ҡарт менән ҡыҙҙың йәше тиңләшмәй. Үҙ тиңе менән никахлаша алмауы – Йәнифәнең тағы бер бәхетһеҙлеге. Әммә, тормош ни тиклем ҡараңғы тойолмаһын, кес кенә булһа ла, унда бер яҡты нөктә булырға тейеш. Юҡһа, кеше үлә. Йәнифәгә лә тәтей ундай нөктә: ҡыҙы Рәхимә уның бар өмөтө, бар ҡыуанысы була. Бары уның арҡаһында ғына, ҡатын үҙенең тыуған яғын ҡайтып күреү бәхетенә ирешә. Бындай форсат, ҡыҙына ете йәш тулғас ҡына, тыуа. Ҡартының васыяты буйынса, шул саҡта ғына ҡайтып килә алған ул. Ошо урында: “Тыуған илде һөйөү темаһы риүәйәттә ҡайһылай ҙа ыңғай хәл ителгән! Көткәне алдына килгән икән,” – тип Йәнифә менән бергәләп ҡыуанғы килә. Тыуған ауылына ҡайтып төшөү менән, үҙе тол һәм үҙе йәш был байбисәгә, үҙ-ара талашҡандай, унан да, бынан да яусылар килә башлауы ла көсәйтеп ебәрә был тойғоно. Тыуған илде һөйөү темаһы, ысынлап та ыңғай хәл ителә. Әммә беҙ көткәнсә түгел. Тап ошо урында был тема йөҙ ҙә һикһән градусҡа боролош яһағандай була. Хикмәт ниҙә? Хикмәт шунда: Йәнифә яусыларҙың тәкдименән, тимәк, мәңгелеккә тыуған ерендә ҡалыу мөмкинлегенән дә, баш тарта. Ни өсөн? Йәнифәнең был ҡарарының үҙ логикаһы бар. Ҡатынлыҡҡа һоратыусыларға биргән яуабында асыла уның логикаһы. Ана ни тип яуап биргән ул: “Хәҙер мине .., байлығыма ҡыҙығып, талашалар. Үҙемдең ғүмерем ҡайғырып үтте. Инде баламды, иленән айырып, ҡайғыға ҡалдырмайым!” Ғүмер буйы илем, ерем, тип һарғайған Йәнифә бына шулай балаһының бәхете хаҡына үҙ бәхетенән баш тарта. Оло йөрәкле әсә генә бындай аҙымға бара ала, әлбиттә. Тимәк, тормош ни тиклем иҙмәһен, уның рухын һүндерә алмаған, кешелек сифатының сафлығын боҙоуға өлгәшмәгән.

Йәнифәнең был ҡарары, бер ниндәй ҙә намыҫ, йәлләү тойғоһо кисереп тормайынса, үҙен сит илгә һатып ебәреүсе таш йөрәк тыуғандарын (ағайы менән еңгәһен) ғәйепләү акты мәғәнәһенә лә эйә.

”Алтынсәс” риүәйәтендә лә ҡатын-ҡыҙ яҙмышы темаһы уны мал урынына һатыу юҫығында хәл ителә. Ә һатыу ҡатын-ҡыҙҙы урлау темаһының эҙемтәһе рәүешендә ҡарала. Бирҙеғол атлы уҙамандың Алтынсәс тигән ҡатынын ҡаҙаҡтар урлай ҙа үҙҙәренең байына һата. Был риүәйәттә Алтынсәс йөҙөндә яҙмышына баш эймәҫ, иректе көтөп ятмай, уны яулау өсөн, әүҙем ҡуҙғалыусы ҡатын образы һынлана. Йөклө хәлендә лә әсирлеккә юлығып, унда ул табып, уны тоҡҡа һалып йөкләп ҡасып ҡайтырға үҙендә көс табыуы уның образына мәртәбә генә өҫтәй.

Ун ике генә йәшендә ағаһы тарафынан ҡаҙаҡтарға һатылған Энйебикәгә лә яҙмыш бәхетле киләсәк юрамай. Киреһенсә, киләсәге уға йә илен һағынып, һарғайып, сит илдә ят бауырҙар араһында ғүмерлеккә тороп ҡалырға мәжбүр булған Ғилмиязаның, йә Йәнифәнең яҙмышын уртаҡлашыу хәүефен генә әҙерләй. Әммә, эш үтмәҫ элек, ул да, Алтынсәс кеүек үк, ҡаҙаҡ әсирлегенән ҡасып ҡайтырға үҙендә көс таба. “Алтынсәс кеүек үк”, тигәс тә: “Ул бит бала йөкләгән килеш ҡайта”, – тип әйтер кемдер. Эйе, әммә ул ҡаҙаҡтың һайлам атын менеп ҡаса. Ә Энйебикә, бала ғына булыуына, етмәһә,табанын ярып, туралған ҡыл һалыуҙарына ҡармаҫтан йәйәүләп ҡасып, ҡабатлай Алтынсәстең подвигын. Шуға күрә лә әһәмиәттәре яғынан улар ҡылған ғәмәлдәре оҡшаш ҡына түгел, бер үк әһәмиәткә эйә.

***ғ) Мөхәббәт яҙмышы темаһына бағышланған риүәйәттәр***

Үткән быуаттар төпкөлөндә булған хәлдәр хаҡында һүҙ сыҡҡанда, ғәҙәттә, дин, шәриғәт, феодаль мөнәсәбәттәр тантана иткән шарттарҙың мөхәббәт менән уртаҡлығы булыуы мөмкин түгел тигәнерәк фекер үткәрелеүсән. Әммә фольклорыбыҙ, был осраҡта риүәйәттәребеҙ шуның киреһен раҫлай. Ә бына шул мөхәббәт тигән мөҡәддәс тойғо бәхетлеме-юҡмы – уныһы инде мәсьәләнең икенсе яғы. Бындай риүәйәттәрҙең байтағы һөйгән егете менән ҡауышыуҙан мәхрүм ҡыҙҙың фажиғәһен бәйән итә. “Көнһылыу” риүәйәтенең героиняһының яҙмышы – ана шудайҙарҙың бер типик миҫалы. Һөйгән егете менән ҡауыша алмайса, яратмаған кеше менән йәшәргә мәжбүр ителгән бик күп, бик күп бәхетһеҙ ҡыҙҙарҙың фажиғәле яҙмшын ул бер үҙ генә лә кәүҙәләндерәлер, моғайын.

Формаль яҡтан ҡарағанда, иш һайлау өсөн, Көнһылыуға киң мөмкинлектәр бирелгән: “уны күргән егеттәр торған ерҙән иҫһеҙ булып ҡалғандар”, Ҡаҙан мырҙаһы Аҡсура бай ҙа уны там итә, хатта Алексей батша ла, үлеп ғашиҡ булып, ул алырҙан, был алырҙан ҡала, тик бисәһенән шөрләүе, дененең ике бисә алыуға ҡаршы булыуы ғына был теләгенән баш тартырға мәжбүр итә. Әммә ҡыҙ көтөүсе егет Арыҫланды ярата. Бының менән халыҡ, никах бәхетле булһын өсө, мал-монаят, ирҙең дәрәжәһе түгел, ә саф мөхәббәт кенә гарантия тигән идея һалған был риүәйәткә. Шуның менән ғаилә идеалы хаҡындағы хыялын сағылдырған. Әммә идеал шуның өсөн идеал, ул, уй етһә лә, буй етмәй,

ҡоро хыял булып ҡына ҡалыусан. Әле һүҙ барған риүәйәттең сюжетын хасил итеүсе мөхәббәт яҙмышы ла, төкмә-төк шул фекергә тап килә.

Ҡыҙының теләге менән иҫәпләшмәй, уны Аҡсураға бирергә һүҙ ҡуйышыуы етмәгән, Арыҫлан менән Көнһылыуҙың ҡауышыу юлына иң яман кәртәне мәкер мулла ҡора. Көнһылыуға уйнашсы тип яла яғып, Ҡарабайҙы шул ялғанына ышандырып, ҡыҙҙы үҙенә дүртенсе бисәлеккә алыуға өлгәшә.Ҡарабай быға нисек риза була һуң? Ҡарамаҡҡа, ул ят күҙҙәрҙән һаҡлап ҡына үҫтергән яңғыҙ ҡыҙының намыҫына кер төшөүҙән ҡурҡыуы шул аҙымға сәбәпсе була кеүек. Асылында иһә, ҡыҙын күрәләтә тамуҡ эсенә тапшырып, үҙ абруйы хаҡында ҡайғырта. Шуның менән уның ғүмерененең фажиғәле өҙөлөүенә үҙе үк сәбәпсе була. Көнһылыу менән Арыҫлан йәшерен осрашҡанды күреп, уларҙың икеһен дә сәнсеп үлтерә.

“Көнһылыу” риүәйәтен, романтик пафослы лирик риүәйәт, тип атарға була. Ни өсөн тигәндә, һүҙ бәхетһеҙ мөхәббәт хаҡында барғанға ғына түгел, уның нисек барыуында ла, төрләндерә-төрләндерә шартлылыҡ менән иркен һәм ихлас эш ителеүендә лә. Алексей батшаның, Әй буйына килеп, Көнһылуға ғашиҡ булыуы – реалисик уйҙырма, әлбиттә. Спектаклдең һуңғы шаршауының һуңғы күренешендә бөтә персонаждарҙы сәхәнәгә сығарғанын хәтерләтеп, риүәйәттең финалында егет менән ҡыҙҙы ла, мулланы ла, Ҡарабайҙы ла, Ҡаҙан мырҙаһы Аҡсураны ла, мәзинде лә – бөтәһен дә бер юлы Әй буйындағы Өй ташҡа туплау ҙа; яуыз мулланың Көнһылыу менән Арыҫланды бер юлы үлтереүе ихтимал булған сүрәттә лә, шунда уҡ мулланың – Аҡсура тарафнан, Аҡсураның мәзин тарафынан үлтерелеүе, шул фажиғәгә шаһит булыуына ҡарамаҫтан, Ҡарабайҙың өнһөҙ ҡатып ҡалыуы хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була.

Әкиәттәрҙә, эпостарҙа, легендаларҙа һәм риүәйәттәрҙә матурлыҡ хаҡында халыктың эстетик идеалы сағылыш алған сүрәттә, иғтибар, ғәҙәттә, ҡыҙ матурлығына ғына йүнәлтелә. Ә ир-егеттең бары көслө, батыр, мәргән, сос булыуына баҫым яһала. Әммә ҡыҙ матурлығы менән ире-егеттең ошондай сифаттары, тиңгәрелгәндәй, йәнәш тасуирлана икән, уны ла матур тип ҡабул итәбеҙ. Сөнки шул сифаттар ир-ат матурлығының синонимы кеүек ҡабул ителә. Һүҙ барған риүәйәттә Арыҫландың бәйгеләрҙә еңеп сығыуы, уның да матурлығы шундай сифаттарға эйә булыуында тип ҡабул итергә тулы мөмкинлек бирә. Әммә риүәйәтсе, бының менән генә сикләнмәй. Шул төшөнсәне йәйә эсенән сығарғандай итеп, былай тип уға асҡлыҡ та индерә: “Ул үҙе шундай матур. Нәҡ бына Йосоп бәйғәмбәр кеүек булған”. Йосоп бәйғәмбәр иһә “Ҡөрән”дең 12-се сүрәһендә һәм ҡиссала, Фирҙәси, Ҡол-Ғәли һәм башҡа бик күп шағирҙар ижад иткән поэма-дастандарҙа ир матурлығының идеалы итеп тасуирлана. “Тәүрат”та уның “Иосиф Прекрасный” тип бирелеүе лә күп нәмә хаҡында һөйләй.

Ә инде уға ғашиҡ Көнһылыу хаҡында риүәйәт шулай ти:“Ҡыҙ шундай матур булған. Хатта Әй буйына һыуға төшкән сағында,. Әй ҙә аҡмай тороп, уның һылыулығына хайран ҡалыр булған”; “Көнһылыу йырлай башлаһа, һандуғастар – һайрауынан, ел – иҫеүенән, януарҙар – үкереүенән, туҡтағандар”; “уларҙың (егет менән ҡыҙҙың) һыҡтау тауыштарына күк күкрәгән, йәшен йәшнәгән, ҡойоп ямғыр яуған” тигән тасуирламалар; Өй таш ҡуҙғалып, Арыҫлан менән Көнһылыуҙың үле кәүҙәләренең юҡ булыуы, ҡапыл ҡараңғы төшөп, Өй таш яғынан Ыйыҡтау яғына аҡ нәмә осоп китеүе, туғыҙ айҙан тау ярылып, унан ике аҡҡош осоп сығыуы – барыһы ла фантастик шартлылыҡ, легендар уйҙырма. Улар барыһы ла саф мөхәббәтте илаһилаштырып, изгеләштереүҙән килә. Шуға ла тап шундай мөхәббәттең үҙе булып һынланған Көнһылыу менән Арыҫландың рухын кәүҙәләндереүсе аҡҡоштар башҡорттар өсөн тейелгеһеҙ изге ҡош иҫәпләнә. Изгеләштереүҙең төбөндә илаһилаштырыу төҫмөрләнә. Егет менән ҡыҙҙың кәүҙәһен үҙ ҡуйынына алып, Өйташтың урынынан күсеүе, уларҙың рухының саф мөхәббәт символына әүерелгән ике аҡҡош булып осоп сығыуы – мөхәббәт яҙышына битарф булмаған илаһи көстәрҙең (бәлки, ҡасандыр, грек мифолгияһындағы Венера кеүек, башҡорттоң да мөхәббәт илаһиәһе булғандыр) ваҡиғаға туранан-тура ҡатнашыуының һөҙөмтәһелер.

Темаһы, сюжет ҡоролошо, төп идеяһы кимәленән ҡарағанда, “Көнһылыу” риүәйәтенә “Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәте яп-яҡын. Тәүгеһендәге бер-береһен өҙөлөп яратыусы Көнһылыу менән Арыҫлан кеүек үк, “Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәтенең геройҙары Байрамбикә менән Татлыбай ҙа яратыша, уларҙың да килмәгән ере юҡ: ҡыҙ һылыуҙан һылыу, үҙе моң сығанағы булған йырсы, үҙе оҫта бейеүсе; егет иһә оҫта уҡсы, батыр һәм табыштарын башҡалар менән бүлешеүсән йомарт һунарсы.

Көнһылыу менән Арыҫландың бәхет юлын мулла быуһа, һәм ахырҙа уларҙың икеһе лә шул арҡала һәләк булһа, “Һуңғы йыр” риүәйәтендә уның ролен Мәскәүҙән килеп, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ башҡорт ерендә соҡоноп, хазина эҙләүсе Маврин атҡара. Тик тәүгеһенән айырмалы рәүештә, “Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәтендә егеткә бер ни ҙә булмай, уның ҡарауы ҡыҙ фажиғәнең иң яманына, үҙенең: “ … кафыр, … намыҫымды алғансы, йәнемде алған булһаң, артығыраҡ булыр ине..,” – тип әйтерлегенә дусар ителә.

Шулай итеп, Маврин халыҡтың ерҙәге хазинаһын ғына урлап ҡалмай, бысраҡ ҡулын уның намыҫына һуҙа. Уға был эштә һатлыҡ йән Аллаяр мулла булыша. Уның йөҙөндә халыҡтың намыҫын да һатырға әҙер торған заттың ысын социаль йөҙө фашлана. Ә Маврин мәкерлек менән эш итеүсе типик колонизатор булып кәүҙәләнә.

Байрамбикәнең аяныслы хәлдә ҡалыуы йәштәрҙең мөхәббәтенә һынау әҙерләй. Ләкин оло хистәрҙе йөрөткән геройҙар уны намыҫ менән үтә. Мөхәббәт һүрелмәй. Мәсхәрә ителгәс, халыҡтан, һөйгәненән оялып, кейек хәлендә ҡасып йәшәгәнендә лә, Байрамбикә Татлыбайҙы һағына. Татлыбайы иһә, донъя мәшәҡәттәрен ҡуйып, ер ҡыҙырып, эҙләй торғас, уны табып, үҙенә алып ҡайта. Ҡара йөҙ аыуасаҡ бала уларҙың ҡауышыуҙарына кәртә була алмай. Шулай итеп, яратышыусылар хәшәрәт Мавриндан үҙҙәренең күңел сафлығы менән бик күпкә юғары тороуҙарын, үҙҙәренең һөйөргә лә, оло мөхәббәт хаҡына кисерергә лә һәләтле икәнлектәрен – һәр тарафтан өлгөргәнлектәрен күрһәтә. Риүәйәт үҙ бәхетеңде, көрәшеп, яулап алырға кәрәк, уға тик тәүәккәллек, әүҙемлек менән генә өлгәшергә мөмкин тигән идея үткәрә.

“Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәтендә сюжеттың үҫтерелеше лә, уға сәбәп булған конфликт та икешәр ҡатлы. Әммә был уның “Көнһылыу” риүәйәте сюжетынан ныҡ ситләшә, тигәнде аңлатмай әле. Киреһенсә, ҡарамаҡҡа, ситләшкән кеүек тойолған урында һулыш яңыртып, артабан тағы тәүбәштағы йырҙаһына (юлына) төшөп, бер баҫҡысҡа күтәрелә лә ике риүәйәттең дә финалы йәнә оҡшаш булып килеп сыға. Был баҫҡыста инде мөхәббәт темаһының яңырыуы икенсе быуын йәштәре өлөшөнә төшә. Мавриндан ауырға ҡалған Байрамбикәнән тыуған Гөлйемеш менән Татлыбайҙың дуҫының улы Кәрим яратыша. Сжеттың ошо бүлкәтенә (ә ул әҫәрҙә эпилог хеҙмәтен үтәй) Татлыбай менән Байрамбикә мөхәббәтенә бәйле өлөшөнөң “Көнһылыу” риүәйәте сюжетына оҡшаңҡырап үҫеш ала биргәс иткәс, икенсе төрлө сиселеп, унан ситләшкәндәй тойолған урынын ямап, тулыландырыу бурысы йөкмәтелә. Аңлашыла торғандыр, геройҙарҙың фажиғәле һәләк булыуы менән тамамланыусы финалы ла яңы быуын ғашиктары өлөшөнә төшә. Быға иһә нәфсеһенә баш була алмаған әлеге Мавриндың Гөлйемеште үҙенеке итергә маташыуы сәбәпсе була. Шулай итеп, сюжеттың тәүге баҫҡысында уҡ социаль ерлектә моронлаған конфликт, Байрамбикәне Маврин мәсхәрә итеүенә бәйле, ҡыҙа биреп, тағы һүрелә төшкәс, шул килмешәктең бысраҡ ҡулы яңы быуын мөхәббәтенә һуҙылыуы арҡаһында, һытылыр сиккә еткән шешек кеүек, тулыша. Ундай шешек, оҙаҡ көттөрмәй, һытыла. Сюжет конфликты менән дә шулай була. Әгәр “Көнһлыу” риүәйәтендә ғашиктарҙың дошмандары үҙ-ара үлтерешеп бөтһә, “Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәтендә финалда алғы планға сыҡҡан халыҡ сәбәпсе була: Маврин менән уның ялағайы Аллаяр мулла һөңгөгә алына һәм упҡынға ырғытыла.

Мәғлүм булыуынса, һәр күренештең үҙ-ара оҡшашлығы, улар һәр яҡтан да бер береһен ҡабатлай, тигәнде аңлатмай. Бында ла шулай. “Көнһылыу”ҙа сюжет бөтөн бер бүлек булып, ваҡиғалар бер тынала тасуирланһа, әйтелгәненсә, “Байрамбикә йәки һуңғы йыр” риүәйәтендә

ул, бер ни тиклем ике быуынлы ракетаны хәтерләтә. Шул сәбәптән трагик финал да ике ҡатлы: уның тәүгеһенән икнсеһе яралған. Сюжетты шулай ҡатлауландырыу, халыҡ риүәйәттәре өсөн традицион күренеш түгел. Был ”яңылыҡ” риүәйәтте әҙәбиләштереүҙән килә. Әҙәбиләштереү социалогизацияға ныҡ иғтибар бирелеүендә лә, тасуирламаларҙа ла, тотош әҫәрҙең стилендә лә ярылып ята. Мәҫәлән, Байрамбикәнең һылыулығын тасуирлағанда, шулай тиелә: “Уның һылыулығын ҡурайсылар ҡурай моңонда биргәндәр, һандуғастар һәм турғайҙар үҙҙәренең йырҙарына ҡушып йырлағандар. Тау араларынан бөркөлөп-һыртылып аға торған һалҡын шишмәләр ҙә Байрамбикәнең матурлығын йырлай торған булғандар.”

“Көнһылыу” риүәйәте “Таштуғай” менән дә ауаздаш. Хатта уларҙың героинялары аҙаштар, икеһенең дә исеме Көнһылыу. Асылында, исемдәре генә түгел, яҙмыштары ла уртаҡ була был риүәйәттәрҙең героиняларының. “Көнһылыу”риүәйәтенең героиняһы кеүек үк, “Таштуғай” риүәйәтенеке лә ярыш-бәйгеләрҙә ал бирмәҫ егеткә генә ғашиҡ. Ике әҫәрҙә лә хикәйәләү реалистик ерлектә бара.”Көнһылыу” риүәйәтендә легендар планда тәбиғәтте йәнләндереү, Әй йылғаһындағы аҡҡоштар хаҡында мифтарға ғына хас булырҙай этиологик мотив әҫәрҙең дөйөм реалистик ерлегенә хилаф килтермәй, бары уның лирик башланғысына романтик пафос ҡына өҫтәй.

Ике риүәйәттә лә ваҡиға феодаль-патриархаль мөнәсәбәттәр шарттарында бара. Икеһендә лә ул шарттар-ваҡиғаларға фон ғына түгел, уларҙың героинялары яҙмышының, тимәк уларҙың мөхәббәт тарихы трагедияһының төп сәбәбе лә. Был аҙаш ҡыҙҙарҙы ул күңелһеҙ финалға илткән юлдарға килгәндә, уларҙың һәр ҡайһыныһыныҡы үҙенсә. “Көнһылыу” риүәйәтенән айырмалы рәүештә, “Таштуғай”ҙың башланмышы – тарихи экспозициянан ғибәрәт. Әгәр “Көнһылыу” риүәйәтендә тарихи дәүер төшөнсәһен, нигеҙҙә, төрлө социаль ҡатламды кәүҙәләндереүсе персонаждарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренән, ҡылған ғәмәлдәренән алһаҡ, “Таштуғайҙа” иң башта ваҡиға барған тарихи осор хаҡында әҙер белешмә бирелә. Батша хөкүмәте тарханлыҡ алған старшинаналар аша башҡорттарҙы ҡаҙаҡтар менән ыҙғыштырып торған. Бер милләтте икенсеһе менән сәкәштереү алымы батша хөкүмәтенә халыҡтарҙың иғтибарын азатлыҡ көрәшенән ситләштерергә, үҙенә ҡаршы йүнәлтелеүе ихтимал көстәрҙең көнэлгәре бәҫен алырға һәм һөҙөмтәлә колониаль сәйәсәтен уңышлыраҡ үткәрергә форсат биргән. Бының өсөн башҡорт байҙары менән ҡаҙаҡ байҙары араһында була килгән феодаль сапҡындар, әлеге лә баяғы барымта һәм ҡарымта йолаһының күҙәтелеүе бик тә ҡулай булған. Һүҙ барған риүәйәттән аңлашылыуынса, ике яҡҡа ла ҙур яфалар килтергән шул ҡырағай йолаға тоғро ҡалған башҡорттар үҙҙәре үк батша властары тирмәненә һыу ҡоя. Риүәйәттә был хәкикәт барымта нисек атҡарылыуын һүрәтләү аша асы-

ла. Башҡорттар ҡаҙаҡтың данлыҡлы батыры Сәйеттең Ҡуйһылыу исемле еткән ҡыҙын алып ҡайта. Уны башҡорттар араһында ғына түгел, ҡаҙаҡтарға ла даны мәғлүм Үҫәргән ырыуы батыры Көтөр кәләш итеп ала. Бына шулай, өрә белмәгән эт бүрене нисек үҙенә саҡыра, шуның кеүек, үҫәргәндәр ҙә һылтауын көтөп кенә торған ҡаҙаҡтарҙың яу менән ябырылыуын тиҙләткәндәй итә. Ҡаҙаҡ өсөн Сәйет тә ил данын тотоп торған батыр булғанлыҡтан, уның намыҫын һаҡлау ниәтенән был эшкә Абулхаир хан үҙе лә ҡыҫылырға әҙерләнә. Быныһы – мәсьәләнең бер яғы ғына. Икенсе яғы шунан ғибәрәт: башҡорт йолаһы кеүек ҡаҙаҡ йолаһы өсөн ҡыҙ намыҫы – ил намыҫы иҫәпләнгән.

Сюжеттың үҙәген хасил итеүсе төп ваҡиға менән таныштырғансы, риүәйәттә тарихи осор төшөнсәһе бына шулай тыуҙырыла. Аңлашылыуынса, тарихи экспозиция үҙе лә үҙаллы бер сюжетты хасил итә. Әле әйтелгәндәр иһә уны хәрәкәткә килтереүсе конфликт сигенә еткәнсе ҡырҡыулаша. Артабан бына-бына ҡаҙаҡ яуы тоҡаныр ҙа ҡырғын башланыр, батша һанаттары иһә был башбирмәҫ башҡорттоң көсө шиңер, тип, көнэлек ҡыуанышып, ҡулдарын ыуа башлар кеүек. Әммә шул саҡ аҡыл алға сыға: үҙе арҡаһында ырыуҙаштарының ҡаны ҡойолоуон теләмәй Көтөр батыр. Һәм ул, Ҡатай иленә күсеп, эҙ йәшерә. Уның ошо ҡарары һәм шуның бойомға ашырылыуы ырыуҙаштарының ҡыл өҫтөндә торған яҙмышын ыңғай хәл ителеүенә сәбәп була. Бына шулай риүәйәттең тарихи экспозицияһы тарафынан төп ваҡиға барасаҡ осор ни тиклем ҡатмарлы булыуы тураһында төшөнсә тыуҙырыла.

Экспозицияның вазифаһы тарихи осор төшөнсәһе тыуҙырыу менән генә сикләнмәй. Ул бәйгеләрҙә Ҡатай егете Байғөбәк менән бер тиң һөҙөмтәләргә ирешеүсе Көнһылыу атлы ҡыҙҙың “Кемдеке? Шуныҡы!” тигән баһаға торошло булыуын нигеҙләү өсөн дә кәрәк булып төшкән. Баҡтиһәң, Көнһылыу ил эсендә лә, ил тышында ла һан тиһәң – һан, дан тиһәң – дан яулаған, көсө менән маһайыуҙы белмәгән, һәр яуға ла ташланып бармаған, гөлт итеп тоҡанырға ғына торған утты хәтреләткән конфликтты ла аҡыл менән сисә белгән Көтөр батыҙың ҡыҙы имеш. Ана шундай атайҙың ҡыҙы булғанға ла, мәргәнлеге, атта оҫта йөрөүе, ҡурайсы булыуы менән Ҡатай илендә дан тотҡан Байғүбәк атлы егеттән һис тә ҡалышмай: балдаҡатышта Байғүбәк беренселекте алһа, Көнһылыу икенселекте ала; атта сабып килешләй тәңкәатышта – Көнһылыу беренсе, Байғүбәк икенсе була.

Риүәйәт уларҙың береһен кәмһетеп, икенсеһен күтәрмәй. Икеһен дә бер кимәлгә ҡуйып, шул уҡ ваҡытта, башҡалар араһынан айырып, ҡалҡыу итеп һүрәтләй. Быға икеһенең дә буйға-һынға ла, төҫкә лә матур булыуҙары ла булыша.Йәштәрҙең икеһенең дә эске матурлығы тышҡы матурлыҡтары менән гармониялаша. Ҡыҫҡаһы, улар халыҡтың һылыу егет, һылыу ҡыҙ хаҡындағы эстетик идеалын һынландыра. Көнһылыу

менән Байғөбәктең яратышыуына ерлек бына шулай әҙерләнә риүәйәттә.

Шуныһына ла иғтибар итәйек. Ике ярыштағы уңыштары өсөн дә Көнһылыуҙы, хәҙерге тел менән әйткәндә, приз менән Көтөр батыр үҙе бүләкләй: тәүге ярыш өсөн “бөтә уҡ-һаҙаҡтарын бирә”, икенсе юлайы “быҡаса бер әҙәмгә бирмәй торған үткер, текә, ҡаты тояҡлы; ялбыр сәсле, оҙон бәкәлле, ҡуян ботло, ҡарсыға түшле, тар бөйөрлө, ҡырас яллы, ҡамыш ҡолаҡлы, баҡыр күҙле, ас яңаҡлы, осло эйәкле, суртан һыртлы,ҡалҡыу мундалы йүгерек Туратын … менеп йөрөргә рөхсәт итә.” Уның был йомартлығы ырыуын ҡанҡойоштан ҡотҡарыуы менән яулаған симпатияһы өҫтөнә тағы мәртәбә өҫтәй. Ә инде бүләгенең иратҡа ғына тәғәйен булырҙай бүләк булыуы – ҡыҙының иң булдыҡлы ирегеттән ҡалышмауын хуплауы булып аңлашыла.

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, Көнһылыуға атаһы биргән Тураттың портреты “Урал батыр” эпосындағы Аҡбуҙаттың портретын хәтерләтә. Бына шул портреттан бер нисә һыҙат:

…Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы,
Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ,
Ҡыҫыр йылан тамырлы,
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Муйындары бер ҡолас… (5, 92)

Бәлки? был оҡшашлыҡ ике әҫәрҙең дә бер ҡул менән теркәлеүенең ғилләһелер (Мөхәмәтша Буранғолов ҡулынан үткән фольклор әҫәрҙәрендә уртаҡ юлдарҙы йыш осратырға мөмкин. Был иһә сәсәндең йә бер нисә әҫәрҙәгә хас “уртаҡ урын”дарҙы бүтәндәрендә лә күрергә теләүенән йә уларҙы үҙе ижад итеүҙән киләлер. Ни булһа ла, булған. Беҙ хәҙер уны сәсән кешегә, ни ҡылһа ла үҙ иркендә, тип, ҡабул итһәк, һис тә яҙыҡ булмаҫтыр). Нисек кенә булғанда ла, Турат менән Аҡбуҙат портретының оҡшашлығы идея-художестволы яҡтан аҡлана. Ни өсөн тигәндә, Көнһылыуға тап Аҡбуҙатты хәтерләтмәле яу арғымағы менән яу ҡоралы бүләк итеүендә (эпоста Һомай ҙа Уралға Аҡбуҙатын эйәренә алмас ҡылыс эленгән хәлдә бүләк итә бит) шул берҙән-бер балаһы йөҙөндә улһыҙ Көтөрҙөң улай-былай егеттәреңә биргеһеҙ батырҙы таныырға теләүен аңлайбыҙ. Бында шуны ла иҫәпкә алыу зарур. Ул ҡорал менән, арғымаҡ – тота килеп бирелгән приздар түгел. Улар Көтөр батыр үҙе тотонған, тимәк, яуҙарҙа һыналған ҡорал менән һыналған яу аты. Шуларҙы Көнһылыуға тапшырыуы – асылда, ҡыҙы йөҙөндә Көтөрҙөң үҙ дауамын күрергә, батырлыҡ эстафетаһын тапшырырға теләүе менән бер. Шуға күрә лә, һәр хәлдә, бөгөнгө реалиялар күҙлегенән ҡарағанда, иш һайлауҙа Көтөр яңғыҙ балаһын үҙ иркенә ҡуйыр, уның теләге менән иҫәпләшер һымаҡ. Халыҡтың эстетик ҡарашы, никах-ғаилә тәжрибәһе лә шуны хуш күрә. Улар буйынса, матур менән – матур, батыр менән –

батыр, йәғни рухи яҡтан тиңдәр ҡауышҡанда ғына, улар бер-береһен бәхетле итә ала. Никах уҡығанда, мулла ла: “Мөхәббәт менән, бер йән, бер тән булып йәшәргә яҙһын!” – тип фәтиха бирә бит. Артабан был мөхәббәт яҙмышын аксиома бәрәбәрендәге ошо хәҡиҡәт күҙлегенән күҙәтергә генә ҡала. Ысынлап та, төп сюжет ошо ғашиҡтарҙың яҙмышына бәйләп үҫтерелә.

Мөхәббәт саф булһа, ул һәр яҡтан да тиңдәр араһында тоҡана. Шулай булғас ул бәхетле ҡауышыуға килтереүгә лайыҡ кеүек. Эйе, шулай булмауы мөмкин түгел. Тик идеаль мөхәббәттең идеаль бәхеткә илтеүе өсөн идеаль шарттар кәрәк. Әммә социаль-патриархаль тормош шарттарында уға ирешеүе ситен. Көтөр батыр ҙа – шул шарттар емеше, шул шарттар ҡоло. Ни тиклем абруйлы батыр булмаһын, ҡыҙын ни тиклем ныҡ яратмаһын, йәшәп килгән ҡанундарҙы аша атларға ҡыйыулығы етмәй уның да. Һәм беҙҙең геройҙарыбыҙҙың яҡты хыялдары тормошҡа ашмай. Социаль яҡтан тигеҙһеҙлек тә үҙенекен итә. Етем үҫһә лә, Байғүбәктең килмәгән ере юҡ. Ул – ҡурайсы ла, һунарсы ла, бәйгеләрҙә ал бирмәүсән егет тә. Тик шул һөнәрҙәренән, талантынан һәм ир-егеттең аҫылына хас тәбиғи матурлығынан тыш уның бер ниһе лә юҡ. Ошо хәл дә ғашиҡтарҙы трагедияға этәрешә.

Халыҡтың бөтә симпатияһы бер-береһен һөйөүсе йәштәр яғында. Көнһылыу менән Байғүбәк уңғанлыҡтары менән генә түгел, сафлыҡтары менән дә башҡаларҙан өҫтөн ҡуйыла. Көнһылыуҙы кәләш итеп алған Әлми улар янында бөтөнләй шиңеп ҡала. Риүәйәттә уның образы аҡылға бер төрлө йүнһеҙ затты ғына кәүҙәләндерә.

Анауы тиклем абруйлы батыр була тороп, ни өсөн һуң Көтөр яңғыҙ ҡыҙының яҙмышын уға тапшырған? Шундай һорау тыуырға мөмкин. Бер яҡтан ҡарағанда, Көтөр батыр бында хуплауға лайыҡ принциптан, ырыу йәмғиәте мәнфәғәтенән сығып эш итә: йәнәһе, үҙен үҫтергән Үҫәргән ырыуы улына биреп, ҡәрҙәшлек ебен яңырта. Был яңыртырға тырышыуҙың эҙемтәһе шул була: ул, аҙаҡ асыҡланыуынса, ғашиҡтарҙың икеһенең дә фажиғәһен тиҙләтеп кенә ҡалмай, шуның төп сәбәпсеһенә әүерелә: Көнһылыу Байғүбәгенән мәңгегә төңөлһөн өсөн, ул егетте хаиндарса үлтерәләр, уны юҡһыныу һағышынан һарғайған ҡыҙ, һыуға ташланып, һәләк була.

Көтөр батырҙың, ҡарамаҡҡа, бына шулай изге ниәте, туғанлыҡ ебен өҙмәүҙе хәстәрләүе, йәғни этнография күҙлегенән ҡарағанда, милли традицияға тоғролоғо, художестволыҡ йәһәтенән риүәйәттең милли колоритына мөһим өҫтәлмә булырлыҡ аҙымы өмөт иткәндең кире һөҙөмтәһен бирә. Әҫәргә милли колорит биреүсе, әммә ахырҙа геройҙарҙың яҙмышында кире роль уйнаған йәнә бер художестволы деталь бар “Таштуғай ” риүйәтендә. Бында ғашиҡтарҙың бүләк бирешеүе күҙ уңында тотола. Этнографик күҙлектән ҡарағанда, егеттең ҡыҙға, ҡыҙҙың егеткә бүләк биреүендә бер ниндәй хилафлыҡ юҡ. Ул – халыҡта

яратыу, тоғролоҡ билдәһе, тип баһалана торған традицион йола күренеше. “Көнһылыу” риүәйәтендә егеткә ҡыҙ үҙенең исеме яҙылған ҡулъяулыҡ бүләк итһә, “Таштуғай”ҙа Байғүбәк баҡыр балдаҡ бирә. Балдаҡтың баҡырҙан ғына булыуын, ярлы егет шунан артыҡ ни бирһен инде, тип кенә баһалап та була. Эйе, тик матди яҡтан ҡарағанда, шулай. Әммә риүәйәт өсөн уның һары булыуы мөһим. Һары, тимәк, егет бер Көнһылыуҙы уйлап ҡына һарғая. Шул уҡ ваҡытта, егеттең ҡыҙ ҙа уны ғына уйлап, йөрәгендә уны ғына йөрөтөүен теләүенә лә – ишара һары балдаҡ. Хәйер, ошо теләген Байғөбәк йыры менән әйтеп үк бирә:

Һары ла балдаҡ бирҙем, ай, үҙеңә,
Йөрәгеңә һары ла типһен тип;
Әселештә булмай, яуҙар асмай,
Көнһылыуҡай йәбешеп сыҡһын тип.

Аҙаҡ, Көнһылыуы ят ҡуйынына ингәс, Байғүбәк бүләген яңырта, уға көмөш йөҙөк бирә. Был осраҡта бүләк егеттең уны тағы ла нығыраҡ яратыуын (сөнки ул хисенә һағыныу һағышы өҫтәлә бит) символлаштыра. Тимәк, яңыртылған был көнкүреш детале художестволы деталь кимәленә күтәрелеп, үҙенең эстетик тәғәйенләнешен еренә еткереп үтәй. Әммә шуныһы: тап ошо деталь трагик финалды тиҙләтә. Тыуған яғына ҡунаҡҡа килгәндә, үҙҙәрен тәү таныштырған шишмә янында туҡтала Көнһылыу. Йәнәһе, алыҫ юлдан һуң бит-күҙен йыуып, сафлана. Асылда, шунда Байгүбәге менән осрашып, мөхәббәтендә сафлана. Ана шундай процедураларҙың береһендә “ҡайныһы, Көнһылыуҙың бармағындағы аҡыҡ ҡашлы көмөш йөҙөккә күҙе төшөп, быларҙың серен аңлай”. Байғүбәк ана шунан һуң үлтерелә лә инде. Һөйгән егетенең трагедияһы – Көнһылыуҙың тормошондағы берҙән-бер сыраҡтың һүнеүе. Поэтика күҙлегенән иһә уның яҙмышы нисек хәл ителәсәген көнэлгре билдәләү (прогнозлау) сараһы булып килә.

Бер яҡтан ҡарағанда, Көнһылыу – никахлы ҡатын. Тимәк, тыуған йортона килгән-киткәндә арала булһа ла, һәр саҡ Байғүбәк менән осраша тороуы – йола, шәриғәт күҙлегенән хилаф эш. Әммә әҫәрҙә уның был ҡылығын шелтәләгән бер генә һүҙ ҙә, бер генә өн дә юҡ. Киреһенсә, риүәйәтте риүәйәт иткән төп сюжетының башынан ахырынаса Көнһылыу менән Байғөбәктең һуңғы һулыштарынаса берберeһен яратыуы – саф мөхәббәт өлгөһө итеп поэтиклаштырыла. Ошо факт үҙе үк йәшәп килгән ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе халыҡтың күрә алмауын дәлилләй. «Таштуғай» риүәйәте мөхәббәт – икәүҙең генә өлөшөнә төшкән көмөш, башҡаларҙың унда эше юҡ тигән ҡарашты үткәреүҙән йыраҡ, киреһенсә, уны бына шулай ижтимағи күренеш дәрәжәһенә күтәрә.

Әлегә тиклем һүҙ “Таштуғай” риүәйәтенең Мөхәмәтша сәсән версияһы хаҡында барҙы. Икенсе версияһының беҙгә мәғлүм ике вариянты буйынса, тыуған йортонан алыҫҡа кейәүгә бирелгән ҡыҙ (бында

уның исеме әйтелмәй) илен һағынып йырлай ҙа илай, илай ҙа йырлай. 1959 йылда яҙып алынған вариантта әйтелеүенсә, ҡайныһы менән ҡәйнәһе уны йәлләп ахырҙа ҡайтарып ебәпрә. 1966 йылда Ейәнсура районында теркәлгәнендә, киленен йыуатып, ҡайны уға буҙ бейә биреп тә ҡарай, әммә “ҡыҙ, барыбер Таштуғайҙы ерһенмәй, ҡайтып китә”. Ике вариантта ла уның һөйгән егете булыу-булмауы хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ.

М.Буранғолов версияһында ла, Байғүбәге менән танышҡан саҡта уның йырына ҡаршы яратып ҡына төртмә йыр йырлауын һәм аҙаҡ уның ҡәберен ҡосаҡлап:

Яңғыҙлатмам, йәнем, үгәйһетмәм,
Бәғрем, ятҡан ҡара гүреңде, –

тип, оҙаҡламай баҡый донъяла осрашасаҡтарын белдереүен иҫәпкә алмағанда, ҡыҙҙың тыуған яғын һағыныуы хаҡындағы йырҙарына айырыуса өҫтөнлөк бирелгән. Хәйер, тыуған яҡ төшөнсәһе менән һөйгән йәр төшөнсәһе уның өсөн айрылмаҫ бер бөтөн төшөнсәне тәшкил итә: тыуған яғын һағыныуы – Байғүбәген һағыныуы, Байғүбәген һағыныуы – тыуған яғын һағыныуы. Таштуғайҙы ерһенмәүе шунан да яҡшы аңлашыла. Ана ни тип йырлаған ул:

Таштуғайҡай елле ялан икән,
Сәскәләре ҡойола ел менән,
Алһыу йөҙкәйҙәрем, ай, һарғаqҙы
Күңелем тулы ҡайғы, уй менән…

Ошо уҡ фекер һәм хис-тойғо уның йырындағы түбәндәге юлдарҙа айырыуса образлы һәм аныҡ әйтелгән:

…Һағынамын Урал тауҙарын,
Түшәктәй үк итеп йоҡлар инем
Ҡырҡтытауҙың ҡая таштарын!

Халыҡ элек-электән сәләмәт, татыу ғаилә хаҡында хыялланған һәм, әле күреп үтеүебеҙсә, уның нигеҙен тиң мөхәббәттә күргән. «Әүәҙбикә» әҫәрендә ауыр һынауҙар үтеп тә саф тойғоларын юғалтмаған һәм бәхетле ғаилә төҙөгән кешеләрҙе идеаллаштырған. Бөрйән ырыуынан булған Дәүләт менән Әүәҙбикә, бер-береһен яратышып ҡауышһалар ҙа, оҙаҡ бергә йәшәй алмайҙар.

Художестволы әҙәбиәт, бигерәк тә шиғриәт (замана йырҙарын әйтеп тораһы ла түгел) мөхәббәт темаһына мөрәжәғәт итһә, уны бер яҡлы асыусан: яратышыусыларҙың хис-тойғоһо никах йортона барғанға тиклем дәүергә генә ҡағыла йә ире, ҡатын өҫтөнән икенсе заттар менән бәйләнешкә инеү юҫығында асыла. Фольклорҙа иһә эш икенсерәк тора: мөхәббәт темаһы ғаилә тормошон да үҙ эсенә ала. Әле һүҙ барған риүәйәт – шуның бер баҙыҡ миҫалы ул. Унда ир менән ҡатын мөхәббәте йырға ла һалынмаған, был турала лирик сигенеүҙәр ҙә, яратыу хисен аңлатыусы һүҙҙәр ҙә юҡ. Әммә, тотош алғанда, әҫәр баштан-аяҡ яратыу,

мөхәббәткә тоғролоҡ хисе менә һуғарылған һәм ул мөхәббәттең емешле булыуы менән дә нығытылған. Бында мөхәббәттең ныҡлығы интим яҡынлыҡ менән түгел, ваҡыт һәм арауыҡ (пространство), сабырлыҡ һынауы менән үлсәнгән. Табандарын ярып, әсирлектә туралған ҡыл һалынһа ла, Дәүләт Әүәҙбикәһе янына ҡаса. Ҡыуғын эҙәрләүе лә, өс көн, өс төн ҡурай үтә генә тын алып, һыу эсендә ятырға тура килеүе лә, йәғни бер ниндәй ҡаршылыҡтар ҙа уны был маҡсатынан кире дүндерә алмай. Шул да, Әүәҙбикәһен ил буйлап эҙләп китеүе лә уның үҙ ҡатынын ни тиклем нык яратыуы хаҡында һөйләй.

Ә яңғыҙ ҡалған Әүәҙбикәһе? Яу барған урынды ташлап китеүе лә, малдарын әйҙәп, Дим буйына килеп сыҡҡас, башҡа ирҙәр күҙ атмаһын өсөн, ирҙәр кейеме кейеп, үҙен тик хәләле өсөн һаҡлау сараһын күреүе, уның бары Дауытты ғына яратыуы, бары уны ғына көтөүе уға булған мөхәббәтенә тоғролоғо тураһында һөйләмәйме ни?! Ире килеп тапҡан көндән башлап ҡатындар кейеме кейеүе лә шуны ҡеүәтләй. Икенсе яҡтан, тыуған яғынан ер аяғы-ер башына сығып китеүе иһә – иренең уны барыбер табасағына, тимәк, уны ғына яратыуына ышаныуының билдәһе ул.

“Күкбурҙай”, “Ҡашҡар”, “Бисәңә ышанма, этеңә ышан”, ”Йәнгүҙәй”, “Мораҡай батыр” ише риүәйәттәр ҙә ғаиләгә тоғролоҡ проблемаһын күтәрә. Әммә “Әүәҙбикә” риүәйәте менән сағыштырғанда, поляр ҡаршы булған икенсе яктан яҡтырта. Уларҙа һүҙ хыянатсы ҡатындар хаҡында бара. Әсиргә төшкән ҡатын үҙен ҡотҡарырға килгән иренә ярҙамға килмәй. Ә ҡотҡарыусыһы бары уның хаҡына дошман менән үлемесле алыша. Ят бауырға тиҙ арала эйәләшеп өлгөргән ҡатынына үлемесле булып алышҡан ире, ярҙам ит, тиһә, уныһы: “Кем еңә, мин шуныҡы”, – тип ситтән күҙәтеп тора. Тик эте генә (Күкбурҙай, Ҡашкар һ. б.) хужаһын ҡотҡарып алып ҡала. Шуға ла ҡайны йортондағы табында үҙенә тәғәйен өлштө егет иң элек этенә бирә. Бына шулай, хыянатсы ҡатынға ҡарағанда, тоғро этте халыҡ юғарыраҡ баһалай.

Халыҡтың йола хоҡуғы кодексы буйынса, кем булыуына ҡарамаҫтан, хыянатсы бер саҡта ла язаһыҙ ҡалырға тейеш түгел. Бында хыянатсы ҡатынға үҙ атаһы йә ағай-энеһе хөкөмдөң иң ҡатыһын сығара һәм уны еренә еткереп ҡуя.

“Әүәҙбикә” риүәйәте кеүек үк, “Ҡатыныңа ышанма, этеңә ышан” мотивына ҡоролған риүәйәттәрҙең барыһы ла ир менән ҡатынды татыулыҡҡа, тоғролоҡҡа өндәй: тәүгеһе ыңғай миҫал үрнәгендә, һуңғылары кире миҫалдан фәһем алырға саҡырыу планында.

Шулай итеп, тормош-көнкүреш легендалары һәм риүәйәттәре тематик һәм художество яғынан күп төрлө һәм халыҡтың эстетик ҡарашын, көнкүрешен, тормош укладын өйрәнеүҙә мөһим урын тота. Халыҡ педагогикаһы күҙлегенән дә уларҙың әһәмиәтле баһалап бөткөһөҙ.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Андреева Н.П. Указатель Сказочных сюжетов по системе Аарне. – Л.: Изд-во ГРГО, 1929..

2. Ахметшин Б.Г. Горнозаводской фольклор Башкортостана и Урала. – Уфа: Китап, 2001. – 288 с.

3. Барлуа Ж. Люди-гиганты // Техника молодежи. – 1972. – №1. – С. 40–42.

4. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар, һүҙек һәм мотивтар күрһәткесе авт. Фәнүзә Нәҙершина; яуаплы мөхәрр. Кирәй Мәргән, Әхмәт Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 1997. II том: Риүәйәттәр, легендалар. – 440 б.

5. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Әхмәт Сөләймәнов; инеш. мәҡ. Мөхтәр Сәғитовтыҡы; һүҙ ахыры Әхмәт Сөләймәнов менән Рөстәм Рәжәповтыҡы; аңлатмалар, һүҙлек, иҫкәрмәләр авт. Мөхтәр Сәғитов менән Әхмәт Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Нур Зарипов. – Өфө: Китап, 1998. – I том: Эпос. –448 б.

6. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар һәм һүҙлек авт. Нур Зарипов; яуаплы мөхәрр. Зиннур Ураҡсин. – Өфө: Китап, 2000. – V том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр. – 296-сы б.

7. Башҡорт шәжәрәһе / Төҙ., текстарҙы тәрж. итеүсе, инеш һүҙен һәм аңлатмаларын яҙыусы Раил Кузеев. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1960. – 304 б.

8. Восточный славянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии / Отв. ред. К.Б. Кабашников. – Мінск: Навука І тэхніка, 1993. – 478 с.

9. Дневныя записки путешествия по разным провинциям Российского государства доктора и академии адъюнкта Ивана Лепехина: Серия “В помощь историку ” / сост. и авт. вступ. ст. Э.В. Мигранова. – Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН. 2007. – 72 с.

10. Законы Российской империи о башкирах, мишарях, тептярях и бобылях / Сост., автор вст. ст. и примеч. Ф.Х. Гумеров. – Уфа: Китап, 1999.

10а. Игнатьев Р.Г. Песня о батыре Салавате // Башкирия в русской литературе / Сост., предисл., биогр. спр., коммент. И.Г. Рахимкулова. – Уфа: БКИ, 1964. – Т. 2. – С. 79 – 102 с.

10б. История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX в./ Отв. ред. Х.Ф. Усманов. – Уфа: Китап, 1996 - 520 с.

11.Ковалевский А.П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921–922 гг. – Харьков: Изд-во ХГУ, 1956. – 347 с.

12. Кророленко Н.В. Собр. соч.: в 10-ти т. – М., 1955. – Т. VIII.

13. Кудряшев П.М. Предрассудки и суеверия башкирцев // Башкирия в русской литературе / Подбор текстов, сост., авт. предисл. и коммент. М.Г. Рахимкулов. – Уфа: БКИ, 1989. – Т.1. – С. 357 – 368.

14. Лимонов Ю.А., Мавродин В.В., Панеях В.М. Пугачев и его сподвежники. – М.; Л., 1965. – 140 с.

15. Лосева И.Н, Капустин Н.С. и др. Мифологический словарь: для школ, лицеев, вузов. – Ростов-на-Дону: Феникс, 1997. – 576 с.

16. Маркс К., Энгельс. Ф. Об искусстве. – М.: Искусство, 1957. – Т. 1.

17. Маркс К. , Энгельс Ф. Соч. – М.: Госполитиздат, 1961. – Т. 20.

18. Миллер В.Ф. Миллер. Всемирная сказка в культурно-историческом освещении // Русская мысль. 1898.

19. Өмөтбаев М.И. Йәдкәр / Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1984. – 288.

20. Путешествие Абу Хамида Ал-Гарнати в Восточную и Центральную Европу (1131–1153 гг.) / Публикация О.Г. Большакова, А.Л. Монгайта. – М., 1971.

21. Рыбаков С.Г. Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта. – СПб, 1897.

21а. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогик академияһының башҡорт әҙәбиәте кафедраһы фольклор фонды.

22. Сыңғыҙнамә // Башҡорт әҙәбиәте анталогияһы: 2 томда / Төҙ., инеш мәҡ. авт. М.Х.Нәҙерғолов; яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап, 1999. – I том. – XIII–XVIII. – 255–274-се б.

24. Указы, регулирующие хозяйственные вопросы, документы // Законы Российской империи о башкирах… – Уфа, 1999. – С. 40–42, 46–53.

25. Усманов А. Салауат батыр. – Өфө, 1945. – 78 б.

26. Фольклор курганских (ялан-каП матер., сост. А.М.Сулеймановa и Н.А.Хуббитдиновой; авт. предисл. и указателя информантов А.М. Сулейманов; перевод Н.А.Хуббитдиновой; отв. ред. Р.М.Юсупов. – Уфа: Изд-во БГПУ, 2008. – Ч. I. – 228 с.

**Һорауҙар һәм эш**

1. Легенда һәм риүәйәттәр ҡасан, ни сәбәптән килеп сыға башлаған? Уларҙы нисек төркөмләргә була?

2. Этнонимик һәм этногенетик легенда һәм риүәйәттәрҙең төп үҙенсәлеге ниҙән ғибәрәт? Үҙегеҙҙең ырыуығыҙ, ара, аймағығыҙҙың ошо типтағы риүәйәттәрен яҙып алығыҙ.

3. Үҙегеҙҙең төбәктәге ер-һыу атамаларының исемлеген төҙөгөҙ һәм улаҙың һәр береһенә аңлатма бирегеҙ. Эш яҙма рәүештә атҡарыла, аудиторияла уҡыла. Ниндәй легенда һәм риүәйәттәрҙе топонимик легенда һәм топонимик риүәйәт тиҙәр?

4. Мифология менән бәйле топонимик легенда һәм риүәйәттәр.

5. Географик урындың үҙенсәлеген, тәбиғи шарттарын аңлатыусы топонимик легенда һәм риүәйәттәр.

6. Ауыл тарихтары.

7. Тарихи характерҙағы топонимик легендалар һәм риүәйәттәр.

8. Көнкүреш хәлдәрен сағылдырған топонимик легендалар һәм риүәйәттәр.

9. Тарихи легендалар һәм риүәйәттәр.

10. Урал-ватанды яҡлап, хан баҫҡынсылары менән көрәш тураһындағы риүәйәттәр.

11. Оло Ватанды яҡлап көрәшкә күтәрелеүҙе сағылдырған риүәйәттәр.

12. Тарихи риүәйәттәрҙә барымта һәм ҡарымта темаһы.

13. Риүәйәттәрҙә Башҡортостанды колонизациялауға ҡаршы көрәш темаһы.

14. Тормош-көнкүреш легендалары һәм риүәйәттәре.

15. Мөхәббәт яҙмышы темаһына бағышланған риүәйәттәр.

16. Һатылған ҡыҙ яҙмышы темаһы риүәйәттәрҙә нисек асыла?

## III БҮЛЕК
## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ЭПИК МИРАҪЫ

Легенда, риүәйәттәр ҙә халыҡтың башынан үткәнде, тарихты бәйән итә. Әммә уларҙың күләменең ыҡсым булыуы, теге йә был күренешкә, этнонимға, топонимға, булып үткән хәлгә, айырым шәхестәрҙең эшмәкәрлегенә аңлатма, баһа биреүгә генә тәғәйен булыуҙары арҡаһында, уларҙы һүҙ ыңғайында әңгәмәләшкәндә лә, табында ла, юлда ла һөйләргә мөмкинлек тыуа. Ә эпосты теләһә ҡайһы шарттарҙа теләһә кем башҡара алмай. Бының өсөн боронғо ижадтың ҡәҙерен белгән сәсән телле һәм хәтерле кеше йәйелеп китеп һөйләрлек уңайлы урын һәм ваҡыт булыуы шарт[11].

### 1. Эпик ҡомартҡыларҙы йыйыу һәм өйрәнеү тарихынан

#### *а) Эпостарҙы яҙып алыу һәм баҫтырып сығарыу*

1812 йылда Ҡазан университеты типографияһында рустың Т.С. Беляев тигән бер уҡымышлыһының “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосының башҡорт версияһын үҙенсә интерпретациялап, повесть[12] баҫтырыуы, асылда, башҡорт эпосын өйрәнеү тарихының башланышы була.

Тикшеренеүселәрҙең фекеренсә, Санкт-Петербургтағы Салтыков-Щедрин исемендәге китапхана архивында “Мои вечера” тип исемләнгән эпос ҡулъяҙмаһының да эйәһе Т.С. Беляев булған. Был әҫәр башҡорт фольклор ғилемендә хәҙер “Алдар менән Зөһрә” эпосы булараҡ мәғлүм. Оҙаҡ та үтмәй фольклор һөйөүселәрҙе В.И. Даль, Л. Суходольский[13], Г.Н. Потанин, Р.Г. Игнатьев кеүек тикшеренеүселәр бер-бер артлы башҡорттоң “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосы менән таныштыра. Торараҡ был әҫәргә Сәлимгәрәй Солтанов, Мәжит Ғафуриҙар ҙа иғтибар итә. XIX быуат аҙағында һәм XX быуат баштарында башҡорт әкиәттәрен йыйыу менән шөғөлләнгән А.Г. Бессонов та эпостарҙы теркәүгә етди иғтибар бүлә. XX быуат баштарында “Иҙеүкәй менән Мораҙым” (Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Фәйзи Вәлиев, Әхмәтзәки Вәлиди), “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡуңыр буға” эпостары (М. Буранғолов) яҙып алына, уларҙың бәғзеләре баҫтырылып та сыға. Эпостарҙы яҙып алыу һәм баҫтырып сығарыу эшенә XX быуаттың 20–30-сы йылдарында Ғәбделәхәт Вилданов, Ғәббәс

---

[11] Иҫкәрмә: III - VI бүлектәрҙә файҙаланылған , шулай уҡ үҙаллы өйрәнеү өсөн тәҡдим ителгән әҙәбиәт хаҡында мәғлүмәтте һылтанмаларҙан алырға мөмкин.

[12] Беляев Т. Куз-Курпяч. башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года. – Казань, 1812.

[13] Даль В. И. Башкирская русалка//Башкирия в русской литературе/сост., авт. Предисл.М. Г. Рахимкулов. – Уфа: Башкирское книжное издательство,1989. – Т.I. – С. – 172-188; Суходольский Л. Башкирская легенда о Туляке//Вестник Русского географического общества, 1858. – ч. 24. – №12. – С. 65-72.

Дәүләтшин, Сәғит Мирасов, Нәҡи Иҫәнбәт, Ғәлимов Сәләм, Кирәй Мәргән, Али Карнай һ.б. үҙ өлөшөн индерә[14].

XX быуаттың 50-се йылдарында өс томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" тупланмаһында "Аҡбуҙат", "Бабсаҡ менән Күсәк", "Урал батыр", "Алпамыша менән Барсынһылыу", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Алып батыр", "Аласабыр менән Әбрәй батыр" ише эпик ҡомартҡыларҙың берәр варианты донъя күрҙе[15].

XX быуаттың 20-30-сы йылдарында тәүҙә Академүҙәк, аҙаҡ уның ерлегендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойоштора башлаған ғилми экспедициялар башҡорт фольклоры буйынса, шул иҫәптән эпостарҙы туплау эшенә ҙур өлөш индерә. Бөйөк Ватан һуғышы омсоронда туҡталып ҡалған был изге эш 1959 йылда Кирәй Мәргән етәкселегендә яңынан тергеҙелә. XX йөҙйыллыҡтың урталарынан иш янына ҡуш булып Башҡорт дәүләт университеты, Өфө сәнғәт институты (хәҙер ул Заһир Исмәғилев исемендәге академия), Стәрлетамаҡ педагогия институты (хәҙер ул Зәйнәб Биишева исемендәге академия) фольклор экспедицияларын ойоштора башланы. Һөҙөмтәлә 70-се йылдар башында Өфөлә 18 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" тупланмаһының ғилми баҫмаһын, Мәскәүҙә "Наука" нәшриәтендә эпостарыбыҙҙың өлгөләрен башҡорт, рус телдәрендә баҫтырып сығарыу мөмкинлеге тыуҙы[16].

XX быуаттың 90-сы йылдарында "Башҡорт халыҡ ижады"ның ғилми тупламаһының киңәйтелгән баҫмаһы ғәмәлгә ашырыла башланы. Башҡортостан республикаһы Президентының фарманы (указы) һәм Министрҙар кабинетының 1998 йылғы бойороғо буйынса М. Ғафури исемендәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты әҙерләгән

---

[14] Потанин Г.И. Дочь моря в степном эпосе//Этнографическое обозрение. – 1892. – №1 - 4. – С. 38-69; Башкирские народные сказки/Составление и перевод А.Г. Бессонова; Под ред. Н.К. Дмитриева. – Уфа, 1941; Вилданов Ғ. Башҡорт ҡашҡалары//Башҡорт аймағы. – 1925. – №1, 78-86-сы б.; Вилданов Ғ. Башҡорт әкиәттәренән берәүһе// Шунда уҡ. – 1927. – №3, 69-71-се б.; Ҡобайырҙар//Шунда уҡ. – №4, 17-19-сы б.; Дәүләтшин Ғ. Мәсем хан// Шунда уҡ. – 1929. – №7, 72-88-се б.; Мирас С. Башҡорт бейҙәре һәм хандары миҙгелендәге матур әҙәбиәттән үрнәктәр//Сәсән. – 1928. – №11-12, 10-12-се б.

[15] Башҡорт халыҡ ижады. – Өфө: ашкортостан китап нәшриәте (Артабан: БКН), 1953. – 1-се том: 75-104-се б., 1959. – 2-се том – 13-19-сы, 28-33-сө,55-56-сы, 145-165-се,214-216-сы,222-223-сө б.

[16] БХИ: Эпос. 1-се, 2-се кит./Төҙ., баш һүҙ яҙыусыһы һәм аңлатмалар бир. М.М. Сәғитов; Яуаплы мөхәрр. Ә.И. Харисов. – Өфө: БКН, 1973; БХИ: Эпос./Төҙ., инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар бир. Н.Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. Ғ.Б. Хөсәйенов. Өфө: БКН, 1982. – 3-сө кит.; Библиотека всемирной литературы: Героический эпос народов СССР. / Сост., вст. ст. и примеч. А.А. Петросян; Пер. И. Кычакова, А. Мирбадаловой, А. Хакимова. – М.: Наука, 1975. – Т. 1. С. 67-115; Эпос народов СССР: Башкирский народный эпос/ Сост. А.С. Мирбадаловой, М.М. Сагитова, А.И. Харисова; Авт. исслед. А.С. Мирбадаловой; Авт. коммент. А.С. Мирбадаловой, М.М. Сагитова; Башк. тексты подгот. М.М. Сагитов, А.И. Харисов; Пер. Н.В. Кидайш-Покровского, А.С. Мирбадаловой, А.И. Хакимова; Отв. ред. Н.В. Кидайш-Покровский. – М.: Наука, 1977; Башкирское народное творчество. Эпос/ Сост. М.М. Сагитова; Коммент. Н.Т. Зарипова, М.М. Сагитова и А.М. Сулейманова; Предисл. М.М. Сагитова. – Башкирское кн. изд-во (Далее: БНТ), 1987. – Т. 1; Иҙеүкәй менән Мораҙым: Тарихи ҡобайыр/Әҙерләүсеһе Н.Т. Зарипов. – Өфө: Китап, 1994.

“Башҡортостан халыҡтары фольклорын өйрәнеү, тергеҙеү һәм үҫтереү программаһы”на ярашлы рәүештә был ғилми туплама 55 томдан торорға тейеш. Яңы баҫмала эпос, йыр, легенда, риүәйәт кеүек үтә милли ҡомартҡыларҙың версия һәм варианттарын мөмкин тиклем тулыраҡ сағылдырыуға йөҙ тотолдо.

Уҙған йөҙ йыллыҡтың 70-се йылдарынан алып башҡорт халҡының (“Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Алпамыша менән Барсынһылыу”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” кеүек) айырым эпостары үҙ аллы китап йә йыйынтыҡ рәүешендә берәм-берәм йә башҡортса, йә русса әленән-әле донъя күрә тора[17]. Шағир Айҙар Хөсәйенов эпостың балалар өсөн сәсмә вариантын яҙҙы.

### *б) Башҡорт эпосы сит ил телдәрендә*

Һуңғы дәүерҙә башҡорт халҡының эпик мираҫы менән сит ил тикшеренеүселәрендә лә (Венгрияла – Йожеф Торма, Төркиәлә Фиҡрәт Төркмән, Мәтин Әргүн һ.б.) ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, бер юлы был хазинаны донъя халыҡтарына еткереүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Был яҡтан бигерәк тә “Урал батыр” эпосы бәхетле булып сыҡты. Уны бөгөн төрөк, венгр, инглиз, абхаз, немец, сыуаш һ.б. – бөтәһе ете телдә уҡыу мөмкинлеге бар[18]. Төрөк т елендә донъя күргән йыйынтыҡҡа ун эпос инһә, антолгияға ун өс эпосыбыҙҙың ҡыҫҡартылған варианттары бирелде.

2003 йылда “Урал батыр” эпосының өс телдә сығыуы ла мәҙәниәт тормошонда бер яңылыҡ булды[19]. Ул баҫмалағы башҡорт телендәге текст ун һигеҙ томлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады” тупламаһын башлап ебәргән эпос томынан (төҙөүсеһе М.М. Сәғитов) алынған. Рус теленә лә (шағир Ғәзим Шафиҡов), инглиз теленә лә (сит тел белгесе профессор С.Ғ. Шафиҡов) теҙмәүер рәүешендә тәржемә ителгән. Шуға күрә лә тәржемәсе, теләйме-юҡмы, шиғыр үлсәме, рифма хаҡына төп нөсхәнең йөкмәткеһенән аҙмы-күпме ситләшеүҙәр хасил булған. Бүләк маҡсатына тәғәйен баҫмала тәржемәләге былдай ғына “авторҙашлыҡ”тарға (русса әйткәндә, “отсебятина”ға) ҡул һелтәргә була. Әммә әҫәрҙе ғилми яҡтан өйрәнгәндә, улар тикшеренеүсене хата

---

[17] Акбузат: Башкирский народный героический эпос. – Уфа: БКИ, 1972, 1976; Былых времен сказания: Башкирские эпические сказания. – Уфа: БНТ, 1979; Сказания о любви: Башкирский народный эпос. – Уфа: БНТ, 1983; Урал батыр: Башкирский народный эпос. – Уфа: БКИ, 1977, 1981; Алдар и Зухра: Башкирский народный эпос/ Составление, предисловие, комментарии, редакция всех этих книг Мухтара Сагитова. – Уфа, 1986; Ural batir/ Metin Ergun, Gaynislam Ibrahimov,.- Ankara, 2000; Baskurt halk dastanlari / Metin Ergun, Gaynislam Ibrahimov,.- Ankara, 2000; Turk edebijatlari antolojisi. G. 29: Baskurt Edebiyati – 1 / Ahmet Suleymanov, Gaynislam Ibrahimov, Metin Ergun. – Ankara, 2004. – 33 – 145 s.

[18] Урал батыр: Башҡорт халыҡ ҡобайыры; Урал-батыр: Башкирский народный эпос; Ural batur: Bash-kort Folk Eric / Проект авт., инеш мәҡәлә яҙыусы һәм текстарҙы әҙерләүсе Ф.А. Нәҙершина; Проект, вст. ст., подгот. текстов Ф.А. Надршиной; Project, infroduction, prepartion of the texts F. A. Nadrshina; Тәржемәселәре (переводчики, translators J.J Shafikov, S.J. Shafikov. –Уфа: Информреклама, 2003.

[19] Урал батыр: Башҡорт халыҡ ҡобайыры...Ural batur...

ҡараштарға килтереүе ихтимал. Шуға күрә лә "Китап" нәшриәтенең инициативаһы менән шулай уҡ башҡорт, рус (тәржемәсеһе Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимов), инглиз (тәржемәсеһе мәғариф хеҙмәткәре З.А. Рәхимова) телдәрендә әҙерләнгән баҫма өсөн "юлын-юлға" тәржемә итеү принцибы ҡулланылды[20]. 2007 йылда Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСК-ла үткән презентацияһы ваҡытында "Урал батыр" эпосы ундағы белгестәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

*в) "Урал батыр" эпосы сәнғәттә*

Һуңғы осорҙа "Урал батыр" эпосына нигеҙләнеп шағир Ғәзим Шафиҡов яҙған пьеса буйм драма театрҙары спектакль әҙерләне. 1999 йылдан алып һәр йәй "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр бәйгеһе үткәрелә килә. 2003 йылдың ноябрендә ТЮРКСОЙ һәм Башҡортостандың мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы инициативаһы менән ошо уҡ эпосты башҡарыу буйынса халыҡ-ара беренсе конкурс үткәрелде (Баймаҡ). "Урал батыр" эпосын пропагандалауға республика телевидениеһының "Хазина" ижад берекмәһе (етәксеһе Юлай Ғәйнетдинов) ҙур өлөш индерә. Ошо ижад берекмәһе "Урал батыр" эпосы буйынса үткән бөтә бәйгеләрҙе лә зәңгәр экрандарға сығарыу менән бер рәттән (Сәрүәр Сурина), "Сәсән" рубрикаһында (авторы һәм алып барыусыһы Әхмәт Сөләймәнов) махсус тематик тапшырыуҙар ойоштора.

*г) Башҡорт халыҡ эпик ҡомартҡыларының ғилми яҡтан өйрәнелеше*

Башҡорт фольклоры, уның жанрҙары, уларҙы йыйыу һәм өйрәнелеү тарихы беренсе тапҡыр уҙған быуаттың 50-се йылдарында донъя күргән өс томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" тупламаһының инеш мәҡәләләрендә (Әхнәф Харисов, Кирәй Мәргән) ҡыҫҡаса, әммә төрлө яҡлап яҡтыртылыш алды. Үтә һаҡ ҡына булһа ла, унда эпос хаҡында ла, бер аҙ әйтелде[21]. Күрәһең, 1944 йылда ил компартияһы үҙәк комитетының махсус ҡарарында, хандар заманын идеаллаштырыусы эпос тип, "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпик ҡобайырының тыйылыуы, ғөмүмән, эпос хаҡында, ауыҙ тултырып, һүҙ алып барыу мөмкинлеге бирмәгән. "Алып батыр", "Алпамыша", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Заятүләк менән Һыуһылыу" ише эпостарыбыҙ менән бер рәттән "Урал батыр"ҙың сәсмәүер версияһының, "Аласабыр", "Әбрәй батыр" ишеләренең дә әле телгә алынған тупламаның 2-се томында әкиәттәр араһында бирелеүен дә, ә инде 1910 йылда Ғәбидулла сәсән Арғынбаев һәм Хәмидулла Әлмөхәмәтовтарҙан яҙып алынған , әлеге көндә донъяны шаулатҡан ҡобайыр версияһына урын биреү түгел, уның

[20] Урал батыр: Башҡорт халыҡ эпосы; Урал-батыр: Башкирский народный эпос; Ural batyr: Bashir Folk Epic / Инеш мәк., аңлатмалар авт.; яуаплы мөхәрр. Әхмәт Сөләймәнов; Пер.на рус. Яз. Ахияра Хакимова, на англ. – З.А. Рахимовой. - Өфө: Китап, 2005.
[21] Башҡорт халыҡ ижады. 1-3-сө томдар. (Артабан: БХИ).

хаҡында бер-ике ауыҙ һүҙ менән генә сикләнеүҙе лә (бәлки быға яҙып алыусыһы Мөхәмәтша сәсән Буранғоловтоң репрессияға юлығыуы ла сәбәпсе булғандыр) шуның менән аңлатырға була торғандыр.

Башҡорт эпосы ла ахырҙа ғилми яҡтан тикшерелеүгә лайыҡ булды, тип бары XX быуаттың 60-сы йылдарында ғына ауыҙ тултырып әйтергә форсат тыуҙы. Был форсатты беҙгә фольклор ғилеме өлкәһендә тәүге фән докторыбыҙ, профессор Кирәй Мәргәндең "Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары" тигән монографияһы бирҙе[22]. Унда башҡорт халҡының эпостарын йыйыу тарихы тәүгә тулыраҡ яҡтыртылыш алды.

"Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосының башҡорт версияһының "Рифей тауҙарында (Уралда. – Ә.С.) бер ҡурайсы яҙған Ҡуҙыйкүрпәс хаҡындағы башҡорт повесы" тигән баш аҫтында Т.С. Беляев тарафынан ижади эшкәртелгән вариантының рус телендә баҫылып сығыуына 150 йыл тулыу уңайы менән 1962 йылда Өфөлә Бөтә Союз ғилми конференцияһы үтеүе башҡорт фольклор ғилеме тарихында оло ваҡиға булды[23].

Оҙаҡ та үтмәй, иш янына ҡуш булып, Ә.И. Харисовтың, "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы" монографияһы донъя күрҙе. Эпик ҡомартҡыларыбыҙ хаҡында монографик хеҙмәттәр XX быуаттың 80-се йылдарынан һуң, күҙгә күренеп, ишәйә төштө. Шуларҙың иң эреләре М.М. Сәғитов менән С.Ә. Галиндыҡы булды[24]. Ғ.Б. Хөсәйенов, Ә.М. Сөләймәнов, М.Х. Нәҙерғоловтар ҙа эпик мираҫыбыҙҙы өйрәнеүгә тос ҡына өлөш индерҙе. Ике быуат сигендә башҡорт халҡының эпостарын тикшереү өлкәһендә Р.Ф. Рәжәпов, Ш.Р. Шәкүрова, Н.Ә. Хөббитдинова-Сөләймәнова, В.Г. Котов, Г.В. Юлдыбаева, Р.Ғ. Йәғәфәров кеүек яңы исемдәр ҙә күренә башланы[25].

---

[22] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – Өфө: БКН, 1961.

[23] Народный эпос "Кузый-Курпес и Маян-хылу": Материалы научной сессии / под редакцией А.Н. Киреева и А.И.Харисова. – Уфа, 1963.

[24] Сәғитов М.М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. – Өфө: БКН, 1987; Шул уҡ авт.Башҡорт халыҡ эпосының мифологик һәм тарихи нигеҙҙәре / Төҙ. Әхмәт Сөләймәнов һәм Тәлиға Сәғитова;һүҙ ахыр Әхмәт Сөләймәновтытыҡы; Яуаплы мөхәрр. Әхмәт Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 2009; Галин С.Ә. Тарих һәм халыҡ поэзияһы.– Өфө: Китап, 1995; Он же. Башкирский народный эпос. – Уфа: Аэрокосмос и ноосфера, 2004.

[25]Сөләймәнов Ә.М., Рәжәпов Р.Ф. Башҡорт халҡының архаик эпостары. – Өфө: Ғилем, 1996; Шакурова Ш.Р. Текстолоия башкирского народного эпоса "Урал-батыр" (проблемы базового научного текста): Автореф дисс. … канд. филол. наук. – М., 1998; Шакурова Ш.Р. Башкирский народный эпос "Урал-батыр": Архианый первоисточник и его текстологический анализ / Научн. ред.В.М. Гацак; Отв. ред. Р.З. Шакуров, Г.Р. Хусаинова. – Уфа: Гилем, 2007; Хөсәйенов Ғ.Б., Сөләймәнов Ә.М., Нәҙерғолов М.Х. Яҙма дастандар. – Өфө: Ғилем, 2006; Сөләймәнов Ә.М. Мөхәббәт дастандары. – Өфө: БДПУ нәшр., 2007; Сөләймәнов Ә.М. Эпик мираҫыбыҙ. – Өфө: БДПУ нәшр., 2007; Хуббитдинова Н.А. Фольклорные основы "Башкирской повести "Куз-Курпяч": Автореферат... канд. филол. наук. – Уфа, 1997; Шул уҡ авт. Башҡорт әҙәбиәтендә фольклор (XIII – XIX).– Өфө: Ғилем, 2004; Она же. Реликвия "Курайчи". – Уфа, 2005; Ҡурайсы ҡомартҡыһы. – Өфө: З. Биишева ис. "Китап", 2009; Котов В.Г. Башкирский эпос "Урал-батыр": Историко-мифологические основы. – Уфа: Гилем, 2006; Юлдыбаева Г.В. "Урал батыр" эпосының сюжеты һәм стиле. – Өфө: Ғилем, 2007; Ягафаров Р.Г. Башкирская версия эпоса "Алпомыш": Автореф. … канд. филол. наук. – Казань, 2007.

Милләт ереккән ерҙе һүрәтләгән ваҡиғаларға фон итеп кенә түгел, уларҙың тыуған, барған, тамамланған, тимәк, уларға мөнәсәбәтле, хатта ки персонаж вазифаһын да атҡарыусы урынға тәрән тамыр ебәргән эпостар – шул милләттең борондан ойошоп, тап ошо төбәкте ил иткән боронғо халыҡ икәненең бер билгеһе ул. Ә инде бөгөн ил иткән урынға бәйле эпостары булмау сәбәпле, башҡа халыҡтар менән уртаҡ эпик сюжеттар менән генә хушһынырға мәжбүр булған милләт был урынға йә, эпос дәүере үткәс кенә, килеп ереккән, йә, Америка халҡы кеүек, төрлө-төрлө этник сығышлы ҡәүемдәр йыйылмаһынан тора. Шуға күрә лә халыҡтың милли аңы һиҙелерлек уяныу кисергән яңы дәүерҙә башҡорт эпостары, фольклорсыларҙан тыш, философтарҙың, тарихсыларҙың, археологтарҙың, этнографтарҙың, этнологтарҙың, телселәрҙең, халыҡ педагогияһы өлкәһендә тикшеренеүселәрҙең дә, әҙиптәрҙең, публицистарҙың, хатта юристарҙың да иғтибарын йәлеп итә башлауына ғәжәпләнәһе түгел.

Ошо йөмләнән тикшеренеүселәребеҙҙең, бер яҡтан, милли ғорурлығыбыҙ булған эпостарыбыҙҙы ижад итеүсе, быуындан-быуынға еткереүсе сәсәндәребеҙгә, иртәкселәребеҙгә; икенсе яҡтан, хазинаға тиң ошо мираҫыбыҙҙың донъя эпик традициялары фонында тикшереүгә иғтибар итә башлауҙары ла яҡшы аңлашыла.

Сәсән һәм иртәкселәребеҙ хаҡында тәүге һүҙҙе XIX быуат ахырында музыка белгесе С.Г. Рыбаков әйтһә[26], унаң күҙәтеүҙәрен XX быуатта күп яҡтан Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов тулыландырҙы. Кирәй Мәргәндең конкрет күҙәтеүҙәре арҡаһында, эпос яҙмышында шул һүҙ һәм көй оҫталарының хәл иткес роль уйнауы хаҡындағы фекер тағы баҙыҡлана төштө[27]. Был фекер М.М. Сәғитов, Ғ.Б. Хөсәйенов, Н.Т. Зарипов, С.Ә. Галин, Б.С. Байымовтарҙың хеҙмәттәрендә ҡайта-ҡайта яҡлау тапты.

Эпостарыбыҙҙы ғилми яҡтан баһалау тәңгәлендә байтаҡ эштәр башҡарылған. Әммә 70-се йылдарҙың баштарынаса, айырым сығыштарҙы һәм һүҙ эйәрә генә әйткән фекерҙәрҙе иҫәпкә алмағанда, башҡорт эпос ғилеме нигеҙҙә үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнаны. Бара-тора ғалимдарыбыҙ был сикләнгәнлектән ҡотолорға тырыша башланы. Мәҫәлән, тәүгеләрҙән булып, башҡорттоң күренекле философы Д.Ж. Вәлиев үҙенең хеҙмәттәрендә ҡайта-ҡайта “Урал батыр” эпосының, бер яҡтан – фарсыларҙың зороастризмы, икенсе яҡтан, боронғо төрки мифологияһы менән тамырҙаш, өсөнсөнән, сүмер-аккадтарҙың Гильгамешҡа бағышланған “Күпте күргән, күпте кисергән хаҡында” тигән ҡомартҡыһына оҡшаш булыуын әйтеп уҙғайны (ике

[26] Рыбаков С.Г. Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта. – СПб, 1897
[27] Сәсән аманаты / Төҙ., инеш мәҡәлә авторы, яуаплы мөхәрр. Б.С. Байымов. – Өфө: Китап, 1994; Кирәй Мәргән. Башҡорт халкының эпик ҡомартҡылары. – 69 – 90-сы б.

əçərʒeң дə геройы мəңге ғүмер һөрөү тураһында хыяллана)[28]. Оʒаҡ та үтмəне күптəр ошо фекергə килде (А.А. Петросян, М.М. Сəғитов, Р.Ф. Рəжəпов, С.А. Ғəлләмов, Ғ.Б. Хөсəйенов, Н.А. Мəжитов һ.б.)[29].

Сағыштырыу даирəһен тағы ла киңəйтеүгə ынтылыштар ʒа булды. М.М. Сəғитов, мəçəлəн, Урал батырʒы грек мифтары геройʒары Прометей, Эпиметей, һинд эпосы “Махабхарата”лағы Гаруда менəн йəнəш ҡуйып, улар араһындағы оҡшашлыҡҡа баçым яһаны. Яʒыусы Йыһат Солтанов иһə əле əйтелгəн оҡшашлыҡтарʒан тыш, башҡорт мифологияһында Скандинавия халыҡтарының мифтары менəн дə яҡынлыҡтар табырға тырышты, археолог В.Г. Котов шул уҡ эпостың фин-уғыр, Палеазиат халыҡтары мифтары менəн, Р.Ф.Рəжəпов һəм Ə.М. Сөлəйманов – фарсы, Алтай эпосы менəн уртаҡ һəм оҡшаш билдəлəрен юлланы[30].

Эпостарыбыʒʒы төрлө телдəрʒə баçтырып сығарыу менəн улар хаҡындағы хеʒмəттəрʒең ишəйеүе халҡыбыʒʒың милли ғорурлығы булған ошо хазина менəн ҡыʒыҡһыныуʒы тағы ла арттыра төштө. Шуны иçəпкə алып “Урал батыр” эпосының эпик ҡобайыр рəүешендəге төп версияһының яʒылып алыныуына 85 йыл тулыуға бағышлап (1995) махсус ғилми конференция, 1997 йылда Төркиəттең Өфөлə уʒғарылған Бөтə донъя ғилми конгресы сиктəрендə – симпозиум, 2003 йылда йəнə Бөтə Рəсəй ғилми конференциялары уʒғарылды[31].“Урал батыр” эпосының эпик ҡобайыр рəүешендəге төп версияһының бер вариантын тəүлəп яʒып алыуға 2010 йылда теүəл 100 йыл тулды. Шул уңай

---

[28] Валеев Д.Ж. Связь мировоззрения древних башкир с мусульманскими верованиями: Тезисы. – Чебоксары, 1973. С. 47-50; Шул уҡ авторʒыҡы. Моральная проблематика в эпосе “Урал батыр”// Фольклор народов РСФСР. – Уфа, 1976. – С. 3-8; Шул уҡ авторʒыҡы. История нравственного сознания башкирского народа. – Уфа, 1984. – С. 24-30.

[29] Петросян А.А. История народа и его эпос. – М.: Наука, 1982. – С. 33-35; Сəғитов М.М. Боронғо башҡорт ҡобайырʒары. – Өфө: БКН, 1987. – 39-90-сы б.; Рəжəпов Р.Ф. Башҡорт эпосының генезисы мəсьəлəһенə ҡарата// Туған тел һəм əʒəбиəт: Тезистар. – Өфө: БДУ нəшр., 1994. – 76-78-се б.; Хөсəйенов Ғ.Б. Башҡорт-уғыʒ эпик традициялары һəм “Ҡорҡот-ата” китабы// Башҡорт əʒəбиəте тарихы: 6 томда. – Өфө, 1990. 1-се том. 77-се б.; Мажитов Н.А. О ранних этапах этногенеза башкир// Востоковедение в Башкортостане: История, культура. Т.2. – Уфа, 1992. С. 51; Мажитов Н.А., Султанова А.Н. История Башкортостана с древнейших времен. – Уфа: Китап, 1994.

[30] Сəғитов М.М. Боронғо башҡорт ҡобайырʒары. – 60, 74-се б.; Солтанов Й. “Урал батыр” шəжəрəһе// Ағиʒел, 1982, №9. 109-124-се б., №10. 109-121-се б, 1984. №2. 118-135-се б., №3. 106-130-сы б.; Котов В.Г. Мифологическая стратиграфия эпоса “Урал батыр”// Тез. X Западно-Сибирского Арх.-этногр. совещания. – Томск, 1995. – С. 92-94; Шул уҡ авторʒыҡы. Два мира южноуральского эпоса// Россия и Восток. – Челябинск, 1995. – С. 28-29; Шул уҡ авторʒыҡы. “Урал батыр” эпосының мифологик стратиграфияһы// Шоңҡар, 1996. – №2. – 137-140-сы б.; Котов В.Г. Башкирский эпос “Урал-батыр”: Историко-мифологические основы. – Уфа: Гилем, 2006; Сөлəйманов Ə.М., Рəжəпов Р.Ф. Башҡорт халҡының мифологик эпосына хас ҡайһы бер үʒенсəлектəр// Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. Эпос. – 313-318-се б.; Шул уҡ авт. Башҡорт халҡының архаик эпосы. – Өфө: Ғилем, 2000. – 22-38-се б.

[31] Урал батыр эпосы һəм мифология: Бөтə Рəсəй фəнни конференцияһы материалдары. – 2003 й. – 27-28 май. – Өфө: Ғилем, 2003.

менән Өфөлә халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция үткәрелде.[32]

Шулай итеп, башҡорт эпосын әле лә халыҡ араһынан йыйыу, йыйғанын баҫып сығарыу һәм ғилми яҡтан өйрәнеү эшендә башҡорт фольклористикаһының ярайһы ғына уңыштары бар.

## 2. Башҡорт эпостарының төркөмләнеше

Башҡорт халҡының эпостарын, ғәҙәттә, тарихи-хронологик принциптан сығып төркөмләйҙәр. Ҡайһы бер төҙәтмәләр һәм өҫтәмәләр индереп, мәҫәлән, М.М. Сәғитов, С.Ә. Галиндарса эш итһәк, уларҙы түбәндәгесә төркөмләргә булыр ине: 1) тәүтормош һәм артабанғы ырыу-ҡәбилә йәмғиәте дәүерен сағылдырыусы (“Урал батыр”, “Иҙел менән Яйыҡ”, “Аҡбуҙат”, “Минәй батыр менән Шүлгән батша”, “Ҡуңыр буға”, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Ҫанай-Ҫары менән Шайтан-Ҫары”, “Алып батыр”, “Алпамыша менән Барсынһылыу”,); 2) ырыу-ҡәбилә ҡоролошо тарҡалыу һәм феодаль йәмғиәт тыуыу дәүерен сағылдырған (“Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Алдар менән Зөһрә”, “Балабәшнәк”, “Таһир менән Зөһрә”, “Йософ менән Зөләйха”, “Буҙйегет”, “Ҡорҡотнамә”); 3) феодаль мөнәсәбәттәр нығынып, йәмғиәттең артабанғы үҫеш дәүерендә хасил булған эпостар инә. Һуңғыһына “Аҡташхан”, “Һуңғы Һартай”, “Хан ҡыҙы Алтынсәс”, “Мөйтән бей”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым”, “Ек Мәргән”, “Мәргән менән Маянһылыу”, “Тарғын менән Ҡужаҡ”, “Сыңғыҙнамә”, “Аҡсахан менән Ҡарас сәсән”, “Ҡараһаҡал”, “Юлай менән Салауат”, “Аласабыр менән Әбрәй батыр” кеүек эпостар ҡарай. Һәр бер төркөмләү шартлы. Шартлылыҡ был төркөмләүҙә үҙен айырыуса ныҡ һиҙҙертә: тәүге төркөмгә хас билдәләрҙе – икенсеһенә ингәндәрендә, уныһыныҡында күҙәтелгәнен өсөнсөһөндә лә табырға мөмкин һәм – киреһенсә.

Беҙҙең ҡарамаҡҡа иһә эпостарҙы уларҙа ысынбарлыҡ күренештәрен ниндәй аң кимәленән сығып сағылдырыуҙарына ҡарап бүлгеләү яйлыраҡ. Ошо принцип менән эш иткәндә, башҡорт халҡының эпик ҡомартҡыларын иң башта ике ҙур төркөмгә – мифологик эпостар төркөмөнә һәм рациональ-реалистик фекерләүгә нигеҙләнгән эпостар төркөмөнә бүлергә мөмкин.

Фольклор ғилеменә был жанр төрҙәренең (разновидность) атамалары нигеҙҙә халыҡтың йәнле теленән алып индерелгән. Тарихи Башҡортостандың Урал аръяғына тартылып, көнбайыш Себергә тиклем йәйелгән (хәҙерге Курган өлкәһенә ингән) биләмәһендә йәшәгән Ялан-Ҡатай ырыуы башҡорттары “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”,

[32] “Урал батыр” һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы: “Урал батыр” ҡобайырын яҙып алыуға 100 йыл тулыуға арналған Халы-ара ғилми-ғәмәли конференция материалдары. Өфө, 30 ноябрь, 2010. – Өфө: ТТӘИ, 2010. – 1-се, 2-се бүлектәр.

“Маҡтымһылыу” ише эпик әҫәрҙәрҙе *“иртәге”* йәки *“иртәк”* тигән термин менән атап йөрөтә. Шуларҙан күрмәксе, профессор Кирәй Мәргән (Әхнәф Нурмөхәмәт улы Кирәев, 1912 – 1983) ошо терминды фольклор ғилемендә лә ҡуллана башланы. Анығыраҡ әйткәндә, эпик хикәйәләү өлөшө – сәсмә телмәр (проза), ә диалогтар, монологтар теҙмә (шиғри) телмәр рәүешендә башҡарылыусан эпостарҙы иртәк тип атарға тәҡдим иткәйне[33].

Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районында яҙып алынған “Маҡтымһылыу иртәгенең ахырында “Иртәгем ары китте, үҙем бире ҡалдым. Лоҡманға туғарҙым. Уға тау менән таш йөкмәттем, үҙем аш йөкмәп ҡайттым” тигән стилистик формула килтерелә[34]. Тимәк, заманында иртәк һәм иртәгәләр терминдары тиң һәм киң ҡулланылған булыуы ихтимал.

М. Өмөтбаев әйтеүенсә иһә: *“Бөтә башҡорт батырҙары өләңдә йырлана: мәҫәлән, Мораҙым, Заятүләк, Сура батыр һәм дары еҫен аҙ еҫкәгән* (йәғни, ауыҙ тултырып әйтерлек батырлыҡ күрһәтмәгән. – Ә.С.) *бүтән күп кенә батырҙар”.* Шул *“күп кенәләр”* рәтенә ул хандар тураһындағыларын да индергән. М. Өмөтбаевтың: “Ҡырғыҙҙарҙа (йәғни ҡаҙаҡта. – Ә.С.) өләң йыры хәҙерге ваҡытта ла (йәғни XIX быуаттың икенсе яртыһында ла. – Ә.С.) беренсе урында тора. Ләкин улар үҙҙәре ябай йырҙарҙы [ла] өләңдәрҙән айырмайҙар, шуға бөтәһен рәттән өләң тип атайҙар. Ә *башҡорттарҙа өләң хикәйәтте, йәғни эпосты аңлата*”[35], – тигәне лә иғтибарға лайыҡ. Халыҡ әле фольклорса фекерләүҙән арынып бөтмәгән, ауыҙ-тел ижадын һаҡлаусылдар, башҡарыусылар абруй менән ҡаҙанған дәүерҙә, улар менән һин дә мин аралашып йәшәгән энциклопедик мәғлүмәтле күренекле мәғрифәтсе шағир һәм ғалимыбыҙҙың был һүҙҙәре фольклор ғилемебеҙҙә быға са иғтибарға алынманы. Унын бер сәбәбе әле генә килтерелгән иҫкәрмәһе менән иҫәпләшеп тормаҫтан өләнде тик ҡаҙаҡ фольклоры күренеше тип иҫәпләү булды буғай. М. Өмөтбаевтың билдәләмәһе менән килешкән сүрәттә, эпостарыбыҙҙың әлегә беҙ “эпик ҡобайырҙар”тип атаған өлөшөн “өләңдәр” тип кенә билдәләргә лә булыр ине.

Башҡорт эпостарының иртәк рәүешендә башҡарылғандарының теҙмә өлөшө йырҙан йә ҡобайыр ритмына ҡоролған һамаҡтарҙан тора. “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Алпамыша менән Барсынһылыу”, “Ҡуңырбуға”, “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Тарғын менән Ҡужаҡ” кеүек эпостар шуға миҫал.

“Урал батыр”, “Минәй батыр менән Шүлгән батша”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым”, “Ҡарат менән Ҡараһаҡал”, “Юлай менән Салауат”

[33] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары.
[34] БХИ. 4-се том. Эпос. – 280-се б.
[35] Өмөтбаев М.И. Йәдкәр./Текстол. эштәрҙе атҡарыусы, төҙ., баш һүҙ. яҙ., аңлатмалар бюиро. Ғ.С. Ҡунафин. - Өфө: БКН, 1984/ - 278 – 279-cs? 289 – 193-се б.

ише эпостар иһә тотошлайы менән ҡобайыр стилендә, ҡобайыр үлсәмендә ижад ителгән һәм беҙгә шул килеш килеп еткән.

Күпселек өлөшө шундай уҡ теҙемдәрҙән торған “Аҡбуҙат”, “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Бала бәшнәк” ише эпостар ҙа башта шау ҡобайыр үлсәмендә ижад ителгән булып, ҡобайырсылыҡ традицияһы һүрелә килә генә, уларҙа өлөшләтә сәсмә телмәр формаһ, икенсе, өсөнсө миҫалдарҙа йыр урын ала башлауы ихтимал. Башҡорт эпостарының был төркөмө хәҙер иртәктәр кәштәһендә урын алған.

Әйтелгәндәрҙән тыш башҡорт фольклорсылары Әхнәф Харисов, Мөхтәр Сәғитов, Салауат Галин һ.б. “хикәйәт” тигән эпик жанр барлығын да билдәләй. Тик уға, ғәҙәттә, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосының 1812 йылда Тимофей Беляев тигән бер рус уҡымышлыһы интерпретацияһында баҫтырылған версияһы менән “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының шиғыр үлсәменә Сабирйән сәсән Мөхәмәтҡолов һалып үҙе үк “хикәйәт” тип атаған Ҡыпсаҡ ырыуы версияһын һәм “Ек Мәргән”де генә индерәләр.

Ғәрәп һүҙе “хикәйәт”, төрки телдәренә ауҙарғанда, көнсығыш әҙәбиәте йоғонтоһонда Яңырыу дәүерендә Италияла хасил булған новелла жанрына яҡын мәғәнә биреүсе “ирештереү”, “мәрәкәләү” тигәнде аңлата. “Кинәйәләү”, “уй йомоу”, “тел төбө менән әйтеү”, “тел аҫтына тел йәшереү”  тигән мәғәнәлә ҡулланылыуы ла ихтитмал. Һәр хәлдә, нрвеллистик әкиәттәребеҙгә һуңғылары хас. Шул арҡала уларҙа көтөлмәгәнлек эффекты тыуа ла инде. Ошо яҡтан ҡарағанда, “хикәйәт” терминын эпостарға ҡарата ҡулланыу, ғөмүмән, килешеп бөтмәй.

Академик Ғ.Б. Хөсәйенов раҫлауынса, “тел-стиль үҙенсәлектәре, шиғыр формаһы, тимәк, жанр тәбиғәте ҡабатланмаҫ милли” булыуҙарына ҡарамаҫтан, “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Алпамыша менән Барсыһылыу” кеүек эпик ҡомартҡыларыбыҙ ҙа “дастанлыҡ традицияһынан йәки йоғонтоһонан килгән” һыҙаттарға эйә булған[36].

Башҡорттоң Үҫәргән ырыуының бер тармағын тәшкил итеүсе Мәмбәт ҡәүеменең барлыҡҡа килеү тарихын тәфсирләп тиреп сыҡҡан “Түлле Мәмбәт” тә йыйылма текстан торған яҙма дастан үрнәге тип ҡаралырлыҡ. Сюжеты төрки ҡәрҙәштәребеҙҙең башҡалары менән дә уртаҡ “Ҡорҡот-Ата”, “Уғыҙнамә” һәм башҡорттоң Үҫәргән, Мең ырыуҙары тарихын бәйән итеүсе “Бей Туҡҫаба уғланы Мөйтән бей”, “Мөйтән”, “Заманалар ҡиссаһы” хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. “Сыңғыҙнамә”лә, әле һаналған әҫәрҙәр ҙә, асылда, фин менән карелдарҙың уртаҡ милли ҡомартҡыһы иҫәпләнә башлаған “Калевала”

[36] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт әҙәбиәтендә традицион жанрҙар системаһы//Башҡорт әҙәбиәтенең жанрҙар системаһы. – Өфө, 1980. – 15-се б.

һәм эстондарҙың милли ғорурлығына әүрелгән “Калевипоэг” һымаҡ уҡ, тәнҡиди йыйылма текстарҙан ғибәрәт. Бөгөнгө көндә башҡорт халҡының эпосы эсендә былдай әҫәрҙәр үҙҙәре бер жанр төркөмөн хасил итә.

Башҡорт эпосын башҡарыусы иртәкселәр, сәсәндәр репертуарында элек-электән “Таһир менән Зөһрә”, “Ләйлә менән Мәжнүн”, “Йософ менән Зөләйха”, “Буҙйегет”, “Сәйфелмөлөк” ише урта быуат китаптары аша нигеҙҙә көнсығыштан, айырата әйткәндә, Урта Азия халыҡтарынан милли эпик традиция күҙлегенән үҙләштерелгән дастандар ҙа мәғлүм урын алған булған.

Жанр тәбиғәте буйынса – романтик, пафосы йәһәтенән – нәсихәти, йөкмәткеһе яғынан дини булған эпик сюжетлы әҫәрҙәргә ҡисса тип әйтәләр. Уларҙың геройы – әүлиә-әнбиәләр, бәйғәмбәрҙәр затынан.

“Ҡөрьән Кәрим”дән – шуның һымаҡ китаптарға, артабан талантлар тарафынан эшкәртелеп, уларҙан халыҡтың йәнле теленә күскән, бөтөнләй өр-яңы художестволы ҡиммәткә әүрелгән “Әҙәм менән Иблис”, “Йософ менән Зөләйха” фольклорлашҡан ҡисса жанрына ҡарай.

# IV БУЛЕК
# МИФОЛОГИК ЭПОСТАР

Теләһә ҡайһы мифтағы һымаҡ уҡ, мифологик эпостарҙа ла ваҡиғалар үтә борон үткән заманда (“Uhr-Zeit”та) бара. Заман боронғолоғо был төркөм әҫәрҙәрендә, ғәҙәттә, башта уҡ “борон-борон заманда” тигәнерәк һүҙбәйләнеш менән билдәләнә. Борон үткән анығ булмаған ваҡыт билдәләнешенән һуң эпос ҡаһарманының хәрәкәте өсөн сәбәпсе булған шарттар хаҡында мәғлүмәт алабыҙ.

## 1. Донъяға “мәңге үлмәҫ төҫ” биреүсе Урал батыр

Урал батырҙың хәрәкәт итә башлауына сәбәпсе хеҙмәтен Әжәл үтәй. Уның маҡсаты менән бурысын ана шул яман заттың үҙен юҡ итеү теләге билдәләй.

“Урал батыр”ҙың структураһы шулай ҡоролған: ул эпос ҡаһарманының үҙ алдына ҡуйған программаһының ғәмәлгә ашмышын аҙым һайын һәм эҙмә-эҙлекле күрһәтеүгә ҡулай. Ошо юлда уға ауыр-ауыр һынауҙар үтеүҙе талап иткән кәртәләр тора. Ә ул кәртәләр Ҡатил батшаның тауҙай (мифик) үгеҙе менән дә, һәр береһе дейеү һәм ғифрит ише баһадирҙары, йыландар батшаһы Әзрәҡә менән уның юха холоҡло улы Зәрҡүм, Шүлгән, Ҡәһҡәһәләр менән алыш һәм Һомайҙың Айһылыу атлы һеңлеһен ҡотҡарыу һәм Шүлгән ағаһы ҡумшыта ла алмаған ауыр ташты күтәреү һымаҡ шарттар рәүешендә һынландырыла эпоста.

Мәғлүм булыуынса, ағаһы Шүлгән атаһы ауыҙ итмәҫкә ҡушҡан йыртҡыс ҡанын эсергә тәләүенә лә, шуларҙың икәүләшеп Һомайғошто һуйырға уҡталыуына ла,  ун ғына йәшлек малай булыуына ҡарамаҫтан ҡаршы сыға. Программа кимәлендәге маҡсат һәм бурысың, үҙе иғлан иткәнгә тиклем үк, уны ғәмәлгә ашыра башлау юлындағы тәүге ҡаршылыҡтар менән осрашыуы була был конфликт.

Программа кимәлендәге маҡсат һәм бурысын Урал үҙе атаһының: “Йәншишмәнең урынын табырға, әгәр юлда Үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға”, - тип әйткәне менән генә сикләмәй, киңерәк күҙ алдына килтерә.  Әгәр Ҡатил батшанан ҡыҙы менән бергә ҡасып йөрөгән ҡарсыҡҡа уны:

Мин кешегә теймәймен,  
Аның ҡанын ҡоймаймын –  
Үлем тигән яуызды  
Үлтерергә уйлаймын, –

тип, тезис формаһында ғына аңлатһа. Ошо әйткәнен ят йолалы яңы шарттарға яраҡлаштырып, тулыландыра төшә:

Үлем тигән яуызды  
Үлтерегә эҙләйем.  
Йоланан да ҡурҡмайым ,

Үлемдән дә өркмәйем,
Кеше түгел, ҡошто ла,
Ниндәй үлем килһә лә,
Килеп, ҡулын һалһа ла,
Аны биреп үлемгә,
Ҡул ҡаушырып тормайым!

Үҙенең алдына ниндәй маҡсат ҡуйғанын, ниндәй бурыс алғанын халыҡҡа иһә тағы ла анығыраҡ итеп еткерә:

Мин күренмәҫ Әжәлде
Юҡ итергә сыҡҡанмын,
Ҡан эсеүсе батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын.

Тыуған төйәгенән малай ғына килеш сығып киткән Урал егет ҡорона тула барыуына бәрәбәр программаһына ла асыҡлыҡ индерә бара. Атаһының бойороғо менән билдәләнгәненә ҡасҡы ҡарсыҡҡа әйткәнендә кеше ҡанын ҡоймаясағын әйтеүе – бер өҫтәлмә. Ысынлап та, Урал батыр ахырынаса ошо һүҙенә тоғро булып ҡала. Донъя боҙоғо яуыз Ҡатил алдында иһә ул кереткән йоланан, киңәйтә биреп, хәҙергесәрәк әйткәндә, ҡанун-закондан ҡурҡмауын, уны һанламауын, йәғни үҙ программаһына ярашлы эш итәсәген белдерә. Программаһы хаҡында халыҡ алдында ауыҙ асҡанында иһә, Йәншишмә һыуы менән үлгәндәрҙе терелтәсәген иғлан итә.

Һынау артынан һынау үтә килә – Ҡатил батшаның ҡыҙын, Ҡәһҡәһә илендә – Гөлөстанды, ахырҙа Ҡояш менән Самрау ҡыҙы изге Һомайғошто кәләш итә барып, уларҙан тыуған Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш атлы уландары батыр булырға өлгөргәс иһә, йәғни үҙе ил ағаһы миҙгеленә еткәс, Урал иң мөһим ҡаршылыҡты еңеүгә – үҙ-үҙен еңеүгә, өлгәшә. Ул Йәншишмә һыуын үҙе эсеүҙән – мәңге тере ҡалыу форсатынан баш тартып, программаһына ярашлы:

Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын! –

тип, уны тирә-йүнгә, үҙе дейеү-аждаһаларҙан яулап алған, даръя, диңгеҙҙәрҙән арындырған ергә һирпә.

Урал батырҙың һуңғы еңеүенең һәм, ғөмүмән, эпостың төп фәлсәфәи асылы – кешенең был ерҙәге тәғәйенләнеше, йәшәү һәм үлемдең мәғәнәһе, кешелектең мәңгелегенең шарты – тәбиғәттең мәңгелеге икәнен раҫлауға ҡайтып ҡала. Үҙенең генә мәңгелеген уйлап, әжәлдән ҡасып ҡотолорға маташҡан Гильгамеш батшанан һәм Ҡорҡот

атанан айырмалы рәүештә, Урал батыр бөтә кешелектең мәңгелеген ҡайғырта.

Ер тормошоноң мәңгелеген тәьмин итеүсе герой булараҡ, Урал батыр тәңреләр ише илаһтар кимәленә күтәрелә. Шуға ла уның эшмәкәрлеге, тимәк, тотош эпостың асылы донъя әһәмиәтенә эйә. Айырым мотивтар, образдар, мифологик башланғыстар кимәлендә бынан 35 быуат әүәл Месопотамияла тыуған Гильгамеш хаҡындағы эпос, һинд-иран, төрки-монгол донъяһы ҡомартҡылары менән ҡайһы бер ауаздашлыҡтары, оҡшашлыҡтары, хатта уртаҡлыҡтары булыуына ҡарамаҫтан, “Урал батыр” – “Ырыуһыҙ Иван” затынан түгел. Ул билдәле урынға ереккән. Уның тыуған ере бар. Уның тыуған иле бар. Ул ил, ул ер – батыр үҙе хасил иткән, бар ҡылған Урал иле. “Урал” һүҙе иһә башҡорт өсөн борон-борондан “Тыуған ил”, “Ватан” тигән изге һүҙҙәҙең синонимы мәғәнәһенә эйә булған, әле лә шулай булып ҡала. Бында шулай уҡ халыҡтың йәнле телендә һәм фольклорҙа “ил” һүҙе “халыҡ” төшөнсәһенә лә эйә булыуын да иҫтән сығармау зарур. Тимәк, “Урал батыр эпосы” – милли ерлекле феномен.

## 2. Ике донъяны бер итеп, ер өҫтөндә Урал батырҙың эшен дауам итеүсе батырҙар хаҡындағы эпостар

Мифологик фекерләү һөҙөмтәһе булып күҙ алдына баҫтырылған ҡаһарман иһә мифик донъянан тормош ысынбарлығына, унан тағы мифик донъяға күсеү, тимәк, мифик дәүер менән, ғөмүмән, борон үткән реаль дәүер араһында иркен йөрөү һәләтенә эйә. Был мөмкинлек – мифологик эпостар өсөн традицион күренеш.

### *а) Мифологик эпоста тамғалы ер мотивы һәм уның әһәмиәте*

“Урал батыр” эпосында Йәнбирҙе ҡарттың ғаиләһе йәшәгән урын “дүрт яғын диңгеҙ ураткан булған, ти, бер урын”, тип, уның билдәһеҙлегенә баҫым яһала. Әммә ул үҙе, ҡатыны Йәнбикә, уландары Урал менән Шүлгән, асылда, Урал батыр Һәүбән, Заятүләктәр йәшәгән ареалда хәрәкәт итә. Быға беҙ, уларҙың вариҫтары, эпос менән таныша килә, бигерәк тә уның һуңғы өлөштәренә барып еткән саҡта, төшөнәбеҙ. Урал батыр йөрөгән ерҙәрҙең тамғаһы һәм ориентиры хеҙмәтен үтәүсе, бөгөн дә беҙгә таныш кокрет географик объекттар тош-тош урында телгә алына бара. Тик, тота килеп түгел, ә барлыҡҡа килеү процесында. Шуға ла улар хаҡындағы мәғлүмәтмотлаҡ этиологик мотивлы, Шул сәбәптән улар үҙаллы мифологик легенданы хәтерләтә. Ямантау, Янғантау эпоста Урал батыр дейеүҙәрҙе тураҡлап өйгән өйөмдән барлыҡҡа килгән, ул үҙе үлгәс, кәберенән Урал тауы хасил булған, уландары һәм ҡустыһы (ағаһы Шүлгән менән Һомайҙың һеңлеһе Айһылыуҙан тыуған улы Һаҡмар) ирәмәлләп Алмас ҡылысы менән сапҡан тау Ирәмәл тип атала башлай, дүрт батыр уя сапҡан ерҙән Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар йылғалары урғып сыҡҡан, тип аңлатып, шул

географик объекттарҙың “биографияһының башын”, уйлап-уйлап, уй еткеһеҙ, һанап-һанап, һан еткеһеҙ мифик дәүергә тоташтырып ҡуя эпос. Шул рәүештә уларҙы мең йыллыктар аръяғында ҡалған дәүерҙәрҙән алып башҡорттар Уралды төйәк иткән тигән идеяны раҫларға тырышкандар сәсәндәр һәм иртәкселәр.

***б) Мифик донъя менән ысынбарлыкты, мифик дәүер менән реаль ваҡытты – бер итеп***

Әгәр “Аҡбуҙат”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” һәм “Минәй батыр менән Шүлгән батша” эпостарында мифик донъя һыу аҫты батшалығы рәүешендә һүрәтләнһә лә, уның да ҡайһы тирәлә икәнлеге Шүлгән күле йәки Йылҡысыҡкан күл тип тамғаланғас, “Урал батыр” эпосында ла мифик донъяның ҡайҙа урынлашыуы конкрет географик урын һәм топонимдар ярҙамында аныҡланыуына аптырайһы түгел. Тик һуңғы осраҡта билдәһеҙ, әммә бер үк ареалға, урын атамалары аныҡланғансы, берсә реаль георграфик урын, берсә – мифик донъя вазифаһын атҡарыу бурысы йөкмәтелгән.

Һәүбән – Нәркәс артынан, Минәй батыр хәләл ефете Таңдысаны юллап, Шүлгән (Йылҡысыҡкан) күле төбөндәге Шүлгән батша иленә, Һыуһылыуға ғашиҡ булған Заятүләкт хәҙерге Башҡортостан йөмһүриәтендәге Дәүләкән районында ятҡан Асылыкүл төбөндәге мифик батшалыҡҡа, икенсе төрлө әйткәндә, ысынбарлыҡ иленән мифик донъяға, бик боронғо, әммә реаль дәүерҙән мифик дәүергә баралар. Унан иһә кәләшле булып, бихисап мал эйәртеп, ер өҫтөнә ҡайталар. Шулай геройы, бер итеп, ысынбарлыҡтан – мифик донъяға, реаль дәүерҙән – мифик дәүергә һәм унан кире ысынбарлыҡҡа күсә алыу һәләтенә эйә булған эпостар билдәле бер система барлыҡҡа килтереп, бер рәткә теҙеләләр. Ә был система эсендә һәр эпос ҡаһарманына дөйөм кешелек мәнфәғәтендәге глобаль проблемаларҙан тәғәйен генә бурыстар йөкмәтелә.

“Аҡбуҙат” эпосының геройы Һәүбән өлөшөнә иһә шул хаостан Урал батыр арындырған донъяла хасил булған йәмғиәттә кешене кеше иҙеүенә ҡоролған тәртипте, дөрөҫөрәге, тәртипһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте юҡҡа сығарыу бурысы төшә: ул Мәсем ханды юҡ итеп, мәңге әсирлеккә хөкөм ителгән ил батырҙарын ҡотҡарып, ерҙә социаль ғәҙеллек урынлаштыра. Эпоста кешене кеше иҙә торған социаль тигеҙһеҙлек хөкөм һөргән йәмғиәт, уның хакимының хан булыуын, Һәүбән ҡулына Тарауыл ҡарттан атаһы Сура батырҙан ҡомартҡы булып ҡалған һыҙма юлығыуын күрһәтеү (дөрөҫ, аңлатмала уның боронғо уҡтың бер төрө шулай аталыуы хаҡында әйтелә, әммә эпоста уның йәйәһе телгә алынмай) – барыһы ла төп ваҡиғаның урта быуаттарҙа, саҡ ҡына асыҡлай төшкәндә, утлы ҡорал төрө булған һыҙма мылтыҡ уйлап табылғандан да һуңыраҡ барыуын аңғарта (һуңыраҡ, сөнки ул ҡоралды тәүҙә – Сура батыр, аҙаҡ Тарауыл ҡарт тотонған). Иртәкселәрҙең тарихи дәүерҙе

шулай мифик дәүер менән, ысынбарлыҡты мифик донъя менән бәйләргә тырышыуы – хәҙер беҙгә анахронизм, инанмыш булып тойола. Бәлки, улар был үҙенсәлектең тап шулай ҡабул ителеүенә иҫәп тотҡандарҙыр ҙа әле. Нисек кенә булғанда ла, был үҙенсәлектең төрлө эпоста тотороҡло күҙәтелеүе уның осраҡлы түгеллеге хаҡында уйландыра. Күрәһең, боронғо иртәкселәр өсөн был үҙенсәлек үҙенә күрә художестволы алым иҫәпләнгән. Эпосты ижад итеүселәр, бәлки, шул алым ярҙамында нисек тә Урал батырҙың тарихи дәүерҙә йәшәгән вариҫтарын ул башлаған эште яңы шарттарҙа дауам иттереүсе итеп күрһәтергә тырышҡандарҙыр. Урал батырҙан ҡалған Аҡбуҙат менән алмас ҡылыстың Һәүбән ҡулына, артабан хатта тарихи эпос геройы Иҙеүкәйгә лә күсеүе шул маҡсатка ярашлы символик мәғәнәгә эйә. Шулар ярҙамында тарихи дәүер шарттарында Һәүбән дә, Иҙеүкәй ҙә ерҙә ғәҙеллек урынлаштырыу өсөн көрәшә. Һыу аҫты батшалығынан кәләшле лә, маллы ла булып, ер өҫтө донъяһына сыҡкан Заятүләккә лә тормошта ғәҙеллек урынлаштырырға форсат сыға. Тик ул ошо оло бурысты атҡарырға өлгөрмәҫтән, һәләк була.

“Минәй батыр менән Шүлгән батша” эпосында кешелек донъяһы өсөн мөһим глобаль проблема билдәләгән бурысты үтәү майҙаны тулыһынса һыу аҫты батшалығы тигән мифик донъяға күсерелә. Таңдысаһын урлап алып киткән Шүлгән батшаны ла, уның донъяһын да Минәй батыр юҡ итә. Глобаль кимәлдә ике батырҙың ҡаҙаныштарының әһәмиәте бер үк дәрәжәлә булмаһа ла, Шүлгән батшаны юҡ итеүе Минәй батырҙың Урал батыр ҙа, Һәүбән дә булдыра алмағанды булдыра алыу һәләтенә эйә икәне хаҡында һөйләй.

“Иҙел менән Яйыҡ” эпосы иһә, бер яҡтан, “Урал батыр” эпосы менән, икенсе яҡтан, “Минәй батыр менән Шүлгән батша” һәм “Аҡбуҙат” менән ауаздаш.

“Иҙел менән Яйыҡ”тың “Урал батыр” эпосына ауаздашлығы шунда күренә: уның да ҡаһармандары берсә географик атамалар менән тамғаланған реаль ысынбарлыҡта, берсә мифик донъяла эш итә.

Ҡарамаҡҡа анахронизм, инанмыш булып тойолған алым бына шулай художестволыҡ яғынан аҡлана ла ҡуя.

### *в) Система эсендә бер эпостың хронологик яҡтан боронғорағы-ның проекцияһы булғаны*

Урал батыр, яуыз сихри көстәрҙе ҡырып, бер туған Шүлгән ағаһы менән алышып, өс тапҡыр Туфан һыуы ҡалҡыуын хәтерләткән диңгеҙ баҫҡан урындан, ҡоро ер, йәғни, мифик донъянан реаль донъяның үҙен хасил итеп, Йәншишмә һыуын һирпеп, кибеп барған шул донъяның мәңгелеген тәьмин итә. Ҡарамаҡҡа, атаһының “Үлем осраһа, башын ҡырҡып алырға” ҡушыуы, үҙенең “программа”һында “Үлем тигән яуызды үлтерергә уйлайым”, уның “Башын сабып өҙмәһәм, … Урал булып йөрөмәмен”, “Йәншишмәнән һыу алып, Үлгәндәрҙе тетелтеү

Өсөн тыуған батырмын” тигәнен үтәмәй. Эйе, был һүҙҙәрҙе тура мәғәнәһендә аңлағанда, шулай. Әйткәндәй, Йәншишмәне эҙләп, сәфәр сыҡҡанда Урал, малайлығы менән, үҙе лә шулай уйлай. Әммә юлына осраҡкан меңйәшщәр ҡарттың:

Донъяла мәңге ҡалам тип,
Донъялай ғөмөр һөрәм тип,
………………………………
Йәншишмәнән эсмәгеҙ…
Беҙ Үлем тип һанаған,
Яуыз ул тип ҡараған –
Бағтың туҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Сүпләп, бағты

бушатыусы икәнен төшөндөрә. Әммә уның был һүҙе һис кенә лә – мәңгелек ғүмерҙе инҡар итеүе түгел. Униңса, донъяла мәңгелек ғүмергә тик яҡшылыҡ ҡылыу. Күп ауырлыҡтар аша тапҡан (сәсмәүер версияһы буйынса, һуңғы тамсылары ҡалған) Йәншишмәне тапҡас, Урал, шул ҡарттың аҡыллы һүҙҙәре арҡаһында, уны эсеп, үҙе мәңге йәшәү форсаты алыуҙан баш тартып, уны ҡуш услап: “Тау буйҙары йәшәрһен, Мәңге үлмәҫ төҫ алһын, …Балҡып торған ер булһын!” – тип, тирә-йүнгә һирпә. Шуның арҡаһында, шиңеп барған тәбиғәт яңынан терелә. Үлгәнде терелтеү хаҡында әйткәне бына шулай бойомға аша. Ошондай космик кимәлдәге глобаль мәңге йәшәр яҡшылыҡ ҡылыуы, меңйәшәр ҡарт әйткәнсә, Үлемде үлтереү идеяһына мохтажлыҡ ҡалдырмай. Бына шулай мәңгелек ғүмер һәм үлем хаҡында башта тура мәғәнәһендә фекер йөрөткән Урал батыр уларҙы фәлсәфәи юҫыкта аңлауға ирешә.

Урал батырҙың “Иҙел менән Яйыҡ” эпосы ҡаһармандары сифатында сығыш яһаған Яйыҡ менән Иҙел атлы уландары ул бар ҡылған һәм терелткән ерҙе яңы афәттәрҙән ҡурсалаусы, тимәк, атай кеше башлаған изге эште дауам итеүселәр, булып сығыш яһай. Иҙел менән Яйыктың ошо эшмәкәрлеге әле һүҙ барған эпосты “Урал батыр” эпик поэмаһының хронологик яҡтан яңы дәүергә проекцияһы хәленә ҡуя. Шул уҡ ваҡытта “Иҙел менән Яйыҡ” эпосы “Урал батыр”ҙың туранан-тура дауам ителеше кеүек тә ҡабул ителә.

Ошо яҡтан ҡарағанда, Иҙел менән Яйыҡ” эпосы үҙ нәүбәтендә “Аҡбуҙат” эпосын үҙенең проекцияһы хәленә ҡуйғандай була. Уларҙың икеһендә лә ҡара көстәргә ҡаршы көрәш майҙаны – реаль ер өҫтө. Тик айырма ла ҙур ғына. Әгәр “Иҙел менән Яйыҡ” эпосы ҡаһармандары мифик заттар йөҙөндә кәүҙәләнгән ҡара көстәр менән алышһа, “Аҡбуҙат”та Һәүбән Мәсем хан йөҙөндәгә социаль көстәрҙе пыран-заран килтерә.

Мифолгик эпостарҙың, идея кимәлендә генә түгел, үҙ-ара мотивтар оҡшашлығына һәм шул оҡшашлыктағы айырмалыҡтарға

миҫалдарҙы, ғөмүмән, күп табырға була. “Урал батыр”, "Аҡбуҙат", “Заятүләк менән һыуһылыу” эпостарының геройы кәрәк булһа – ҡыҙ ҡиәфәтенә, кәрәк булһа ҡош ҡиәфәтенә инә алыусы әүермән затты кәләш итә. Урал батырҙың – Һомайына, Һәүбәндең – Нәркәсенә, Заятүләктең Һыуһылыуына ана шундай кимәлдәге әүермәнлек сифаты хас.

Шулай итеп, башҡорт халҡының төп мифологик эпостары, ҡарамаҡҡа, йөкмәтке, хронология, персонаждар исемлеге, уларҙың образдары, хәрәкәт итеү арауығы (простроаство) йәһәтенән “Урал батыр”ҙан ярайһы ғына айырылһалар ҙа, асылда сюжет структураһы тәңгәлендә уларҙың бер үк принципҡа таяныуҙары күҙәтелә. Был уртаҡлыҡтың төбөндә “төп герой ике донъяны ла (мифик һәм реаль донъяны ла) иркен гиҙә” мотивы ята. Төп геройҙың Урал батыр башлаған изге эште яңы шарттарҙа дауам итеүе лә ул эпостарҙы бер-береһенә яҡынайта. Шул уртаҡлыҡ һәм яҡынлыҡ уларҙы бер система итеп ҡарарға форсат бирә лә инде.

**3. Эпик батыр никахы**

Һомай – Ҡояш менән ҡоштар батшаһы иҫәпләнгән күк тәңреһе Самрау ҡыҙы. Уны нәҡ фарсы мифологияһындағыса, күктән төшөүсе бәхет ҡошо, тип белгәндәр[37]. Ә “Күк” һүҙе был осраҡта “икһеҙ-сикһеҙ” тигән төшөнсәне кәүҙәләндерә. Үҙ сиратында был төшөнсә “икһеҙ-сикһеҙ” даръя, диңгеҙ төшөнсәһен алыштырған булыуы ла ихтимал. Ни өсөн тигәндә, ошоға ишара яһаусы мифтар бар. Боронғо Мысыр һәм Месопотамия мифы, күк – икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ, тип таныған. Мысыр мифы буйынса, Ҡояштың бабаһы, йәғни уларҙың иң бөйөк илаһы – Ра, үҙенең алтын ҡайығында, көндөҙ – ана шул диңгеҙ буйлап, төнөн ер аҫтындағы Нилда йөҙә. Көн менән төндөң сиратланышын мысырҙар быуа шулай аңлаған[38]. Шулай булғас, Һәүбән кәләш иткән Нәркәс менән Заятүләктең Һыуһылыуы ғына түгел, Һомай ҙа һыу стихияһы менән бәйле ҡош-ҡыҙ булып сыға.

Урал батырҙың Һомай менән ҡауышыуы, асылда – космос кимәлендәге никах. Һәүбән менән Заятүләк Һыу батшаһы ҡыҙы менән ҡауыша. Әммә миф өсөн, әле әйтелгәненсә, күк ни ҙә диңгеҙ ни. Етмәһә, донъя мифологияһында, никах, ғөмүмән, “ҡапма-ҡаршы донъяларҙың (Ер менән Күктең. – Ә.С.) космос кимәлендә ҡауышыуы”[39] тип аңлатыла. Шуларҙы иҫәпкә алһаҡ, ҡарамаҡҡа, айырмалы булып тойолған акт, асылда, бер төрлө булып сыға.

Шул уҡ ваҡытта Һәүбән менән Заятүләктәрҙең Һыу батшаһы ҡыҙын кәләш итеүендә, Кирәй Мәргән әйткән хаҡ булып, ысынлап та,

---

[37] Дәүләтшина Һәҙиә. Айбикә. - Өфө: БКН, 1960- 190-191-се б.
[38] Евсюков В.В. Мифы о вселенной. – Новосибирск: Наука, 1988 – С. 29-30.
[39] Там же. – С.55.

моногам ғаилә ҡороуға ынтылыш үҙенсәлекле сағылыш тапһа, Урал батыр – күп никахлы ир була: уның бер үҙенә өс кәләш тура килә. Өс ҡыҙ менән никах мөнәсәбәтенә инеүен этнографик яҡтан айырым-айырым күҙҙән кисерһәк, уларҙың һәр береһе үҙенә бер башҡа әһәмиәткә эйә икәненә төшөнөрбөҙ. Ҡатил батша ҡыҙы, һалдаттарҙы смотрға теҙгән кеүек, атаһының батшалығынан йыйҙырылған күмәк ир-атты теҙҙереп, үҙенә иш һайлай. Уның күңеленә бары Урал ғына хуш килә. Әгәр ҙә мәгәр, тикшеренеүселәр уйлағанса, “батша ҡыҙы үҙенә иш һайлай” мотивы никах мәсьәләһнендә ҡатын-ҡыҙ инициативаһы төп ролде уйнаған матриархатҡа хас йоланы сағылдыра торған булһа, ул сағында ҡыҙҙың ҡыҫтауына һәм, уның зарланыуы арҡаһында, Ҡатил батшаның уны һәр береһе дейеүҙәй дүрт баһадиры, тауҙай үгеҙе менән ҡурҡытырға тырышыуына ҡарамаҫтан, батырҙың уға өйләнеүҙән баш тартыуын тыуа башлаған патриархаттың матриархат тәртибенә ҡаршылыҡ күрһәтеүе тип баһаларға тейеш булыр инек. Әммә Урал батырҙың Һомай менән никахының саф матриархат йолаһын хәтерләтә. Дөрөҫ, Ҡатил ҡыҙынан айырмалы рәүештә, Һомай Уралға үҙе тәҡдим яһамай. Әммә берсә Айһылыу атлы һеңлеһен тотҡонлоҡтан ҡотҡарырға, берсә етмеш батман ауырлыҡ ташты күтәртереүе матриархат дәүеренә хас никах алды һынауын хәтерләтә: ул йола бу

Ошо яҡтан ҡарағанда, шул никахына тиклем Ҡатил батша ҡыҙы менән ҡауышыуын тағы бер тапҡыр хәтергә алмай булмай. Эпоста тасуирланғанса, ул ҡыҙ, йәнәһе, башҡа ир-ат “араһынан оҡшарҙай бер егет тә тапмаған”ға, алмаһын Уралға тоттора[40], йәғни үҙенә ирлеккә уны һайлауын белдерә. Әммә, батша ҡыҙының ошо ымын, Уралға ҡаршы дейеүҙәй дүрт батыр, тауҙай үгеҙ ебәреү картинаһын (Ҡатилдың асыулы һүҙҙәрен иҫәпкә алып тормай ғына) һәм, халыҡ һорауы буйынса, никахлашыу мәсьәләһен бер епкә теҙгәндәй, бер-бер арты күҙҙән кисерһәк, һуңғыһы – тәүгеләренең, йәғни егетте төҫкә-башҡа, һынға-буйға, көскә, батырлыҡҡа һынауҙың һөҙөмтәһе икәне, ә Ҡатил батшаның ҡыҙының теләгенә ҡаршы булғаны өсөн, ҡаш төйөп, унан үс алырға тырышыуы әҫәр логикаһы менән иҫәпләшмәй, уны совет осорона яраҡлаштырып, социалогизациялау һөҙөмтәһе икәне яҡшы аңлашылыр.

Әммә шундай бер хикмәт бар. Абдулҡадир Инан яҙыуынса, борон бик күп халыҡта “түл алыу” йолаһы атҡарылған: күренекле һәм күрмәлекле, затлыраҡ ят ир-ат килеп сыҡһа, уны, бер нисә көнгә булһа ла, ырыуҙа (арала) кейәү итеп тотор булғандар. Был сара, ҡан яңыртыу өсөн, атҡарылыр булған[41]. Бары, ялынып-ялбарып, ил ҡарттары димләүе

---

[40] Алма тоттороу – мин һине һайланым, тигән менән бер. “Алма бирҙем – алманың, Ашъяулыҡҡа һалманың”, тип башланған үпкә белдереү йыры ла бар.

[41] Инан Абдулҡадир. Күсмә төрки ҡәбиләләрендә уллыҡҡа алыу йолаһы менән бәйле традициялар// Ватандаш. – 1988. – №6. – 116-123-сө б.

буйынса ғына (йәнәһе лә, батырҙың да бахыр булыр мәле бар, йәнәһе лә, батырҙан – батыр, матурҙан – матур тыуа), Урал тәүҙә, Ҡатил батша ҡыҙы менән, торараҡ Ҡәһҡәһә илендә Алғыр ҡарттың иптәшненең Гөлбостан тигән ҡыҙы менән ҡауыша. Тик икеһе менән дә оҙаҡ тормай.Тәүге никахы хаҡында, мәҫәлән, шулай тип кенә әйтелә:

Барыһы ла димләшкәс,
Урал алмаҡ булған, ти,
Ҡыҙҙы алып, туй яһап,
Бер аҙ ҡалмаҡ булған, ти.

Оҙаҡ та тормай, артабан үҙ юлын дауам итеүе, шул ике кәләшен ҡабат иҫкә лә төшөрмәүе, үҙе теләп кәләш иткән Һомайынан айырмалы рәүештә, үҙе үлгәс уларының батыр ҡәберенә тупраҡ һалырға йә уны күрергә килеп тә урамауы – барыһы ла был ике никахтың, асылда, Абдулҡадир Инан һүҙ алып барған “түл алыу” йолаһынаң эпоста сағылыш табыуына миҫал булыуы тураһында һөйләй. Әммә Урал батырҙың никахтарының боронғо “түл алыу” йолаһы менән уртаҡлығы быға тиклем әйткәндәрҙе инҡар итмәй. Киреһенсә, “түл алыу йолаһы” матриархат никахы йолаһының бер атрибуты булыуын нигеҙләй генә. Тимәк, Урал батыр матриархат никахы йолаһы сиктәрен аша сыҡмай, уның мөмкинлектәрен үҙ алдына ҡуйған “программа”ны ғәмәлгә ашырыуға ҡамасауламаҫлыҡ кимәлдә файҙалана ғына.

“Түл алыу” йолаһын атҡару рәүешендәге никах "Аҡбуҙат" эпосына ла, “Заятүләк менән Һыуһылыу”ға ла, “Иҙел менән Яйыҡҡа” ла, шулай уҡ мифологик эпостар төркөмөндәге хайуандар тураһындағы йәки, икенсе төрлө әйткәндә, экологик эпостар циклын хасил итеүсе “Аҡһаҡкола”, “Ҡара юрға”, “Ҡуңыр буға”ға ла хас түгел. Уның ҡарауы, был өс эпос “Урал батыр” эпосы менән кеше һәм тәбиғәт проблемаһы йәһәтенән ауаздаш. Ошо яҡтан ҡарағанда, үҙ сиратында, "Аҡбуҙат" эпосы уларға яҡын.

### 4. Мифологик эпостарҙа “кеше һәм тәбиғәт” проблемаһының ҡуйылышы һәм художестволы хәл ителеше

“Урал батыр” эпосында кеше һәм тәбиғәт проблемаһы төрлө варианттарҙа, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте юҫығында асыла. Яуыз Әжәлдән ҡотолоу юлын һорашып, бөтә ҡоштарҙы йыйынға саҡырып, улар менән кәңәшмә ҡороуы бәләкәй сағында – болан менеп йөрөүе, үҫә төшкәс, арыҫланға атланып, Йәншишмәне эҙләп оҙон юлға сығыуы – Урал батырҙың тәбиғәт менән һин дә мин килешеп йәшәй белеүсе кеше икәненең образлы сағылышы ул. Һомайғоштоң ҡыҙға әүерелә алыуы хаҡында бер ниндәй хәбәрҙарлығы юҡ сағында уҡ уны һуйылыуҙан ҡоткарыуы иһә, уның ни тиклем тәбиғәт йәнле икәнен асып бирә. Шуға ла Һомайғоштоң үлемһеҙлек сығанағы Йәншишмә хаҡында әйтеүе, Күктә көн иткән Аҡбуҙатты төшөрөп биреүе, шул арҡала,

егеттең яуыз көстәрҙе ҡырыуға өлгәшеүе “тәбиғәткә ҡылған бер тапҡыр изгелегең мең тапҡыр изгелек булып ҡайтыр” тигән идеяны алға һөрә.

Дейеү ише яуыз көстәрҙе Урал батыр тураҡлап, өйөп киткән урында Ямантау, Янғантау кеүек тауҙар, Аҡбуҙаты йөҙөп үткән урындарҙа ҡоро ер ҡалҡып сығыуы –тәбиғәтте хасил ҡылыусы тәңре затлы мифик ҡаһарман кимәленә күтәрә Уралды. Ошо миҫал һәм үҙенә, кинәнеп йотоп, мәңге ғүмер һөрөү форсаты була тороп, унан баш тартып, Йәншишмә һыуын (сәсмәүер рәүешендәге версияһы буйынса, унын һуңғы тамсыларын) тирә-йүнгә һирпеп, донъяның мәңгелегенә ирешеүе – кеше һәм тәбиғәт проблемаһын Урал батырҙың ғаләм кимәлендә ыңғай хәл итергә ирешеүе ул.

“Урал батыр” эпосынан айырмалы рәүештә, хайуандар тураһындағы мифологик эпостар циклында тәбиғәт һәм кеше проблемаһы ғаилә-көнкүреш мөхитенә күсерелгән. “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡуңыр буға” эпостарында һәм шулай уҡ “Аҡбуҙат”та ла, әҙәм балаһы, “Урал батыр”ҙа әйтелгәнесә, байман табып йәшәр өсөн, тәбиғәт менән ул “бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән” булырға тейеш тигән идея үткәрелә. Ә тәбиғәт ул әҫәрҙәрҙә, пейзаж картинаһы тыуҙырыу аша түгел, ә мал-тыуар образында һынландырыла. “Аҡһаҡ ҡола” эпосында ул идея бай улының, үҙ йылҡылары менән мөнәсәбәтен яйға һала алмауы арҡаһында, фажиғаға дусар булыуын ентекләп һүрәтләү аша асыла.

Тәбиғәт менән “бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән”, “һин дә мин” йәшәү идеяһы “Ҡуңыр буға” эпосында мал хаҡында хәстәрлек күреү кәрәклеге юҫығында асылыуын эләктереп алған кеүек, “Ҡара юрға” иртәгендә юрға эйәһе эйәһе егет:

“Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!
Өйөр башы юрғам,
Ялбыр-йолбор ялыңды
Алтынлармын, юрғам,
Тубыр-тубыр тояғыңды
Көмөшләрмен, юрғам! -

тип йырлай. Малы өсөн йән атып, өҙөлөп тороуы ошо һүҙҙәр менән әйтелгән дә бирелгән. Эйәһенең күҙе төшкән бай ҡыҙын Ҡара юрғаның ҡыҙыҡтырырлыҡ булыуы ла шуны ҡеүәтләй. Ни өсөн ҡыҙыҡтырырлыҡ? Ә инде үҙенә атланған шул ҡыҙҙы алып ҡайтып, эйәһен бәхетле итеүе – тәбиғәт мөнәсәбәте тулы гармонияға эйә булмаһа, әҙәм балаһы бәхеткә ирешә алмай тигәнде һүрәтләп аңлатыу менән бер.

“Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”, “Ҡуңыр буға” эпостарында йәнә шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: уларҙың сюжеты бер ни тиклем “Аҡбуҙат”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” һәм “Минәй батыр менән Шүлгән батша” эпостарына һәм “Йылҡысыҡҡанкүл”, “Асылыкүл”,

“Мауыҙҙыкүл” кеүек легендаларға хас “егет һыу аҫты батшалығынан бихисап мал ала” мотивы менән ауазлаша. Был ауаздашлыҡ моногам ғаилә тыуыуы һәм уның өсөн мал-монаятҡа эйә булыуҙың әһәмиәте кимәлендә күҙәтелә.

“Аҡһаҡ ҡола” эпосына, “Заятүләк менән Һыуһылыу” иртәгендәге һымаҡ уҡ, финалда “антын боҙоуы ҡаһармандың үлеменә сәбәп” мотивы килеп инеүе әҫәрҙең нәсихәти (дидактик) пафосын күтәреүгә хеҙмәт итә. Әммә финалда нәсихәти башланғыс көсәйтелеүе уны мал образында кәүҙәләндерелгән тәбиғәткә хөрмәт менән ҡарау ғына кешене бәхетле итә тигән төп идеяға баҫым яһау сараһы рәүешендә ҡабул итеүгә булыша. Бынығы - бер булһа, икенсенән, мәсьәләнең саф ғәмәли яғы ла бар: ғаилә ҡороу өсөн, теләк һәм мөхәббәттән тыш, матди нигеҙ булыуы ла шарт.

Йомғаҡлап, кеше һәм тәбиғәт проблемаһы – асылда, мифологик эпостарҙы берләштереүсе төп проблема ул, тип әйтергә була.

### 5. Башҡорт халҡының мифологик эпостары һәм донъя мифологияһы

Башҡорт халҡының мифологик эпостарында идея, мотив һәм образдар кимәлендә донъя мифологияһына хас оҡшашлыҡтар ярайһы ғына күҙәтелә.

“Урал батыр” яманға юл ҡуймаҫҡа, яҡшылыҡҡа ғына саҡырған кеүек, һинд-иран ҡәүеменең уртаҡ хазинаһы “Авеста” ла шуға өндәй һәм һүҙен тотмаҫ бер намыҫһыҙҙы йөҙ дошмандан яман зат, тип атай[42].

Башҡорттоң мифологик эпостарына хас мотивтарҙы донъя мифологияһы күҙлегенән күҙәткәндә, иң әүәл “иң яҡшы йылҡы малы һыуҙан сыға” мотивы иғтибарҙы тарта. Әйтелгәнсә, ул “Заятүләк менән Һыуһылыу, "Аҡбуҙат", “Минәй батыр менән Шүлгән батша” эпостарында ҡабатлана. “Урал батыр” эпосында, ҡарамаҡҡа, был мотив күҙгә салынмай: Урал батыр Аҡбуҙат тигән атты, толпарҙың иң затлыһын, ҡулына төшөрә. Тик был эпоста ул һыуҙан сыҡмай, күктән ергә төшә. Әммә бығаса билдәләнелгәнсә, мифология өсөн күк ни ҙә – диңгеҙ (һыу) – ни. Һиндтарҙың – ашвиндар, гректарҙың – диаскуралар, Балтик буйы халыҡтарының байтаҡ мифтары шулай уҡ күк аттары хаҡында һөйләй[43]. Ә Мысыр[44], сүмәр, вавилон мифтары буйынса, күк – ни ҙә, диңгеҙ, океан – ни[45]. Шуға күрә лә “Урал батыр”ҙағы “Аҡбуҙаттың күктән ергә төшкәне” мотивы менән “затлы

---

[42] Авеста/ Пер. и коммент. И.М.Стеблин-Каменского. Душанбе, 1990; Бойс Мэри. Зороастрийцы: Верования и обычаи. 2-ое изд., испр./ Отв. ред. Э.А.Грантовский. М.: Наука, 1988. – С. 54.
[43] Мифы народов мира. Энциклопедия. Т.2/Гл. ред.С.А.Токарев. – М.: Советская энциклопедия, 1988. – С. 144-145, 383-384, 153-158.
[44] Там же. – С. 658-659.
[45] Там же. – С. 207.

йылҡы малы һыуҙан сыға” мотивы, мәғәнәүи һәм функциональ яҡтан ғына түгел, булмышы менән дә бер үк.

“Мәңгелек ғүмер серен эҙләү” мотивы, ҡарап үтелгәненсә – “Урал батыр” эпосында үҙәк мотив. Был мотив сүмәр-аккадтарҙың – Гильгамеш, төркиҙәрҙең – Ҡорҡот ата, фарсының – Искәндәр (Зөлҡәрнәй, Александр Македонский) хаҡындағы мифтарында ла үҙәк урынды биләй. Тик ул мифтарҙың геройҙары маҡсаттарының ҡуйылыу киңлеге һәм мәғәнәһе яғынан да, ошо мотивтарҙың ерлеге булған проблеманың хәл ителеше йәһәтенән дә “Урал батыр” эпосы уларҙан ҡырҡа айырылып тора: ул мифтарҙың ҡаһармандары үҙ шәхестәренең генә мәңге йәшәүе хаҡында ҡайғырталар, әммә уны таба алмайынса, вафат булалар. Урал батыр иһә, әйтелгәненсә, ул сараны таба, ләкин уны үҙенең шәхси маҡсатында файҙаланыуҙан баш тарта һәм төп проблеманы космик планда хәл итеүгә өлгәшә.

Беҙ үҙебеҙ башҡа заттарға үлем, тип иҫәпләһә лә, Йәнбирҙенең, әҙәм түгел, әжәл тапмаҫ урын, тип иҫәпләп, бер утрауға урынлашыуы – Ҡорҡот-ата, Гильгамеш, Искәндәр батшаның үлемдән ҡасырға маташыуы менән бер.

Дини мифологияға нигеҙләнгән “Әҙәм вә Иблис” ҡиссаһының сюжеты “Ҡөрьән Кәрим”дән мәғлүм булып, борон-борондан ҡиссалар йыйынтыҡтарына индерелә килгән. Шул ике сығанаҡ уның телдән таралған варианттарынгың хасил булыуына сәбәпсе булған. Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исемгә рәсми рәүештә лайыҡ булырынан бик күп йылдар әүәл (1910 йылда) Мәжит Ғафури ошо ҡиссаны, шиғыр юлдарына һалып, баҫтырып сығара. Мәңгелек ғүмер проблемаһы унда ла урын алған. Әммә ул проблеманы ялған мәғлүмәт тыуҙыра. Шуға күрә уның хәл ителеше “Урал батыр” эпосындағынан ҡырҡа айырыла.

“Әҙәм вә Иблис” тигән шиғри ҡиссала ла, “Ҡөрьән Кәрим”дәге кеүек, башта һүҙ Хоҙай тәғәлә тарафынан Әҙәмдең яратылыуы (барлыҡҡа килтерелеүе) хаҡында бара. Хаҡ тәғәләнең талабы буйынса, барлыҡ фәрештәләр Әҙәмгә сәждә ҡылған бер саҡта, Иблис кенә илаһи әмерҙе үтәүҙән баш тарта. Күрәһең, ул ошо өр-яңы заттың үҙенән өҫтөн булыу ихтималын алдан шәйләй. Асылда, Иблис менән Әҙәм араһында конфликт шунан башлана ла. Һауа Иблис ҡотҡоһона бирелеүе арҡаһында, әҙәм заты “Урал батыр” эпосында Урал менән Шүлгәнгә тәүҙә осраған ҡарт тасуирлаған ғәҙеллек, тиңлек, дуҫлыҡ, татыулыҡ, муллыҡ илен хәтерләткән ожмахта йәшәү бәхетенән яҙа.

Башҡорт халҡының мифологик эпостарының ҡайһыныһын алып ҡарама, унда донъя мифологияһы, шул иҫәптән рәсми диндәр менән бәйле мифологияға оҡшаш йә улар менән уртаҡ билдәләрҙе бихисап табырға була.

Бындай оҡшашлыҡ, ауаздашлыҡ, уртаҡлыҡтар, бер яҡтан, кешелек йәмәғәте үҙенең үҫешендә бер үк юлды үтеүе арҡаһында, аң үҫеше лә бер үк төрлө юлдар үтеүе менән аңлатыла; икенсе яҡтан, башҡорт эпосының кендектәре менән донъя мифологияһына тоташҡанлығы, әммә уны үҙенсә үҙләштереү ихтималы тураһында ла һөйләй.

# V БҮЛЕК
# ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ЭПОСТАРЫ

Был төркөмгә ҡараған эпостар шул яғы менән айырылып тора: йәмғиәт үҫешендәге үҙгәрештәр, шул үҫеш тыуҙырған проблемалар уларҙа башлыса ғаилә-көнкүреш юҫығында яҡтыртыла. Икенсе яҡтан, ғаилә-көнкүреш кимәлендә күтәрелгән проблемалар иһә тотош йәмғиәткә мөнәсәбәтле була.

## 1.Тормош-көнкүреш эпостарында мөхәббәт һәм никах проблемаһы

### *а) Мөхәббәт проблемаһының мифологик эпостарға ла ят булмағаны*

Ғаилә-көнкүреш мәсьәләләре, ҡарап үтелгәненсә, мифологик эпостарҙа ла ярайһы ғына урын ала. “Урал батыр”, “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Аҡбуҙат” эпостарын алайыҡмы, башҡаһынмы улар ике планда, төп ҡаһармандың никахы һәм кәсебе планында, сағылыш таба. Был төркөмгә ингән бөтә әҫәрҙәрҙә лә никах мәсьәләһе күтәрелә. “Аҡһаҡ ҡола”ның ҡаһарманы булған бай улы ғаилә ҡорорға өлгөрмәй ҡала. Заятүләк иһә өлгөрә. Әммә был бәхетте уға ҡыҫҡа ғына ваҡытта татырға насип була. Минәй батырға ла шундай уҡ хәүеф янай. Бары рухи һәм физик яҡтан дарманлы, үтә әүҙем, үтә тәүәккәл булыуы өҫтөнә мөхәббәте хаҡына барыһына ла әҙер тороуы әле генә тыуған ғаиләһен яҡлап һәм һаҡлап алып ҡалырға форсат бирә уға. Урал батырҙың ата-әсәһенең төп кәсебе – һунар, Заятүләк менән уның ағайҙары өсөн дә шулай. Урал батырҙың дейеү, аждаһалар менән алышы ла һунарсының януар аулауын хәтерләтә.

Урал батыр хаҡында әйтелгәндәр Минәй батырға ла ҡағыла. “Ҡуңырбуға”, “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола” эпостарының ҡаһармандарына иһә малсылыҡ кәсебе үҙ.

### *б) Башҡалар мөхәббәте хаҡына үҙ мөхәббәттәрен ҡорбан итеүселәр*

Бер аяғы менән мифологик эпостар төркөмөнә ныҡлы баҫып, икенсеһен реалистик героик йә тормош-көнкүреш эпостары яғына терәп, ике арала торған эпостар ҙа юҡ түгел. “Алып батыр”, “Алпамыша менән Барсынһылыу” эпостары ана шундайҙарҙан иҫәпләнә.

Мифологик эпостар тормош-көнкүреш билдәләренән азат булмаған кеүек, тормош-көнкүреш эпостары төркөмөнә инеүсе әҫәрҙәрҙә лә мифологик башланғыстар күҙәтелә. “Алпамыша менән Барсынһылыу” эпосы – шуның асыҡ миҫалы. БыҒаса һүҙ булған ҡайһы бер мифологик башланғыстары өҫтөнә зинданда ятҡан “Алпамышаның арҡаһы ергә тамырланып үҫеп киткән”; Бүләр хандың ҡыҙҙары “аҡ булатты (булат ҡылысты. – Ә.С.) һоноп баралар – алда юл асыла бара”, тип уларҙың ер аҫтынан Алпамыша ятҡан зинданға юл ярыуы; доға яҙылған ҡағыҙ менән әллә ҡасан үлгән аттың (Алпамышаның Аҡҡолай тигән атының) һөлдәһенә өс тапҡыр ҡағылыуҙан, уға йән инеүе кеүек

тылсым элементтары булһа ла (Нәғимә Байғаҙаҡова варианты), күпселек варианттарында ваҡиғалар, нигеҙҙә, реалистик планда барғанға, иң мөһиме, төп конфликт реалистик ерлектә хәл ителгәнгә, дөйөм алғанда, был әҫәр тормош-көнкүреш эпостары төркөмөнә ҡарай. Ә төп конфликт Барсынһылыуға кем хаҡлы тигән проблеманан килә. Уны яу менән килгән икенсе хан да ала алмай, Алпамыша өйҙә юҡтан файҙаланып, яусылар ебәреп, кәләш итергә теләүселәр ҙә быны булдыра алмай.

Сюжет конфликты йәнә шуның менән дә көсәйтелә: Алпамышаның кәләшенә генә түгел, үҙенә ҡыҙығыусылар ҙа табыла: уны әсир итеп зинданға тыҡҡан Бүләр хандың ике ҡыҙы ла уға үлеп ғашиҡ була.

Ике ҡыҙ ҙа бер үк егетте тиң ярата. Һәр хәлдә, Алпамышаны "бүлешеп" тормауҙары, киреһенсә, икеһенең дә уға берҙәм һәм ылдым ғына булышлыҡ итеүҙәре, янына ла икәүләшеп кенә килеүҙәре шулай тип һығымта яһарға ла нигеҙ бирә: хан ҡыҙҙарының ошо ҡыланыштарында бер ни тиклем (ҡатын-ҡыҙ яғынан) полигамияға нигеҙләнгән матриархатҡа хас никахҡа ынтылыштың сағылышы төҫмөрләнә биреп ҡалғандай була. Хатта шулай булған хәлдә лә, ике ҡыҙҙың Алпамышаға бар булмыштары менән ғашиҡ булыуына ҡарамаҫтан, үҙҙәре яратҡан алып затлы егеттең мөхәббәтле никахына тоғролоғо хаҡына үҙҙәренең ана шул саф мөхәббәтен ҡорбан итеүҙәренә шик тыумай.

***в) Балаһыҙ ғаилә - емешһеҙ ағас***

Мөхәббәткә, ғаиләгә эйә булыу - оло бәхет. Әгәр ки мөхәббәт нигеҙендә төҙөлөп тә, бала булмаһа, ундай ғаиләне халыҡ емешһеҙ ағасҡа тиңәй.

"Ҡоблан батыр" эпосын бүтән эпостарға оҡшаш иткән мотивтар ҙа бар. Туйға барғанда, "кемдең бала-сағаһы юҡ, туйҙа ултырырға хаҡы юҡ" тигән белдереүгә әбей менән бабай ғәрләнеп, ҡайтып китә. "Ҡорҡот-Ата" тигән ұғыз төркиҙәре дастанындағы Дирсе хан менән уның ҡатынының хәлен хәтерләтә. Улар ҙа бала һөйөү бәхетенән мәхрүм. Ҡыҙҙары булһа – ҡыҙыл тирмәлә, улдары булһа – аҡ тирмәлә ултыртырҙар ине лә бит, әммә туйға саҡырған Баяндур хан уларға ҡара тирмә, ҡара түшәк, ҡара һарыҡ ите генә тәҡдим итә. Боронғо уғыҙ йолаһы буйынса, ҡара тирмә, ҡара түшәк, ҡара һарыҡ ите затһыҙ, нәҫелһеҙ ҡунаҡты кәмһетеү, киләсәкһеҙ, тип хурлау тамғаһы булған. Шуға улар ҙа ғәрләнеп ҡайтып китә. Алланан ялбара торғас ҡына, уланлы булалар[46].

---

[46] Книга отца нашего Коркута/Редактор, авт. предисловия Х.Г. Короглы. – Бакы: Язычы, 1989. – С. 24.

Бары бала-сағаһы булмаған өсөн, ҡырғыҙҙың “Манас” эпосы ҡаһарманы Манастың ата-әсәһен дә, Яҡуп менән Чыйырдыны ла ырыуҙаштары, кәмһетә, битәрләй.

Ҡобланға ауырға ҡалғанында, уға әсә булыр ҡатындың арыҫлан ите ашарға теләүе һәм шуға ирешеүе иһә “Манас” эпосы ҡаһарманының әсәһе ауырлы сағында нисек юлбарыҫ йөрәген көҫәүен һәм, шуны ашағанға, юлбарыҫтай батыр ул табыуын хәтерләтә[47]. “Мөғжизәле тыумыш” мотивы, ғәҙәттә батырҙар тураһындағы әкәиәттәргә хас. Ә бында ул алым эпоста ҡабатлана. Шуның менән үҫеп еткәс, ул ир баланың ысын батырға өлгәщеүе баһадир буласағаы ишара яһала.

Ә инде Ҡоблан батыр менән Аҡсахандың, бер-береһен хурлап, әйтешеүе “Ҡарас менән Аҡша” тигән эпоста башҡорттоң данлыҡлы батыры булып танылған Ҡарас атлы сәсән менән ҡаҙаҡтың шул уҡ батырының әйтешенә оҡшаш.

Ҡоблан батыр иле, ғаиләһе өсөн дауға ла, яуға ла әҙер торған батыр булып ҡына түгел, ысынлап та ярата белеүсе, үҙенә ғашиҡ итерлек егет аҫылы рәүешендә хәтерҙә ҡала.

“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Таһир менән Зөһрә”, “Буҙйегет”, “Йософ менән Зөләйха”, “Сәйфелмөлөк” ише эпостарҙың башҡорт версияларының ҡаһармандары ла тик үҙҙәренә ҡарата алғандарҙы ғына ярата, шуның өсөн генә йән ата. “Ҡарата алыу” мотивы тәүге икәүһендә балалар тыумаҫ элек үк, әгәр береһенең ҡыҙ, икенсеһенең ир бала булһа, уларҙы ҡауыштырырға аталарының вәғәҙәләшеүе, ә инде, тыуғас та, бишек туйы үткәреүҙәре менән нигеҙләнә. Һуңғылары иһә йә “ҡаһармандың төшөнә үҙе ҡауышасаҡ ҡыҙ керә” мотивы йә художестволы тәғәйенләнеше менән шундай уҡ вазифаны атҡарыусы “ҡаһармандың ҡулына уны ғашиҡ итерлек һылыу ҡыҙҙың рәсеме юлыға” мотивы менән әшкәртелә. Әммә был ҡаһарман, үҙен күрмәҫ элек үк, ситтән тороп та, уны үҙенә ғашиҡ иткән ҡыҙ менән мотлаҡ ҡауышасаҡ тигән гарантия бирмәй. Ысынлап та, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуға ла, Таһир менән Зөһрәгә лә, Буҙйегет менән Сәхипьямалға ла яҙмыш ҡауышырға бирмәй. Тәүге икәүһендә яҙмыш, ҡыҙҙың атаһы сүрәтенә кереп, йәштәрҙе бер-береһенән айыра, ауыр һынауҙар үтә-үтә осраштыҡ, хәҙер-хәҙер ҡауышыр минуттар етте тигәндә, уларҙың фани донъяла түгел, баҡый донъяла ғына бергә булыуына сәбәп итә.

Буҙйегеткә яҙмыш тәүҙә ыңғай ғына юлдаш булғандай итә. Тик ваҡытлыса. Ете диңгеҙ, ете тау аша, беренән-бере ауырыраҡ һынауҙар үтергә мәжбүр итһә лә, донъя гиҙеп эҙләгәне менән Буҙйегеткә осрашыу шатлығын кисерергә форсат бирә яҙмыш. Әммә шул бәхетте

[47] Манас. Книга первая/Составители и авторы предисловий Б.М. Юнус-алиев, М.О. Ауэзов. – Бишкек, 1999. – С. 106-107.

тартып алып, уларҙы ла Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, Таһир менән Зөһрә фажиғәһенә юлыктыра.

Тик Йософҡа һәм Сәйфелмөлөккә генә, өндә осратмаç элек үк, тәүгеһе – бары төшөндә, икенсеһе тылсымлы портреты буйынса ғына ғашиҡ булған ҡыҙ менән ҡауышыу насип итә Хаҡ Тәғәлә. Шул бхеткә өлгәшкәнгә тикле, ике егеткә лә иҫәпһеҙ ауыр-ауыр һынауҙар кисерергә тура килә. Ошо яҡтан ҡарағанда, һөйгәндәре менән никахлашыуҙары түҙемлектәре, сабырлыҡтары, мөхәббәт тигән илаһи хис менән мөһөрләнгән маҡсаттарына тоғролоҡтары өсөн уларға тәғәйенләнгән Тәңре бүләге мәғәнәһенә эйә.

## 2. "Йософ менән Зөләйха" сюжетының фольклор менән мөнәсәбәте

"Йософ менән Зөләйха" ("Иосиф Прекрасный") сюжеты əҙ ҙә түгел, күп тә түгел, бынан дүрт мең йылдар әүәл Ике йылға араһын ил итеп торған ассирийҙарға, вавилондарға уҡ мәғлүм булған. Артабан б.э.т. VIII–V быуаттарҙа – йәһүдтәрҙең "Боронғо васыятына" ("Ветхий завет"ына), торараҡ "Тәүрат"ында сағылыш таба. Мосолмандарҙың "Ҡөрьән-Кәрим"енә иһә беҙҙең эраның VII быуатында ғына ун икенсе сүрә сифатында теркәлгән. Х быуатта был сюжет Фирҙәүсине, торараҡ Ҡол Ғәлиҙе, "Ҡиссас әл-әнбиә"не төҙөүселәрҙе, фарсы телендә ижад итеүсе Ансариҙы (XI б.), Йәмиҙе (XV б.), грузин Шота Руставелиҙы (XII–XIII б.), үзбәк шағирҙары Хәмзә (XIV б.) менән Дүрбәкте (XV б.), әзри Физулиҙы (XVI б.), төрөкмән Ғәндәлипте (XVIII б.), аламан Томас Манды (XX б.), латыш Ян Райнисты (XX б.), төрөк Назым Хикмәтте (XX б.) һәм тағы байтаҡтарҙы үҙ интерпретацияларында яңынан-яңы вариант һәм версиялар тыуҙырыуға рухландырған.

### *а) Йософ дастанына фольклор йоғонтоһо хаҡында тикшеренеүселәрҙең әйткәне*

Йософ менән Зөләйха хаҡында һүҙ сыҡҡанда, тикшеренеүселәр, ғәҙәттә, уларҙы мөхәббәт юлында үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеүсе Изольда менән Тристан (немец әҙәбиәтенән), Ләйлә менән Мәжнүнде, Хөсрәү менән Ширин йәки Фәрхәд менән Ширин (Көнсығыш әҙәбиәтенән), Ромео һәм Жульетта (инглиз әҙәбиәтенән) ише классик ғашиҡтар образына йәнәш ҡуялар. Фирҙәүси, Дүрбәк әҫәрҙәрендәге кеүек бында ла "мөхәббәт һыҙығы сюжеттың ярҙамсы элементы ғына" булыуын, сюжет нигеҙендә "ата – ул мөхәббәте" ятыуын шуға тоғролоҡ идеяһының төп лейтмотив икәнен әйтеүе менән татар ғалимы Н.Ш. Хисамов хаҡлы[48].

[48] Абилов Ш.Ш., Хисамов Н.Ш. Кыйссаи Йосыф// Татар әдәбияты тарихы: Алты томда. – Казан: Татарстан китап нәшр. (ТКН), 1984. – 1-се том: Урта гасырлар дәвере. – 132-133-сө б.; Фәсиев Ф.С. Кол Галинең "Кыссаи Йосыф" поэмасы//Кол Гали. – Казан: ТКН, 1983. – 141-143-сө б.

“Йософ ҡиссаһы” һәм фольклор проблемаһының милли юҫыҡта ҡаралышы тәңгәлендә Кирәй Мәргәндең күҙәтеүҙәре айырылыңҡырап тора. Дөрөҫ, ул башта “Йософ менән Зөләйха” сюжетының “халыҡ ижады ерлегендә күренеп ҡалған ҡайһы бер варианттарын ҡарарға” өмөтләндерһә лә, бер генә, әммә конкрет текст, 1960 йылда Ырымбур өлкәһендә Вахитов Зиннәтулланан үҙе яҙып алған вариант буйынса фекер йөрөтөү менән сикләнә. Мәҫәлән, “Батшаның төшөн юрау” мотивы хаҡында һүҙ алып барғанда, Кирәй Мәргән, тәрәнгә төшөп тормаҫтан, төштөң дөрөҫ юралыуы әҫәрҙә “традицион алымдар” ярҙамында бирелеүен генә билдәләгән[49].

Әҫәрҙең төп геройы Йософ яҙмышында, тимәк, сюжеттың үҫешендә хәл иткес роль уйнаған “төш күреү” мотивына туҡталайыҡ. Яҡуп-Нәбиҙең (бәйғәмбәрҙең) йәш ҡатынынан тыуған кинйә улы Йософ төш күрә: йәнәһе, ун бер йондоҙ уның иҙеүенән ҡуйынына инә. Атаһы юрауынса, был төш киләсәктә кинйәнең – бәйғәмбәр-батша, аталаш (ата – бер, инә – башҡа) ун бер ағаһы уға хеҙмәтсе буласағын әшкәртә. Яҡуп был хаҡта бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡуша. Ҡуша ғына түгел, ҡатғи тыя. Ләкин сер ун бер ағаһына ла мәғлүм була, һәм улар был хаҡта кеше аша ишеткәндәрен Йософтоң дөрөҫләүенә ирешә.

Ҡарамаҡҡа, Йософтоң башына төшөр бөтә бәлә-ҡазаға уның бына шулай туғандары хәтерен һаҡлауы сәбәпсе булып сыға. Әҫәр менән тәүләп танышыусыла, ысынлап та, тап ошо фекер нығына. Әммә көтмәгәндә, мәсьәләнең икенсе яғы яҡтыртылыш ала. Бәй, бәйғәмбәр булыуына ҡарамаҫтан, йәшерәк сағында Яҡуп хилаф эш ҡылған имеш: бер ҡол ҡатынды, имсәк балаһынан айырып, сабый көйө әсәнән етем ҡалған Йософто имеҙергә мәжбүр иткән икән. Халыҡта рәнйеш төшмәй ҡалмай тигән инаныс бар. Бында ла, асылда ошо инаныс ғәмәлләшә. Һөҙөмтәлә, Йософ кисергән бар ыҙалар ҙа, Яҡуптың һуҡырайып ҡалыуы ла – бөтәһе лә шул ҡатындың рәнйеүе төшөүенән генә, башҡа бер ниҙән түгел, тигән фекер тыуа. Тимәк, был дастанда “төштә ғашиҡ булған” мотивы нисектер артҡы планғараҡ күсеп, рәнйеш төшөү мотивы сюжет хасил итеү хоҡуғына эйә була.

Классик әкиәттәрҙә, ифрат та батырҙар тураһындағыларында һәм улар менән уртаҡ ситфаттарға эйә булған эпостарҙа тыйыу мотивы булдымы – артабан тыйылғанды боҙоу (тыйыуһыҙланыу, тыйыуҙы инҡар итеү) мотивы килә. Ана шул сюжеттың кинәт етеҙ старт алыуына этәреш биреүсе механизм, детонатор хеҙмәтен үтәй.

Һәр тыйыу – үҙенә күрә аманат.

Тимәк, ата һүҙен тотмауы, уның тыйыуын инҡар итеүе менән Йософ аманатҡа хыянат иткән. Ә халыҡтың яҙылмаған әхлаҡ ҡануны ла, инанысы ла, аманатҡа хыянат – яҙыҡ эш, оло гонаһ, тип белә. Тимәк,

[49] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – 281-282-се б.

бындай гонаһ эйәһе ниндәйҙер язаға лайыҡ, әхирәтте көтмәҫтән, донъялыҡта уҡ шул язаға дусар ителергә тейеш. Шулай итеп, Йософтоң бәләгә тарыуы икеләтә нигеҙләнә әҫәрҙә. Сюжет хасил булыуға, тимәк, ул да үҙ өлөшөн индерә.

Ә ни өсөн өлкән ағайҙар күмәкләшеп кинйәне эҙәрләй һуң әле?

*б) Ун бер ағайҙың Йософто эҙәрләүенең сәбәптәре*

Йософтоң төшө һәм уның юралышы хаҡында кеше аша ишеткәс һәм шуны кинйәнең үҙенән раҫлаттырғас, ун бер ағай ана нимә ти:

Атабыҙ уны беҙҙән дә артыҡ һөйә,
Уның йөҙөн күрмәһә лә, янып көйә,
Мираҫ инселәһә[50], уға беҙҙән артыҡ бирә, –
Уны ысынлап нығараҡ һөйә имде.

Ҡиссаның телдән яҙып алынған күп кенә варианттарында Йософ, “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосындағы Заятүләк һымаҡ уҡ, Яҡуп бәйғәмбәрҙең икенсе ҡатынынан тыуған бала тигәнгә баҫым яһала. Заятүләктең уңышына көнләшеү – уның менән ағалары араһындағы конфликттың тышҡы яғы ғына. Эскеһе – Заятүләктең, кинйә ул булыуында, икенсе төрлө әйткәндә, майорат йолаһы буйынса, Йософ кеүек үк, киләсәктә атай милкенә, атай нигеҙенә эйә булыу хоҡуғы барлығында. Ә инде уның икенсе әсәнән тыуыуы – сүп өҫтөнә сүмәлә генә.

“Ҡиссаи Йософ” һәм уның йәнле телдә таралған версияһының мәғлүм варианттарының барыһында ла конфликт бермә-бер Йософ менән икенсе әсәнән тыуған ағайҙары араһында тыуа: тимәк, был мотив дастанда бик тә тотороҡло.

Ихтимал, һуңғы мотив, “бер туған ағалары Заятүләкте эҙәрләй” мотивы, уға нигеҙ булған “әсә – башҡа, ата – бер туғандар” мотивы “Заятүләк менән Һыуһылыу” иртәгенә Йософ сюжеты йоғонтоһонда килеп ингәндер. Киреһенсә булыуы ла бик ихтимал.

***в) Яҙма дастан һәм фольклорҙың үҙ-ара мөнәсәбәте***

“Йософ менән Зөләйха” сюжетының Ҡол Ғәли ижад иткән версияһында, йәнле репертуарҙан теркәлгән версияларында һәм шул версияларҙың варианттарында, ғөмүмән, фольклор, айырата әйткәндә, башҡорт халыҡ ижады менән оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар барлығы – бәхәсһеҙ. Улай ғына ла түгел, хатта был сюжеттың үҙенә бәйле инаныстар, фольклор хасил булған.

Көнсығыш халыҡтары фольклорында һәм яҙма сығанаҡтарҙа “Үгәй әсә үгәй улына ғашиҡ була” мотивы йыш осрай. Халыҡ-ара әкиәт сюжет тибы күрһәткестәрендә уның АТ 875 Д* (“Үгәй әсә үгәй улына

[50] Мираҫ инселәү – саф башҡортса йола атҡарылышы. Тояҡлы һәм тояҡһыҙ малға инәү һалып (мәҫәлән, ваҡ малдың ҡолағын киртеп, йылҡы малының янбашына, солоҡҡа, ук-һаҙаҡҡа һ.б. ҡорал-ҡорамалдарға тамға һалып), киләсәктә хужаһы була торған кешенең ҡулына тотторалар. Алыусы яланғас ҡул менән тотмай, йә бейәләйе, йә салғыйы менән тота.

ғәйеп ташлай")* тип тамғаланған был сюжет килеп сығышы менән гректың Ипполит хаҡындағы мифы һәм "Тәүрәт"тағы сибәр Иосиф (Иосиф Прекрасный) хаҡындағы легендаға барып тоташа. Ул шулай уҡ тарихи әһәмиәткә эйә булған сығанаҡтарға теркәлгән риүәйәттәрҙә лә күҙәтелә. Риүәйәт буйынса "Кабуснамә" авторы Кейкәүестең йәш ҡатыны сибәр Сүдәбе үҙенең үгәй улы булған Сийәүешкә үлеп ғашиҡ була (XI б.). Үгәй егет уның менән интим бәйләнешкә инеүҙән баш тартҡас, яһил ҡатын, үҙенең өҫтөндәге күлдәкте үҙе теткеләп, ғауға күтәрә: йәнәһе лә, Сийәүеш уға йәбешергә иткән. Мәшһүр Әбүлғәзенең "Төрөкмән шәһәрендә" әйтелеүенсә, Боғрахандың йәш ҡатыны ла үҙенең үгәй улын шулайыраҡ аҙҙырырға маташып ҡарай. Маҡсатына ирешә алмағас, исеме сығыуҙан шөрләп, ул да үгәй улына яла яға: йәнәһе егет үгәй әсәһенә йәбешә яҙған.

Көнсығышта ошо мотивҡа нигеҙләнгән әкиәттәр ҙә күп. Уларҙың береһе, "Синбаднамә" тигәне, "Мең дә бер кисә" (V–VI быуаттар) аша киң таралған (566–578-се төн). Уның тәржемәләре, эшкәртмәләре һанһыҙ. Шулар араһынан Зия ад-Дин Нахшабиҙың "Тутыйнамә"һендәге "Батша ҡатыны, ете вәзир һәм ҡыҙ арҡаһында егет өҫтөнә ябырылған хәсрәт тураһындағы әкиәт" (8-се төн) үҙенсәлекле. XIX быуатта Ҡәйүм Насыри (1825–1905) тарафынан төрөк теленән тәржемә ителеп, башҡорттар менән татарҙар араһында китап рәүешендә лә, телдән дә "Ҡырҡ вәзир" ҡиссаһы таралған.

Башҡорттар араһында "Үгәй әсәнең үгәй улына ғашиҡ булғаны" мотивына нигеҙләнгән "Һалдат менән батша ҡатыны" (СУС 983*: "Ҡош һарайы"), "Үгәй әсә менән үгәй ул, батша менән ҡырҡ вәзир" (АТ 875 Д*: "Ғәйепһеҙгә рәнйетелгән батша улы менән уны яҡлаусы аҡыл эйәләре" ише новеллистик әкиәттәр таралыуына ошондай сығанаҡтар менән танышлыҡ ярҙам итеүе лә ихтимал. Әкиәттәрҙә батша ҡатынының мөхәббәтен, дөрөҫөрәге, аҙғынлыҡ нәфсеһен ҡәнәғәтләндерергә ынтылыуын, һалдат та, үгәй улы ла ҡабул итмәй.

"Үгәй әсә үгәй улына ғашиҡ була" мотивы фольклорҙа төрлөсә түкмәсһә лә, төп моменттары тотороҡло ҡала. "Йософ менән Зөләйха" сюжетының ҡайһы версияһын һәм шул версияларҙың ҡайһы вариантын алма, унда ла ошо мотив үҙәк урынды алып тора.

Әкиәт эстетикаһының эске законсылығы шулай. Әгәр ҙә мәгәр егет – ҡыҙҙы, ҡыҙ – егетте берәй ҡыйынлыҡтан (тотҡонлоҡтан йә үлемгә дусар ителгән еренән) ҡотҡара икән, ахырҙа улар ҡауышмай ҡалмай.

Ошондай әкиәттәр контексында ҡарағанда һәм уларҙың эске логикаһын иҫәпкә алғанда, Зөләйханың Йософто ҡоллоҡтан ҡотҡарыуынан уларҙың мотлаҡ ҡауышырға тейешлеге аңлашыла. Һәм шулай булып сыға ла.

Ҡайһы бер татар ғалимдары уйлағанса, Ҡол Ғәли тик татар фольклоры традицияларына ғына таянмаған, башҡорт ғалимдары әйткәнсә,

башҡорт фольклоры башланғыстарын ғына файҙаланыу менән генә лә сикләнмәгән, көнсығыш халыҡтары ижады йоғонтоһон да кисергән.

### 3. “Буҙйегет” дастанында башҡорт фольклоры менән уртаҡлыҡтар

“Буҙйегет” дастаны ла фольклорҙың төрлө-төрлө жанр формаларын үҙ эсенә алған, әйтерһең, ул үҙе үк шуларҙан туҡылған. Саф фольклор күҙлегенән ҡарағанда, был йәһәттән айырыуса Өфө варианты ныҡ айырылып тора.

Яҙма дастан өлгөһө булараҡ, “Буҙйегет” дастаны китаптарға теркәлеүҙән тыш, “иртәгәләр” формаһында ла йәшәгән. Был иһә – уның бер түгел, әллә нисә вариантта (юҡҡа ғына “иртәгә” һүҙе күплектә ҡулланылмай) осраған замандар булған, тип әйткәнгә бәрәбәр. Ә иртәгә йәки иртәк, әйткәнебеҙсә, халыҡ эпосының (М. Өмөтбаевса, өләңдәрҙең) йәшәү формаларының береһе булараҡ, ҡобайыр йә йыр, йә нәсихәт, йә бүтән поэтик жанр рәүешендәге теҙмә телмәрҙең сәсмә телмәр менән аралашып килеүенән хасил була.

“Буҙйегет” ҡиссаһының Өфө варианты Буҙйегеттең әсәһе әйткән һыҡтау менән тамамлана. Жанр – бер. Уны башҡарыуға сәбәп – бер. Ҡайғы – бер. Әммә Ҡарасәстең һыҡтауы тик ике йәш йөрәк араһындағы хистәр уртаҡлығынан сыға. Буҙйегеттең әсәһенең һыҡтауы, йөкмәткеһе йәһәтенән дә, ваҡыт һәм арауыҡ иңләнеше яғынан да, киңерәк. Шуныһын әйтергә кәрәк, дастанда Буҙйегеттең әсәһе ике тапҡыр һыҡтай: улының һәләк булыуын ишеткәндә һәм ҡәберенә зыярат ҡылғанда. Тәүге һыҡтауын:

> “Бауырымдың парәһе –
> Ике күрҙем ҡараһы,
> Йәнем һөйгән хан балам,
> Һине ҡайҙан күргәймен?” –

тип башлай ҙа, әйтмәй-нитмәй алыҫ юлға сыҡҡан өсөн, улына үпкәһен, шул сәбәптән уны һөйөп туя алмай ҡалыуына үкенесен, хәҙер кемгә ҡарап һөйөнөргә белмәүен белдерә. Балаһының, исмаһам, икәү булмауына, яңғыҙ улының тоҡомо ҡалмауына үкенә. Әсәһенең тәүге һыҡтауынан ҡиссаның төп тексында телгә алынмаған мәғлүмәттәрҙе лә белеп була. Буҙйегеттең ҡәбере янында һыҡтауы бөтөнләй икенсе мотивҡа ҡоролған. Һүҙҙе ул ун ай (Б. Биишева вариантынса, туғыҙ ай) күтәреп, имсәген имеҙеп, татлы ризыҡ ашатып, һөйөп үҫтереүенән башлай ҙа, шул балаһының үҙенә мөрәжәғәт итеп,:

> “Бутаһы үлгән төйәләй,
> Буҙҙай килдем, йән балам,
> Ҡырҡ көнлөк киң юлда
> Эҙләй килдем, йән балам...”, -

Тип,рын түгә. Ҡарасәс һылыуҙың атаһы, ни тиклем ҡыҙыу ҡанлы, яуыз холоҡло, аяуһыҙ ҡаты ҡуллы булмаһын, уға ла бала һөйөү, уға ҡарап,

һөйөнөү, йыуаныу тойғоһо хас. Һәр бер ата кеүек, ул да балаһын бәхетле итергә теләй. Әммә шул бәхет тигәнде ҡыҙы – бер төрлө, ул үҙе икенсе төрлө аңлай. Ҡыҙы бәхетте – йән һөйгәне менән ҡауышыуҙа, ә хан уны үҙе кеүек хан затлы кеше менән никахлауҙа күрә.

“Буҙйегет” дастанында ла бәхилләшеү өлгөләре бар. Ҡарасәс үҙенең ҡырҡ ҡыҙы менән бына нисек бәхилләшә:

“Аман инде, хуш булың,
Беҙгә үтер көн булды.
Йәр өсөн үләр көн булды,
Һеҙгә ҡалыр көн булды.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңел ҡалғандар.
Уйығыҙ алғайһыҙ,
Риза булып, дуҫтарым...

Жанрҙың тәғәйенләнеше талап иткәнсә, был бәхилләшеүҙә тәнҡит тә, шелтә лә әйтелмәй: яҡты донъяла ҡалыусыларға изге теләктәр генә теләнә, яҙыҡлыҡтар өсөн тәүбә килтерелә.

Әҫәрҙең финалында берсә йырсы (йырау), берсә сәсән тип исемләнгән һүҙ оҫтаһының был донъяға берәүҙең дә мәңгегә килмәүе хаҡындағы һүҙҙәре урыны менән ҡобайырҙы, урыны менән нәсихәтте, урыны менән мөнәжәтте хәтерләтә. Һуңғыһына миҫал:

Яратҡан һуң[51] китәрмез,
Был ялғандан китәрмез[52],
Башҡа (төшә) үләр саҡ,
Илай-иңрәй китәрмез;
Әжәл дусар булған һуң,
Сарабыҙ юҡ, китәрмез…

Төштә ғашиҡ булышҡан Буҙйегет менән Сәхипъямал осрашҡас, уларҙың ҡауышыуын ҡотлап ҡыҙҙар ҡәҙимге туй йолаһындағыса яр-яр әйтә:

Әлхәмде сүрә Ҡөрьәндең башланалыр, яр-яр,
Бәйғәмбәрҙәр Алланың ҡашындалыр, яр-яр.
Берең – мәрүәрид, берең – мәрйен, теҙелептер, яр-яр,
Берең – хандыр, берең – ханша, йәр булып һеҙ, яр-яр…

Дөйөм алғанда, “Буҙйегет” дастанында исламғаса булған тәртип, йолалар, орнаменталь хәлдәге мифологик фекерләү башланғыстары, ислам тәғлимәте иләге аша үткәрелеп, уға яраҡлаштырылып, дөйөм сюжеттың үҫешенә үҙ өлөшөн индерә.

---

[51] Яратҡан һуң - тыуғандан һуң.
[52] Был ялғандан китәрмез - донъяның был ялғанынан тегенеһенә, ысынына, күсербеҙ.

4. “Таһир менән Зөһрә” дастаны һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәге араһындағы оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар

***а) Илаһи хистә аңлашыуға илаһи ҡөҙрәттең булышлыҡ иткәне***

Ҡала (йәки ил) хакимының ҡатыны булған Зөләйха (“Йософ менән Зөләйха”) һымаҡ уҡ, “Таһир менән Зөһрә” дастанында егетте башлап ҡыҙ үҙе ярата (Хажиева Миңнеямал варианты). “Ул мөхәббәт шул ҡәҙәрле көслө була, бер көндө Зөһрә, һис бер форсат тапмай, Таһирҙы ауыҙынан үбеп ала”.

Сифат яғынан төрлө кимәлдә һәм функциональ яҡтан төрлө һөҙөмтәле булыуҙарына ҡарамаҫтан, Зөләйха менән Зөһрә араһындағы мөһим бер оҡшашлыҡҡа иғтибар иттерге килә. Ә ул шунан ғибәрәт. Үҙе башлап күҙ атҡан, үҙ күңеле түренән урын биргән егетте ҡаратыу, унда мөхәббәт уты ҡабындырыу өсөн, Зөһрә лә, Зөләйха ла илаһи көстөң ҡөҙрәтенә таяна. Йософто үҙенә ҡаратыу өсөн, ярҙам һорап, Зөләйха Хоҙай Тәғәләгә ялбарһа (Насирова Фатима варианты), Зөһрә лә ошо алымға мөрәжәғәт итә. Икеһе лә ыңғай һөҙөмтәгә ирешә. Әммә ҡасан? Бына шул ваҡыт тигән нәмә эстетик категория кимәленә күтәрелеп, сюжеттың сиселешендә хәл иткес роль уйнай ҙа инде. “Таһир менән Зөһрә” дастанында, ЭЗлайха менән сағыштырғанда, һөйгәне менән героиня тиҙ, әммә аҙағыраҡ ҡына аңлаша. Ана шул ваҡыт һуҙымының ҡыҫҡалығы был ике йәш йөрәктең драматик һынауҙарға дусар ителеүенә, ахырҙа уларҙың трагедияһына сәбәпсе була. Ә “Йософ меән Зөләйха”ла? Унда Зөләйха бары финалда ғына Йософ менән аңлашыуға ирешә.

***б) Ата-әсә булыу бәхетенән мәхрүмдәр илаһи ҡөҙрәт ярҙамында теләктәренә ирешкәс, колак тешләтеү йолаһы аткарғандары.***

Илаһи ҡөҙрәт ғашиҡтарҙың аталары өсөн дә мөһим фактор ролен атҡара. Бала һөйөүҙән мәхрүм ике ирҙең атай булыу ҡыуанысын күреү бәхетенә ирешәсәктәре ике әҫәрҙең дә варианттарында күрәҙәлек, ырымдар аша көнэлгәре аңғартыла (прогнозлана).

Көтөп алынған балаларҙың донъяға яралырын йәнлек ярҙамында әшкәртеү алымы тәңгәлендә лә мәғәнәүи тап килеш күҙәтелә һүҙ барған ике әҫәрҙә. 1960 йылда Ырымбур өлкәһендәге Ҡотләмбәт ауылында 67 йәшлек Әбүбәкирова Нәзифәнән, шунда уҡ Ҡайыпҡол ауылында 68 йәшлек Әбдрәзәҡов Миңлебулаттан Нигмәт Шоңҡаров яҙып алған вариант буйынса, хандар һунарҙа саҡта йортта ҡалған бисәләренең бала табыуы ике дуҫҡа ҡуян осрауы аша ла әшкәртелә[53]. Дастандың Ишбирҙина Нәсиха яҙҙырған варианты ошо мотивты үҙенсә ҡабатлай. Һунарға киткәндәрендә, ике күрше лә ҡатындарына: “Әгәр малай тыуһа, ҡыйыҡ башына – ян менән уҡ, ҡыҙ булһа – орсоҡ сәнсегеҙ”,

[53] ҒА, ф. 3: оп. 21/3. – 146-сы б., 150-се б.

– тиҙәр. Һәм, йорттарына ҡайтып инмәҫ элек үк, шул символдарға ҡарап, тәүгеһенең – ҡыҙы, икенсеһенең улы донъяға килеүен беләләр[54].

Орсоҡ менән уҡ образы ике осраҡта ла ҡәҙимге эпостарға (мәҫәлән, ҡырғыҙҙың “Манас”ында һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосының Т.С. Беляев версияһына) хас шартлы рәүештә “Бала тыуыр саҡта ситкә киткән атайҙан һөйөнсө алыу” тип аталмалы тотош бер тематик мотивты һәм шуның ғәмәлләшеүе рәүешендәге һүрәтләнә торған эпизодты алмаштыра.

Ҡолаҡ тешләтеп бишек туйы йолаһын атҡарып, Ҡуҙыйкүрпәстән Маянһылыуҙы инселәткән кеүек, Таһирҙы ла Зөһрә менән “йәрәштерәләр”.

Ошо ваҡиғаны мәғлүмәт йәһәтенән хәтергә бикләү менән генә сикләнмәй, уларҙың ата-әсәһе уны яҙма ярҙамында ла нығытып ҡуя. Әммә, Маянһылыуҙың атаһы кеүек үк, Зөһрәнең атаһы ла баштағы килешеүҙе боҙа.  Балалары тыуһа, ҡоҙа булышырға тип, һүҙ беркетеү – уларҙың тыуыуын теләп әйтеү әйтеү. Әйтеү әйтеү иһә - ғәһет, ант менән бер. Бишек туйы үткәреп, ҡолаҡ тешләтеү йолаһын атҡарыу иһә – шул антҡа тиң әйтеҙе яңыртыу. Тимәк, ике эпоста ла ҡыҙ атаһы антын боҙа. Антты боҙоу иһә  – илаһи язаны көҫәү менән бер.

***в ) Тема һәм мотивтар оҡшашлығы***

Зөһрәнең Таһир менән икәү-ара аңлашыуы уларҙы йәмғиәт тәртибе һәм атай хоҡуғы тигән йола ҡануниәте менән аңлашылмаусылыҡҡа килтерә. Атаһы тарафынан Таһирҙың ағыҙып ебәрелеүе, аталары менән бергә Маянһылыуҙың ситкә күсеп китеүе, ваҡиғаларҙың тасуирланышы, унда ҡатнашыусыларҙың төрлөлөгө, шул ситуацияларҙың йөкмәткеһе йәһәтенән бер-береһенән ныҡ айырылһалар ҙа, сюжет үҫешендәге мәғәнәүи функциялары йәһәтенән оҡшаш.

Һүҙ барған ике эпосты бер-береһенә яҡын һәм оҡшаш итеүгә шул да сәбәп: уларҙың икеһенең дә финалы бер төрлө. Ҡуҙыйкүрпәс үлтерелгәс – Маянһылыу ҙа, Таһир үлтерелгәс – Зөһрә лә үҙ-үҙенә ҡул һала. Икеһе лә шуның менән һөйгән егеттәренән башҡа был донъяла йәшәүҙән мәғәнә тапмауҙарын, тимәк, мөхәббәттәренә тоғро булыуҙарын иҫбатлай.

“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәгенә хас үҙенсәлектәрҙең “Таһир менән Зөһрә” дастанында ла күҙәтелеүе тора-бара һуңғыһының башҡа компоненттар кимәлендә лә тәүгеһенә яҡынайыуына килтергән.

Ҡуҙыйкүрпәс йәрәшелгән ҡыҙы булыуын белмәй үҫә. Сөнки әсәһе быны сер итеп тота. Варианттарҙа Таһир менән дә шулай була. Айырма шунда ғына: үҫмер йәшенә еткәс, Ҡуҙыйкүрпәс был хаҡта бер әбейҙән (Ғ. Сәлим версияһы), йә еңгәһенән ишетә. Ә үҫмер йәшенә

[54] ҒА, ф. 3: оп. 21/8. – 21-се, 34-се б.

еткән Таһир бәләкәй ваҡытында Зөһрәнең ҡолағын тешләүе тураһында (Булатов Зәкәриә варианты буйынса) “Ҡөрьән” ситенә яҙылған яҙманан белә. Дөйөм алғанда, йәрәшелгәне хаҡындағы мәғлүмәт егеткә ике эпоста ла әсәһенән түгел, бүтән сығанаҡтан мәғлүм була.

“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосы күҙлегенән ҡарағанда, ошо эпизодтан һуң ситтән белгән серҙе Таһир ҙа әсәһенән асыҡлатырға тейеш. Иртәксе Усманова Хәнифә ошо законсылыҡты нескә тойған. Серҙе сит кешенән белеп ҡайтҡас, Таһир инәһенә: “Һин ниңә әйтмәнең миңә? Үҙегеҙ бит туҫтаҡ эсешкәнһегеҙ. Минең йәрәшкән ҡыҙым бар икән дә!”– тип үпкәләй. Әсә яуабы “Егет сабый сағында йәрәшелгән ҡыҙы булыуы хаҡындағы серҙе аса” мотивын тулыландырып та ҡуя.

Әсәһе ҡаршы төшһә лә, юлына кәртәләр ҡуйһа ла, сабый сағында йәрәштерелгән алымсағын күреп белмәҫтән үк, уға үлеп ғашиҡ булған Ҡуҙыйкүрпәс уны эҙләп китә. Зөһрәнең атаһы, ситкә күсеп, эҙ йәшереп тормағас, “Таһир менән Зөһрә” дастанында “ғашиҡ егет әсәһен тыңламай, юлға сыға” мотивына ерлек булмаҫҡа тейеш кеүек. Әммә ике эпоста ла ассоциатив рәүештә төп геройҙың яҙмышы тәңгәлендә оҡшашлыҡ күҙәтелеүе ла был мотивҡа урын табырға мәжбүр иткән бәғзе һүҙ оҫталарын.

***г) Пресонаждар оҡшашлығы***

“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәге һәм “Таһир менән Зөһрә” дастаны араһындағы оҡшашлыҡтар, тема, мотив, яҙмыштар уртаҡлығы менән генә сикләнеп ҡалмай, сюжетты хасил итеүсе характер типтарының иҫәбе-хисабында ла, хатта уларҙың исемдәренең уртаҡлығында ла күҙәтелә. “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосында төп сюжет һыҙығын хасил итеүҙә биш персонаж – егет менән ҡыҙ, уларҙың ата-әсәһе һәм мөхәббәт өсмөйөшө тыуыуына сәбәпсе булған Ҡолтортаҙ (Ҡарағол, Ҡара ғәрәп) ҡатнаша. “Таһир менән Зөһрә” дастанында ла шулай. Ике эпостың ҡайһы бер варианттарында Зөһрә менән Маянһылыуҙың, Таһир менән Ҡуҙыйкүрпәстең аталары аҙаштар: улар Күсәрхан менән Күсмәҫхан тип исемләнә (“Таһир менән Зөһрә”нең Ишбирҙина Нәсиха варианты һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” Ғ. Сәләм версияһы)[55]. Ғашиҡтарҙың араһына инеүсе лә варианттарҙа бер үк исем менән атала.

Әле телгә алынған компоненттары уҡ “Таһир менән Зөһрә” дастаны һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпостарының йөкмәтке йәһәтенән дә форма яғынан да, идея тәңгәлендә лә оҡшашлыҡтарға уртаҡлыҡтарға эйә булыуына дәлил. Тәүгеһенең башҡорттар араһында таралыуына шул сбәпсе булған да инде.

---

[55] ҒА, ф.3, оп. 21/8. 35-39-сы б.; БДУ БӘК ФФ, 1963 йылғы яҙмалар, 1-се киҫәк. – 75-79-сы б.

5. Дастандың әкиәткә тартҡаны

*а) Әкиәт сюжеты менән окшашлыктағы айырмалыктар*

“Сәйфелмөлөк” йәки “Бәҙеғолъямал менән Сәйфелмөлөк”[56] дастанының тылсымлы әкиәт сюжеты үҙәненә төшөп, ахырынаса шунан сыҡмауын иҫәпкә алып, уны тылсымлы әкиәттәр йыйынтыктарына индерер булдылар. Әммә ул тап шулай “әкиәтләшкәне” өсөн дастандың үҙенсәлекле версияһы тип ҡаралырға тейеш.

“Буҙйегет”, “Йософ менән Зөләйха” дастандары ҡаһармандары һымаҡ уҡ, Сәйфелмөлөк тә үҙ күҙҙәре менән күреп белмәгән ҡыҙға үлеп ғашиҡ була. Тик уларҙан айырмалы рәүештә, унда ғишыҡ уты тоҡаныуға төшө түгел, ә билдәһеҙ ҡыҙҙың һүрәте сәбәпсе була. Сәйфелмөлөк, теге ҡыҙға ни тиклем ныҡ ғашиҡ булыуы әҫәрҙә шулай асыла. Егет ашап-эсеүҙән дә, уйнап-көлөүҙән дә яҙа, һунарға йөрөүҙән дә ҡала. Һөйгәнен күрмәйенсә, тәкәт итә алмай, атһыҙ-юлһыҙ уны эҙләп китә. Юлда, карап ҡыйрауы арҡаһында, ҡырағай кешеләргә юлығыуы, бер яҡтан – егеттең сабырлығына, түҙемлегенә, икенсе яҡтан, таныш булмаған ҡыҙға күңелендә тыуған ғашиҡлыҡ хисенә, мөхәббәтенә һынау кеүек ҡабул ителә. Сәйфелмөлөктөң ҡырағайҙар батшаһы ҡыҙының мөхәббәтенән баш тартыуы – әшәкелектән ерәнеүе һөҙөмтәһе генә түгел, матурлыҡ идеалы булған һөйгәненә тоғролоғона дәлил ул.

Дастанда “сихырсы” тип нарыҡланған зат тылсымлы әкиәт геройына юл өйрәтеүсе изгелекле кеше статусына эйә.

Әкиәт сюжеты үҙәненә бер төшкәс, дастандың сюжеты ахырғаса тылсымлы әкиәт сюжетының үҫеү законсылығына буйһондорола. Ә уның асылы, баҫҡыслап-баҫҡыслап, композицион өсләтеүҙән ғибәрәт.

Бер ярҙамсының геройҙы – икенсе ярҙамсыға, уныһының өсөнсөһөнә ебәреүсе айырым мотив рәүешендә тылсымлы әкиәттәрҙә йыш осраусан. “Һонтай егете” тигән тылсымлы әкиәттә ен-бәрейҙәр менән эш итә белеүсе ҡатыны Янһары тигән егеткә батша ҡушҡан әҙәм үтәгеһеҙ бурыстарҙы атҡарырға булыша: таң атҡансы иген сәсеп, урып, йыйыштыра; батша урмандан ун һыйыр килтерергә ҡушһа – ун айыу килтерә, бар менән юҡты табырға кәрәк булғас, был эште лә ҡатыны ярҙамы менән атҡара.

Өсөнсө күрәҙәсенең Сәйфелмөлөккә әйткәне кимәленән ҡарағанда, егет үҙе күреп белмәгән ҡыҙҙы, бары һүрәте буйынса ғына булһа ла ни тиклем генә тәкәтһеҙ яратмаһын, барыбер үҙ аллы эш итеүҙән йыраҡыраҡ тора. Быныһы ла – тылсымлы әкиәттәргә хас билдә.

Әкиәт логикаһы буйынса, герой өс һынау үтергә тейеш булһа, дастан ошо урында “үҙаллылыҡ” күрһәткәндәй итә. Беренсенән, быға

---

[56] БХИ / Төҙ., Н.Т. Зарипов, Ә.М. Сөләймәнов, Ғ.Б. Хөсәйенов, З.Я. Шәрипова; Инеш мәҡ. Н.Т. Зариповтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлек Н.Т. Зарипов, Ә.М. Сөләймәнов, Ғ.Б. Хөсәйенов, З.Я. Шәриповаларҙыҡы; Һүҙ ахыры Ә.М. Сөләймәновтыҡы – Өфө, 2002. - 6-сы том. - 352 – 379-се б.

тиклем дә өс һынау үткән Сәйфелмөлөк, йәнә өс һынауға дусар ителә. Икенсенән, өс шарт та үтәлһә, әкиәт законсылығы буйынса, шарт ҡуйыусы геройға ул дәғүә иткәнде бирергә тейеш була. Дастан версияһындағы ен батшаһы иһә был законсылыҡ менән дә иҫәпләшмәй: ун икенсе ҡыҙын – Сәйфелмөлөккә етәкләтеп кенә ебәрәһе урынға, уларҙың икеһен дә эҙәрләй башлай. Шул рәүештә мөғжизәле баҫтырыш китә.

***б) Әҙәми заттан булған эпик геройҙарҙың мөхәббәте фәжиғаға илткән бер мәлдә, ен ҡыҙы менән яратыусының бәхеткә юлыҡҡаны***

"Сәйфелмөлөк" дастанының сығышы "Мең дә бер кисә"гә барып тоташа. Хәҙер инде шуны ла, һүҙ барған дастан хаҡындағы күҙәтеүҙәребеҙҙе лә тотошлайы менән иҫәпкә алып, быға тиклем ҡуйылған һәм ярайһы ҡуйыртылған бер мәсьәләгә – "Егет үҙ күҙҙәре менән күреп белмәгән һылыу ҡыҙға ситтән тороп ғашиҡ була" тигән тематик мотивҡа ҡоролған дастан һәм иртәктәрҙең геройы мифик-демонологик заттан булған ҡыҙҙы ни өсөн кәләш итеп алыуға өлгәшә, ә ул әҙәми зат ҡыҙы булғанда сюжет ни өсөн ғашиҡтарҙың фажиғәһе менән сиселә?" тигән һорауға әйләнеп ҡайтырға форсат бар.

Ул һорауға шулай тип яуап бирергә булалыр, моғайын. Мәғлүм булыуынса, әкиәттәргә һәр саҡ бәхетле тамамланыш хас: ниҙелер юғалтҡан юғалтҡанын таба, кәләшһеҙ кәләш ала, айырылғандар яңынан ҡауыша, фәҡир байыға, аҡылы ярҙамында зирәк кеше үҙенән көслө заттарҙы еңә, яуызлыҡ еңелә, изгелек тантана итә. Күрәһең, хикмәт "Сәйфелмөлөк" дастанында геройҙың йә – ен, йә – бәрей, йә дейеү ҡыҙына, уның үҙен күрмәҫтән үк, ғашиҡ булыуында ғына түгел, ә был әҫәрҙең, башта әйтелгәненсә, әкиәттән яралыуындалыр, шулай хасил булғанға ла, унда тылсым мөғжизәһенә ҙур роль йөкмәтелеүендәлер.

Үҙенең килеп сығышы йәһәтенән үк әкиәт менән тамырҙаш булыуы арҡаһында, ҡарап үтелгән версияларынан күренеүенсә, дастан әкиәттәргә (новеллистигына ла, тылсымлыһына ла) хас мотив һәм сюжеттарҙы иркен ҡулланған.

Бына шулай, сығышы менән башҡорт иленә мөнәсәбәте булмаған ҡисса, дастандар ҙа тыумыштарынан уҡ үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәрен һаҡлаған. Шул уҡ ваҡытта ни өсөн һәм нисек итеп улар беҙҙең милли эпик ҡомартҡыларыбыҙ репертурында урын алған икән? Был һорауға әлегә шулай тип кенә яуап биреү менән сикләнеп торғанда ла ярайҙыр. Ят ерлекле дастандарҙың милли эпик ҡомартҡыларыбыҙ репертурына ерегеүенә уларҙа күтәрелгән ғаилә-көнкүреш, шул иҫәптән мөхәббәт проблемаһы беҙҙң көнкүреш эпостарыбыҙ менән ауаздаш булыуы, типологик оҡшашлыҡтар ерлек тә, сәбәп тә булғандыр.

6. Тормош-көнкүреш тематикалы яҙма эпик ҡомартҡылар

Традицион эпик ҡомартҡылар менән яҙма рәүештә ижад ителеп, берсә телдән, берсә ҡулъяҙма рәүешендә таралғандары проблема, тема йәһәтенән генә түгел, сюжет йәһәтенән дә бер-береһенә яҡын һәм ауаздаш.

***а) Мөхәббәтте яҡлай белергә саҡырыусы "Ләйлә менән Мәжнүн" дастанының башҡорт эпик ҡомартҡылары араһында урын алғаны***

"Ләйлә менән Мәжнүн"[57] дастанының башҡорт версияһының экспозицияһы ла, "Алпамыша менән Барсынһылыу", "Ҡоблан батыр", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" иртәге, "Таһир менән Зөһрә" дастаны, ҡырғыҙҙың мәшһүр "Манас"ы ише ҡомартҡыларға хас уртаҡ мотивтан төп геройҙың ата-әсәһенең оҙаҡ ваҡыттар бала бағыу бәхетенән мәхрүм булыуҙары хаҡында хәбәр итеүҙән башланып китә.

Мөхәббәт дастандарының башҡаларына "Ләйлә менән Мәжнүн" шуныһы менән дә яҡын: ул да ғашиҡтар хәлен тасуирлай, ул да һөйә һәм һөйөлә белгәндәрҙе данлай.

"Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" иртәге һәм "Таһир менән Зөһрә" дастанының ҡайһы бер версияларында бер-береһе менән яҙмыштарын бәйләргә тейеш егет менән ҡыҙҙы, шул турала ғәһеткә тиң әйтеү әйтеп, һүҙ ҡуйышыуға ҡарамаҫтан, уны сер итеп тотоп, уларҙы баштан уҡ айырыу сараһын күрһәләр, Ләйлә менән Мәжнүнгә быңдай һынау янамай. Киреһенсә, уларға яратышырға махсус рәүештә шарттар ҙа тыуҙырылғандай була. Әммә уларҙы ла ахырҙа айыралар.

Мөхәббәт хисе Ҡайсты мәжнүн хәленә төшөрә, шул хис уны шағир итә. Ул "Баш өҫтөнә ҡайғы оя ҡорған булһа ла", бер саҡ Һомай ҡоштоң күләгәһе төшөрөнә өмөт итеп йәшәй. Ә Һомайғош, быға са әйтелгәненсә – башҡорт һәм фарсы мифологияһы буйынса, бәхет ҡошо.

Мөхәббәт темаһына ижад ителгән башҡа эпик ҡомартҡыларҙан айырмалы рәүештә, "Ләйлә менән Мәжнүн" дастаны үтә сентименталь, элегик пафослы. Уның геройҙары, бигерәк тә Ҡайс-Мәжнүн үтә пассив. Үҙ хисенә бикләнгәнлеге уны тыуған йорто, ата-әсәһе, туғандарынан ғына түгел, шул хистәренә сәбәпсе булған Ләйләнән дә айырылыуға сәбәп була. Шул турала бәйән итеп, дастандың башҡорт версияһы, мөхәббәт – нескә хис, шуға ла ул ҡурсалауға мохтаж, шул уҡ ваҡытта шул саф тойғоларын яратышҡандар үҙҙәре лә яҡлай белергә тейеш тигән идея үткәрә.

---

[57] БХИ / Төҙ. Ә.М. Сөләймәнов, Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Нәҙерғолов; Инеш мәҡ. Ә.М. Сөләймәновтыҡы; Һүҙ ахыры Ғ.Б. Хөсәйенов, Ә.М. Сөләймәнов, М.Х. Нәҙерғолов һәм Ф.Ш. Сибәғәтовтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлек Ғ.Б. Хөсәйенов, М.Х. Нәҙерғолов, Ә.М.Сөләймәновтыҡы. – Өфө: Китап, 2004. – 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. – 113-143-сө б.

*б). Татыулыкка, берҙәмлеккә өндәүсе яҙма дастандарыбыҙ*

“Ләйлә менән Мәжнүн”, “Таһир менән Зөһрә” ише дастандарҙан айырмалы рәүештә, йәнле репертуарҙа “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәгенең ошоғаса шундай варианттары осрай: уларҙың финалы бәхетле тамамлана. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡауыша. Күрәһең, бындай варианттар менән Т.С. Беляев та (1768–1864) хәбәрҙар булған. Һәр хәлдә, ошо эпос сюжеты нигеҙендә яҙған уның повесы ла бәхетле тамамланышлы. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡауыша һәм башҡорттоң Бөрйән, Үҫәргән, Тамьян, Ҡыпсаҡ, Бошман (Ҡыпсаҡ), Ҡара ҡыпсаҡ, Түңгәүер тигән ырыуҙары хасил булыуына сәбәп итәләр: уларҙан тыуған Барлыбай үҙ сиратында шул ете ырыуға исем биргән заттарға атай булыуға өлгәшә.

Шуныһы мөһим: эпостың художестволы яҡтан өр-яңынан эшкәртелгән был версияһы буйынса, Ҡуҙыйкүрпәс – башҡорт, Маянһылыу – ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) ҡыҙы. Әгәр “Башҡорт повесы”ның Рәсәйҙә Наполеон баҫҡынсыларына ҡаршы Беренсе Ватан һуғышы башланған 1812 йылда донъя күреүен иҫәпкә алһаҡ, шул яңылыҡты индереүе менән оло яу алдынан авторҙың халыҡтар дуҫлығына, берҙәмлеккә саҡырыуы яҡшы аңлашылыр.

Эпостың телдән таралған версияһынан айырмалы рәүештә, Беляев үҙенең версияһына Мәскәй тигән персонаж индергән. Уның йөҙөндә киләсәкте юраусы күрәҙәсе образы бирелгән. Шул күрәҙәсе исеменән автор батшасылыҡ идеяһын ҡуйырта: башҡорт ырыуҙарының рус батшаһы ҡулы аҫтына инеүен хуплай, ә шул хакимға ҡаршы был халыҡтың ихтилалдарға күтәрелеүенең сәбәбен дә, маҡсатын да әйтеп тормаҫтан, уларҙы шелтәләй.

Күрәҙәсе Мәскәй образын индереү Беляевҡа традицион сюжетҡа һалынған йөкмәткене бына шулай тарихи ваҡиғалар менән байытыу мөмкинлеге биргән. Ошо форсаттан файҙаланып, автор төп сюжетҡа һыймаған, бары эпилог рәүешендә генә бирелеүе мөмкин булған хәл-күренештәрҙе лә шул күрәҙәсенән көнэлгәре бәйән иттереп ҡуя. Шулай итеп, был образ әҫәрҙең композицияһына бер үҙгәлек бирә.Тик уларҙы батшасылыҡ идеяһы күҙлегенән бер яҡлы яҡтыртҡан. Ошо уҡ алым Кирәй Мәргән, Морат Рәхимҡолов, Мөхтәр Сәғитов, Салауат Галин, Миҙхәт Мәмбәтов, Мирас Иҙелбаев ише тикшеренеүселәр “Башҡорт повесы”ның дауамы тип иҫәпләгән “Алдар менән Зөһрә” (“Мои вечера башкирские...”) тигән әҫәрҙә лә ҡулланыла. Күрәҙәсе ролен унда бер сихырсы сәйер ҡарт атҡара. “Башҡорт повесы”ндағы һымаҡ уҡ, “Алдар менән Зөһрә” иртәгендә лә Хызыр Ильяс образын хәтерләтеүсе изге зат образы ла бирелә.

Әгәр “Башҡорт повесы” ете ырыуҙан торған ырыуҙар берлеге (союзы) хасил буласағын көнэлгәре хәбәр итеү менән генә сикләнһә, “Алдар менән Зөһрә”лә урман һәм дала башҡорттарының туғанлашыуы

хаҡында һүҙ бара. Әгәр тәүгеһендә Ҡуҙыйкүрпәсте – башҡорт егете, Маянһылыуҙы ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ ҡыҙы тип, уларҙан йәйелгән ете ырыу башҡортоноң да ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ менән ҡан ҡәрҙәш булыуына, тимәк, уларҙың берҙәм һәм татыу булырға тейеш икәнлектәренә ишара яһалһа, икенсеһендә, әйтерһең, былдай һөҙөмтәгә ирешеүҙең тәүшарты – халыҡтың үҙ эсендә берҙәмлек булыуында, тигәндәй була. Урман батыры Зөһрә менән ҡыр батыры Алдарҙың ҡауышыуы – ике ырыуҙың ғына түгел, ике зонаға бүленеп, Яйыҡ – Һаҡмар – Ағиҙел – Ҡариҙел – Ашҡаҙар – Дим – Ҡармасан – Сәрмәсән – Бөрө – Танып – Уйыл – Иртыш яҡтарына йәйелеп йәшәгән башҡорт ырыуҙарының берләшеүен аңлата.

## 7. Иш янына – ҡуш булып, тормош-көнкүреш эпостары төркөмөн байытыусы ҡомартҡылар

### *а) Башҡорттоң ат яратыуын сәмселлеген иҫбатлаусы эпос*

Тормош-көнкүреш эпостары төркөмөн “Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр”, “Түлле Мәмбәт” ише әҫәрҙәр тулыландыра.

“Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр” (“Билбирмәҫ Әбрәй менән албирмәҫ Аласабыр”) эпосы – ырыу данын яҡлаусы батыр менән йүгерек атҡа гимн кеүек ҡабул ителә. Батыр ҙа, ат та намыҫсан, сәмсел һәм ғорур холоҡло булыуҙары менән һоҡландыра.

Әбрәйҙең сәмсел һәм намыҫсанлығына бер миҫал: Эпостың 1945 йылда Ғафури районы Тайыш ауылы Мирсаяф Сәйфүллиндән Жәлил Кейекбаев яҙып алған варианты буйынса, билһынашта майҙан тотоп, бик күп батырҙарҙы еңгән Әбрйгә ахырҙа төрөк көрәшсәһен сығаралар. Көстәре тигеҙ булһа ла, башҡорт батыры, намыҫланып китеп, таһыл менән еңә тегене. Инде майҙан ябылды тигәндә генә, ҡалмыҡ батыры, тип йәнә берәүҙе сығаралар. “Әбрәй батыр тегене майҙан уртаһына килтереп, биленән һауаға күтәреп, байтаҡ торғоҙғас, ергә лап иттереп, күтәргән дә һуҡҡан” икән – тегенең муйыны сыҡҡан да ҡуйған. Ситтән күҙәтеүселәргә уның был ҡыланышы тупаҫлыҡ, аяуһыҙлыҡ булып тойолған. Хатта полиция саҡыртҡандар. Әбрәй шул саҡ уның бер ҙә ҡалмыҡ түгел, баяғы төрөк икәнен фаш иткән. “Ул, өҫтөндәге кейемен алмаштырып, битенә әҙерәк дегет һөртөп кенә килгән… Бында һәр бер батыр көс һынашырға килгән, алдашырға килмәгән.” Шул һүҙе етә ҡалған “шунда халыҡ Әбрәй батырҙы күтәреп, майҙандан алып сығып киткән”.[58] Шуның менән халыҡ Әбрәйҙең көрәште намыҫ эше тип белеүен хуплауын да, уны үҙ күреүен дә, шул арҡала полициянан ҡыйырһытырға бирмәүен дә, юғары абруйына тап төшөрөргә теләмәүен

[58] Әбрәй батыр менән албирмәҫ Аласабыр // БХИ / текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙ. Әхмәт Сөләймәнов һ.б. ; инеш мәҡ авт. Әхмәт Сөләймәнов; һүҙ ахыры авт. Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов һ.б.; аңлатмалар һәм һүҙлекте Ғайса Хөсәйенов менән Миңлеғәле Нәҙерғолов ҡатнашлығында Әхмәт Сөләймәнов әҙерләне.; яуаплы мөхәрр. Әхмәт Сөләймәнов. - Өфө: Китап, 2004. – 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар . - 389-сы б.

дә аңлатҡан. Ошо әйтелгәндәр барыһы ла халыҡ алдында был батырҙың бар булмышы менән халыҡ намыҫын кәүҙәләндереүе тураһында һөйләй. Ундайҙар хаҡындав, уның, йөҙө аҡ, тиҙәр. Әбрәйҙең йөҙө аҡ булыуы майҙан ябылыр саҡта, тимәк, башҡорт батырының арып, апманһыҙ булғанын көтөп тороп ҡына, үҙен ҡалмыҡ батыры, тип, һөмһөҙләшеп, икенсе тапҡыр ошо башҡорт батырына ҡаршы сығыусы төрөктөң дегеткә буялған йөҙө менән контраслаша. Сөнки дегет төҫө бында тура мәғәнәһендә генә түгел, символик мәғәнәгә лә эйә: ул Әбрәйҙең уҙағының ҡара эсле булыуына ишара ла. Тап ана шундайҙар өсөн "йөҙө ҡара" тигән махсус әр һүҙе ҡуллана халыҡ. .

Аласабырҙың намыҫсан һәм сәмселлеге шунда асыла: ул башҡа бәйге аттарына ал бирмәй. Үҙенең килеп сығышын мифик дәүергә бәйләүе менән эпос уны "Аҡбуҙат", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡара юрға" тигән эпостарға исем биргән аттар рәтенә ҡуйырға форсат бирә.

***б) Ханһыҙ, бей ҡулы аҫтында йәшәгән дәүерҙе тасирлаусы яҙма эпик ҡомартҡы***

"Бикйән Мәргән" әҫәре беҙҙе "батша булмайынса, фәҡәт хан ғына булып, хөкүмәт эштәрен бейҙәр ауылдағы яһаҡ йыйыусылар аша" йөрөткән замандарға алып китә. Ил менән идара иерархияһынан артабан иң түбәнге ике баҫҡысы ла телгә алына. Бейҙәр бер нисә ауылға баш итеп ҡазыйҙарҙы ҡуйһа, улары үҙ нәүбәтендә һайланмыш байҙар менән "һүҙ беркетеп, бейҙең ауылдарға һирәк килеүенән файҙаланып, ауыл халҡын төрлөсә" талауы хаҡында ла мәғлүмәт бирелә. Әҫәрҙең башында уҡ ил идараһын шулай баҫҡыслап-баҫҡыслап күрһәтеп, йәмғиәттең төрлө социаль ҡатламдарға тарҡалыуы, унда синфи ҡаршылыҡтарҙың ҡотолғоһоҙ булыуы нигеҙләнә. Был күренеш эпоста һунарсылыҡ менән көн күргән Кейекбай ҡарттың ғаилә яҙмышы аша асыла. Уның өлкән улы – хәрәмде хәләлгә иҫәпләүсе һыҡмыр малсы. Ә кесе улы Бикйән – ирекле фәҡир.

Әҫәрҙә социаль ғәҙелһеҙлеккә ике көс ҡаршы ҡуйыла. Бер яҡтан, бер-береһенә булышыусы фәҡирҙәр шундай көстө кәүҙәләндерә. Икенсе яғы шул. Бикйәнгә Йәреш ҡарттың йоғоноуын, уны тура мәғәнәһендә лә, күсмә мәғәнәлә лә көпә-көндөҙ, урам уртаһында талауы хаҡында хәбәр алған бей ғәҙеллекте урынлаштыра: кеше хаҡын ашап көн итеүсе Йәреш бай язаға тарттырыла.

Был эпоста ҡыҙ урлау рәүешенә шаһит булабыҙ. Һунар кәсебе, һунарсылыҡ итеү сиктәрен һаҡлау, һөнәрселек кәсебе, тәғәйен ярсыларҙың (яр һалып ҡысҡырыусыларҙың) нисек һәм ҡасан ниндәй маҡсат менән яр һалыуы, йәбер-золом күрһәтеүсене, йәмәғәт хөкөмөнә дусар итеп, бейгә тапшырыу күренештәре этнография фәне, фольклор ғилеме, мәҙәниәт тарихы буйынса тикшеренеүселәр бөгөн дә ҡыҙыҡһынырлыҡ итеп тасуирланған.

***в) Мәмбәттең түлле булғаны, тематик мотивтарҙың ишле булғаны бер сюжетка тулғаны***

Этнографик, этнологик, тарихи һәм географик мәғлүмәттәргә “Түлле Мәмбәт” эпосы айырыуса бай. Унан кәсепселектең, “Бикйән Мәргән”дә сағылғандарынан тыш башҡорттарҙың нигеҙ ҡороп, төпләнеү өсөн ер һайлауы, мал көтөүе, балыҡ тотоуы, ғаилә ҡороуы, барымта сабыуы, башҡаһы һәм экология талаптарын үтәп, ерҙең ҡәҙерен белеп йәшәүҙәре, ғилемгә ынтылыуҙары, araларынан дин башлыҡтары, старшиналар, офицерҙар сығыуы һ.б. хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр алырға була.

Башҡорт ырыуҙарының шәжәрәләренең байтағында эпик сюжеттар ҙа бәйән ителә. Мәҫәлән, Ҡарағай ҡыпсаҡ ырыуыныҡында – “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының ҡыпсаҡ версияһының, Юрматы ырыуыныҡында – Тәтегәс бейҙең эшмәкәрлеге хаҡында бәйән итеүсе, Меңле ырыуыныҡында Аҡһаҡкилембәт менән Ҡаракилембәт тигән нуғайҙың бер туған ике мырҙаһының үҙ-ара ҡан ҡойошло ҡарымта ҡолона әйләнеүҙәре бәйән ителә[59].

Ҡайһы бер эпостарҙа төп ҡаһармандың ҡыҫҡаса шәжәрәһе бирелеүсән (“Иҙеүкәй менән Мораҙым”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” (Беляев версияһы), “Заманалар ҡиссаһы”), ә бер төркөм эпик ҡомартҡыларыбыҙ үҙҙәре үк теҙмә йә сәсмәүер (проза) хәлендәге сюжетлы шәжәрәләрҙе хәтерләтә (“Бей Туҡсаба уғланы”, “Мөйтән бей”), “Түлле Мәмбәт” эпосы ла шундайҙарҙан. Шуға күрә уның халыҡ телендә “Мәмбәт шәжәрәһе” тип аталыуына аптырайһы түгел.

Ғәҙәттә, шәжәрәләр берәй этник төркөмгә нигеҙ һалыусы менән таныштырып, уның башынан үткәндәрҙе хәл ҡәҙәренсә бәйән итеп, бары аннотация тибындағы белешмәләр биреү менән генә сикләнә. Халыҡ телендә “Мәмбәт шәжәрәһе” тип аталыуына ҡарамаҫтан, “Түлле Мәмбәт” әҫәре стиле, йөкмәткеһе, композицияһы яғынан шәжәрә традицияһынан бик күпкә ситләшә.

Тәүҙә ул, һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙып тормаҫтан, Үҫәргән ырыуында Мәмбәт этнонимын йөрөтөүсе бер тармаҡ тамыр йәйеүенә сәбәпсе кешенең ҡаҙаҡ сығышлы булыуы риүәйәт менән таныштыра һала. Унан беҙгә уның, ата-әсәһе ҡушҡан Жансары булһа ла, барымта ваҡытында башҡорттоң Үҫәргән ырыуына юлыҡҡас, үҙ ихтыярынан тыш, Мәмбәт тип йөрөтөлә башлауы мәғлүм була. Артабан иһә әле һүҙ барған ҡомартҡының төп геройына әүереләсәк шул заттың ун-ун ике йәштәр тирәһенән алып етмеш бишен тултырып, “Алланан тәҡдир ирешеб фани донъядан әхирәт йортона” күскәнгә тиклем ҡыҫылышы булған ваҡиғалар ғына түгел, унан түбән килгән быуындарҙың ир заттарының башынан үткәндәренең дә байтағы бәйән ителгән. Ахырҙа, күптән

[59] Башҡорт шәжәрәләре. – 27-31-се, 50-51-се, 110-111-се б.

патриархаттың йола хөкөмө урынлаштырған традиция буйынса, ата-баба яғынан шуларҙың нәҫел-нәсәбенең генеалогик таблицаһы теркәлгән.

Әммә хикмәт – унда ғына түгел, ә теге тәғәйенләнеште нисек үтәүҙә. Материалдың байлығы, анығыраҡ әйткәндә, ситуатив хәлдәр, ваҡиғалар теҙмәһенең күплеге, шуларҙың үҙәгендә коллектив герой – быуын-быуын ялғана килгән бер ҡәүем яҙмышының бирелеүе "Түлле Мәмбәт"тән эпик сюжетлылыҡты талап иткән. Бында шәжәрәсенең баштан аяҡ билдәле бер тенденцияны алға һөрөүенең дә, атап әйткәндә, данлыҡлы Үҫәргән ҡәбиләһе составында ҙур ыҙалыҡтар менән тамыр йәйеп ебәреп ырыу хасил итеүгә ирешкән ырыҫлы һәм түлле тармағының шул данды ишәйтеүгә тос өлөш индереүен иҫбатларға тырышыуының да өлөшө ҙур.

Мәмбәт шәжәрәсеһенең сюжет ҡора белеүе иһә, фольклор ғилемендә шартлы рәүештә "тормош-көнкүреш әкиәттәре" тип йөрөтөлгән халыҡ новеллаһына таянып, үҙ аллы йәшәү юлына баҫҡан көнсығыш сәсмәүере менән танышлығын таныулы итә. Ә уларҙың сюжеты береһе осланып бөтөр бөтмәҫтән, уға – икенсеһе, икенсеһенә – өсөнсөһө, ...., бүтәненә – башҡаһы, тартма эсендә тартма тултыртып, бөтәһен дә бер йоҙаҡ менән бикләгән кеүек, эстән тағылышып килгән тематик мотивтар ойошоуҙан хасил була. Һәм шуныһы: шулай үҙ-араһы бәйләнештә торһалар ҙа, "йоҙағын" ас ҡына – ул мотивтар тулы автономияға эйә була. Ошо хоҡуғын файҙаланып, улар үҙ аллы әҫәр ойоштороусы мөстәҡил сюжет статусын алыуға ла һәләтле. Ғәрәптең мәшһүр "Мең дә бер кисә"һе, һиндтарҙың "Панчатантра"һы менән "Шукасаптати"һы, фарсының "Тутыйнамә"һе, мәҫәлән, ана шундай "мөстәҡил" сюжеттарҙың билдәле бер принципҡа, хронология эҙмә-эҙлелеге, тема, персонаждар уртаҡлығы һ.б. йәһәтенән, бер системаға килтерелеп, уҡмаштырылыуынан барлыҡҡа килгән.

## 8. "Ҡыҙ намыҫы – ил намыҫы" икәнен раҫлаусы эпостар

"Тарғын менән Ҡужаҡ", "Кәртә Мәргән", "Маҡтымһылыу", "Мәргән менән Маянһылыу"– тормош-көнкүреш эпостары төркөмөндә, асылда, үҙенә бер башҡараҡ цикл тәшкил итә. Сөнки ундағы ваҡиғалар, персонаждар-ара мөнәсәбәттәр ғаилә-көнкүреш юҫығында башлана ла ырыу-ара мөнәсәбәттәр һәм сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш юҫығына күсерелә. Һөҙөмтәлә, тотош цикл бер аяғы менән тормош-көнкүреш эпостары төркөмөндә баҫып торғандай була. Уларҙың бөтәһенең дә сюжеты "Ят бауыр урлаған ҡыҙҙы ҡотҡарыу" мотивына ҡоролған. Шуға ла был әҫәрҙәрҙе идея уртаҡлығы берләштерә. Ә ул идея ҡыҙ намыҫы – ил намыҫы тигәндән ғибәрәт. Әммә ҡыҙ урлау мотивының нигеҙләнеше һәм ошо мотив менән билдәләнгән конфликттың хәл ителеше йәһәтенән уларҙың һәр береһе оригинал әҫәр булып ҡала. Быға

ҡыҙҙың урланыу фактына, уны ҡотҡарыу мәсьәләһенә мөнәсәбәт, асылда, сюжет кимәленән ҡарағанда, әлеге уртаҡ идеяға төшөнөү-төшөнмәү йәһәтенән персонаждарҙың төркөмләнеше лә ныҡ булыша..

"Тарғын менән Ҡужаҡ" һәм "Мәргән менән Маянһылыу" эпостарын алып ҡарайыҡ. Ике эпоста ла, башҡорт ҡыҙын һоратып, уның атаһынан ҡәнәғәтләнерлек яуап ала алмаһа ла, килмешәк егет маҡсатына баш тартмай: ҡыҙҙы урлап алып ҡаса. Бында үҙен һанға һуҡмау арҡаһында, уның сәмләшеүе лә билдәле роль уйнауы ихтимал. Бынан тыш, тағы ла мөһимерәк бер фактор бар. Ул – ғашиҡ булыу факторы. Нуғай ханы Маянһылыуҙы яу менән килеп ала. Яу менән килеп яуларлыҡ булыуы Маянһылыуҙың хан тиклем ханды ла ғашиҡ итерлек сифаттар эйәһе икәнен аңлата. "Тарғын менән Ҡужаҡ" эпосында иһә ҡыҙҙың ғына түгел, егеттең дә шундай мөмкинлектәре бар. Быға беҙҙе Аҡйондоҙҙоң атаһына мөрәжәғәте һәм, унан кире яуап ишеткәс, икәү-ара һөйләшеп ҡасып китергә ҡарар ҡылыуҙары төшөндөрә.

"Маҡтымһылыу" менән "Кәртә Мәргән"дә ҡыҙ урлау башҡасараҡ нигеҙләнә. Дөрөҫ, икеһендә лә ҡыҙ урлаусы яу менән килә. Ошолай итеүенең мәғәнәһе лә, әле әйтелгәнсә. Әммә улар икеһе лә һоратып, ҡыҙ атаһынан ниндәйҙер яуап алып та тормаҫтан, ҡыла был яуызлыҡты. Ә был уларҙың, исем өсөн булһа ла, йоланы һанлай белмәүҙәре, ҡараҡтарса эш итеүҙәре тураһында һөйләй.

Конфликттың хәл ителеше шуның менән ҡатмарландырыла: "Маҡтымһылыу", "Тарғын менән Ҡужаҡ", иртәктәрендә атай кеше урланған ҡыҙы артынан ҡыуырлыҡ батыр таба алмай интегә. Тимәк уның яғы уғры ят бауыр менән алышырлыҡ батыр йөрәкле егеттәргә ҡытлыҡ кисерә. Ҡыҙ урлаусы артынан барырға батырсылыҡ итеүсе табылмауы – уғрының уларҙы шөрләтерлек кеше булыуын әйтеү менән бер. Бына ошондай көсөргәнешле хәл иткес мәлдә, хәс тә әкиәттәге кеүек, ҡарамаҡҡа, бурысты үтәй алырлыҡ сифаты тойолмаған бер зат ҡына бәләгә тарыусы атаға ыңғай яуап бирә. "Маҡтымһылыу"ҙа ундай кеше ролендә фәҡир генә таҙ егет, "Тарғын менән Ҡужаҡ"та алтмышын уҙған Ҡужаҡ атлы ҡарт батыр сығыш яһай.

"Кәртә Мәргән" эпосында иһә ҡыҙҙы ҡотҡарыу мотивы айырыуса тәрән мәғәнәгә эйә. Сөнки был эште кеше аша түгел, ҡыҙ атаһы үҙе атҡара. Һәм нисегерәк атҡара әле!? Ҡыҙҙы урлаусы ҡалмыҡтың хануланының станына үтеп үк инеп, уны шунда хурлыҡлы рәүештә еңелергә мәжбүр итеп, ҡотҡара ул үҙ ҡыҙын.

Бына шулай килмешәк ҡулынан ҡыҙҙы ҡотҡарыу – илдең намыҫын һаҡлап алып ҡалыу идеяһы менән һуғарыла.

9. Иртәктәрҙә, ҡобайырҙарҙа һәм яҙма дастандарҙа ер яҙмышы хаҡында халыҡ уйланыуҙарының сағылышы

*а) Ере юктың – иле юк, Иле юктың – ере юк*

Был төркөсәлә бик тә үҙенсәлекле бер эпик ҡобайыр бар. “Күбәләк-Тиләү батырҙары” тип атала был эпос. Ул “Тәтегәс бей”гә лә, “Түлле Мәмбәт”кә лә, “Кинйәкәй”гә лә, “Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей”гә лә, “Заманалар ҡиссаһы”на ла оҡшамаған,. “Урал батыр” эпик ҡобайыры менән сағыштырып тораһы ла түгел. Әммә уларҙың барыһына ла был әҫәрҙе нык ҡына яҡынайтҡан бер билдә бар. *Ул да булһа ер проблемаһы.*

Эпостарыбыҙ өсөн уртаҡ булған ер проблема художестволы яҡтан уларҙың һәр береһендә үҙенсә хәл ителә. “Урал батыр” эпосының геройы, һүҙмә-һүҙ әйткәндә, кеше йәшәр ерҙе үҙе бар ҡыла. Бының менән генә сикләнеп ҡалмай, эшен ахырынаса еткереп, үтәлгән бурыс тойғоһо менән китә был донъянан. Һыу стихияһынан үҙе айырып алған шул ергә шифалы тере һыу, Йәншишмәнең һыуын, һирпеп, уны бар тереклек, шул иҫәптән, үҙенән һуң килер нәҫел-нәсәбе быуын-быуын йәшәрлек хәлгә килтереп китә. Ахырҙа үҙе лә ергә, дөрөҫөрәге ер биҙәгенә - Урал тауына әүерелә.

Тора хан заты, ҡайҙа теләһә, шул ерҙе иркенләп биләй алған, аҙаҡ ерҙе талаусылар менән алыша башлаған (“Кинйәкәй”). Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей – Сыңғыҙ хандан боронғо бабалары биләгән ергә ырыуының аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланыуын раҫлаттыра (“Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән Аҡ бей батшанан рөхсәт ала (“Тәтегәс бей”), ә башҡорттоң Төрөкмән-Ҡыпсаҡ ҡәүеме (Мең ырыуы) Волга түбәнендәге ерҙәренән яҙа: уларҙы, батша, тартып алып, Урта Европанан күсерелгән немец колонистарына бирә (“Заманалар ҡиссаһы”). “Һуңғы Һартай” эпосы элек тирә-йүндә дан тотҡан, хан баҫҡаҡтары менән иҫәпләшеп бармаған Ялыҡ бейҙең ахырҙа ғаиләһенән, еренән, иленән яҙып, нәҫел ебе өҙөлөп, байғош хәленә төшөүен бәйән итеп, ерһеҙҙе бына ни көтә, тип иҫкәрткәндәй була. Заманында сюжетлы ҡобайыр хәлендә булып (уның шулай булыуын: “Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт”, – тип башланған ҡобайырҙы хәтерләтеп, Ялыҡбейҙең тыңлаусыларға мөрәжәғәттәренән, һөйләмдәренең йыйнаҡ булыуынан ғына ла төҫмөрләргә була), беҙгә рус теленә ирекле ауҙарылмыш хәлендә генә килеп еткән берҙән-бер вариантын киренән шиғри теҙемдәр үлсәмдәренә күсергән вариант һәм версияларҙа ла был идеяға хилафлыҡ килтерелмәгән, киреһенсә, ул тәрәнәйтелә биргән (Был урында уның “Джалыҡ” (Роберт Паль), “Һуңғы Һартай” (Мәүлит Ямалетдинов), “Ялыҡ бей, Ҡармасан менән Сәрмәсән” (Әхмәт Сөләймәнов) тигән яҙма версиялары күҙ уңында тотола)[60].

“Ерһеҙ ҡалыу – илһеҙ ҡалыу” идеяһы айырыуса “Ек Мәргән” эпосында тетрәндергес итеп үткәрелә. Был иртәк шуныһы менән дә әһәмиәтле: ул – бер үк идеяның бер үк әҫәрҙә ике яҡлы асылышына

[60] БХИ: Яҙма ҡисса һәм дастандар. - 7-се том. - 178 – 241-се, 255 – 264-се б.

уңышлы миҫал. Шул үҙенсәлек әҫәрҙең үҙен дә, башҡа эпостарыбыҙ менән уртаҡ идеяһын да фәһемле итә. Төнөн баҫҡан яу бөтәһен дә хәл итә – ил дә китә ҡулдан, ер ҙә, уларҙы ҡурсалар ир заты ла ҡалмай, бөтәһе лә ҡорбан була.

Ере байҙың – иле бай,
Иле байҙың – биге бай;
Бик тигәне – дуҫ булыр,
Ят бауырға үс булыр,
Бай ил менән берләшер,
Дошман шуға көнләшер,
Илен туҙҙырмаҡ булыр,
Халҡын ул ҡырмаҡ булыр,
Үсен ҡандырмаҡ булыр,
Ерен һалдырмаҡ булыр...
Ере юҡтың – иле юҡ,
Иле юҡтың – ере юҡ;
Иле, ере булмағандың
Көн итерлек хәле юҡ.

Шуның өҫтөнә шул төнгө яуҙа имен ҡалған ике генә йәшлек яңғыҙ ир баланы имеҙер инәһе лә ҡалмай: ил-йортҡа килгән фажиғә ҡайғыһын күтәрә алмау сәбәпле, ул да әхирәткә китә. Ата-әсәнән дә, иле-еренән дә етем ҡалған ир бала мауглиға әүерелә. Шулай ҙа "Һуңғы Һартай" менән сағыштырғанда, "Ек Мәргән" иртәге оптимистик рухтараҡ. Өнөндә күреп белмәһә лә, төшөнә кергән атаһының кәңәшен тотоп, малай унан ҡалған яу атын яу ҡоралдарын ҡулына төшөрә. Ә былдай табыш симптоматик хәл. Ул - әле исеме лә булмаған ир баланың төшөндә атаһы ҡушҡан исеменән тыш, батыр тигән исемгә лә эйә буласағын көнэлгәре аңғартыуға хеҙмәт иткән сара.

***б) "Түлле Мәмбәт" эпосының, ере бөтһә, малы бөтә; малы бөтһә, дәрәжәһе бөтә башҡорттоң, тип иҫкәрткәне***

Башҡорт еренең иркенлеге һәм ахырҙа юҡ-бар хаҡҡа һатылыуы, дөрөҫөрәге, "Заманалар ҡиссаһы"нда йәшермәй әйтелгәнсә, тартып алыныуы, хәҡиҡәт булараҡ, "Түлле Мәмбәт" дастанында бөтә асылында асыла. Башҡорттоң ере шул тиклем иркен, хатта губернатор тиклем губернатор ҙа Мәмбәткә теләгән еренә нигеҙ ҡорорға рөхсәт итә. Ысынлап та, Мәмбәт тәүҙә Туҡ менән Соран ерҙәренә күҙ һала, унан – Эйек буйына, унан – Ирәндеккә...

Ошо уҡ әҫәрҙә, аҙаҡ ер һатыу һөҙөмтәһендә, килмешәктәр ҡулына эләккән ерҙең ҡәҙере лә, ҡото ла китеүенә, тәбиғи байлығының тәләфләнеүенә үкенеү һәм әрнеү ҙә белдерелә. Сынйырлы реакция (цепная реакция) һымаҡ, бер сәбәптең һөҙөмтәһе икенсеһе өсөн сәбәпкә әүерелеүе, уныһына – өсөнсөһө, өсөнсөһөнә – дүртенсеһе... тағылышыуына бәйле рәүештә, ғөмүмән, милләт яҙмышы хаҡында халыҡтың борсолоулы уй-

фекерҙәре әйтелә: “Йәйләүҙең аҙағы 14-се, 15-се йылдарҙа бөттө (Һүҙ ХХ быуат башы хаҡында. – Ә.С.). Иң башта ауылда башҡорттоң ере бөттө. Ере бөткәс, малы бөттө. Малы бөткәс, башҡорттоң йәне ярты: дәрәжәһе кәмене, бөттө. “Ере байҙың – иле бай” тигән һүҙ – хаҡ һүҙ. Күрҙек. Фәҡир дир:

Ер һатмағыҙ, башҡорттар,
Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ.
Һәммә мәғдән ерҙән сыға –
Ерҙең ҡәҙере беҙҙә юҡ...

Шулай итеп, яҙма дастан “Түлле Мәмбәт” Бала бәшнәк ҡәүеме яҙмышын бәйән иткән “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы” иртәгендә “Ер-һыу мән кеше көслө”, “Кешегә ер-һыу мән ғәм керә” кеүек һүҙҙәрҙә дөйөм юҫыкта дөйөмләштерелгән идеяны конкретлаштыра. Был проблема – бөгөн дә актуаль, бөгөн дә киҫкен тора..

# VI БҮЛЕК
# ТАРИХИ ЭПОСТАР

“Героик эпос – боронғо замандың халыҡ аңындағы поэтик сағылышы, художестволы фантазияла йәнләндерелгән тарих ул”[61]. Шулай тип яҙғайны күренекле фольклор һәм әҙәбиәт белгесебеҙ Нур Зарипов. Хаҡ һүҙ әйткән ғалим. Эпос һәм тарих тигәндә, тәүгеһенең тексы үҙгәрешһеҙ (статик хәлдә) ҡалған күренеш түгел, ә телдән-телгә, быуындан быуынға күскән һайын үҙгәрә, тулылана һәм юғалтыуҙар кисерә барған процесс күҙ уңында тотола. Сөнки заман башҡа – заң башҡа, утыҙ ике тештән сыҡҡан утыҙ икегә төрләнә: һәр кем, һәр быуын, һәр заман уға үҙ тамғаһын һалырға тырыша. Ауыҙ-тел ижадының башҡа жанҙарына йоғонто яһаған тышҡы факторҙар эпик ҡомартҡыларҙы ла аямай. Шуға ла, уларҙың тарихи темаға бағышланғандарында ла анахронизм – ҡотолғоһоҙ.

## 1. Ырыу-ара мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған эпик ҡомартҡылар

Борон-борондан халыҡ татыулыҡҡа, берҙәмлеккә ынтылған. Шуны именлектең гарантияһы тип белгән. Проблема шулай мөһим булғанға ла, уны халыҡ үҙенең ижадында, айырата әйткәндә, эпостарында сағылдыра барған. Был йәһәттән ырыу-ара мөнәсәбәттәр хаҡындағы әҫәрҙәр эпик ҡомартҡыларыбыҙ араһында айырым урын алып тора.

### *а) Кеше менән тәбиғәттең айырылмаҫ берлеген раҫлаусы эпос*

Ырыу-ара мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыусы эпик ҡомартҡыларыбыҙҙың беҙгә мәғлүмдәренең иң боронғоһо – “Уҙаҡ-Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы”.

Яҙма тарих бәйән итеүенсә, IX быуатта Аҙаҡ (Азов диңгеҙе – Ҡанҡа йылғалары араһында бәшәнәк (рустарса, печенегтар, ғәрәптәр – баджнаук, төрөктәр – беченек, көнбайыш Европала йәшәүселәр пацинака) тигән малсы ҡәүем йәшәгән. XII быуатта уҡ, башҡалар менән алыштар һөҙөмтәһендә, был ҡәүем тарҡала. Бер өлөшө ата-бабалары йәшәгән Уралға килеп һыйына. “Уҙаҡ-Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы” тигән ҡомартҡы ана шуларының яҙмышын бәйән итә.

Ҡарамаҡҡа, бер урында ҡыйырһытһалар, шул урынды ташлап, ҡайтыр өсөн һаҡлыҡҡа йәнә бер Ватаның булыуы – бәхет кенә, ата-бабалар иленә, тимәк, ғәзиз төйәккә юл алыу – изге эш. Әммә эпос ошо ҡуҙғалыштың сәбәбе һәм һөҙөмтәһен күрһәтеү аша шул бәхет менән шул изге эштең бәҫе ни тиклем ҡиммәт икәнен төшөндөрә. Ә уның сәбәбе – Бала бәшнәк тип аталған ырыуға үҙ ҡәүеме Оло бәшнәк тә, Баласуа тигән ят бауыр ҡәүеме лә көн күрһәтмәүе. Эпос башта уҡ бына

---

[61] Зарипов Н.Т. Тарих һәм эпос // БХИ:Эпос. 3-сө китап. – 6-сы б.

шулай ырыуҙар тарҡаулығын шелтәләй. Ә был шелтә төбөндә берҙәмлеккә саҡырыу ята.

Инде лә Уралға ҡарай ҡуҙғалыуҙың һөҙөмтәһенә килһәк, ул ифрат аянyслы булып килеп сыға: ырыуҙың юлға сыҡкан өлөшө ҡара киҙеүҙән ҡырылып бөтә. Юлда тыуған ҡуш исемле Уҙаҡ-Туҙаҡтың ата-әсәһе Йәноҙаҡ менән Уралбикә ниндәйҙер кимәлдә “Урал батыр” эпосындағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәне хәтерләтә. Йәнбирҙе менән Йәнбикә дейеү ҡиәфәтендәге әжәлдән “Кеше-маҙар булмаған, Килеп аяҡ баҫмаған, …Дүрт яғын диңгеҙ ураткан” “бер урынға”, йәғни билдәһеҙ ергә ҡасһа, Йәноҙаҡ менән Уралбикә – ҡанҡойошло ырыу-ара яулашыу һәм шунан тыш ҡара киҙеү рәүешендәге әжәлдән ҡаса. Тик уларҙан айырмалы рәүештә, билдәһеҙ урында түгел, ә Урта Уралға һыйынып ҡотолорға теләйҙәр.

Йәнбирҙе менән Йәнбикә ғәмәлдә ике уллы була, Йәноҙаҡ менән Уралбикә иһә – хыялда ғына ике балалы була. Асылда иһә, ике бишек, ике бышым, ике биләү, ике исем әҙерләп ҡуйһалар ҙа ике уллылыкты Хоҙа насип итмәй уларға. Әммә, улдары берәү генә булһа ла, ата-әсә уны игеҙәк ике улдарылай күрә.  Уларҙың был ҡарашы эпоста шуның менән нигеҙләнә: ике сабый тыуырына өмөт итеп, нимәне икешәр әҙерлнәгән, шуларҙың барһын да, хатта  хыялдағы игеҙәктәргә тәғәйенләнгән Уҙаҡ һәм Туҙаҡ тигән ике исемде лә шул бер ир балаға бирәләр. Донъя мифологияһында былдай феномен бармылыр-юҡмылыр, әлегә билдәһеҙ.

Ике эпосҡа ла хас шартлы оҡшашлыҡтар, нигеҙҙә, әле әйтелгәндәр менән тамамлана. Артабан иһә “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы” эпосы тик айырмаға баҫым яһағандай итә. Уландарын Йәншишмә һыуы артынан оҙатҡандан һуң, Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең яҙмышы билдәһеҙ ҡалһа, Урта Уралға килеп еткәс кенә, Йәноҙаҡ менән Уралбикә гүр эйәһе булып ҡуя.

Шул уҡ ваҡытта, әгәр сағыштырыуҙы тәрәнәйтә төшһәк, айырмалыкта ла оҡшашлыҡ табырбыҙ. Йәнбирҙе менән Йәнбикә ике уллы булһа ла, асылда, уның береһе, Шүлгәне – бар көйөнсә, юҡка тиң. Сөнки ул ата ихтыяры менән иҫәпләшмәй гел генә ул теләмәгән эште ҡыла торғас, ахырҙа бар кешелек, тереклек дошмандарының терәгенә әүерелә. Уның, башҡаса түгел, мотлаҡ шулай булыры башта уҡ прогнозлана: әҫәрҙең экспозиция өлөшөндә үк ул үҙенән кем үҫәрен иҫкәрткәндәй итә. Быға беҙ уның, ата һүҙен тотмай, тыйылған ҡанды эсеүенән үк  төшөнәбеҙ. Әгәр эпос Йәнбирҙе менән Йәнбикәне артабан да күрһәтһә, Шүлгәндең шундай яуызға әүерелеүен белеп, улар: “Юҡтың – аты юҡ”, – тип унан баш тартыр ине, моғайын. Уның ҡарауы, Йәноҙаҡ менән Уралбикә өсөн, киреһенсә, юҡ балаларының да аты ҡәҙерле. Эпосана шул турала ла һөйләй булыр.

Үҙ исеменән тыш, тыумаған игеҙәк туғанының да исемен күтәреп йөрөгән улы Уҙаҡ-Туҙаҡ һымаҡ Йәноҙаҡ ҡарт образы “Урал батыр”ҙағы Йәнбирҙе образы менән генә түгел, унең улы Уралдың образы менән дә ассоциациялашып ҡуйғылай. Үлем түшәгендәге Урал батыр уландарына изге теләктәр теләп, аҡыллы кәңәштәр бирә. Йәноҙаҡ иһә яңғыҙ улына шундай уҡ аҡыл өйрәтеп китә. Әҫәрҙең, финалынан мәғлүм булғанса, күп ыҙалар күреп, ир етеп, егет ҡорона ингән Уҙаҡ-Туҙаҡ үҙенә иш таба. Тимәк, ата васыяты ғәмәлгә ашасаҡ, ырыу тергеҙеләсәк.

Урал батыр тәбиғәтте юҡтан бар ҡыла, дөрөҫөрәге, бер төрҙөң икенсе төргә әүерелеү ҡануниәтенә таянып, һыу стихияһын еңеп, унан тере һәм йәнһеҙ тәбиғәт йәшәр өсөн шарт тыуҙыра. Тимәк, ул тәбиғәттең серен дә белә, телен дә белә. Ошо мотив “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы” эпосында ла урын ала, тик һүҙмә-һүҙ түгел, мәғәнәүи яҡтан ғына. Уҙаҡ-Туҙаҡ үҙен һыйындырған һәм туйындырған тәбиғәт менән – һин дә мин диалогҡа керә һәм серләшә. Ә тәбиғәт был эпоста телгә килеүсе йылға, ҡуян, урман, таш – Ер-һыу образында кәүҙәләнә.

Эпос Ер-һыуға мәдхиә уҡыу менән тамамлана:

Ер-һыу тәне – кеше ул,
Ер-һыу мән кеше көслө ул,
Ер-һыуға кеше мән* йәм керә,
Ер-һыуға кеше мән тәм керә,
Кешегә ер-һыу мән ғәм керә,
Ер-һыу кешенең ише ул,
Ер-һыуҙың ише – кеше ул.

### *б) Ырыуҙар таркаулығын шелтәләп, берләшеүгә саҡырыусы эпостар*

“Һуңғы Һартай” эпосында ла һүҙ тотош ырыуҙан бер генә йәндең имен ҡалыуы хаҡында бара һәм ырыуҙар берҙәмлеге мәсьәләһе күтәрелә. Әммә “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы”нан айырмалы рәүештә, ырыуҙың һәм ырыу башлығының башынан үткән ваҡиғалар хаҡында “Һуңғы Һартай” аннотация рәүешендә хәбәр итеү менән генә сикләнмәй, “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосынан күрмәксе, тигән һымаҡ, уны тасуирлап, тыңлаусы күҙ алдына килтерерлек дәрәжәлә йәнле итеп һүрәтләп үк бирергә тырыша. Бынығы – бер булһа, икенсенән, “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы” һәм “Бабсаҡ менән Күсәк” ише иртәктәрҙән айырмалы рәүештә, унда һүҙ ырыуҙарҙың ҡарымталашыуы хаҡында түгел, бер ырыуҙы икенсе илдең ханы нисек зил-зибәр килтереүе хаҡында бара. Шул ваҡиғалар был әҫәрҙә тасуирлап уҡ, “күрһәтеп үк” бирелә. “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының ҡыпсаҡ версияһына ҡараған (Сабирйән сәсән) вариантында иң башта, мәҫәлән, Ағиҙел буйын мәкам тотҡан, ун ике бей өҫтөнән

* Мән (һөйл.) – менән.

хакимлыҡ ҡылған һәм бик күп хандарҙан өҫтөн булған ("талай хандан артыҡ булған солтанаты") Мәсем тигән төрки затлы мосолман ханы йәшәүе, уның ҡулы аҫтында даны сыҡҡан дүрт батыр етәкселегендәге дүрт ырыу булыуы, ул заманда төрлө ҡәүемдәрҙең үҙ-ара ыҙғышып тороуы хәбәр ителә:

Мыҡтылары, (көслөләре. – Ә.С.) насарҙарын
(көсһеҙҙәрен. – Ә.С.) ороп-һуғып,
Үлтергән берен-бере хурлыҡ ҡылып.

Эпик поэманың тарихи мәғлүмәт биреүсе ошо өлөшө үҙенә күрә пролог хеҙмәтен үтәһә, артабан Мәсем йортона (иленә) бер яман арыҫлан эйәләп, мал-тыуар, әҙәми затты ҡыра башлауы тураһында һөйләгән өлөшө – экспозицияны хасил итә. Хан ораны буйынса, әлеге дүрт ырыуҙың Тимерҡотло, Тамьян, Бабсаҡ менән Ҡарағөләмбәт атлы бейҙәре (ә ундайҙар батыр иҫәпләнгән) килеп, ауға сығыуынан сюжет төйөнләнә.

Бабсаҡ атып үлтергән арыҫланды Ҡарағөләмбәт, мин үлтерҙем, тип мутлаша, йәғни кеше батырлығын үҙләштерергә маташа. Артабан ваҡиғалар драматик һәм трагик төҫ ала. Мутлығы фашланғас, Ҡарағөләмбәт арттан килеп, Бабсаҡтың билен өҙә ата. Ошо момент – фабуланы һүҙмә-һүҙ ҡабатлаусы сюжеттың иң көсөргәнешле урыны. Тап шул мәлде кульминация тип ҡарарға ла була.

Халҡыбыҙҙың йола хоҡуғы буйынса, йығылғанды түбәләү, арттан килеп һөжүм итеү, киҙәк бирешмәйенсә, йәғни йәрәбәләшмәйенсә, йәрәбәләшкәс, нәүбәт һаҡламайынса, дошманына ҡорал тоҫҡау, йығылғанды түбәләү – егетлек түгел, хаинлыҡ. Ошо ҡағиҙәне тотмаусыны халыҡ, хаин, тип кенә белә. "Тарғын менән Ҡужаҡ", "Ҡарас менән Аҡша" тигән эпостарыбыҙҙың геройҙары – ҡарт Ҡужаҡ һәм сәсән тигән даны сыҡҡан Ҡарас батыр йөҙөндә халыҡ тап ана шундайҙарҙы төбө-тамыры менән инҡар итеүселәр эталоны тип баһаланырлыҡ намыҫлы батырҙар образын тыуҙырған.

"Һуңғы Һартай" эпосында Ялыҡ бейҙең тәүҙә Мәңгү түрәнең ғәскәрен хурлыҡлы рәүештә тар-мар итеүе, шунан ирәйеп йәшәй башлағас, өлкән улы Ҡармасанды Ҡара Абыздың ҡыҙы менән никахлауы, Аҡһаҡ Тимер яуы ябырылыуы, уның менән алышта ике улы менән тотош ырыуын юғалтыуы еренә еткереп тасуирлана. Эпостың үҙәген "урманда ояһыҙ кәкүктең һаҡауланған сағында", Аҡһаҡ Тимер сиреүе "иҫәпһеҙ-һанһыҙ булып, ер ябып..., үлем дә ҡоллоҡ алып килә" тигән мәғлүмәт һәм шул мәғлүмәттең раҫҡа сығыуы биләй. Шуға күрә лә Ялыҡ бейҙең Аҡһаҡ Тимерҙе һәм уның "иҫәпһеҙ-һанһыҙ булып, ер ябып" килгән ғәскәрен "эттәр, эттәр!", "йылан саҡҡыры!", "урыны тамуҡта булғыр!", "әбрәкәй соҡоро һеҙгә ҡәбер!" ише әр һәм ҡарғыш һүҙҙәре атыуын аңлауы ҡыйын түгел.

Илбаҫарға ҡарата әр һәм ҡарғыш һүҙе әйтеү башҡа эпостарҙа ла осрай. “Тарғын менән Ҡужаҡ” иртәгендә Аҡса хан да, Ҡужаҡ батыр ҙа нуғай батыры Тарғынды “килмешәк” тигән атама менән нарыҡлай. Тарғын батыр был һүҙҙәрҙе, Аҡса хандан айырмалы рәүештә, ят батырҙың күҙ артында түгел, күҙе алдында уҡ әйтә. Улай ғына ла түгел, уны ишәккә тиңәй. Аҡса хандың ҡыҙын урлап алып киткән нуғай батырын ҡыуып еткәс, уға:

Эй, Тарғын, һин – килмешәк,
Ат янында һин – ишәк! –

тип өндәшә[62]. “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының Ҡыпсаҡ версияһының Сабирйән сәсән Мөхәмәтколов варианты буйынса, Ҡарағөләмбәт хаин ырыу башлығы тип таныштырыла. Ырыуы хаин булғас, Тарғын кеүек, уның да ҡара эсле бәндә булыуы аңлашыла. Тик Тарғынға бирелгән яман ҡылыҡһырламанан айырмалы рәүештә, уның тиген кеше түгеллеге көнэлгәре үк, йәғни йырткыс януарға һунар башланған-сы, Бабсаҡты атып йыҡҡансы уҡ, әйтелә. Бына ни тиелә уның хаҡында:

Дүртенсе ырыу аты хаин булған...
Башлыҡтары Ҡарағөләмбәт батыр булған[63].

Ә инде Ҡарағөләмбәт көнэлгәре үк үҙенә бирелгән әр һүҙле баһаламаны енәйәти эше менән “аҡлағандан” һуң, эпос уны халыҡ исеменән яманлай. Тәүҙә ул, Ҡужаҡ батыр Тарғынды әрләгәндәге кеүек, ишәккә сағыштырыла (“ҡоторған ишәктәй баҡыра, ти”). Шунан уның хаҡында былай тигән һүҙҙәр килә:

“Залим хаин ҙур шомлоҡ ҡылды”, – тиеп,
Әҙәм булған бары ла аптырай, ти[64].

Ил талау, әҙәм һуйыу – Аҡһаҡ Тимер өсөн дә ғәҙәти хәл. Уның был булмышы хаҡында ла көнэлгәре хәбәр ителә. Ялыҡ бейгә был хәбәр психологик яҡтан әҙерләнергә форсат бирә. Аҡһаҡтан ул изгелек көтмәй. Әммә Ялыкты әрнеткән, уның этлектәре генә түгел. Уны айырыуса әрнеткәне шул: хәленең мөшкөл икәнен белә күрә, башҡорттоң башҡа ырыуҙары уны яҡлашмай.

“Бабсаҡ менән Күсәк” эпосында ла, “Ек Мәргән”дә бәләгә тарыған ырыу башлығын йә ырыуҙың үҙен ҡурсаларға тырышыусы булмай. Быны бөгөнгө аң менән генә аңлатыу мөмкин түгел.

“Бабсаҡ менән Күсәк”, “Ек Мәргән”, “Уҙаҡ менән Туҙаҡ – Бала бәшнәк ярсығы”, “Һуңғы Һартай” ише эпостарҙа әйтелеүенсә, тотош ырыу ҡырыла, бары бер генә йән эйәһе имен ҡала. Тимәк, ул ырыуҙар бер үк трагедия кисерә. Әммә ул трагедияның асылы бер түгел. Тәүге өс

[62] БХИ. 5-се том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). – 200-се б.
[63] БХИ. 4-се том: Эпос. – 320-се б.
[64] Шунда уҡ. – 334-се б.

эпос бәйән итеүенсә, имен ҡалған яңғыҙ йән – ерҙә яңы ғына йәшәй башлаған йә, үҫмер дәүерен үтеп, егет ҡорона етеп килгән быуынды алғы планға сығара. Тимәк, уларҙың түл йәйер көнө алда. Шуға күрә лә ул өс ир бала үҙҙәренең был донъяла барлыҡтары менән үк үҙ ырыуҙарының киләсәкле икәнен, тимәк, өмөттөң үҙен кәүҙәләндерә. Уҙаҡ-Туҙаҡ иһә шул өмөттө бойомға ашырыу йүнәлешендә ғәмәли эш күрә башлауға ла өлгөрә: ул кәләш ала. Тимәк, башҡаларына ла үҙҙәренә иш табыр көн оҙаҡламай тыуасаҡ. Ә бына Ялыҡ бей менән эш башҡараҡ. Уландары түгел, үҙе генә имен ҡала. Әҫәрҙә һүрәтләнгән дәүерҙә үк меҫкен байғош хәлендә: ҡартайған, етмәһә кеше көнлө. Уға ер өҫтөндә йәшәргә һанаулы ғына ваҡыт ҡалған. Ул үҙе лә быны яҡшы аңлай: “Яҙмышым мине ғүмеремдең эңеренә килтерҙе. Миңә хәҙер бер ни ҙә кәрәкмәй... Хәҙер мин мөнйөп ташланған һөйәктәрҙе йыйып йөрөүсе эйәһеҙ эт, өңөн юғалтҡан бурһыҡ кеүекмен”[65]. Ике улының да бер тиңдән яу ҡырында һәләк булыуы – Ялыҡтың пар ҡанаттарынан мәхрүм ҡалауы, өмөттәренең һүнеүе ул. Әммә, төшөнкө уйҙарына бирелгәндә лә, Ялыҡ бей ил хәстәрен онотмай. “Ләкин белегеҙ: мин һуңғы яу булмам!”[66] – ти ҡарт батыр өмөт һәм ышаныс менән.

Уның был һүҙҙәре быуаттар уҙғас, бер ырыуҙы ғына түгел, тотош халҡын азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәргән Салауат Юлаев (1754–1800), осорға хас тарихи сәбәптәр арҡаһында, еңелеп тотҡонға юлыҡҡас, уның тураһында халҡыбыҙ сығарған йырҙағы

Салауат китте, тип шатланмаң,
Унан ғәййәр тыуыр донъяға![67]

тигән һүҙҙәрҙе хәтерләтә. Осраҡлы түгел был.

“Һуңғы Һартай”, “Аҡай яуы”, “Юлай менән Салакуат” ише эпостар ҙа трагик тамамланышлы. Шулай булыуыы был трагедияларҙың сәбәптәре хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Ә уның сәбәптәре – ырыуҙар тарҡаулығы. Шулай итеп, ырыуҙарҙың тарҡалыуын шелтәләү аша был эпостарыбыҙҙа татыулыҡҡа, берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы һалынған.

***в) Ырыу данын арттырыусы сәсән рухлы батырҙар***

Ырыуҙар яҙмышы мәсьәләһе “Күбәләк-Тиләү батырҙары” ҡобайыры өсөн дә актуаль. Башҡа эпостарҙан айырмалы рәүештә, был ҡобайырҙа тәүҙә ырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүе мәсьәләһе яҡтыртыла, уларға нигеҙ һалған һәм улар үҫтергән шәхестәргә мәдхиә уҡыла.

“Күбәләк-Тиләү батырҙары” тигән яҙма дастан һүҙе:

Борон-борон, бик борон:
Бер әҙәм булмаҫ борон,
Бер әҙәм килмәҫ борон,

[65] Күрһәтелгән китап. – 293-сө б.
[66] Шунда уҡ.
[67] БХИ/Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлат. бир. Салауат Галин; Яуаплы мөхәрр. Ким Әхмәтйәнов. – Өфө: БКН, 1997. – Йырҙар. I китап. – 60-сы б.

Берәү эҙ һалмаҫ борон,
Берәү юл һалмаҫ борон,[68] –

тип, беҙҙе хронология күҙлегенән иң боронғо дәүергә (Uhr Zeit-ҡа): әллә “Урал батыр”, әллә “Аҡбуҙат”, әллә “Заятүләк менән Һыуһылыу” кеүек эпостарыбыҙҙың геройҙары йәшәгән дәүергә алып киткәндәй була.

Артабан тасуирланған бай пейзаж картинаһы иһә беҙҙе Урал батыр заманынан күпкә бирерәк дәүергә күсергә мәжбүр итә. Сөнки тирә-яҡта төрлө-төрлө ҡош-ҡортҡа бай ҡара урманлы,ҡая-ташлы ил, йәғни ҡасандыр Урал батыр бар иткән тәбиғәт тасуирлана. Әммә артабан ошо ергә Күбәләк менән Тиләү атлы ике ағай килеп сығыуы, уны үҙләштереп, түл йәйеүе хаҡындағы мәғлүмәт беҙҙе йәнә дәүер билдәһеҙлеге тойғоһо кисерергә мәжбүр итә. Тик Тиләүенән нисәнселер быуында мәшһүр Ҡобағош сәсән тыуып[69], унан – Айбағыш менән Көнбағыш, Айбағыштан – Килдеш батыр, Көнбағыштан – Ҡушкилде батыр, Ҡушкилденән Ҡарас атлы яугир-сәсән тыуыуы хаҡындағы мәғлүмәткә ирешеүебеҙ була – әҫәр иңләгән эпик дәүер ярайһы ғына асыҡлана, әммә бик күпкә ҡыҫыла төшөүенә төшөнәбеҙ. Ни өсөн тигәндә, беҙгә Ҡобағош сәсән – XV быуат аҙаҡтарында – XVI быуаттың урталарында, Ҡарас сәсән иһә XVI–XVII быуат араһында йәшәгән тигән фекер ҙә мәғлүм[70].

“Күбәләк-Тиләү батырҙары” әҫәре – асылда, ҡобайырҙар шәлкеменән ғибәрәт. Ике ағайҙың ер табыуы, уны үҙләштереп, ике ырыу булырлыҡ түл йәйеүе – нигеҙҙә ике мотивты (йәғни микросюжетты) хасил итә. Әммә улар сюжет булып йәйелеп китә алмаған.

Һүҙ Ҡобағош темаһына күскәс, уның зирәклеге, әүлиәлеге данлана, уландарының ҡаршы килгән яуға ҡаршы торорлоҡ, дауҙы кире бororлоҡ булып үҫеп етеүен хәбәр итеп, уларҙың атай-олатайҙар юлын ҡыуыуына ҡыуаныс белдерелә. Ҡобағыштың бүләһе Ҡарас та, уға оҡшап, яу килһә – яубаҫар батыр, дау килһә – даубаҫар сәсән булып етешә.

Ҡыҫҡаһы, был ҡобайырға “атанан күргән – уҡ юнған, инәнән күргән – тун бескән” тигән идея һалынған. Быға, Ҡобағоштоң шәжәрәһе менән танышҡанда уҡ, төшөнөргә була.

Ҡобағош (та) батыр, буй етеп,
Матур тормош ҡорған, ти.
Айбағыш менән Көнбағыш –
Ике улы тыуған, ти...
Айбағыштан тыуған, ти,

---

[68] БХИ. 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. – 371-се б.
[69] Мөхмәтша Буранғолов яҙмаһы буйынса Ҡобағош – Мең ҡәбиләһенән сыҡҡан (Буланғолов М. Сәсән аманаты. - 39 – 40-сы б.).
[70] Хөсәйенов Ғ.Б. Заман,. Әиәт. Әҙип. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тәнҡит мәҡәләләре. – Өфө: БКН, 1978. – 50-52-се б.

Килдеш тигән дан батыр.
Барыһы бер ҡандан бит,
Олатаһына тартыр.
Килдеш тә, һис ҡалышмай,
Тамыр йәйгән, ти, ергә,
Ҡарас тигән сәсәнде,
Ҡарас тигән батырҙы
Бүләк иткән ул безгә…

Ҡарас сәсән дә, һынсыл да була. Яу баҫырын ул алдан һиҙеп тора. Ҡаҙаҡтың данлы батыры Аҡшаның барымтаға килерен дә алдан һиҙенә. Кем дә кем "Аҡса менән Ҡарас" ҡобайыры йә ошо ике батыр хаҡындағы тарихи риүәйәт менән яҡшы таныш, шул кеше ҡаҙаҡ батырының бик тәккәбер ҡыланыуын хәтерләй торғандыр әле. Аҡса үҙенең шәжәрәһенең данлы булыуы, үҙенең еңелеү белмәүен әйтеп:

"Аҡша батыр, тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа инде аҡылдан"[71], –

тип маҡтана. Әле һүҙ барған ҡобайырҙа иһә Ҡарас ауыҙынан "киҙәк" һүҙен ишеткәс тә, Аҡсаның күҙе аҡайыуына ("Киҙәк!" – тигәс батырым, Аҡса күҙе аҡайған..."), шул һүҙ йөрәген телеп үткәндәй, артҡа ҡаҡайыуына, йөҙөнә үлек төҫө кереүенә генә иғтибар иттерелә. Шуның менән сәсән ҡаҙаҡ барымтасыһының Ҡарас әйткән бер ауыҙ һүҙҙән дә бәлтерәп төшөүен психологик яҡтан нигеҙле итеп бирә алған.

## 2. Шәжәрәләргә теркәлгән эпик сюжеттар

Үҙендең сығышыңды, ырыу, ара (аймаҡ, тармыт) һәм уларҙан сыҡҡан күренекле шәхестәр хаҡында легенда, риүәйәттәрҙе белеү, мәғлүмдер ки, аҫаба башҡортҡа фарыз булған[72]. Шәжәрә яҙыусылар ике ҡуянды бер юлы тоторға итеп, шул талаптарға яуапты комплексniet бирергә тырышҡан. Һөҙөмтәлә башҡорт шәжәрәләренә, нәҫел-нәсәптең генеалогияһы ғына түгел, тарихы ла, мәшһүр шәхестәргә бәйле сюжетлы әҫәрҙәр ҙә килеп ингән.

***а) Шәжәрәләрҙә нәҫел башын күренекле шәхестәргә, изгеләргә ялғау традицияһы***

Шәжәрәләрҙең композицияһында шундай бер үҙенсәлек күҙәтелеүсән: улар, ғәҙәттә, зат-зориаттың башын йә бәйғәмбәргә, йә оло хакимға, йә берәй Изге әҙәми, мифик затҡа алып барып ялғаусан. Ҡыпсаҡ йәки Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһе нәҫел-нәсәп башын Лоҡман Хәким тигән легендар изгегә ялғай. Юрматы шәжәрәһе тәүҙә Сынғыҙ хан заманында йәшәгән ырыу башы, "асыл юрматыларның

[71] БХИ. 5-се том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). – 218-се б.
[72] Өмөтбаев М. Йәдкәр. – 190-сы, 278-се б.

уғланларындан” Тухал Шәғәли бейҙе, Үҫәргән ырыуы менән Табын ҡәбиләһенең шәжәрәләре нәҫел башын Сыңғыҙ ханға яҡын йөрөгән заттарҙан, тәүгеһе - Мөйтән бейҙән, икенсеһе Майҡы бейҙән башлай. Ҡыпсаҡтар Лоҡман Хәким бәйғәмбәрҙе үҙҙәренең нәҫел башы тип иҫәпләй.

*б) “Беленеҙләр, ғафил булмаңызлар…”*

“Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының шәжәрә версияһында сюжет сиктәрендә тасуирланған хәл-ваҡиғалар аннотация стилендә аҙаҡ яңынан ҡабатлана. Шулай итеү эпос геройына тиклем һәм унан һуң булған ваҡиғалавр хронологияһына аныҡлыҡ индереүгә лә булыша, бер үк ваҡытта бәйән ителгәнгә һығымта, эпилог вазифаһын да үтәй.

Мең ҡәүеме шәжәрәһе баштан-аяҡ тиерлек нәсихәти пафослы булыуы менән айырылып тора. Бер туған ике Килембәттең, юҡ сәбәптән сәбәп табып, үҙ-ара ҡан ҡойошҡа тиклем барып етеүҙәре хаҡында бәйән итеп, шәжәрә татыулыҡҡа саҡыра. Ере бына шулай әҙәм ҡаны менән һуғарылһа ла, Ҡанзафар бейҙең: *“Эй, яранлар, беҙ мындин китеп, мәкам тота алмабыҙ”*, – тип халҡын, нуғайҙар ҡотҡоһона бирелеп, Тын (Дон), Кубань яҡтарына китеп, таралыуҙан ҡурсалап алып ҡала. Ырыу башының ошо һүҙҙәренә торған ер генә түгел, тыуған ер булғанға ла, ул алыштырғыһыҙ тигән идея һалынған. Ә инде Мең ҡәүеме шәжәрәһендәге “Беленеҙләр, ғафил булмаңызлар, ғаҡыллы аңлар, ғаҡылсызның бер ҡолағындан кереп, берсендән чығар. Имам Әғзам хәзрәтләре әйтмәдеме, укун, йәғни нәселден белмәгән кеше (шәжәрәһен, тарихын белмәгән кеше. – Ә.С.) бадшаһ алды байҡай алмаған. – Ә.С.) хакимчылыҡҡа ярамас” тигән һүҙҙәр классикаға теркәлмәле нәсихәт.

***в) Шәжәрәләге эпик сюжеттарҙа йола күренештәренең сағылышы, башҡа жанр өлгөләренең файҙаланылышы***

Стиль йәһәтенән Юрматы шәжәрәһе йәки “Тәтегәс бей” әҫәре бик үҙенсәлекле. Ул, “мин” исеменән Тәтегәс бей ауыҙынан бәйән ителә. Әммә, бынан сығып, мотлаҡ бей үҙе йә ул һөйләгәнде бүтән кеше яҙа барғандар, тип уйларға ярамай. Был бәйән итеүҙә ҡулланыла торған стиль алымы ғына. Беренсе заттан тарих бәйән итеү стиле традиция буйынса борондан килә. “Һуңғы Һартай” йәки “Ялыҡ бей”, “Аҡай яуы” кеүек яҙма эпостар – шуға миҫал. Хатта ташҡа ла ошо стилдә хикәйәсенең үҙен төп герой урынына ҡуя. Әҫәрҙең “мин” исеменән бәйән ителеүе уның шаһитлау, раҫлау башланғысын көсәйтеүгә булыша. Тәтегәс бейҙең образы шул алым һәм бик тә уңышлы һайлап алынған реаль факттар ярҙамында тыуҙырыла. Иң әүәл ул беҙҙең хәтерҙә дәүләтсә фекер йөрөтөүгә маһир бей сифатында урын ала. Быға беҙ, хатта текстуаль мәғлүмәт бирелмәһә лә, яҡшы төшөнәбеҙ. Ҡаҙан ханлығы ҡолатылғас, һәм Аҡ бей батшаның Рәсәй менән берләшергә саҡырыусы өндәмәләре менән танышҡас та: “Батша ҡайҙа – мин шунда!” - тип тота килеп Ҡаҙанға

сапмай. Башта “ни эшләргә?” тигән һорау алдында ҡала. Быны беҙ унын: “Башҡаса сараһ булмағас”, - тип, Ҡаҙанға юл алырға йыйыныуынан аңлайбыҙ. Шул һүҙенә тиклем уйҙары менән һыйыныр бүтән варианттарҙы барлап ҡарағанына ла төшөнөүе ҡыйын түгел. Бәлки, ул әгәр ҙә ҡаҙаҡ күрше менән берләшеп ҡараһаҡ? Әгәр ҙә Ҡырымға йә төрөктәргә тартылғанда? Юҡ. Улай итһәк тә, булмай. Былай итһәк тә, булмай. Улар беҙҙе йотоуы ихтимал. Дини, йолаһы, теле беҙҙекенә оҡшамаған рустар менән берләшкәндә, Иван батшаның өндәмәһендә әйтелгәнсә, динебеҙ, йолабыҙ, телебеҙ, ер биләүге аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙ ысынлап та һаҡланып ҡалмаҫмы? Шулай тип уйланыуы ла ихтимал Тәтегәстең. Һәр хәлдә, Тәтегәс, уныһын, быныһын уйлап, бизмәнгә һалып үлсәгәндәй итеп кенә аҙым яһаусан зирәк аҡыллы уҙаман булып хәтерҙә ҡала. Ырыу яҙмышы бизмәнгә һалынғанда, шулай итеүе уны дәүләтсә фекерләүсе бей итеп күҙалларға булыша ла инде.

Тәтегәстең дәүләтсә фекеләүсе икәнен Рус дәүләте менән берләшеү миссияһын уңышлы атҡарыуы, иленә ҡайтып ингәс, йола буйынса, йыйын йыйып, халкы алдында иҫәп-хисап тотоп, хәҡиҡәтте йәшермәй, һөйләүе, үҙенә күрә референдум үткәреүе, тағы бер тапҡыр раҫлай. “Ай, ярандарым! Без Аҡ бей бадишаһҡа бардыҡ, баш салдыҡ, ҡол булдыҡ”, – ти ҙә күпме яһаҡ түләнергә тейеш икәнен әйтеп бөткәс: “Имде сез дә ҡабул ҡыламусыз?” – тип һорай, йәғни Рәсәй менән берләшеү де-факто булһа, үҙенсәлекле референдум үткәреп, шуны де-юре итергә теләй. Ырыуҙаштары бер тауыштан: “Яхшы, барчаларымыз жәнделдән ыразый* булдыҡ”, – тип яуап бирә.

Әле һүҙ барған “Тәтегәс бей” әҫәрендә Чүлкә атай тураһында мәғлүмәт бар. Яңы ергә килгәс, хан әмере буйынса ырыу башлығы Шәғәле бей унын ҡәберен тәрбиәләп тора. Ҡәберҙе асһалар, стеналары кирбес менән буралған гүрендә ҡара сәсле, ҡыҙыл йөҙлө егет хәс тере кеше кеүек ята. Ҡәбер ташына “Чүлкә ата” тип унын исеме уйылған була. Был исем ҡот ҡойғанда уҡыла торған ҡара доғаның бер ваиантында телгә алына:

Ҡорҡот атай, ҡотоң бир,
Ҡорҡот атай, ҡотоң бир,
Чүлкә атай, ҡотоң бир,

Шәғәле бей Чүлкә атаны олоҡлап, уға кәшәнә төҙөй.. Был миҫалдар шундай фекергә килтерә. Тимәк, беренсенән, башҡорттарҙа Ҡорҡот ата менән бер тиң Чүлкә ата культы күҙәтелгән; икенсенән, боронғо бабаларыбыҙ мысырҙар һымаҡ, изгеләр мәйетен серемәҫлек итеп һаҡлай белгән; өсөнсөнән, уларға кәшәнә төҙөү традицияһы ла мәғлүм булған.

Тәтегәс бей хаҡындағы сюжетта Юрматы ырыуы бейе Чачлы Дәрүиштең ҡыҙы Борнаҡ (Мороно аҡ), Йәдкәр тигән ике ир балаға әсәй була. Ни өсөн Борнаҡ тигән исем ҡушалар? Был һорауға әҫәр былай тип яуап бирә: “…уғлы-кызы юҡ сәбәбдин [дөрөҫөрәге, тыуған бере үлеп

торғанлыҡтан, сираттағы улы тыуғас та, уны]  борны  аҡ атның ҡуйнына салып, ат исемен бирәләр"[73]. Шулай итеп Тәтегәс хаҡындағы эпик сюжет, бала тормағанда атҡарыла торған боронғо йола менән таныштыра. Яңы тыуғанын тәҙрә үтә һатып алыу йә этаяҡҡа һалыу хаҡындағы мәғлүмәттәргә быныһы – иш янына ҡуш.

Шәжәрәләргә героик эпос, ҡобайыр, йыр, афористик ижад, хатта йола фольклоры элементтары ла иркен үтеп инеүе был яҙма ҡомартҡыларҙы йөкмәтке һәм форма йәһәтенән халыҡсан итеүҙә мөһим роль уйнай.

### *г) Шәжәрәләргә эпос сюжеты теркәлгәне*

Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһенең үҙәгендә Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ ырыуҙары, шул иҫәптән ҡарағай-ҡыпсаҡтар араһында киң таралған "Күсәк бей" йәки "Бабсаҡ бей менән Ҡарағөләмбәт бей" эпосының төп мотивы һәм сюжет һыҙығы ята.

Шуныһы характерлы: эпос версияларынан айырмалы рәүештә, шәжәрәлә был сюжет ваҡиғаларҙы бик тә реаль, тормошта булыуҙарына шик ҡалдырмаҫлыҡ итеп сағылдыра.

Мең ырыуы шәжәрәһендә схематик хәлдә генә булһа ла, "Ҡанзафари бей заманы – ике Килмәт низағы" тигән эпик сюжеттың бер версияһы теркәлгән.

Яҙма һәм баҫма сығанаҡтарҙа башҡа ырыуҙарҙың шәжәрәләрендә бирелгән йә телгә алынған сюжеттар хаҡында ла мәғлүмәттәр осратырға мөмкин. Шундай эпик характерҙағы сюжеттар нигеҙендә ижад ителгән әҫәрҙәр ҙә бар. "Кинйәкәй" дастаны, мәҫәлән, Тора хандан ҡалған бер ҡәүемдең яҙмышын бәйән итә. Уға шул ҡәүемдең шәжәрәһе нигеҙ булғанға оҡшай. Унда генеалогик таблица элементтары төйөрөм генә һаҡланған. Әҫәрҙе теркәүсе, һүҙҙе үҙенән башлап, шулай ти:

Атым бәнем Мөхәмәдулла,
Атам булған Әхмәдулла,
Ҡушаматым[74]) – Дауыти,
Илем ошбу волостан,
Үҙем башҡорт йыныстан.

"Бабсаҡ менән Күсәк" эпосының Ҡыпсаҡ версияһының шиғри вариантын Сабирйән сәсән Мөхәмәтколов ижад итеүе мәғлүм[75]. Был әҫәрҙе яҙғанда, эпостың телдән таралған варианттары менән бер рәттән, ул сәсән уның яҙма вариантын да файҙаланған булырға тейеш. Ошо традицияны яҙыусыларыбыҙ ҙа дауам итә. Мәҫәлән, Мең ырыуындағы ике

[73] Башҡорт шәжәрәләре. – 28-се б.
[74] Ҡушаматым – псевдонимым.
[75] БХИ.4-се том. Эпос. – 319-344-се, 382-се б.

Килембәт хаҡындағы сюжетты Кирәй Мәргән үҙенең “Бөркөт ҡанаты” романында[76] һүрәтләнгән ваҡиғалар контексына айырылғыһыҙ мөһим бер эпизодты тасуирлауға оҫта файҙалана.

“Сура батыр” эпосының башҡорт версияһының да тулыраҡ бер варианты беҙгә шәжәрәгә теркәлгән хәлдә килеп еткән.

### 3. Хандар замананы хаҡындағы эпостар

Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары араһында хандар заманын, шул хакимдарҙың тормошон, кәсебен сағылдырғандары айырым бер төркөмсә хасил итә. Дөрөҫ, башҡа төркөмдәргә ҡараған эпостарҙа ла хандар күренгеләп ҡала. Мәҫәлән, “Аҡбуҙат” эпосының геройы Һәүбән батыр тирә-йүнде дер һелкетеп, ҡул аҫтындағы халыҡты интектереп тотҡан Мәсем ханға ҡаршы яу аса. “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосында ла бер хаким Мәсем хан тип исемләнгән. Эпоста уның хаҡында “мосолман хан, төрки заты”[77] .“Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосының да төп ҡаһарманы Заятүләк берсә – Сәмәр хандың, берсә – Һарымырҡыс хандың, берсә – Сыңғыҙ хандың, берсә Бошман хандың улы тип таныштырыла[78]. Ә инде “Йософ менән Зөләйха” “Буҙйегет”, “Таһир менән Зөһрә” кеүек дастандарҙа төп ҡаһарман йә уның йән һөйгәне, йә улар икеһе лә хан ҡанынан яралған кешеләр итеп күрһәтелә[79].

Хан ғына түгел, беҙҙең эпостарыбыҙҙа батшаға ла урын бирелгән. Әммә былдай әҫәрҙәрҙә хан да, батша ла эпизодик ҡына роль атҡара, ваҡиға уртаһында ҡайнамай. Ә һүҙ бараһы төркөмдә уларға төп ролде атҡарыу улай уҡ булмағанда ла ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашыу, шул ваҡиғалар ағышына хәл иткес йә һиҙелерлек йоғонто яһау бурысы йөкмәтелә.

#### *а) Аҡташҡа бәйле эпостар*

Башҡортостандың Ғафури, Ҡырмыҫҡалы тигән райондарында Аҡташ атлы ике ауыл бар. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың “Йәдкәр” китабында “Аҡташ” топонимы йыш телгә алына. “Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдар” тигән мәҡәләһенән, мәҫәлән, берсә ошо атама менән айырып йөрөтөлгән тауҙың Ағиҙел буйында урынлашыуы, унда кеше йәшәргә яраҡлаштырылған мәмерйә булыуы хаҡында мәғлүмәт алһаҡ, берсә “Өфөгә нигеҙ һалғанға тиклем, төҙөүсе-инженерҙар тәүҙә Аҡташ яҫылығын ... һайлағандар” тигән имеш-мимеш йөрөүе хаҡында беләбеҙ. Ә өсөнсө урында: “Ҡыпсаҡтан сыҡҡан Яуыштың Аҡташ тауында ханлыҡ иткән заманында уның ғәскәр башлығы, күренекле полководец Аҡташтың хәҙерге Өфө тирәһендә

76 Кирәй Мәргән. Бөркөт ҡанаты: Роман. Беренсе һәм икенсе китап. – Өфө: БКН, 1981.
77 БХИ. 4-се том:Эпос. – 319-сы б.
78 БХИ. 3-сө том: Эпос. – 178-се, 187-се, 359-сы, 366-сы, 368-се б.
79 БХИ. 6-сы том: Ҡиссалар һәм дастандар.

крепостар һәм нығытмалар төҙөүе бик ихтимал", – тип уҡыйбыҙ[80]. "Аҡташ хан" дастанында нәҡ ана шул кеше төп ҡаһарман ролен атҡара.

Әҫәрҙең төп геройы сифатында күрһәтелгән ғәскәр башы Аҡташ реаль тормошта ла төп ҡаһарман булырға ынтылыусы хәйләкәр һәм мәкер зат булып хәтерҙә ҡала. Ул хатта ярты донъяны яулап алған Искәндәр атлы йыһангирҙы буйһондороу хаҡында хыялланырға батырсылыҡ итә һәм уны хәйлә тоҙағына эләктерергә йыйына.

Дастанда һигеҙ йөҙ егерме яугирҙың ҡан ҡаҙанында ҡайнауы дәһшәтле бер күренеш төҫөн ала. Әммә Искәндәрҙең яу тәжрибәһе, һаҡланыу сараһын көнэлгәре күрә белеү һәләте үҙенекен итә: әҙ көсө менән аҡташтарҙы еңеп сыға.

"Хан ҡыҙы Алтынсәс" әҫәрендә һүрәтләнгән ваҡиғалар, асылда, М.Өмөтбаев бәйән иткән "Аҡташ хан" дастанында телгә алынған Аҡташ тигән ерҙә бара. Ихтимал, ҡасандыр был әҫәр "Урал батыр", "Иҙеүкәй менән Мораҙым" һымаҡ уҡ, шау ҡобайырҙан йә "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡара юрға" иртәктәре кеүек, сәсмәүер менән ҡобайыр теҙемдәренең аралашып килеүе рәүешендә мәғлүм булғандыр. Шуға күрә күләмле генә эпос рәүешендә йәшәгәндер. Үкенескә ҡаршы, уны аҡ ҡағыҙға төшөргән Мәжит Ғафури ул хаҡта иҫкәрмә бирмәгән. Үҙе иһә балыҡсы ҡарт исеменән уның бер вариантын ҡыҫҡа ғына итеп,бәйән иткән. Күптән түгел был эпостың тағы бер варианты табылды.

"Хан ҡыҙы Алтынсәс"тең сюжеты эпик фольклор әҫәрҙәренә хас традицион конфликтты үҙ эсенә алған мотивҡа, "сит хаким үҙен үҙһенмәгән сибәрҙе көс менән алырға итә" мотивына, нигеҙләнә. Сюжеты "Ят бауыр башҡорт ҡыҙын урлай" мотивына ҡоролған тормош-көнкүреш эпостарынан был әҫәр шуныһы менән айырыла. Әгәр унда ҡыҙ йә ят бауырҙың яҫҡаныуын белә күрә, йә иҫләмәҫтән, йә уны яратып өлгөрөүе һөҙөмтәһендә, уның ҡулына юлыҡһа, Алтынсәс үҙен-үҙе яҡларлыҡ яугир ҡыҙ булып сыға.

Атаһының ғәскәре Яйыҡ илбаҫарынан еңелгәс, "үҙе, бик шәп ҡара юрғаға атланып, ҡулына уҡ һәм һөңгө алып", яуға ҡаршы сыға. Ошо ҡыланышы уны "Алдар менән Зөһрә" иртәге, "Ырғыҙ" ("Ир ҡыҙ")[81] риүәйәте героинялары менән бер рәткә ҡуя.

Яйыҡтан килеп, ҡыҙ һораткан яу башының образы иһә әҫәрҙә Алтынсәс образы менән контраст планда асыла. Ят бауырҙың Алтынсәсте һоратыуы ла – ҡәҙимге һоратыу түгел, торғаны ультиматум. Сөнки ул, әгәр ҙә мәгәр хан Алтынсәсте "яҡшылыҡ менән бирмәһә, һуғышып булһа ла", алырға теләгәнен әйтеп ебәргән.

---

[80] Йәдкәр. – 200-сө, 204-се б.
[81] БХИ.2-се-том. Риүәйәттәр, легендалар. – №№73, 74.

“Хан ҡыҙы Алтынсәс” эпосы легендаларға хас “әмәлләнгән хазина” мотивы менән тамамлана: йәнәһе лә, илбаҫарҙы еңә алмағас, Алтынсәс атаһы алтын-көмөш йәшергән мәмерйәгә инеп юғала ла йәйге матур төндәрҙә таң атҡансы тау киртләсенә сығып ултыра була, ә теге хан хазинаһына ендәр эйәләшкән дә, уны алырға килеүселәргә ҡораллы ҡарауыл булып күренә була. М. Өмөтбаев яҙып ҡалдырғанса, уның замандаштары ысынлап та Ағиҙел буйындағы Нараш, Аҡташ тауҙарында кеше “тоторға яраҡлаштырып эшкәртелгән ҙур мәмерйәләр бар”, тип һөйләр булғандар[82].

***б) Дастандарҙа Сыңғыҙхан һәм уның вариҫтары заманының сағылышы***

Әйтеп үтелгәненсә, башҡорт халҡының тарихи риүәйәттәрендә, шәжәрәләрендә, ғәҙәттә, Сыңғыҙ хан телгә алына. Һүҙҙән һүҙ сығып, юлайҡан ғына әйтелмәй уның исеме. Юҡ, уға мөһим художестволы алым вазифаһы йөкмәтелә: ул тотош бер тарихи дәүер (эпоха) үлсәмен аңлата. Тимәк, художестволыҡ күҙлегенән ҡарағанда, уның вазифаһы поэтика (ваҡыт поэтикаһы) талабы менән билдәләнә.

Шәжәрәнән миҫалдар: “Чыңғыз зәманындан ҡалған ханлар мәғлүм булсун...” (Юрматы ырыуы шәжәрәһенән); “Чыңғыз зәманында Урадач би ирде. Андин өч атаға тикер вәйран булды...” (Меңле ырыуы шәжәрәһенән);

Рабби Кәрим ҡодрәте,
Мәзкүр идәм орғатты (ырыуҙы – Ә.С.),
Кичмеш Адәм әүлады (бала-саға. – Ә.С.),
Чынгыз ханның заманы...[83] (Үҫәргән ырыуы шәжәрәһенән).

Риүәйәттәрҙән миҫалдар: “Сыңғыҙ хан заманында башҡорт халҡынан Ҡыуаҡан, Үҫәргән ырыуҙарының вәкилдәре Мөйтән Туҡһаба балаһын бүләк менән ханға ебәргәндәр...” (Мөйтән риүәйәтенән)[84].

Бына шунаң кеүек, шәжәрәләрҙә һәм риүәйәттәрҙә Сыңғыҙхандың тормош юлын, эшмәкәрлеген, башҡорттар менән бәйләнешен яҡтыртҡан “Сыңғыҙнамә” тигән атамаһы менән мәғлүм яҙма дастандың айырым мотивтары урын алған[85].

Тағы бер бәйләнеш хаҡында. Башҡорт шәжәрә, риүәйәттәрендә “Сыңғыҙнамә” мотивтары күҙәтелгән кеүек үк, һуңғыһында бөгөн булһын башҡорттоң иртәкселәре, риүәйәтселәре һәм сәсәндәре репертуарында һаҡланған “Яҡшы әҙәм менән яман әҙәм”, “Тоғро һүҙ”, “Йырау һүҙе” кеүек ҡобайырҙар һәм “ҡыҙҙы бикләп тотоу” мотивына ҡоролған новеллистик әкиәттәр менән ауаздаш миҫалдар осрай.

---

[82] Өмөтбаев М. Йәдкәр. – 204-се б.
[83] Башҡорт шәжәрәләре/Төҙ., текстарҙы тәржемә итеүсе, инеш һүҙ, аңлатмалар әҙерләүсе Р.Ғ. Күҙәев. – Өфө: БКН, 1960. – 27-се, 50-се, 81-се б.
[84] БХИ. 2-се том: Риүәйәттәр, легендалар. – №215.
[85] Шунда уҡ. – 94-се, 155-се б.

Шулай итеп башҡорттоң шәжәрәһе, риүәйәттәре, ҡобайырҙары, әкиәттәре менән эпик ҡомартҡылар, шул иҫәптән “Сыңғыҙнамә” тигән яҙма дастан араһындағы бәйләнештәрҙең ике яҡлы булыуы күҙәтелә.

Ошондай уҡ бәйләнеш “Аҡһаҡ Тимер” дастаны менән “Бояғымхан” тигән башҡорт йыры, башҡорттоң бүтән төркиҙәр менән уртаҡ “Тарғын менән Ҡужаҡ”, “Ҡарас менән Аҡша” кеүек эпостары араһындағы оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтарҙы ла шулай аңлатырға була.

“Сыңғыҙнамә” дастаны борон-борондан башҡорт уҡымышлылары араһында киң билдәле булған. Был әҫәрҙе уҡый башлауың була – шунда уҡ башҡорт халҡының әкиәт репертуарына күптән ереккән таныш сюжеттарға юлығаһың. Иң тәүгеһе фольклор ғилемендә шартлы рәүештә “Хакимдың бикле ҡыҙы” (АТ 575) һәм “Мөғжизәүи юл менән ғоманлы булыу” (*875**) тигән ике мотивтың контаминацияһынан тора. Янына бер ниндәй ҙә ир заты инеүе һиҙелмәһә лә, Аҡ диңгеҙ эсендәге Мәлтә тигән шәһәр хакимы Алтын хандың Күрләүеч тигән ҡатынынан тыуған Ғөләмәлек Күреклeнең һарайҙа бикле ултырыуына ҡарамаҫтан, ғоманлы булыуына ҡыҙҙың тәүҙә күргән көн яҡтыһы сәбәпсе тип аңлатыла. Аңлашыла торғандыр. Беҙгә новеллистик сюжеттарҙан таныш булған “Хакимдың бикле ҡыҙы” мотивының аҙағы шулай интерпретацияланғас, ғоманлы булыуына ҡарамаҫтан, хаким ҡыҙы ғиффәтен һаҡлап ҡалған булырға тейеш. Эйе. Дастанды ижад итеүселәр, осо осҡа ялғанһын өсөн, был мөһим моментты ла иҫәпкә алғандар. Ғөләмәлек Күрекле менән ҡауышҡан Тумауыл Мәргән (Сыңғыҙ хандың олатаһы) тәүге никах төнөнән һуң, йәнәһе: “Үзе быуаз – үзе ҡыз!” – тип ғәжәп була.

“Хакимдың бикле ҡыҙы” дастанда икенсе төрлө интерпретация алған һымаҡ, “Мөғжизәле юл менән ғоманлы булыу” мотивы ла төрлөсә вариантлашырға мөмкин. Был мотив “Сыңғыҙнамә”нең үҙ эсендә үк вариантлашҡан осраҡ та бар. Ғөләмәлек Күрекле “көн яҡтыһынан тыуған” улы Дуйын Байан үлгәс, уның ҡатыны Аланғу ла (әйткәндәй, ул да Алтын хан нәҫеленән була), йәнәһе, күктән төшкән нурҙан ғоманлы була. Таныш мотив был осраҡта бына нисек интерпретациялана: йәнәһе, үлер алдынан үҙе үк иҫкәрткәнсә, Дуйын Байан Аланғуның сатырына (теге донъянан килеп) юғарынан нур булып инә лә бүре ҡиәфәтендә сығып китә – һәм ҡатын хан тәхетенә ирешәсәк Сыңғыҙға ауырға ҡала. Дастансы раҫлауынса, был хәлде, йәнәһе, Аланғу тирмәһе тирәһен төндә күҙәтеп тороусылар ҙа геуаһлай. Тик ул шуны иҫәпкә алып бөтөрмәгән. Әҫәргә Ялын тигән сит ҡәүем вәкилен индереүен индергән, әммә уны “эш менән тәьмин итмәгән”. Ә уны, үҙҙәренә аталаш булмағаны өсөн, Дуйын Байанды ҡыйырһытыуҙарынан шикләнеп, әсәләре Ғөләмәлек Күреклeнең үтенесе буйынса, аталары Тумауыл Мәргән тарафынан ҡалмыҡ иленә ебәрелгән Бүдәнәтәй менән Билгүтәй, Ҡытайҙарҙан ҡасып барыусы ас халыҡтан һатып алып,

еңгәләре Аланғуға бүләк иткән була: йәнәһе, уны яңғыҙлыктан ҡоткаралар. Әҫәрҙә әйтелеүенсә, "Аланғу аны, төбен, асылын белеп, яҡшы" аҫырай. Аланғу менән бер тирмәлә йәшәп быуын нығытҡан шул ят ҡәүем кешеһенә башҡа персонаждарҙың ниңәлер шиге төшмәй. Сыңғыҙҙың атаһы шул Ялын булыуы ла ихтимал бит әле. Һаҡлаусылар Аланғу менән бер ауыҙҙан бер һүҙҙән булып (ул саҡта ла ришүәт, уғрылыҡ ярайһы сәскә атҡан булған), күктән төшкән нурҙың тирмәнән бүре ҡиәфәтендә сығып китеүе хаҡында яһап һөйләүе лә ихтимал, тип уйларға урын бар. Шул бүрене ғәҙәттән тыш ҡиәфәттә, йәғни "йылҡы яллы күк бүре" рәүешендә, тасуирлау, артына ҡарап: "Чиниз! Чинкиз!" – тип ауаз бирҙе", - тип әйтелеүе - әллә ҡасан уҡ гүр эйәһе булған ире Дуйын Байандың тылсымлы нур булып Аланғу тирмәһенә инеп, уны ауырға ҡалдырып, бүрегә әүрелеүенә бәйле мөғжизәлек башланғысы "ышаныслыраҡ" булһын өсөн генә уйланған уйҙырма булғандыр, моғайын. Хәйер, хәйләкәр ҡатын борсаҡ яуғанда, ауыҙға эләккән борсаҡтан, йылы елдән, ямғырҙан, нурҙан ғоманлы булыуға инаныуҙар, тыйыуҙар, шуларға бәйле легендалар менән хәбәрдар булыуы ихтимал, Шундай легендаларҙың классик үрнәге беҙгә, мәҫәлән грек мифологияһынан мәғлүм. Атаһы Акрисий батша тарафынан ир-ат күҙенән йәшереп тотолған Даная атлы ҡыҙы янына илаһтар илаһы Зевс алтын ямғыр сифатында килеп, уның менән ҡауышҡан[86]. Әле мифологик фекерләүҙән арынып бөтмәгән заманда, хәйләкәр Аланғу бына шундай легенда, инаныстарҙы үҙенең булмышына яраҡлаштырып интерпретациялауы ла ихтимал. "Сыңғҙнамә"ләгә был тематик мотив типологик оҡшашлыҡҡа ҡайтып ҡалһа ла, ғәжәп түгел.

Традицион мифологик мотивтың әҙер материал рәүешендә файҙаланылыуы, йәғни реалистик хикәйә менән контаминациялашыуы баштан уҡ күҙәтелә. Аҡ диңгеҙ эсендәге Мәлтә ҡалаһы хакимы Алтын хан ҡыҙы Ғөләмәлек Күркленең Көн (Ҡояш) яҡтыһынан ауырға ҡалыуы – шуға миҫал.

Н.Ф. Катанов теркәп ҡалдырған легенда буйынса, "донъя яралған мәлдә" йәшәгән "бер кәүҙәһендә биш баш, ун күҙ" булған бер заттың ҡатынының сәсе, хәттин ашып, оҙон була. Бер саҡ теге кеше ҡатынының толомон киҫеп ташлай. Йәнәһе, "шунан алып ҡатын-ҡыҙҙың аҡылы ҡыҫҡа" булып ҡалған, ти.[87] Был тематик мотив кимәлендәге микросюжет та "Сыңғыҙнамә" дастанының йөкмәткеһенә бик тә йәтеш итеп яраҡлаштырылған. Катанов яҙып ҡалдырған легендала ваҡиға донъя яралған мәлдә бара, бында, иһә – Сыңғыҙ хакимлыҡ итә башлаған дәүерҙә. Яңы ханға оппозицияла торған Ҡуңғарт бейҙең ҡыҙ ҡарындашы Бүртә Ҡучин шул тиклем оҙон сәсле итеп күрһәтелә: "Андағ сулу

---

[86] Лосев И.Н. и др. Мифологический словарь – Ростов –на-Дону: Феникс, 1997. – С. 21, 182 – 183, 397 -400

[87] Катанов Н.Ф. Среди тюркских народов // ИРГО. – Б.М., Б.Г. – Т. XXIX. – С. 6/ 524.

кешене ул заманда һич күрәсе юҡ ирде. … Ҡырҡ колач сәче бар ирде. Артындин дәйәсе[88] алтун табаҡҡа сәчен салып, йөрөтөр ирде." Аңлашылыуынс, был өҙөктә сәс бары Бүртә Ҡучиндың һылыулығын асыу сараһы булараҡ ҡына тасуирлана. Әммә шуныһы мөһим: шул һылыулығы менән ул ҡыҙ Сыңғыҙ тиклем Сыңғыҙҙың һушын ала[89]. Оҙон сәс мотивының бүтән деталдәрен барлап тормаҫтан уҡ, бары ошо әйтелгәндән генә лә шундай һығымтаға килергә була: бында беҙ боронғо легендар микросюжеттың яңы тарихи шарттарға яраҡлаштырылыуына шаһит булабыҙ.

Әле әйтелгәненсә яраҡлаштырыуға тағы бер миҫал. Сибәрлеге менән Сыңғыҙ хандың һушын алған ана шул Бүртә Кучин "Олуғ ҡырғында һәләк булмаһын тип, дүрт уғылны алып ҡалды. Йәшереп асрар ирде. Берсе – Бүдәнжәр уғлы ..., икенчесе – Ҡәғинжәр уғлы ..; өченчесе Салжут уғлы [Сыңғыҙҙы күралмаған әсәләш өс ағаһының уландары] ирде дүртенчесе [ҡызның үз ағасы] Ҡуңғрат бейнең уғлы ирде"[90] Аңлашылыуынса, ҡыҙ йәшереп аҫраған был дүрт малай – Сыңғыҙға йә оппозицияла торған, йә дошман заттарҙың балалары булғанға, Сығыҙ Бүртәне хөкөмгә дусар итә алыр ине. Әммә тап ошонда ҡыҙҙың бушҡа ғына оҙон сәсле булыуына иғтибар иттерелмәүе төптән аңлашыла. Сыңғыҙ хандың: Ай, Бүртә, мына ни өчөн уғры булдың, бу уғланларны йәшерден?" – тип ҡаты төпсөнә башлауына яуап итеп, ҡыҙ: "Мин сине аяған өчөн, аяп, уғры булдым", - ти ҙә Туфан һыуы ҡалҡҡанда, Нух бәйғәмбәрҙең һәр йән эйәһенең нәҫеле ҡоромаһын өсөн, уларҙың һәр береһенән берәр парҙы кәмәһенә алыуын хандың иҫенә төшөрөп, был малайҙарҙы ла, нәҫеле ҡоромаһын тип, ҡотҡарыуын әйтеп, уларҙы азат итеүен һорай. "Син хан булһаң, Тәңре Тәғәләнең ҡоло дәгелмесен?! Арслан кик (кеүек. - Ә.С.) ир кәжә аша сикереп, артындағын ҡайтып алмас, азад ҡыылыр, ебәрер. Ай, ханым! Син әдәмсен", - тип үк ебәрә. Бына шулай Бүртәнең сибәрлеге зирәклегенә бәрәбәр икәне асыла. Уның ошондай гармонияға эйә икәне әҫәрҙә хандар ханы Сыңғыҙ һүҙҙәре менән дә ҡеүәтләнеш алған. Ә ул былай тигән:" Һай, имде, ай, синең шул яхшы дәлилле сүзең өчөн, тәки синең диңгездик (диңгеҙҙәй киң. - Ә.С.) күңелең өчөн йөз мең үлемдән азад булсын!" Бүртәне кәләш итеп алыуы иһә һылыулығы һәм зирәклеге өсөн иң юғары баһаға тиң. Оҙон сәстең сере бына нисек асыла "Сыңғыҙнамәлә".

Шулай итеп, беҙ был юлайы традицион мифологик легенданың мотив кимәлендәге генә микросюжетының дастан сюжеты менән ҡәҙимгесә контаминациялашыуы менән генә сикләнмәйенсә, уның

---

[88] Дәйәсе – хеҙмәтсе ҡыҙә, ҡоло (мәғәнәһенедә буғай).
[89] БХИ. 7- се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. - 157-се б.
[90] Шунда уҡ. - 156-сы б.

ижади үҙләштерелеп, тулы ҡанлы сюжет кимәленә еткерелеүнә, төп сюжеттың айырылмаҫ өлөшөнә әүрелдерелеүенә баҙыҡ бер миҫал менән осрашабыҙ.

Төркиәттең мәшһүр ғалимы Абдулкадир Инан (Фәтхелкадир Сөләймәнов) үҙенең оло остазы Көпрүлөзада Мәхмүт Фуат бей, Рәшит әт-дин, Әбүлғази, Ғәли Желайыр һ.б. хеҙмәттәренә таянып, “Сыңғыҙнамә”нең төрки донъяһының төрлө тарафтарында таралған версияларын һәм уларҙың варианттарын өйрәнеп, уның башҡорттарға мәғлүмдәренең милли үҙенсәлекле булыуын билдәләгән.

Бығаса телгә алынған билдәләр, был дастандың башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең шәжәрәләре менән ауаздашлығы, идея, тема, мотивтар йәһәтенән ҡобайырҙарыбыҙ, әкиәттәребеҙ менән уртаҡлыҡтары А. Инан һүҙҙәрен ҡеүәтләй. Уның әйтеүенсә, бынан тыш башҡа милли вариант версияларҙан айырмалы рәүештә, Сыңғыҙ хан тарафынан һәр ҡәбиләгә махсус тамға, ағас һәм ҡош бирелеү кеүек йола тик башҡорттарҙа ғына һаҡланған. Ысынлап та, Ҡуңғырат, Тамьян, Ҡыпсаҡ, Юрматы, Кирәйет, Бөрйән, Ҡатай, Һалйот бейҙәр менән Табын (Майҡы бей), Мең (Урадас бей), Үҫәргән (Мейтән бей), Түңгәүер (Тимер ҡотло бей) тигән башҡорт ҡәбиләләре йә ырыуҙары атамалары уҡ шул ырыуҙарыбыҙ башлыҡтарының Сыңғыҙхандан ағас, ҡош, оран, тамға, һауыт алыуы хаҡында әйтелә[91]. Бындай иғтибарға уларҙың, донъя боҙоғо тигән яман аттары сыҡҡан Бүдәнжәр, Ҡағинжәр, Салжут тигән ағайҙарынан хәүефләнеп, тауға ҡасҡан Сыңғыҙ артынан килеп, уны хан итеп күтәреүҙәре арҡаһында, лайыҡ булыуҙары хаҡында әйтелеүе мөһим әһәмиәткә эйә.

Дастансылар, Сыңғыҙхан башҡорт бейҙәрен яҡын күргән, тигән идеяны раҫлау өсөн, тағы шуға ла иғтибар иттерәләр. Был бейҙәр Сыңғыҙҙы тәүҙә осрата алмағас, ҡул һелтәп ҡуймайҙар, уны ҡайта-ҡайта эҙләйҙәр. Ә Табын ырыуы башлығы Майҡы бей баштан уҡ уға яҡын булырға, ошо маҡсаттан алдан күреп эш итергә тырыша.

Ә инде, бейҙәрҙең, ат урынына егелеп, Сыңғыҙхан менән Майҡы бей ултырған арбаны һөйрәүҙәре – уларҙың ханға тоғролоҡтарын иҫбатлауҙан үтеп, уға ярамһаҡланыуҙарын да аңлата.

Дастан, һаран ғына булһа ла, Сыңғыҙҙың аҡыл менән эш итә белеүсе кеше булыуын төшөндөрә. Тауҙарға китеүе, мәҫәлән, уның ағайҙарынан һаҡланыу сараһы күреүен аңлатыу менән генә сикләнмәй. Уның был ҡыланышы – үҙе тирәһендә сыуалған бейҙәрҙең тоғролоғон һынау сараһы ла.

Ярты донъяны баҫып алған хан йәнәптәренә бағышланһа ла, “Сыңғыҙнамә” дастанында уның хәрби эшмәкәрлеге урын алмаған. Бары Бүдәнжәр, Ҡәғинжәр, Салжут һәм Ҡуңғарт бейҙе юҡ итеүе һәм ете

---

[91] Инан Абдулкадир. “Дәстан-ы Неел-и Ченгиз Хан” китабы хаҡында// Азербайжан Йурт Билгиси. – 1934. – 28.05; Ватандаш. – 1998. – №6. – 104-110.

нәçеле ғәскәре менән күп халыктарҙы буйһондороуы тураһында дөйөм генә әйтелгән.

Уның ҡарауы, “Сыңғыҙнамә”нең дауамы булған “Аҡһаҡ Тимер”, “Ғайса улы Әмәт” дастандары был бушлыкты ныҡ ҡына тулыландыра.

***в) Авантюрист Әмәт һәм хәйләкәр Акһак Тимерҙең дастан ҡаһарманы булғаны***

“Ғайса улы Әмәт” һәм “Аҡһаҡ Тимер” дастандарының икеһенең дә ҡаһарманы – барыһын да алдан уйлап, хәйлә менән эш итеүсән, инициативаны тиҙ арала үҙ ҡулына ала белеүсән тәүәккәл зат. Уларҙың был һыҙаттары шул уҡ ваҡытта төрлө шарттарҙа һәм төрлөсә асыла. Әмәт яңғыҙы ғына эш итергә ярата. Үҙенең авантюраһын ғәмәлгә ашырыу өсөн, башҡаларҙы тере ҡорал, сара рәүешендә йәлеп итә белә. Маҡсатына ирешеү өсөн, уларҙы ҡорбан итеү – уға бер ни ҙә тормай. Сыңғыҙхандың улы Йәнебәк хан ҡыҙ булып тыуғаны өсөн генә, үҙ балаһын үлтерергә ниәтләнеүе арҡаһында, ул сабыйҙы алып ҡасҡан Бирдебәк артынан барғанында, асыла уның был сифаттары.

Ғайса улы Әмәт үҙенең авантюраһына хатта хандың үҙен дә оçта йәлеп итә белә. Бирҙебәк артынан барыуын башҡалар белмәһен өсөн, хан менән алдан һөйләшкән буйынса, башҡалар алдында уны юрый асыуландырған кеше булып ҡылана ла, атына менеп, сабып сығып китә: йәнәһе хан язаһынан ҡаса. Был хәйләһе уға, берҙән, башҡалар алдында китеүенең маҡсатын йәшереүгә, икенсенән, Бирҙебәктең ышанысын яулау өсөн, кәрәк булып төшә. Ә Бирҙебәкте алып ҡайтҡас, хандың иçереп ҡолауынан файҙаланып, уның ҡыҙын алып ҡаса.

Әмәттән айырмалы рәүештә, Аҡһаҡ Тимер кесе йәшенән үк башҡаларҙы ойоштороп, үҙ ихтыярына буйһондороп, улар менән оçта идара итергә өйрәнә, хатта бала сағында уҡ үҙен хан итеп күтәреүҙәренә ирешә. Бала саҡта, ололар булып уйнағанда, алған күнекмәләре аҙаҡ уға ысын сардар, ярты донъяны яулауға өлгәшкән ысын хан дәрәжәһенә күтәрелеүгә булыша.

“Аҡһаҡ Тимер” дастанының сюжетын хасил итеүҙә һәм уның йылдам үçтерелеүендә инаныстар һәм алдағын көнәлгәре аллегорик иçкәртеү алымы мөһим роль уйнай. Һәр кемдең яҙмышы маңлайына яҙылған, әммә һәр кем уны үҙенсә ғәмәлләштерә, тигәндәй була дастан. Ҡарамаҡҡа, Аҡһаҡ Тимер сабый сағынан, хатта ки тыумаç элек үк тормош тарафынан үгәйһетелгән була. Күрәҙәселәрҙең ҡотҡоһо буйынса, инә ҡарынында сағында уҡ ул саҡ-саҡ үлтерелмәй ҡала. Ә күрәҙәселәр, тыуа ҡалһа, тап ошо бала уның башына етәсәк тип, Сыңғыҙхандың Жадай хан тигән улының төшөн юрай. Шуның арҡаһында хан йәлләттәре уға әсә булырға тейеш йөклө ҡатындың ҡорһағын яралайҙар ҙа инде.

Төшкә инаныу бына шулай киләсәктә ярты донъяны яулаясаҡ йыһангирҙың аҡһаҡ булып тыуыуына сәбәпсе булһа, “яҙмыштан – уҙмыш юҡ” тигән инаныу ҙа ахырҙа Жадай хандың ир еткән ошо бала ҡулынан һәләк булыуы рәүешендә ғәмәлләшә. Шулай итеп, Даная хаҡындағы грек мифы менән бында ла ауаздашлыҡ күҙәтелә. Грек мифында ла бында ла тыуасаҡ ир баланың батша башына етәсәге күрәҙәсе тарафынан көнэлгәре юрала, ике осраҡта ла батша күргән һаҡланыу саралары ярҙам итмәй.

Инаныу өҫтөнә – инаныу. Аяғы яраланған хәлдә тыуғанын иҫәпкә алып, әлеге ҡорһағы теленгән ҡатындан тыуған ир бала Тимер тигән исем менән нарыҡлана. Тимер кеүек ныҡ булһын, тип юрап бирелгән исем, ысынлап та, аҡлана. Ә уның аҡланыуында “алдағын көнэлгәре аллегорик иҫкәртеү” алымы был дастанда мөһим роль уйнай. Физик яҡтан кәмселеге булған кешегә күңел төшөнкөлөгө, үҙенә үҙе кәмһетеп ҡарау хисе хас булыусан. Аҡһаҡ Тимер менән дә шулай була ҡалһа, һис тә аптырамаҫ инек. Әммә Аҡһаҡ Тимерҙең емерек кәшәнә төбөндә күргәне унда сәм уята. Ә ул унда “бер аяғы аҡсаҡ, тәки бер күзе суҡыр” ҡырмыҫҡаның нисек итеп, ҡолай-ҡолай, тырышып-тырмаша торғас, өсөнсө ынтылғанда, кәшәнә башына менеп етеүен күҙәтә. Уның күргәне, асылда, үҙенең киләсәген алдан күҙаллау булып аңлашыла. Киләсәктә маҡсатына ирешеү өсөн, аҡһаҡмын, ас-яланғас етеммен, тип тормаҫҡа, тырышырға-тырмашырға кәрәк икәненә төшөнә Тимер, бер ғәрип бөжәктең уңыш яулауын күреп.

“Аҡһаҡ Тимер” дастаны бөйөк сардарҙың исемен мәңгеләштереүҙән тыш, дөйөм алғанда, рухлы булырға, ихтыяр көсөн юғалтмаҫҡа, маҡсатлы йәшәүгә өндәүсе әҫәр булыуы менән әһәмиәтле.

***г) Уғыҙ эпосының башҡорт версиялары***

Академик Ғайса Хөсәйеновтың асыҡлауынса, бик борондан уҡ башҡорттарға “Уғыҙнамә”, “Ҡорҡот-Ата” дастандары ла киң билдәле булған[92]. Мәғлүм булыуынса, был ике әҫәр урта быуаттарҙа ижад ителеп, башлыса уғыҙ төркиҙәре араһында киң тарала. Башҡорттарға улар төрлө юлдар менән шул тарафтарҙан килеп юлыҡҡан да яңы ерлектә үҙ версияларын хасил иткән.

Уғыҙхандың донъя йыһангиры тип нарыҡланмалы баһадир булыры дастанда, Алпамыша, Сыңғыҙхан, Манас кеүек үк, мөғжизә ярҙамында тыуыуы менән көнэлгәре аңғартыла (прогнозлана).

Дастандың Рәшитетдин версияһы һәм уның варианттарындағы һымаҡ уҡ, башҡорт версияларында ла, Уғыҙ тыумыштан уҡ өлөшлө зат итеп күрһәтелә. Өс көн, өс төн буйы имсәкте ауыҙына ла алмай. Яҡты донъяла шунса ғына йәшәп тә, характер белдерерлек кимәлдә

[92] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорттарҙа “Ҡоркот-Ата” сюжеты һәм мотивтары // Ватандаш. – 2000. – №9. – 123-127-се б; Шул уҡ авт. Уғыҙ дастаны һәм хикәйәттәре хаҡында // Ватандаш. – 2000. – №8. – 62-64-се б.

булғанлығы, әсәһенең төшөнә кереп, уны имеү-иммәү мәсьәләһендә шарт ҡуя алыуы – үҙе үк унының ғәҙәттән тыш бала булыуы хаҡында һөйләй. Ә инде шарттың йөкмәткеһенә килһәк, ул ғәҙәти булмаған мөмкинлегенең ҡайҙан килеүенә төшөнөрбөҙ. Иғтибар итегеҙ, шул сабый әсәһенең төшөндә уға ни ти: “Әсәкәйем, мосолман булһаңсы! Әгәр мосолман булмаһаң, үлһәм үлермен, имсәгеңде иммәмен!”

Уғыҙҙың мосолман булыуы, тәүге ике кәләше менән шул сәбәптән түшәк бүлешә (ирле-ҡатынлы кеүек йәшәй) алмауы тегеләренең уға хыянатына килтерә: унының мосолман булыуын шул икәү ҡайныларына, йәғни Ҡараханға фаш итә. Тимәк, Уғыҙға ҡаршы атаһы менән ағайҙарының фетнә ҡороуына ла унының мосолмансылығы сәбәпсе була. Бына шулай бер сәбәп – төп геройҙың тыумыштан уҡ мосолманлығы был әҫәрҙең сюжетының тармаҡланып үҫеүенә, һәр тармаҡта яңы конфликт төйөнләнеүенә стимул була. “Уғыҙнамә”нең төп версияһы буйынса, ул мең йәшкә етеп үлгән, тип раҫланыуы ла[93] шуға бәйле, әлбиттә.

“Ҡорҡот-Ата” дастаны “Уғыҙнамә”нең логик дауамын тәшкил итә, асылда. Унының башҡорт версияһы уғыҙ төркиҙәре араһында мәғлүм булғанынан күләменең бәләкәйлеге һәм бер ни тиклем фрагменталь булыуы менән айырыла. Иң әүәл, был версия буйынса, Ҡорҡот атаның башҡорттағы Ҡырғыҙ һәм Табын ырыуҙарына мөнәсәбәтле изге зат итеп күрһәтелеүе иғтибарҙы йәлеп итә. Алтайҙан күсенгән табындарға юл күрһәтеүе унының образын аҙашҡандарға юл табышыусы, яңғыҙ юлаусыға юлдаш булыусы изгелекле зат Хызыр Ильяс образы менән ассоциялаштыра. Сыңғыҙхандың шәжәрәһе Нух бәйғәмбәрҙән башлана. башҡорттоң Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамьян ырыуҙарының шәжәрәһенең дә башы ошо бәйғәмбәргә барып тоташа. Ҡарағай Ҡыпсаҡ шәжәрәһе иһә Лоҡман Хәкимдән башлана. Шул кимәлдән ҡарағанда, башҡорттоң Ҡырғыҙ ырыуының Ҡорҡотто ҡанбаба тип иҫәпләүе – уны ла бәйғәмбәрҙәр кимәлендәге шәхес тип таныу менән бер[94].

Хандар тураһындағы дастандарҙың башҡорт версиялары, дөйөм алғанда, тарихи шәхестәрҙең биографияһын сағылдырыуға ҡарағанда, хакимдарҙың ил ҡороу һәләте, унда тыныслыҡ урынлаштырырға ынтылыуы хаҡында һүҙ алып барыусан.

### 4. Тыйылған эпос

“Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы яҙма ҡомартҡыларҙан беҙгә мәғлүмдәренән 1876 йылда М. Өмөтбаевтың “Башҡорттар” тигән тарихи-этнографик очергында телгә алына. Ғалим уны йырлап башҡарыла торған өләңдәр рәтенә индерә. Өлгө рәүешендә “Боронғо

---

[93] Рашид ад-дин Фазаллах. Огузнаме/Пер. с персидск., коммент., примеч. и указатели Р.М. Шукуровой. – Баку: Элм, 1987. – С. 15.
[94] Башҡорт шәжәрәләре. – 112-се, 196-сы б.

башҡорттарҙың өләңдәре” тип, “Иҙеүкәй менән Мораҙым”дан өҙөктәр ҡушып биргән.

Ә.-З.Вәлидиҙең хеҙмәттәрендә эпик ҡомартҡыларыбыҙ йыш ҡына телгә алына[95]. Ҡушмөгөҙлө Зөлҡәрнәй атлы йыһангир – Александр Македонский Ҡөрьәндә 24 тапҡыр телгә алына. Шуны иҫтә тотоп, Вәлиди: “Әгәр беҙҙең төрөктәрҙән дә бәйғәмбәрҙәр үҫеп сыға ҡалһа, улар ҙа, теге йәки был төшөнсәне аңлатыу өсөн, төрөк дастандарына, мәҫәлән, хыянатсыл тәбиғәтле кешене тасуир итеү өсөн, уғыҙ дастанындағы – Ҡөлләрҡин Ябғуның ҡатыны хаҡындағы ҡиссаларға, ғәҙеллекте аңлатыу өсөн, “Иҙеүкәй” дастанындағы “Иҙеүкәйҙең дөйәһе” кеүек ҡиссаларға таянырҙар ине һәм фекерҙәрен төрөктәр ышанырлыҡ формала аңлатырҙар ине”, – тигән[96].

1954–1955 йылдарҙа “Колонизаторлыҡ тарихы” тигән лекциялар курсын яҙып бөтә. Истанбул университеты студенттарына уҡыуға тәғәйен ошо хеҙмәтенең бер өлөшө “Башҡорттар тарихы” тигән монографияһында ла Ә.-З.Вәлиди “Иҙеүкәй менән Мораҙым” дастаның тағы ла телгә ала[97].

Дастандың башҡорт версияһының Дауыт Юлтый, Сәғит Мирастар һәм үҙе яҙып алған варианттарынан XX быуатт 20-се йылдарында Нәҡи Исәнбәт йыйылма текст төҙөгән.

Әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы башҡорттар араһында заманында киң таралған булған. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан беҙҙә лә, Татарстанда ла, Ҡарағалпаҡстанда ла уның 500 йыллығын үткәреү буйынса ҡыҙыу эш башлана. Мөхәмәтша сәсән Буранғолов, Татарстанда беҙҙең яҡташыбыҙ Нәҡи Иҫәнбәт уның сюжетына пьеса яҙа, төрлө баҫмалар әҙерләнә. Әммә уҙған йөҙ йыллыҡтың 40-сы йылдарының уртаһынан алып 80-сенең ахырынаса “Иҙеүкәй менән Мораҙым” ҡаты тыйыу аҫтында булды.

1944, 1945 йылдарҙа Татарстан менән Башҡортостан партия ойошмаларында идеологик, эштең торошо хаҡындағы ҡарары менән ВКП(б) Үҙәк комитеты “Иҙеүкәй менән Мораҙым”ды, хандар, бейҙәр эпосы, тип, уны золомға дусар иткән.

*а) Һабрау сәсән образы*

Башҡа милләттәргә мәғлүм версияларындағы кеүек үк, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосының башҡорт версияларында ла Һабрау сәсән образына мөһим урын бирелгән. Мөһимлеге шуның менән аңлатыла: ваҡиғаның үҙендә тәғәйен генә үҙе ҡатнашмай, шулай ҙа уның булмышына, ағышына, сиселешенә, тимәк, яҙмыштарҙың хәл

---

[95] Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Әҫәрҙәр/Тәржемә, аңлатмалар, төҙөүсе, инеш мәҡәлә Әхәт Сәлиховтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов. – Өфө: Китап, 1996. – 46-сы б.

[96] Шунда уҡ. – 108-се б.

[97] Юлдашбаев Ә.М. Тәржемәсенән//Ә.-З. Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы. – Өфө: Китап, 2005. – 7-12-се б.

ителешенә, эпостың башҡа персонаждарының береһенә лә, хатта төп геройҙары Иҙеүкәй менән Мораҙымға, уларҙың антиподы Туҡтамыш ханға сағыштырғыһыҙ ҙур роль уйнай. Йәшәрен йәшәгән 175-тең өҫтөндә (әйткәндәй, төрлө версия һәм варианттарҙа уның йәше төрләнә) барған Һабрау ваҡиғаларҙың иң киҫкен мәлендә генә алғы планға сығарыла һәм уларҙы кешеләр яҙмышында киҫкен боролош яһарға мәжбүр итеүсе рәүешендә күрһәтелә. Бының өсөн уға, Иҙеүкәй йә Мораҙымдан айырмалы рәүештә, ҡылыс болғауҙың да, уҡ-һаҙаҡ менән мәргән эш итеүҙең дә, Туҡтамыш хан һымаҡ, ырыу батырҙарынан, хәҙергесә әйткәндә, шәхси гвардия төҙөүҙең дә, сиреү тотоуҙың да хәжәте юҡ. Уның төп ҡоралы – һүҙ, һүҙҙең дә сосо, сәпкә тура тейә торғаны.

Кәңәшсе образы – башҡорт эпостары өсөн, ғөмүмән, ғәҙәти хәл. “Урал батыр” эпосы геройына Һомай, исемһеҙ ҡарт, уның ағаһы, үлә алмай ятыусы меңйәшәр йөҙөндә – бер түгел дүрт кәңәшсе кәңәш бирә.

“Аҡбуҙат” эпосында Һәүбәнгә кәңәш биреүсе ролен Тарауыл ҡарт, “Заятүләк менән Һыуһылыу”ҙа – Хызыр Ильяс, “Ек Мәргән”дә геройҙың төшөнә ингән атаһы мәрхүм үтәй һ.б.

Уғыҙҙарҙың “Ҡорҡот-Ата” дастанында аҡыллы кәңәш биреүсе, кәрәк саҡта нәсихәт уҡып, күрәҙәлек итеүсе сифатында Ҡорҡот-ата сығыш яһай.

“Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосының төп геройы ғына түгел, башҡа персонаждар ҙа Урал батырҙың “кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ”, “Олоно – оло, тиегеҙ, кәңәш алып йөрөгөҙ” тигәнен еренә еткереп үтәгәндәй итә.

Шуныһын да әйтергә кәрәк: эпостың беҙгә мәғлүм варианттарының ҡайһы берҙәрендә Һабрау сәсән йәки бүтән берәй кәңәшсе, ғөмүмән, телгә лә алынмай.

Күп кенә хеҙмәттәрҙә Һабрауҙың Иҙеүкәйгә аҡыл өйрәтеүсе булыуына ғына баҫым яһала. Ысынлап та, һындай хәл булғылай. Тик баштараҡ, Иҙеүкәй Туктамыш ханға килгәнсе генә, шулай була. Ә бына Иҙеүкәйҙе эҙәрләү башланып, хатта уны юҡ итергә аҫтыртын һүҙ ҡуйышҡас, сәсәндең уға мөнәсәбәте йөҙ һикһән градусҡа үҙгәрә. Туҡтамыштан Иҙеүкәй ҡасып киткәс, Н. Иҫәнбәттең йыйылма тексы буйынса ҡарт сәсән ханға бына ниндәй кәңәш бирә:

Туғыҙ иреңде ебәр ҙә,
Алдап-йолдап, ҡаршыңа ал!

Заманында үҙе күккә сөйөп маҡтаған ир аҫылын нисек яңынан ҡулға төшөрөргә, тимәк, нисегерәк үлемгә дусар итергә хан тиклем ханға кәңәш биреп ултырыуы, нисек кенә булмаһын, Һабрауға антипатия уята.

Эпостың тулы йыйылма тексын төҙөүселәр иһә (Мөхәмәтша Буранғолов, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Әбүбәкер Усманов),

һабрау сәсәнде быңдай ғәйепләүҙән "ҡотҡарырға тырышҡандар". Бында ул Туктамыш хандың: "Тел аҫтына тел ҡуймай, Кәңәшеңде әйт әле!" – тип үтенеүенә яуап итеп бары үҙенең күпте күргән кеше икәнен, Иҙеүкәйҙең асылы кем булыуын, "наҙлы Энйене" лә, "иркә Кинйәне" лә , йәғни хандың ике ҡыҙын да алыу ихтималын, һарайын туҙҙырыу уйы менән килерен иҫкәртеү менән генә сикләнә.

Һабрау образы – бер ни тиклем "Буҙйегет" дастанындағы сәсән телле исемһеҙ ҡартты (йә ҡарый мулланы) хәтерләтә биреп тә ҡуя. Ул да, Һабрау һымаҡ уҡ, һүҙҙе, был донъяла күпте күреүен аңлатыуҙан башлай:

"Күпте күргән ҡартмын,
Бер аҙ йырҙы йырлаймын", –

тип, был донъянан уҙған бәйғәмбәрҙәрҙе һанауы Һабрауҙың үҙенең оҙон ғүмерендә бик күп хандар хакимлығына шаһит булыуын һөйләгәнен хәтерләтә. Шул уҡ ваҡытта ирекһеҙҙән "Урал батыр" эпосында һүрәтләнгән, Йәншишмәне ауыҙ итеүе арҡаһында, үлергә теләһә лә, үлә алмай ҡаңғырған ҡарттың:

"Бик күп быуын күрҙем мин,
Бик күп ерҙә булдым мин", –

тип һүҙ башлап, башынан ниҙәр кисергән, шуларҙың барыһын да теҙеп сығыуы ла Һабрау сәсәндең Туктамыш станындағы шиғри телмәрен иҫләргә мәжбүр итә.

Күрәһең, күргән-белгәнен, ерҙә оҙон-оҙаҡ йәшәгәнен әйтеп алыу кәңәшсенең кәңәше, ысынлап та, аҡыллы икәнен дәлилләү өсөн, эпостарҙа ҡулланыла торған тотороҡло стереотип формула дәрәжәһендә булған.

***б) Иҙеүкәй образы***

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының бөтә варианттарында ла төп геройы, – әлбиттә, Иҙеүкәй. Тик һәр вариантта уның образы төрлө кимәлдә асыла. Заманында үҙ аллы эпос хәлендә йәшәгәнлегә шик уятмаһа ла, "Иҙеүкәй менән Мораҙым"ға тартым уртаҡлыҡтарға ла эйә булған "Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар" тигән әҫәрҙә уның бейҙәргә, һәр төрлө башҡаса яттарға ҡаршы көрәшеүсе батырҙарға ярҙамсыл булыуына иғтибар йүнәлтелә. Дастандың башҡорт версияһының мәғлүм бөтә варианттарына "Иҙеүкәй менән Туктамыш хандың араһы боҙолғаны" мотивы уртаҡ.

Иҙеүкәйҙең донъяға килеүен дастан, йәнәһе лә, ул һыу ҡыҙынан тыуған, тип, мөғжизә ярҙамында аңлата. Был мөғжизәлелек – уның ғәмәли эштәр атҡарырлыҡ, шул бурыстың мөһимлек күләме һәм кимәленә бәрәбәр баһадир булып етешерен көнэлгәре күрәҙәләү (прогнозлау) сараһы ул.

Эпик сюжетта геройҙың бала сағына бәйле бер йә бер нисә мотив урын алыусан. Әйтәйек, "Урал батыр" эпосы сюжетының

экспозицияһында Шүлгән менән Урал атлы бер туған ике малайҙың атай тыйыуына мөнәсәбәте асыҡлана.

“Алпамыша менән Барсынһылыу”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Бабсаҡ менән Күсәк” эпостарының төп ҡаһарманы буласаҡ ир бала, йәшкә бәләкәй булһа ла, үҙенән оло малайҙарҙы еңә, хатта аяҡ-ҡулдарын һындыра.

Иҙеүкәйгә килһәк, мөғжизәүи тыумышы ярҙамында әшкәртелгән булмышын ул да бала сағында уҡ һиҙҙертә башлай. Нәҡи Исәнбәт вариантында алты йәшлек улын Баба Төкләс йомаҡ өйөш, йомаҡ сисеш рәүешендәге әйтешкә ылыҡтыра: малай уның һәр һүҙенә мәғәнәле итеп тапҡыр яуап бирә. Был вариантта иң башта бына шулай Иҙеүкәйҙең зирәклеген асыҡлауға иғтибар ителә.

Эпостың Әбүбәкер Диваев версияһында ла, дүрт әҙип төҙөгән йыйылма тексында ла, әҫәрҙең башҡа халыҡтарҙа мәғлүм версияларында ла Иҙеүкәйҙең бик тә зирәк булыуына иғтибар ителгән. Ҡаһармандың был сифаты уларҙа кесе йәштән үк уның ғәҙел хөкөм сығарыуға маһир икәнен күрһәтеү аша асыла. Ә. Диваев версияһы буйынса, әле бала сағында Иҙеүкәй бер дөйә балаһына талашыусыларҙың дәғүәһен еңел хәл итә. Дүрт әҙип төҙөгән йыйылма текст буйынса, Иҙеүкәй көс-ҡеүәте йәһәтенән тиңдәштәренән айырылып тора. Уның шулай бик тиҙ егет ҡорона инеүе Алпамыша, Ҡуҙыйкүрпәс, Күсәкбей кеүек батырҙарҙың бала сағын хәтерләтеп ҡуя.

Иҙеүкәй өс айында
Сәңгелдәккә һыйманы...
Өс йәшенә еткәндә
Ун йәш менән уйнаны...

Бына шулай художестволы деталдәрҙе уңышлы һайлау арҡаһында, әҫәрҙең төп ҡаһарманы булып етешәсәк ир балала, эпик традиция талабына ярашлы рәүештә, баһадирлыҡ сифаттарының бик иртә күҙәтелә башлауы ышандырырлыҡ итеп асыла.

Иҙеүкәйҙең физик яҡтан камиллығына уның интеллектуаль һәләте бәрәбәр икәнен расләр эпизодтар ҙа бирелә эпоста. Был йәһәттән, “Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне” тигән ҡобайыр әйтмешләй, “Ил сигендә дан алған, Ил ташында һан алған”[98] сәсәндәрҙең береһе – Һабрау сәсән менән тәүге осрашыуы фәһемле. Был вариант буйынса, Һабрау сәсән:

“Йөҙ етмеш биш йәшем бар,
Күпте күргән башым бар...
Берегеҙ сәләм бирмәне:
“Һаумы, олатай!” – тимәне”, –

тип бала-сағаны шелтәләһә, Иҙеүкәй бына нисек яуаплай уға:

[98] БХИ: Эпос. 3-сө кит. – 135-се б.

“Йөҙ етмеш биш йәшең бар,
Күпте күргән башың бар.
Үҙең һана, олатай:
Беҙ егерме балабыҙ,
Унар йәштән барыбыҙ,
Минңә генә – әле биш,
Шулай ҙа мин – унға иш.
Барын ҡушһаң, кем өлкән?

“Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ!” – тигән кеүек, Һабрау “үҙ яйына китте, ти”. Иҙеүкәйҙең шул яуабын бер төрлө генә баһалау ҡыйын. Мәрәкәләүме был? Ирәгәләшеүме? Тапҡырлыҡмы? Тегеһе лә, быныһы ла, уныһы ла бар бында. Хикмәт ҡайһы яҡтан сығып ҡарауға ҡайтып ҡала.. Шулай ҙа ил эсендә дан алған, ил тышында һан алған сәсәндең, етмәһә, йөҙ етмеш биш йәшлек ҡарттың һүҙен бала кешенең шулай үтә ҡыйыу ҡыйыуы халҡыбыҙ этнопедагогикаһының Урал батыр ауыҙынан әйтелгән

“Олоно оло тейегеҙ,
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе тейегеҙ,
Кәңәш биреп йөрөгөҙ!”[99]

тигән ҡануны менән дә Ҡуңырбуға” эпосындағы

“Һүҙең башла олонан,
Кесенең тот ҡулынан;
Олоға юл бирерһең,
Кесегә ҡул бирерһең!”[100]

тигән һүҙҙәр менән дә һыйышмай.

“Аҡһаҡ Тимер” дастанының геройын малай сағында уйынлы-ысынлы тиңдәштәре хан итеп күтәргән кеүек, Иҙеүкәйҙе лә малайҙар хан итеп таный. Кесе йәштән шулай абруй алып өлгөргән Иҙеүкәй Һабрау сәсән менән икенсе бер осрашҡанында иһә шул ҡағиҙәләрҙе лә үҙләштереп өлгөргәнлеген күрһәтә. Хәҙер инде ул киреле-миреле яуаплашып тормай унын менән. Һабрау әйткәнде ярты һүҙҙән эләктереп, ҡарт сәсәндең тел төбөнә тиҙ төшөнә. Шуның менән Иҙеүкәй уның алдында зирәклеккә һынауҙы уңышлы тотоуға ирешә. Шунан һуң ғына эпос һүҙ ниҙән башланһа, шуға беҙҙе яңынан алып ҡайта. Һабрау Иҙеүкәйгә төп кәңәшен былай тип әйтә:

“Инде, Иҙеүкәй, һиңә әйтәм,
Һүҙен тыңла ҡартыңдың...
Ҡан ерән ат менгәнсе,
Урал батыр ҡылысын,

[99] БХИ.3-сө том: Эпос. – 120-се б.
[100] Шунда уҡ. - -304се б.

Ел еткермәç Аҡбуҙын
Һыу төбөнән алһаңсы...”

Инде зирәклеге һыналған Иҙеүкәйҙең был йомаҡ-кәңәштең дә айышына төшөнөрөн Һабрау яҡшы аңлай, әлбиттә. Урал батыр атына атланып, уның алмас ҡылысын ҡулға алырға кәңәш биреү – шул батыр башлаған эште дауам иттерергә саҡырыуҙың, кинәйәләп, образлы әйтелеше ул.

Интеллектуаль йәһәттән дә, физик яҡтан да һынауҙар үткәндән һуң ғына, Һабрау әйткән бурысты үтәргә тотона Иҙеүкәй: һатлыҡ Дәммигә ҡаршы яу аса. Йәғни йылдам ғына башланып та, Һабрау үткәргән “имтихан” арҡаһында, бушай биреп ҡалған эпиклыҡ башланғысы бына шулай яңы һулыш алғандай, тағы яңынан ялғанып китә.

Борон, ҡаршы яҡтарҙың батырҙары осрашһа, иң әүәл бер-береһенең ҡанын ҡыҙҙырыу, йәнен көйҙөрөү, сәмләндереү маҡсатында, хурлау һүҙе әйтешкәндәр (“Тарғын менән Ҡужаҡ”, “Ҡарас менән Аҡша”). Дәмми бей менән Иҙеүкәйҙең дә әйтеше, асылда, ана шундай үсекләшеү, әрләшеү кеүек алыш алды йолаһын, хурлашыуҙы, атҡарыуҙан ғибәрәт.

Туҡтамышҡа хеҙмәткә ингәндә, төп маҡсатын йәшерә белеүендә; унан ҡасып киткәс, Янбайҙың хан исеменән биргән татлы вәғәҙәләренә ҡолаҡ һалмай, уның менән тиң әйтешеп, һүҙен юҡҡа сығарыуында; Сатмыр хандың ышанысын яулау өсөн, уға буш ҡул менән бармауында – ҡыҙын әсирлектән ҡотҡарыуында, шул арҡала яңы хужаһы менән уртаҡ телде тиҙ табыуға ирешеүҙән тыш, уның кейәүе булырға өлгәшеүендә Иҙеүкәйҙең алдан күреп эш итеү һәләтенә эйә икәнлеге, дипломатлығы асыҡ сағыла.

Иҙеүкәй олоно – оло, тип, кесене – кесе, тип танырға ла өйрәнә. Шул сәбәптән хатта, Дәмми бей хас дошманы булыуына ҡарамаçтан, уның оло кеше икәнен хөрмәтләү йөҙөнән, Иҙеүкәй уға киҙәк (үҙ нәүбәтен) бирә, йәғни үҙ кәүҙәһен үҙе сәп урынына ҡуйып, уға беренсе булып үҙенә атырға форсат бирә. Быныһы уны этик яҡтан идеаллаштырыуға тиң.

Иҙеүкәйҙе идеаллаштырыу шундай дәрәжәгә күтәрелә ки: хатта уның бер уғы бер ғәскәргә торошло итеп тә күрһәтелә. Әçәрҙең дүрт әҙип бер ҡулдан төҙөгән версияһында иһә ул, мифик донъяға юлығып, мифик Урал батырҙың мифик толпары менән мифик Алмас ҡылысын алырға ла хәленән килгән ҡаһарман итеп тә күрһәтелә (Күрәһең, “өмәселәр”, сама тойғоһон онотоп, Һабрауҙың кинәйәле һүҙен тура мәғәнәлә аңлап, уны шулай мифик донъяға сәйәхәт иттергән).

Иҙеүкәй яңғыҙаҡ баһадир түгел. Бала сағында ул тоғролоҡто уғрылыҡтан өçтөн ҡуйған уйындаштарына таяна. Бара-тора Һабрау сәсән менән кәңәштәш булыуға ирешә. Туҡтамышта хеҙмәттә торған

сағында, уға Ыласын ярҙам итә. Сатмыр ханға барыуға иһә үҙ улы Мораҙым уға ышаныслы таяныс булып үҫеп етә. Туҡтамыш хандың дәүләтен улы менән тар-мар итә. Иленең ҡонон шулай ала Иҙеүкәй батыр.

Эпостың мәғлүм варианттарының барыһында ла тиерлек, мөхәббәт интригаларына мөһим урын бирелгән. Улар сюжет конфликтын көсөргәнешләндереүгә тос өлөш индерә, Иҙеүкәйҙе рухи яҡтан һынаусы өҫтәлмә сара булыуҙары менән дә әһәмиәтле. Иҙеүкәйгә тәүҙә хан ҡатыны ғашиҡ була. Ул иһә ҡоллоҡта интегеүсе Ғәнәкә атлы ҡыҙҙы үҙ күрә. Ханбикәнең мөхәббәтен инҡар итеүе арҡаһында, тыуған конфликт егетте етди һынауҙар алдына ҡуя. Ахырҙа шул ыҙғыш тағы ла етдирәк, тағы ла мөһимерәк конфликтҡа, Туҡтамыштың башына етмәле оло конфликтҡа, олғаша.

Ә инде, Сатмырхандың ҡыҙын алыу өҫтөнә, Туҡтамыштың ике ҡыҙын да ҡосаҡлап ултырыуы – Иҙеүкәйҙең үҙ улы Мораҙым менән конфликтҡа инеүенә сәбәпсе була.

“Иҙеүкәй менәнМораҙым” эпосы төп геройҙың бөтә ғүмерен үҙ эсенә ала. Был яҡтан ул традицион эпостарҙы, әйтәйек, “Урал батыр”ҙы, “Манас”ты хәтерләтә.

Мөғжизәүи юл менән тыуған Иҙеүкәйҙең был донъянан китеүенә лә эпоста мөғжизәүи төҫ бирелгән. Берҙән, ул, үҙе үлмәҫ элек үк, васыят әйтеп ҡалдыра. Шуның буйынса, уның мәйетен аҡ дөйәгә артмаҡлайҙар, ул хайуан ҡайҙа сүгә, батыр шунда гүр эйәһе була. Икенсенән, аҡ дөйә – аҡ болан кеүек үк, башҡорттоң инанысы буйынса, изгелек һәм игелек, ырыҫ символы. Иҙеүкәй шундай мәғәнәгә эйә булған йән эйәһе ярҙамында үҙенең һуңғы төйәгенә күсә. Тимәк, донъялыкта ул ҡылған эштәр игелек һәм изгелек тип баһалана әҫәрҙә.

Өсөнсөнән, Иҙеүкәйҙең ҡәбере ятҡан (Башҡортостандың Миәкә районындағы) Нарыҫтау – бөгөн булһын изге тау, унан ағып сыҡҡан шишмә изге шишмә иҫәпләнә. Шишмәһен Әүлиә шишмәһе, тип, алыҫ-алыҫ яҡтарҙан бөгөн булһын, шуның шифалы һыуын тәмләр өсөн, сәфәр сығалар, уға хаж ҡылалар икән, Иҙеүкәй рухы элек-электән изгеләштерелә килгән, тип әйтергә ҡала.

### 5. Ҡаҙанға ҡаттан юл һалған, унда зат ҡалдырған эпик батыр

Тарихтан билдәле булыуынса, XIV–XVI быуаттарҙа көнбайыштан Дунай йылғаһы буйҙарынан көнсығышҡа Обь, Тубыл йылғалары буйҙарынаса һуҙылған бик ҙур территорияла Нуғай урҙалығы барлыҡҡа килә.

Нәҡ ошо дәүерҙәрҙә нуғай батырҙары хаҡындағы тарихи ҡаһарманлыҡ йырҙары, ҡобайырҙары, тулғауҙары, йәғни нуғайлыларҙың халыҡ эпостары һәр халыҡ-кәүемдә киң танылыу

таба. Академик В.М. Жирмунский ошондай “Ҡырҡ нуғай батыры” эпостары циклын уртаҡ фольклор йәдкәрҙәренә индерә[101].

Шул ҙур төркөмдән ҡаҙаҡтарҙа – 27, ҡарағалпактарҙа – 15, нуғайҙарҙың үҙҙәрендә 11 сюжет билдәле: Шулар эсендә “Идегә”, “Муса”, “Мамай”, “Орак”, “Шура батыр”, “Ғәҙел солтан”, “Казы-Тоган”, “Эр Тарғын”, “Кобланды батыр”, “Ғайса улы Әмәт” эпосы бар. Башҡорттарға иһә “Иҙеүкәй менән Мораҙым”дан тыш, “Мамай хан хаҡында хикәйәт”, “Сура батыр”, “Ир Тарғын”, “Ғайса улы Әмәт”, “Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр” мәғлүм. Шуларҙан “Сура батыр” сюжетын үткән быуат баштарында башҡорттар хәтерҙән ҡобайыр шиғыры менән йәки ярым сәсмә, ярым теҙмә рәүештә хикәйәт итеп һөйләп йөрөгән. Был хаҡта Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев һәм Әхмәтзәки Вәлиди хәбәр итә. М. Өмөтбаев уны батырҙар тураһындағы өләңдәр рәтенә индергән[102].

XX быуатта “Сура батыр” ҡобайырының өлөштәре 1923 йылда “Яңы юл” журналында донъя күргән, бер өҙөгө 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылында Мөхәммәт сәсән Агишевтан Кирәй Мәргән тарафынан яҙып алынған[103].

“Сура батыр” эпосының башҡорт версияһының Силәбе өлкәһе Уй районы Әмин ауылы уҙаманы Рәхмәтуллин Тимершаһ Әхмәтшәриф улы төҙөгән шәжәрәгә теркәлгән варианты буйынса ла[104], Ғ.Б. Хөсәйенов төҙөгән йыйылма тексында әйтелеүенсә лә, Сура батыр Ҡаҙанды Иван Грозныйҙан ҡурсалау өсөн яу саба. Асыҡ ҡына әйтелмәһә лә, Ҡаҙан ханының уны батыр тип иғлан итеүенән шул яуҙа (ваҡиға үҙе тасуирланмаһа ла) Сура батырлыҡ өлгөһө күрһәтеүе аңлашыла. “Батыр” һүҙе борон “хәрби дәрәжә (яугирлыҡ дәрәжәһе – звание)” тигән мәғәнәгә лә эйә булған. Һүҙ барған эпоста был һүҙ “биләгән вазифа” мәғәнәһенә лә эйә.

Әҫәрҙә иғтибарға лайыҡ булырҙай шундай бер мөһим генә мәғлүмәт бар: Сура “... үҙенә йәмәғәт итеп, татар ҡыҙын алды. Шул ҡатынынан ир балаһы булып, нәҫеле таралды. Ҡаҙан шәһәрендәге оҙондар нәҫеле – шул Сура батыр тоҡомо имеш”. Был һүҙҙәрҙә лә тәрән мәғәнә бар. Хикмәт шунда: әйтеп үтелгәненсә, боронғо йола буйынса, сит ҡәүемдең күрмәлекле, күркәм кешеһенең түлен алып ҡалырға тырышкандар[105]. Быға дәлилде туған фольклорыбыҙҙан да, башҡа халыҡтарҙың ижадынан да, этнографиянан да күп табырға була[106]. Был йоланы урындағы халыҡ, үҙ ҡәүеменең ҡанын яңыртыу өсөн, атҡарыр булған. Шуға күрә лә ваҡытлыса кейәү ролен атҡартырға теләһәләр,

---

[101] Жирмунский В.М. Тюркский героический эпос. – Л., 1976. – С. 394 -395.

[102];Өмөтбаев М. Йәдкәр. – 129-сы, 248-се б.; Вәлиди Туған Ә.-З. Хәтирәләр. – 44-се б.

[103] БХИ: Эпос. 3-сө кит. - 69 – 70- се, 303-сө б..; БХИ. 5-се том. – 210-сы , 361-се б.

[104] БХИ. 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. – 401-411-се б.

[105] Инан Абдулкадир. Күсмә төрки ҡәбиләләрендә уллыкҡа алыу йолаһы менән бәйле традициялар//Ватандаш. – 2000. – №6. – 122-се б.

[106] Сөләймәнов Ә.М. Абдулкадир Инан – фольклорсы//Ватандаш. – 2001. – №12. – 134-147-се б.

теләһә кемде түгел, ә затлы кешене йәлеп итергә тырышҡандар. Тимәк, Сура батырҙың Ҡаҙанда кәләш алыуы, унда унан зат ҡалыуын айырата әйтеү ҙә эпос геройының шул ханлыкта батырлыҡ ҡылыуын дәлилләүгә хеҙмәт итә.

Эпостың йыйылма тексында иһә Сураның Ҡаҙан янындағы алышта ҡатнашыуы, "ал-ял белмәй" һуғышыуы, ике илгә, шул уҡ Ҡазанға һәм Нуғай иленә, даны таралыуы хаҡында бары хәбәр ителә генә. Уның ҡарауы эпос, Ҡаҙанға килгәс тә, Сураның йыйында ҡатнашыуы, шунда ат сабышында ла, мәргәнлектә, бил һынашта ла ал бирмәүе хаҡында хәбәр итә. Бының менән генә лә сикләнеп ҡалмай, хан ҡыҙы ҡулынан бүләккә "Буҙйегет" дастанының геройы эйә булған ҡылысты хәтерләтмәле һигеҙгә бөкләнмәле алтын һаплы алмас ҡылыс алыуы хаҡында ла әйтеп ҡуя. Халҡыбыҙҙың эстетик аңы буйынса, майҙандағы ярышта еңеү – бер эш, яу яланында һынатмау – икенсе эш. Салауат Юлаев бушҡа ғына:

> "Батырмын, тип кем әйтмәй –
> Яу килгәндә, йүне юҡ;
> Сәсәнмен, тип кем әйтмәй,
> Дау килгәндә, өнө юҡ", –

тип әйтмәгәндер. Әммә йыйылма текста, асылда, Сураның бәйгелә ал бирмәүе хаҡында һүҙ алып барылыуына уның ысын яуҙа нисек алышҡанын күҙаллатыу бурысы йөкмәтелгән. Әле һүҙ барған эпостың күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа мәғлүм вариантында ла Сура батырҙың мәргәнлегенә иғтибар иттерелгән булған. Аҡташ хандың ҡырҡ кешеһе атын урлағас, Сура, уларҙы ҡыуып етеп, "барыһын да уҡ менән үлтереп", иленә ҡайтып китә. Ул вариантта ла Сураның "Ҡаҙанды русҡа бирмәҫкә" һуғышҡанлығы хаҡында әйтелә[107].

Эпостың ҡурайсы Кәрим йырау Дияровтан яҙып алынған версияһында бына бындай һүҙҙәр бар: "Иван Грозный ебәргән ғәскәрҙәр Ҡаҙанды уратып ала. Ҡаҙан халҡына ҡурҡыныс тыуа. Был хәл башҡорт халҡына ла тиҙ ишетелә... Беҙҙе лә рус диненә буйһондорорҙар.., тиҙерәк татарҙарға ярҙамға барырға кәрәк, тиҙәр. Сура батыр иң яҡшы уксы башҡорттарҙан атлы ғәскәр туплай. Сура батыр үҙе сығарған марш көйөн ... бөтөн ҡурайсылар бергәләп ... ат өҫтөндә килеш уйнап ебәрәләр. Марш көйөн ҡурайҙа уйнай-уйнай, Ҡаҙанға походка сығалар"[108].

"Сура батыр" йә "Ҡаҙан яу алған" тигән ул көйҙө ҡурайсылар әле лә яратып уйнай.

---

[107] Өмөтбаев М. Йәдкәр. – 248-се б.
[108] Дияров К. Сал Уралдың моңдары/Төҙ. Рәшит Шәкүров һәм Фәрит Камаев. – Өфө:БКН, 1988. – 38-39-сы б.

“Сура батыр”ҙың эпик ҡобайыр, М. Өмөтбаевса әйткәнсә, өләң рәүешендәге тәүге варианты беҙгә тулы килеш килеп етмәгән. Айырым мотивтары, өҙөмтәләре генә мәғлүм. Сура батырҙың Ҡаҙанға яу сабыуы хаҡында уның үҙ ауыҙынан әйттерелә:

Яуға китеп барамын,
Ҡаҙан илен аламын.
Ҡаҙан илен алған һуң,
Ҡайтып, ҡылысым һаламын[109].

Шулай тиелә Мөхәммәт сәсән Агишевтан яҙып алынған өҙөмтәлә. Ҡылыс һалыу – яулашыуҙы ҡуйыу. Шуға күрә лә әле килтерелгән дүрт юллыҡтан Сура батырҙың Ҡаҙан илен алырға, шунһыҙ яуҙы туҡтатмаҫҡа ҡәтғи ҡарарға килгәненә төшөнәһең.

Йыйылма вариантта әйтелеүенсә, яуға китеп барышлай, Сура батыр ғәйрәт менән былай тип тә оран һала:

Сура, Сура, Сураман,
Толпар менеп, тыу алып,
Яуға ҡаршы барамын,
Ғәүер (кафыр. – Ә.С.) дошман тап булғас,
Күпсетермен талағын,
Ҡапҡаһына Ҡаҙандың
Ҡаттан һуҡмаҡ һалырмын!

Тыу (флаг, байраҡ) күтәреп барыу – башҡаларҙы әйҙәп барыу, еңеүгә ышаныс билгеһе икәне һәр кемгә билдәле. Ә инле Ҡаҙан ҡапҡаһына ҡаттан юл һалырға теләү – бер юлы ике мәғәнәне, берҙән, әгәр тәүге һөжүм уңышһыҙ була ҡалһа, батырҙың ҡабат-ҡабат яу асырға теләүен; икенсенән, тәүге һөжүмдә үк еңеп ҡайтҡас, дошман тағы Ҡаҙанға уҡтала торған булһа, ҡабат-ҡабат поход яһаясағын аңлата.

Буш ғәйрәт ормаған Сура батыр: әйтелгәненсә, һүҙе эшенән айырылмаған.

“Сура батыр” эпосының шәжәрәлә бирелгән вариантының сюжеты үҙенең композицияһы менән үҙенсәлекле. Ул, асылда, бер нисә мотивтан ойошҡан. Күләм яғынан ыҡсым ғына булһа ла, ул өс быуындың эшмәкәрлеген үҙ эсенә ала. Тәүҙә бер ни тиклем “Күсәк бей” эпосының башланғыс мотивын хәтерләткән мотив килә: Сура батырҙың атаһы мал-тыуарына арыҫлан тейеүҙән йонсой. Әммә, ошондай уҡ ҡаза кисергән Мәсем хандан айырмалы рәүештә, яр һалып, батырҙарын саҡырмай, ә януарҙы һыйлап, уны ризаландырыу менән сикләнә. Бында ниндәйҙер кимәлдә боронғо бер инаныс, атап әйткәндә, батырҙар тураһындағы әкиәттәргә хас йола үҙенең сағылышын тапҡанға оҡшай. Әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, аждаһаға (ғифритка йә дейеүгә) көндә лә бер ҡыҙҙы ҡорбан итәләр. Эпоста ваҡиғалар реаль ерлектә бара. Шуға күрә

[109] БХИ. 5-се том. Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). – 210-сы б.

әлеге мотив беҙҙе фантастик заттар донъяһына алып китмәй. Бында шулай уҡ халыҡтың “таш менән атҡанға аш менән ат” тигән фәлсәфәһе сағылыуын да танырға тура килә.

Икенсе мотив – төп мотив. Сөнки тап ошонда Сура батырҙың донъяға килеүе, ир етеп, Ҡаҙанға яу сабыуы хаҡында бәйән ителә. Артабан иһә “Кинйәкәй”, “Түлле Мәмбәт”, “Бей Туҡсаба уғланы Мөйтән бей”ҙәге (Үҫәргән шәжәрәһендәге) кеүек Сура батырҙан тыуған уландар ҡылған йә улар башынан үткән эштәр, уның заты төйәк иткән урын хаҡында бәйән ителә. Быныһы иһә, заманында Ҡаҙан тиклем Ҡаҙанға яу сапҡан батырға, шәжәрә традицияһы буйынса, информаторҙарҙың үҙен һәм үҙенең затын мөнәсәбәтле итеп күрһәтергә тырышыуы менән аңлатыла.

### 6. Ихтилал башлыҡтарының эпос ҡаһарманы булғаны

1552 йылда Иван IV Ҡазанды алып, уның ханлығын еңгәндән һуң, бер яҡтан, шул дәүләт ҡулы аҫтында интегеүҙән, икенсе яҡтан, татар халҡының шул яуҙа һәм шунан һуң ҡырғынға дусар ителеүен күргән башҡорттар, Юрматы ырыуы шәжәрәһендә әйтелгәненсә, “башҡа һис тә уй уйларға сара булмағас”, Аҡ бей-батша берләшергә саҡырыуын ҡабул итәләр[110]. Быға шул да сәбәп ҡыла: әйтеп үтелгәненсә, Иван батша башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғын, динен, йолаларын таный һәм уларҙы һаҡларға вәғәҙә бирә. Әммә ул һәм уны биргән Рюриковичтар династияһы власть башынан китеп, Романовтар династияһы тәхеткә ултырыуы була (1613) –.башҡорттарҙың Аҡ бей батша таныған аҫабалыҡ хоҡуҡтары сикләнә бара, ер тәләфләнә, властар баш-баштаҡлыҡ итә, Башҡортостанға башҡа халыҡтар күсереп ултыртыла. Унда заводтар, ҡәлғәләр төҙөй башлайҙар. Һөҙөмтәлә, башҡорт халҡы ҡырҡылған милли ирекләрен даулап ихтилалдарға күтәрелә: XVII–XVIII быуаттар буйы Башҡортостанда тынғылыҡ бөтә. Был хәрәкәт XX быуаттың тәүге сирегендә тағы тоҡана. Академик М.К. Любавский яҙыуынса, шул дәүер эсендә, үҙҙәренең хоҡуҡтарын даулап, башҡорттар һымаҡ ирек яулап ихтилалға күп күтәрелгән халыҡ Рәсәйҙә бер ҡайҙа ла бер ҡасан да булмаған.

Асылында Иван IV таныған хоҡуҡтарҙы кире ҡайтарыуҙы даулаған, икенсе төрлө әйткәндә, ул биргән “жалованная грамоталар”ҙа әйтелгән хоҡуҡтар һаҡланһын өсөн, тимәк, Рәсәй менән договорлы мөнәсәбәттәр өсөн көрәшкән башҡорттар. Риүәйәттәр бүлегендә әйтеп үтелгәненсә, аяуһыҙ баҫтырыла килгән ул оҙайлы көрәш башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ла, музыкаль фольклорында ла сағылмай ҡалмаған. Хатта ки, Европа илдәрендә эпос дәүере күптән үтеп киткән, тип иҫәпләнгән бер мәлдә лә

[110] Башҡорт шәжәрәһе. – 29-сы б.

башҡорт сәсәндәре ошо жанрға ла мөрәжәғәт итергә һәм уны, Ғәлимов Сәләмсәрәк әйткәндә, “йәшәрергә, яңынан тыуырға” мәжбүр иткәндәр.

Башҡорт халҡының эпик мираҫында сюжеты теүәл генә һаҡланмаған, шул сәбәптән батырҙарҙы маҡтауға ҡоролған әҫәр төҫөндә ген килеп еткән “Сүкем батыр”, “Аҡшам батыр”, “Салауат батыр”, “Түлгән батыр”, “Баязит батыр” ише ҡобайырҙар бар. Шундайҙарҙан “Көбәк батыр”, “Тәүәш Мәргән”, “Мораҙым менән Буһҡын” һымаҡтары иһә киң ҡоласлы эпик сюжеттың ыҡсымлашып ҡалған варианттарынан ғибәрәт.

Эпос жанрына яңынан йән өргәндә, ил хәстәрен хәстәрләгән ат ҡушарлап яуға сапҡан милли батырҙарыбыҙ хаҡындағы ошондай әҫәрҙәрҙең традицияһы ла үҙенекен иткән, әлбиттә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, Рәсәй батшалары тәхетен дер һелкеткән башҡорт ихтилалдары етәкселәре Һары Мәргән, Ҡунҡас (1662–1664 йылдар), Сәйет, Көсөк Юлаев ( 1681–1684), Алдар, Күсем (1704–1711), Килмәк, Аҡай, Йосоп Арыҡов, Бәпәнә (1735–1740), Бикбулат Арҡаев, Көсөкбаев, Батырша (Ғабдулла Ғәлиев), Йылан Этҡол, Сурағол (1755–1756), Ҡаранай Моратов, Кинйә Арыҫланов, Ҡәнзәфәр Усаев (1773–1775) ише ҡаһармандарыбыҙ хаҡында ла сюжетлы һәм сюжетһыҙ ҡобайырҙар әҙ булмағандыр, моғайын. Әммә милли азатлыҡ хәрәкәте хаҡында халыҡ ижад иткән әҫәрҙәр ҙә уларҙың етәкселәре яҙмышына дусар ителгән: уларҙы башҡарыу ҡәтғи тыйылған, ә кем быға батырсылыҡ итә – ҡулға алынған, язаға тарттырылған. Шулай ҙа халыҡ хәтере беҙҙең көндәргәсә Аҡай батыр, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин, Байыҡ Айҙар сәсән тураһындағы эпостарҙы килтереп еткергән.

***а) Йыйнаҡ сюжетлы, оҙайлы эпилоглы яҙма эпос***

1734 – 1758 йылдарҙа бер-береһен Ырымбур виләйәтендә вәлилектә алмаштыра килгән Татищев, Урусов, Кириллов, Неплюевтарҙың тырышлығы менән Башҡортостан төньяк-көнбайыштан да көньяҡ-көнсығыштан да етмешләгән ҡәлғә менән уратылып алына. Был, берҙән, башҡорт ерен колонизациялау сәйәсәте көсәйә барғанда, урындағы төп халыҡ улай-былай ыҙғыш күтәргән сүрәттә, уны ауыҙлыкта тотоу өсөн; икенсе яҡтан, шул сәйәсәтте артабан Ҡаҙағстан, Урта Азияға, Көнсығышҡа уңышлы (Петр I ҡалдырған ун өс пунктлы васыятҡа ярашлы Ҡыҙыл диңгеҙгәсә) йәйелдереү өсөн кәрәк була. Башҡорттар эштең ҡайҙа барғанын яҡшы аңлаған. Берҙән, ҡала, крепость төҙөү эшенә ҡамасаулыҡ итергә тырышып, әлдән-әле уларға һөжүм итеп торған. Икенсе юлды ла күҙ уңынан ысҡындырмағандар булһа кәрәк.

Башҡорт халҡының шул дәүерҙәге көрәше “Аҡай яуы” (“Хикәйәти Аҡай”) тигән яҙма эпик ҡомарткыла сағылыш тапҡан. Аҡай яуы хаҡында яҙғанда, Ә.-З.Вәлиди шуға иғтибар иткән. “Аҡай

үҙе, Көнсығыш Башҡортостандағы Тамъян ырыуы бейе була тороп, Минзәлә янында йәшәгән Йәнәй башҡорттарынан ер биләмәһе алып, был ҡаланан 50 саҡрымда үҙ хужалығын ҡорған”[111]. Үҙенең төп төйәгенән тыш, уның биләмәләре Нуғай, Уса даруғаларында ла булған. Әлегәсә Башҡортостандың Мәләүез, Саҡмағош, Шаран (Иҫке Тамъян), Миәкә (Тамъян Таймаҫ), Татарстандың Мөслим районындағы берәр ауылдың Тамьян тип аталыуы башҡорттоң Тамьян ырыуы борон биләгән ерҙәренең ни тиклем киң булыуы хаҡында һөйләй. Ә.-З. Вәлиди ҙә, шундай ауылдарҙы күҙ уңында тотоп, “улар иһә мотлаҡ рәүештә стратегик маҡсат менән ҡоролған булырға тейеш” тигән фекер үткәрә[112]. Быны, колонизаторҙар ҙа яҡшы аңлаған булғанға оҡшай. Юҡһа, Аҡай менән ҡан ҡәрҙәшлек бәйләнешенә ингән Ҡаҙан сыуаштарын уға ҡаршы һөскөртмәҫтәр ине.

Батшалыҡтың колонизаторлыҡ һыналған был методы, милләтте милләткә ҡаршы ҡотортоу сәйәсәте, был юлы ла һәр саҡтағыса “уңышлы һөҙөмтә” бирә. “Аҡай яуы” бәйән итеүенсә, башҡорт, ҡаҙаҡ, татар йолаһы буйынса, төрлө ҡәүем араһында ҡыҙ алып, ҡыҙ бирмәк – ҡан-ҡәрҙәшлеккә кермәк тигәнде аңлатҡан. Түләкәй улы Күсембәт сыуаштан кәләш ала. Ошо никахтан Сыуаш атлы улан тыуа.

---

[111] Вәлиди Туған. Ә.-З. Башҡорттар тарихы. – 124-се б.

[112] Шунда уҡ. Ошо урында шуны әйтергә кәрәк. Татар теле ғилеме белгесе Марсель Әхмәтжановтың, совет осорона тиклем рус документтарында, әҙәбиәттә төркиҙәрҙең бөтәһенең дә, ғәҙәттә, “татары” тип аталыуы менән иҫәпләшеп тормаҫтан, “О восстании башкир под руководством Акая сына Кусюма” тигән сығанаҡтан: “Аҡайҙы – Аҡай бей, татар, юлбаҫар”, – тип әйтеүенә таянып, уны татар итеп маташа. Шул маташыуын дәлилләү өсөн уның тыуған урынын Татарстандағы Мамадыш төбәгендәге Ҡатмыш ауылына күсерә, ауылдарҙа ғауға сыҡһа: “Аҡай яуы сыҡҡанмы?” – тип әйтеү ғәҙәте барын иҫенә төшөрә. Заманында Шәғәли Шаҡман тигән бейҙәре етәкселегендә тәүгеләрҙән булып Иван IV “Жалованная грамота” алған башҡорттоң Тамьян ырыуын да татарҙыҡы яһай. Әйткәндәй, Аҡай исеме, асылда, “ағай” (дядя) мәғәнәһендәге псевдоним булыуы мөмкин. Уның ырыуҙаштары булған Тамьян башҡорттары үҙ һөйләштәрендә бөгөн булһын ағайҙы “аҡый”, “ағый”, әсәйҙе – “әсей”, атайҙы “атый” тиҙәр.

Әммә үҙенең концепцияһына бөтөнләй уңайлы булһын өсөн, хөрмәтле М. Әхмәтжанов башҡорттоң үҙ аллы этнос булыуын да инҡар итеп, уны “башҡорт сословиеһы” тип атай. Ә был атамаға Рафаэль Хәкимов үҙенең “Кем һин, татар?” (Хакимов Р.С. Кто ты, татарин? // Tat News. ru - Информационное агенстjdj/ - 2002. – 7. 05 ) тигән мәҡәләһендә яуап биргәйне инде. Унынҫа, башҡорт теле тигән тел юҡ. Ул – бары татар теленең диалекты. Башҡорт тигән милләт юҡ, ул бары татарҙың бер сословиеһы ғына. Улай тигәндә, башҡорттоң ергә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булыуы күҙ уңында тотолған, әлбиттә. Хәйер, Әхмәтжанов “башҡорт сословиеһы”на аңлатма биреүгә ихтыяж бар тип иҫәпләгән. Һәм бына ни тип яҙған: “Хикәйәттә һүҙ йыш ҡына башҡорттар тураһында бара, ләкин XVIII быуатта башҡорт сословиеһы милләт айырмаһын түгел, ергә мөнәсәбәтле йәмғиәтте сағылдырған”. Йәнә шул. “Аҡай яуы”нда “Ҡаҙан сыуаштары” тигәнде ул “Ҡаҙан татарҙары” тип “тәржемә” ҡыла. Артабан “Ҡаҙан сыуаштары – Ҡаҙан өйәҙенең яһаҡлы татарҙары. Уларҙы XVI-XVII быуаттарҙа сыуаш тип йөрөткәндәр” тигән аңлатма ла бирә. Булһа булыр. Уның дөрөҫлөгөн иҡрар йә инҡар итеү – тарихсылар эше. Ә бына “Ҡаҙан сыуашы” тигәндә, хикәйәттә Ҡаҙан юлындағы йә Ҡаҙан вилайәтендәге сыуаштар күҙ уңында тотолған. Шул ҡәүемдән кәләш алғанға Аҡайҙың атаһы Теләкәй улы Күсембәт унан тыуған улына Сыуаш тип исем ҡуша. Әҫәрҙә мишәр – мишәр тип, сирмеш (суҡынмаған мари), татар, мордва, уржум (Уржум ҡалаһы яғынан килгән нократ татарҙары. – М.Әхмәтжанов иҫкәрмәһе) – һәр ҡайһыһы үҙ этнонимы менән аталған, тик айырым осраҡтарҙа ғына рустар кафыр тип, башҡорттар мосолмандар тип аталған (Ҡар.: Әхмәтжанов Марсель. Акай явы турында хикәят // Мирас. – 2004. – №48-58-че б.).

Икенсе төрлө әйткәндә, үҙҙәренең мәшһүр шәхесенең шул никахы ярҙамында, сыуаштар уратылышында йәшәгән башҡорттар үҙҙәре кеүек үк, төрки сығышлы ошо ҡәүем менән төптән килгән ҡан-ҡәрҙәшлеген яңыртыуға нигеҙ һалғандар. Шул никахтан тыуған балаға шул ҡәүемдең этнонимын исем итеп биреп, ике халыҡтың ҡәрҙәшлегенә баҫым яһарға тырышҡандар. Сыуаш атлы шул улан йөҙөндә Аҡай аталаш ҡустылы булған. Шул факторҙың береһе менән дә иҫәпләшеп тормаҫтан, сыуаштар, Аҡайға барымта яһап, уның йылҡыларын ҡыуып алып китә. Ҡәрҙәшлек төшөнсәләре менән иҫәпләшмәүҙәрендә үк сыуаштарҙың властар ҡотҡоһо буйынса эш итеүе төҫмөрләнә. Икенсе яҡтан, колонизатор-властар, әлбиттә, урындағы ҡәүемдәрҙең йола хоҡуғының варварлыҡ дәүеренән бирле һаҡланып һәм күҙәтелеп килгән “барымтаға – барымта”, “ҡарымтаға – ҡарымта” тигән принцибының һис һүҙһеҙ үҙенекен итәсәген белеп, аҫтыртын эш ҡылғандар. Тик был юлайы “барымтаға – барымта” принцибы “барымтаға – ҡарымта” (ҡанлы үс алыуға) әүерелә. Бында ла “сәхнә артынан” идара итеүсе колонизаторҙарҙың роле төҫмөрләнә. Улар ҡотҡоһо буйынсалыр, ҡыуғын етеп килгәс, уғрылар малды ташлап китеү йә, “Ҡарас менән Аҡша” эпосындағы кеүек, ике яҡтың батырҙарын, йәрәбә ташлап, көс һынашына ирешеү урыны, уҡ-һаҙаҡ һәм ҡылыстарын эшкә егә. Ҡоралға тотонорға Аҡайҙы шул мәжбүр итә инде.

“Ике төлкө талашһа – ҡоҙгонға ем” тигән кеүек властарға ошо алыш биргән “мул уңышты” йыйырға ғына ҡала. Ә тере ҡалған бер сыуаштың башҡорттар башлап һөжүм итеүе тураһында, яһап һөйләүе улар өсөн Аҡайҙы ҡулға алыуға һылтау – көтөлгән, теләп алынған финал була. Сөнки, берҙән, ул 1681–1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе Күсемдең улы булыуы тарихты белгәндәргә мәғлүм. Икенсенән, Сыуаш атлы ҡустыһы, сыуаш затлы үгәй әсәһе аша сыуаштар менән башҡорттарҙың татыулығына, берҙәмлегенә өлгәшеүе ихтимал. Шулай итеп, ике яҡлап та Аҡай улар өсөн ҡурҡыныс шәхес була.

Яҙма дастан традицияһындағы һәм шуға күрә лә “Ялыҡ бей” эпосы кеүек үк беренсел заттан бәйән ителгән был әҫәр берсә “Аҡай яуы”, берсә “Хикәйәти Аҡай” тип аталһа ла, Аҡай батыр унда финалғаса хәрәкәт итмәй. Бер сыуаштың ошағы буйынса ҡулға алынып, зинданға ябылыуы була – ул ваҡиғалар уртаһында ҡайнау мөмкинлеген юғалта. Асылда, “барымтаға – барымта”ның ҡарымтаға әүерелеүе һәм батырҙың ҡулға алыныуы менән сюжет үҙенең мөмкинлеген файҙаланып бөтә. Шулай итеп, тотош алғанда, күләмле генә күренгән эпостың сюжеты бик тә ыҡсым булып сыҡҡан.

Әммә сюжет тамамланыуы – композицион яҡтан әҫәрҙең осланыуы түгел. Әҫәрҙең артабанғы өлөшө иһә сюжеттан тыш теркәлә

һәм оҙайлы эпилогты ғына хәтерләтә. Әммә ниндәйерәк эпилогты бит әле. Унда тасуирланған хәлдәрҙә ҡатнашмаһа ла, уларҙың булмышы, асылда, Аҡай исеменә бәйле. Милләттәштәре уны ҡотҡарыуҙы талап итеп, яңы күтәрелеш әҙерләй. Күтәрелештең дауам иттерелеүе хаҡында һүҙ барғанда, башҡорттар “араһында Ҡаҙан татарҙары уржумдар, сирмештәр бар ине”, тиелә. Шунан һуң хикәйәсе исеменән ошо әйтелгәнгә: “Былар үҙҙәренә яйлы мәлендә башҡорттар араһында йәшенер булды”, – тип, асыҡлыҡ индерелә. Әҫәрҙә башҡорттарҙың яҡын тарихтан, үҙҙәренең батыры Аҡайҙың һәләкәте һәм уның сәбәбенән һабаҡ ала белмәүҙәренә, күрше ҡәүемдәрҙең һәм властарҙың татлы вәғәҙәләренә үтә тиҙ ышаныусанлығына үкенес белдерелә. Ә улар шелтә булып аңлашыла.

Башҡорттар власть вәкиленең: “Батша һеҙҙең гонаһтарҙы ярлыҡаны. Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙең йорттарығыҙға ҡайтығыҙ. Һеҙгә бер кем теймәҫ”, – тигәненә ышанып, шул вәғәҙә аҫтында мәкер уй-ниәттәр ятыуына ҡапыл ғына төшөнә алмай илдәренә тарала, тимәк, ҡоралдарын ташлай. Һөҙөмтәлә, бер яҡтан, аслыҡ-яланғаслыҡҡа, икенсе яҡтан, карателдәр ҡыҫымына юлыға.

Вхтилалдың еңелеүенә килтереүсе сәбәптәрҙең иң мөһиме, әлбиттә, башҡорттарҙың үҙ ырыуҙарының берҙәмлегенә өлгәшә алмауы, тип раҫларға була. Сөнки, берҙән, ихтилал башлаусыларҙың саҡырыуы буйынса, һәр ырыуҙан вәкилдәр килә, ә эргәләге Ҡаңлы, Ҡыбау кешеләре ҡыбырлай һалмай. Етмәһә, ҡыпсаҡтар, ни сәбәптәндер баш күтәреүселәргә ҡорал менән ҡаршы сыға, хатта карателдәргә булыша. Шул сәбәптәр хаҡында уйланыу “Һуңғы Һартай” эпосы ҡаһарманы Ялыҡ бейҙең илбаҫарҙарҙан ырыуының ҡырылып, иленең еңелеүе хаҡындағы уйланыуҙарын хәтерләтә.

“Аҡай яуы” эпосының эпилогы тик еңелеү сәбәптәрен хәтерләүҙән генә тормай, әлбиттә. Ихтилал булып күтәрелерлек булғас, башҡорт сафында берҙәмлек, батырлыҡ традицияларына тоғро ҡалыусылар ҙа әҙ булмаған тигән һығымтаға ла урын бар. Ысынлап та, Аҡай тотолғас та, башҡорт ырыуҙары йыйынға йыйыла. Килмәгәндәрҙе лә, “теләр-теләмәҫ кенә” килгәндәрен дә: “Һеҙ яуға күтәрелергә әҙерме?” – тип намыҫтарына тейеп, көрәшселәр сафына баҫырға мәжбүр итәләр.

Халыҡ: “Беҙгә борон-борондан йәшәгән еребеҙҙә ҡәҙимге йолаларыбыҙса, үҙ ҡанундарыбыҙса тыныс һәм бәхетле йәшәргә урыҫтар мөмкинлек бирмәгәс, шул арҡала бик күп бәхетһеҙлектәр киләсәк”, – тиелһә лә, шул иң кәрәк нәмәнең, берҙәмлектең, булмауы трагик һөҙөмтәгә килтерә лә инде. Әҫәрҙең ул урынын уҡығанда сәстәр үрә тора. Башҡорт халҡы өҫтөнә килгән ул яфа натуралистик планда, йәнде өшөтөрлөк итеп, тасуирлап уҡ бирелгән: “Урыҫтар, төнөн шым ғына туптарын килтереп, таңда ҡапыл ата башлай... Яралылар йылғала

батып үлә. Был яуҙа һаҙлы йылғала мәйеттәрҙән быуа барлыҡҡа килә. Ҡарт-ҡороно, эттәрҙе туҡмап үлтергәндәй, таш һәм күҫәктәр менән бәргеләп үлтерҙеләр, имсәк балаларын ҡылыстары менән сапҡылап ырғыттылар, меҫкен ҡатын-ҡыҙҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәштәрен дә үлтерҙеләр... Ошо ваҡиғаларҙан һуң башҡорт ил-йортонда, хосусан Ҡаҙан юлында (даруғаһында. - Ә.С.) әҙәмдәр әҙ ҡалды, һәр ауылда бер йә ике йорт ҡалды... Ун кешегә – бер тире тун, бер һыйыр, бер ат тапманылар... Мазлум мосолмандарҙы, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, Минзәләгә килтерҙеләр, һәммәһен зинданға яптылар. Ҡала тышында алты босмаҡлы ғимәрәт (эшафот) ҡорҙолар. Уның һәр босмағына осло тимер шештәр ҡаҙып ултырттылар. Бер тимер шеше уртала, ҡалған тимер шештәр тирәһенә тағандар таҡтылар. Бынан һуң тотҡон батырҙарҙы килтерҙеләр. Тимер ҡаҙыҡтарҙы, дар ҡолғаһын кафыр ғәскәре сорнап алып, барабандар ҡағып, уйындар ҡылып, указ уҡылды. Урыҫтар язалауға тотондо. Иң әүәл беренсе башлап яуға кергән егетте урталағы йыуан тимер шешкә тотоп ултырттылар. Ул тимер шеш егеттең бөтөн эсен тишеп, иңбашына ҡәҙәр килеп сыҡты. Бүтәндәрен тирәһендәге осло тимер шешкә ултыртып, яман яза менән үлтерҙеләр. Аҙаҡ ярым үле кәүҙәләрен киҫәктәргә сабып өҙҙөләр. Ахырҙа баштарын киҫеп ташланылар. Ҡалған ҡайһыларын ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫтылар. Аҙаҡҡа ҡалғандарын ауыр таштар менән бәргеләп, ҡан-талҡан итеп үлтерҙеләр.

Бер кемгә лә тамсы шәфҡәт күрһәтелмәне”. Бынан тыш бер рус ауылындағы буш өйгә әсирҙәрҙе бикләп, уларҙы тереләй яндыралар.

Бындай финал ғазап эсендә ҡанһырап, йәллəт ҡулынан шаһит үлгәндәргә реквием кеүек ҡабул ителә. Был “ҡан баҙары” рустың бөйөк баталист-рәссамы В.Верещагиндың ирония менән “Һуғышҡа апофеоз” тип атаған картинаһын хәтерләтә.

Властарҙың уйлауынса, ҡанлы язаларҙан ҡурҡып, башҡорт башын күтәрмәҫ, ирек даулап яу сапмаҫҡа тейеш тойола. Әммә тарих шуның киреһенә шаһит була.

### *б) Яу аты образының хаҡ мосолмандарса эш иткән аҡ күңелле Ҡараһаҡал образын асышҡаны*

1739–1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе Ҡараһаҡал (Миңдеғол Юлаев – Шуно – Шуну – Суно – Суна[113] батыр хан) хаҡында заманында риүәйәт, йыр, эпос киң таралған булған. Быға уның батыр йөрәкле яу башлығы булыуы өҫтөнә, хаҡ мосоманлығын бер-нисә тапҡыр Мәҙинәи-Мәккәгә барып, хаж ҡылыуы менән раҫлауы ла нығ булышҡан.

“Ҡараһаҡал” эпосының прологы опера увертюраһын хәтерләткән ҡобайыр юлдарынан башлана. Унда “Яусыл булған атама Ата булған”,

[113] Шуно – Шуну – Суно – Суна (*калмык һүҙе*) - ҡара һаҡал.

“Йүнсел булған әсәмә Ватан булған” гүзәл Уралды яттар баҫып алғандан һуң, уның йәме бөтөүен күреп Сәйет, Күсем кеүек башҡорт батырҙарының ихтилалға күтәрелеүе хәбәр ителә.

Эпостың “Ҡараһаҡал яуы” тигән вариантында, Миңдеғол-Ҡараһаҡал илдәр гиҙеп, хаждар ҡылып йөрөй торғас, яйы сыҡҡанда, үҙен хан нәҫеленән тип таныта. Күрәһең, “хаҡһыҙ рәүештә ҡыйырһытылған яҡшы хаким” тигән халыҡ-ара монархистик мотивҡа ҡоролған төрлө легендар уйҙырмалар башҡорттарға ла борондан таныш булған. Көткәне шундай хаким булғас, хыялды ысынға алыуҙа улар ҙа башҡаларҙан һис ҡалышмаған. Шуға ла Миңдеғол-Ҡараһаҡал таратҡан уйҙырмаға ла еңел ышанғандыр. Һәр хәлдә, эпоста Миңдеғол-Ҡараһаҡалды, аҡ кейеҙгә ултыртып, баш осона күтәреү хаҡында хәбәр ителә. Аҡ кейеҙгә ултыртып, баш осона күтәреү – халыҡтың уны ҙурлауын, хан титулы алғанын йола ҡушҡанса рәсмиләштереүен аңлата.

Эпостың "Ҡараһаҡал" вариантында боронғо инаныстар менән бәйләнеше аныҡ һаҡланған йолалар ҙа сағылыш тапҡан. Улар ҙа, әҫәрҙең төп идея йөкмәткеһенә бәйле рәүештә, сәйәси маҡсатҡа яраҡлаштырылған һәм шул арҡала социаль йөкмәтке алған. Халыҡ тәҡдим иткән Ҡара атты менеп алғас, үҙенә тиклемге ихтилал етәксеһе булған Көсөмдөң ҡәберенә барып, Ҡараһаҡал уның ташына башын терәгәндән һуң, шунан тупраҡ алып, аты өҫтөнә һирпә.

Башҡорт халыҡ ижады өсөн традицион булмаған һәм аткарылышы менән театраль күренеште хәтерләткән был ике йоланың тулы тасуирланышын теркәп, эпосты ижад итеүселәр бер уҡ менән ике сәпкә бер юлы тейҙергән уҡсы кеүек эш иткән. Берҙән, хажи, Ҡөрьән-хафиз тигән дини дәрәжәләргә ирешкән кеше буларак, уның талаптарын теүәл үтәүсе итеп кенә түгел, мәжүсилек дәүеренән ҡалған инаныстарға хас йоланы бөтә ғәм алдында атҡарыуын да тасуирлап, Ҡараһаҡалдың халыҡҡа яҡынлығына ишара яһағандар.

Икенсенән, Ҡараһаҡалдың шул халыҡтың батшаға баш эймәҫ Көсөм (Күсем) ише шәхестәренең юлын ҡыуасағын билдәләүгә ирешкәндәр.

Эпоста Ҡараһаҡал менән Ҡара аттың яуҙа ал бирмәүенә дан йырлана. Уның “Ҡара ат” тигән вариантында был аттың тәржемәи хәленең Ҡараһаҡалға килеп юлыҡҡанға тиклемге өлөшө бәйән ителә. Йәнәһе лә:

Алдынан ҡош уҙғармаҫ,
Ҡая, һыуҙы шәй күрмәҫ*
Майор-түрә атына
Сабыуында ал бирмәҫ,
Үтә һылыу Ҡара ат,

*Шәй күрмәҫ – бер ни ҙә, бер ни тип тә белмәҫ.

Йөҙ егерме батырҙы
Ҡотҡарырға майорға
Бүләк итеп бирелгәс,
Толҡа тапмай сит ерҙә,
Иҙел аша йөҙөп сығып,
Ҡасып ҡайтҡан Ҡара ат.

Эпостың “Ҡара ат” тигән версияһының мәғлүм ике вариантында ла Ҡара ат образы үҙәк урынды биләй. Заманында “Ҡараһаҡал һәм Ҡара ат” көйөнөң тарихы һәм йырҙары” тигән баш аҫтында шул версияның Мөхәмәтша Буранғолов баҫтырған варианты буйынса, эйәһе ауға сыҡҡанда ла, Ҡара ат, ал бирмәй. Ҡасҡан аҡ кейекте күмәкләшеп ҡыуғанда, хатта тотош ғәскәрҙән дә бер генә ат та уға эйәрә алмай.

Ҡара ат – кеше яҙмышын хәл итеүсе изге зат образы булып кәүҙәләнә эпоста: ул аманатҡа алынған 120 башҡорт батырын тотҡонлоҡтан ҡотҡара.

Был аттың бер-береһенән айырылғыһыҙ шундай ике үҙенсәлеге бар. Бер яҡтан, япа-яңғыҙын 120 батырға торошло ат тип баһалау мөмкинлеген тыуҙырып, эпос уның бәҫен күтәрә. Икенсе яҡтан, был баһаға ул, аңлы кеше күҙлегенән ҡарағанда, алдында торған дилемманы, үҙ яҙмышына зыян бәрәбәренә, шул батырҙар файҙаһын күҙәтеп, дыуамалдарса хәл итеү аша өлгәшә.

Эпоста Ҡара аттың яу ҡырында үҙен нисек тотоуына айырата ныҡ иғтибар ителә.

Ҡара ат яуға кергәндә,
Ҡая-таш, тип торманы.
Уҡтар гөжләп торһа ла,
Йәнен аяп торманы,
Батыры һайҙа (һөңгө. – Ә.С.) күтәрһә,
Ҡанатлы ҡоштай, осто, ти.
.......................................
[Ҡараһаҡал батырҙың]
Ҡара атынан дошмандар
Ҡасыр урын тапманы.
Ҡара аты сапҡанда,
Еленә ағас йығылды...

Ошондай һүрәтләнеше менән Ҡара ат Урал батыр менгән Аҡбуҙаттың да, әкиәт батырҙарының да тоғро юлдашы булған толпарҙарҙың да һүрәтләнешен хәтерләтә. Шуға ла эпостың “Ҡара ат” тигән версияһында ат образының алғы планға сығарылыуына бер ҙә аптырайһы түгел. Башҡа версияларҙа ат образына Ҡараһаҡал образы ашараҡ килеү күҙгә ташланһа, бынеһында иртәкселәр Ҡараһаҡал образына Ҡара ат образы аша ғына күсә. Ҡара атты еле менән генә лә ағас йыҡмалы ат тип нарыҡлағандан һуң

“Ҡараһаҡал ҡулынан
Йөҙ мең дошман ҡырылды,”

тигән бары бер, әммә берәгәй фраза менән генә өҫтөндәге батырҙың шул мифик затлы Ҡара атҡа бәрәбәр икәненә иғтибар иттерелә.

Эпостың ошо версияһында Ҡараһаҡал ғәҙел хөкөмдар рәүешендә лә сығыш яһай. Һуғышсан йомошто үтәү урынына, кәләш алып, туй яһап ятыусы яугирын яу йолаһы ҡушҡанса, язаға тарттырырға ла хаҡы булһа ла, ул уны, “яуҙан ҡасҡан батыр”, тип хурлау менән генә сикләнә. Ә инде Морат мулла менән Мәхмүт старшина Теләүкәй тигән егетте “Ҡөрьән”де утҡа ташлауҙа ғәйепләп, уны хөкөмгә тарттырырға teләһәләр ҙә, Ҡараһаҡал уны аҡлай. Уның үҙ аргументы бар. Беренсенән, ул “Ҡөрьән хаҡы... – Алла хаҡы” икәнен иҫкә төшөрөп, Теләүкәйҙең ғәйебе булған сүрәттә лә, уны хөкөмгә тарттырыу – Алла эшенә ҡыҫылыу икәнен төшөндөрә. Икенсенән,

“Уҫаллыҡтан яҡмаған,
Юрый утҡа атмаған...
Дүрт аяҡлы толпар ҙа
Һөрөнмәйсә буламы?
Ирмен тигән ирҙәр ҙә
Яңылышмай буламы?” –

тип, яманлыҡ ҡылыу менән яңылышыу – бер түгел икәнен аңлата.

Өсөнсөнән, Теләүкәй өҫтөнән Морат мулла менән Мәхмүт старшина тәҡдим иткән хөкөм ҡарарын инҡар итеүгә Ҡараһаҡал, илдә оло яу булғанда, һәр ир заты иҫәптә икәнен – аргумент тип тә белә.

Ҡараһаҡалдың айныҡ баш менән аныҡ фекер йөрөтөүе шул арҡала ғәҙел хөкөм сығара белеүе Иҙеүкәйҙең зирәклек менән ғәҙел хөкөм сығарырға маһир булыуын хәтерләтә. Ҡараһаҡал образын тыуҙырғанда, бәлки, уның эшмәкәрлеген эпосты ижад итеүселәр үҙҙәре лә Иҙеүкәй образы аша баһаларға тырышҡандыр. Ҡараһаҡалдың, Антон ҡыҙы менән һөйләшеп ултырыуынан сығып, уның мәрйә бисәһе бар тигән ғәйбәтте ҡуйыртыуҙары Иҙеүкәйҙең Туктамыш хан ҡыҙҙары һәм Сатмырхан ҡыҙы Фирҙәүестәр араһында ултырыуы Мораҙымда атаһы хаҡында яман уй тыуҙыра: йәнәһе, уларҙың барыһы менән дә ҡарттың яҡынлыҡ ҡылыуы ихтимал. Был оҡшашлыҡ, бәлки, Ҡараһаҡал образын әҙер ҡалыпҡа, Иҙеүкәй образы ҡалыбына һалырға теләүҙән килә торғандыр.

***в) “Батырша” кобайыры***

Мәғлүм булғанынса, 1735–1740 йылдарҙағы Ҡараһаҡал ихтилалы иҫ киткес ҡатылыҡ менән баҫтырыла. Ҡанэскес генрал Соймонов командалыҡ иткән караттар тарафынан 404 кеше язалатыла (тимер шешкә ултыртыла, дүрткә тураҡлана, аҫтырыла; теле, танауы киҫтерелә һ.б.), 3665 кеше бәрелештәрҙә үлтерелә, 802-е һөргөнгә оҙатыла, 2419 кеше алыҫ рус ҡалаларына таратыла, 607 ҡатын-ҡыҙ татарҙарға бүләк

ителә, 6870 баш йылҡы малы тартып алына, 343 ауыл яндырыла, 3220 йорт-ҡура яндырыла һ.б.[114]

Ихтилалдан һуң башҡорттарға ҡаршы ҡыҫым көсәйәгәндән көсәйә бара. Ерҙе ирекле һатырға рөхсәт булыу менән, асылда, уны талап ала башлайҙар. Ҡәлғә-крепостар төҙөү дауам итә. 1730–1750 йылдарҙа рус булмағандарҙы христианлаштырыу көсәйә. Башҡорттар араһында аслыҡ хөкөм һөрә. Ас башҡорттар бала-сағаһын һатырға мәжбүр була. 1742 Сенатҡа яҙған үтенесендә Өфө губернаһының вице-губернаторы П.Д. Аксаков башҡорттарҙы христианлаштырыу буйынса үҙенең проектын тәҡдим итә. Уның асылы шунан ғибәрәт була: аслыҡтан интеккән башҡорттарҙың бала-саға һатыуын хупларға, был эште киңәйтергә, уларға бушлай икмәк таратырға, шул юл менән уларҙы христианлыҡҡа йәлеп итергә. Ошондай хәлгә түҙмәйенсә, башҡорттар йәнә баш күтәрә.

Тарихҡа “Батыра ихтилалы” тип теркәлгән нәүбәттәге башҡорт ихтилалы 1755–1756 йылдарҙа Нуғай даруғаһындағы Бөрйән волосында (хәҙерге Баймаҡ районы ерендә) башланып китә. Тиҙҙән уға Түңгәүер, Бошман-Ҡыпсаҡ, Сәнкем-Ҡыпсаҡ, Һыуын-Ҡыпсаҡ, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Гәрә-Ҡыпсаҡ, Тамьян, Ҡатай волостарының башҡорттары ҡушыла. Шул уҡ мәлдә Уса, Себер даруғалары күтәрелә. Был күтәрелештә айырыуса Ғәйнә ырыуы башҡорттары әүҙем ҡатнаша. Уның төп идеолгы Себер юлы (хәҙерге Балтас районы) Ҡарыш ауылы муллаһы Ғөбәйдулла Ғәлиев була. Тарихҡа һәм халыҡ хәтеренә ул Батырша (дөрөҫөрәге, Батыршаһ) исеме менән инеп ҡалған[115]. Халыҡ хәтере тигәндән. Заманында халыҡ уның хаҡында йыр ҙа, ҡобайыр ҙа ижад иткән, риүәйәттәр һөйләгән.

Ғилем һәм белем эйәләре булған абыздар, мулалар, хажиҙар етәкселегендәге ихтилалдар, шул иҫәптән идеолгы Батырша булған күтәрелеш тә совет осорондағы рәсми тарихта реакцион хәрәкәт тип баһаланды. Шул сәбәптән, ихтилал етәкселәре хаҡындағы фольклор батша заманында нисек тыйылһа, совет осоронда ла шулай тыйылды. Һөҙөмтәлә, ундай әҫәрҙәрҙе яҙып алыу юлға һалынманы. 1907–1910 йылдарҙа Иҙрес ауылында Ғәбидулла сәсән Арғынбаевтан Мөхәмәтша сәсән Буранғолов яҙып алған “Батырша” тигән ҡобайыр осраҡлы рәүештә генә Рәсәй фәндәр академияһының ғилми архивында һаҡланып ҡалған[116]. Элек уны баҫтырып сығарыу хаҡында уйларға ла мөмкин түгел ине. Әммә фольклорсыларыбыҙ, милли эпостарыбыҙ эҙәрләнгән замандарҙа уларҙың байтағын, әкиәттәр йыйынтыҡтарына индереп булһа ла, халыҡҡа кире ҡайтарған кеүек үк, был ҡобайыр тәңгәлендә лә тарихсылар менән рәсми идеологтарҙың күҙен томалау юлын таба

[114] Очерки по истории БАССР. – Уфа, 1956. – Т. I. Ч. 1. – С. 186.
[115] История Башкортостана с древнейших врем.. – С. 251 – 257.
[116] Ғилми архив , ф.3, оп. 12 / 226. – 70 – 97-се б.

торҙо: уның ҡайһы бер өҙөктәрен төрлө исемдәр менән халыҡҡа еткерҙе[117]. Әҫәр тулы килеш беренсе тапҡыр М.М. Сәғитов тарафынан тикшерелде[118].

Батырша(һ) ихтилалы 1755 йылдың 3 июлендә башланырға тейеш булһа ла, стихиялы рәүештә 15 майҙа уҡ тоҡана ла китә. Быға башҡорт ҡыҙҙарын мәсхәрәләүе менән халыҡты ҡан илатҡан Брагинды Йылан Этҡол менән Хоҙайбирҙе тигән егеттәрҙең[119] (риүәйәттәр буйынса, Сүрәш Мәргәндең) үлтереүе сәбәпсе була.

Батырша исемен йөрөтһә лә, был ихтилал менән ул, асылда, тура-нан-тура етәкселек итмәй, бары күтәрелешкә саҡырыу менән генә сикләнә, уның идеолгы вазифаһын ғына атҡара. Уға бағышланған ҡобайыр нәҡ ошо хәлдең проекцияһын хәтерләтә. Дөрөҫ, тарихи факт менән бәхәсләшкәндәй, сәсндәр ихтыяры менән ҡобайыр ҡаһарманы булараҡ, Батырша ғәскәр башында оҙайлы көрәшкә күтәрелә. Уға тик-лем иһә ошо күтәрелештең сәбәбе һөйләп кенә сығыла. Унан беҙ колнизаторҙарҙың баш-баштаҡлығы хаҡында мәғүмәт алабыҙ. Сәсәндәр был баш-баштаҡлыҡты бер эпизодта тасуирлап уҡ күрһәткән. Намаҙ уҡығанда, сәждәгә китеп, туңҡайған ҡарттың һыртына бер баяр үҙенең балаһын атландыра. Сәждәгә китеүсе аяҡ өҫтө баҫыуға, теге бала ҡолап, бәлә һалып, илай башлағас, баяр пистолеты менән ҡурҡытып, намаҙҙы боҙа. Исламға инаныусылар уның был ҡылығын башбаштаҡлыҡтан үтеп киткән мәсхәрәләү, милләтте, динде мыҫҡыл итеү, тип баһалай, әлбиттә. Ошо хәлгә үҙе шаһит булған Батырша илде, ерҙе талаусышул ятбауырҙарға, уларға булышыусы “милли” түрәләргә ҡаршы көрәшкә өндәй. Әҫәрҙең, хикәйәләүҙән бик, хәл-ваҡиғаны ҡыҫҡаса констатациялуҙан ғибәрәт булған ҡырҡ алты ғына сәсмә юллыҡтан торған фабулаһы Батыршаны һатлыҡтар тотторолоуын хәбәр итеү менән тамалана.

Фабулаһы күләм йәһәтенән шулай ыҡсым ғына бирелһә лә, сюжет ике өлөшкә бүленгән дә урталыҡты 856 юллыҡ ҡобайыр биләгән. Ҡарамаҡҡа, бик үҙенсәлекле композиция хасил булған. Шул рәүешле, М.М. Сәғитов әйтмешләй, “сюжет һыҙығы әҫәрҙең башында һәм аҙағында ғына” бирелеп, “поэтик ҡоршау функцияһын үтәй”[120]. Әммә шул тиклем шиғри юллыҡ былай ҙа схематик ҡына сюжетты һәлкәүләндерә. Уның ҡарауы, әҫәрҙә күләм йәһәтенән өҫтөнлөк итеүсе ҡобайырҙың мәғәнәүи роле шул арҡала өҫтөнлөк итеүгә ирешкән.

---

[117] Башҡорт халыҡ ижады: 3 томда/ төҙ., редакция, инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. Ә.И. Харисов. – 1954. – Т. 1. – 55– 57-се б.; Башҡорт халыҡ ижады: Эпос/ төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар Һәм һүҙлекавт. Н.Т. Зарипов. – Өфө: БКИ, 19782. – 3-сө кит. – 159 – 162-се, 177-се, 187-се б.
[118] Сәғитов М.М. Башҡорт халыҡ эпостарының мифолгик һәм тарихи нигеҙҙәре. – 174 – 179-сы б.
[119] История Башкортостана с древнейших времен … . – С. 254
[120] Сәғитов М.М. Башҡорт халыҡ эпостарының мифолгик һәм тарихи нигеҙҙәре. – 176-сы б.

Ҡобайыр Батыршаның халыҡ араһында киң билдәле саҡырыу һәм өндәмәләрен шиғри формаға күсереүҙән торғанға оҡшай. Әлбиттә, унда сәсәндәрҙең үҙ ҡараштары ла сағылмай ҡалмағандыр, моғайын. Башта унда колонизаторҙарҙың ҡыҫымдары, заманалар боҙолоп, ирек өҙөлөүе, завод, сиркәү төҙөлөүе, башҡрт түрәләренең властар таяныҫына әүрелеүе хаҡында һүҙ бара. Сәсәндәр бының өсөн, сәпкә мәргән атҡандай, үткер һәм үтемле һүҙҙәр – сағыштырыу, метафора һәм эпитеттар һайлап алған,

Түрә, тархан – барыһы,
Алтын ҡылыс биргәнгә,
Бисәһенә – күлдәклек,
Ҡыҙына яулыҡ биргәнгә,
Түшенә миҙал кейҙереп,
Данлы булдың,

тигәнгә алданып, үҙ халҡына ҡаршы эш ҡылыусыларҙы "эт" тигән метафора менән нарыҡлай ("Батша ҡулын һуҙҙы инде, Илдән эттең барыһын Үҙ янына йыйҙы инде"); уларҙы үҙҙәре файҙаһына тотоноусыларҙы "ауыҙы йөнлө кафыр", тип, шуларҙың барыһы тарафнан да тарҡауландырылған халыҡ иһә "өрккән ҡуй" тип нарыҡлана ("Ойошоп ятҡан йортоңдо Өрккән ҡуйҙай итте инде"). Ҡобайыр ҡаһарманы Батырша ил-йорт хәлен шулай констатациялау менән сикләнеп ҡалмай, Аҡай, Килмәк, Алдар батырҙар күтәрелешен хәтергә төшөрә, форсат сыҡҡанда, улар эшен дауам итергә өндәй:

"Толпар менһәң, елеп ҡал,
Батыр булһаң белеп ҡал;
Яман яуҙар ил баҫҡанда,
Батыр булып, ҡырып һал:
Булат булһын билеңдә,
Һаҙаҡ булһын ҡулыңда!"

Шуға күрә лә батыр тигән ат күтәреп тә тыуған илен, ерен ҡурсаламаған ир-аттың ундай ат күтәреүе мөмкин түгел икәнен раҫлап,

"Уралын биргән батырҙар
Уралға ул булырмы"

тигән яуабы ла үҙенән-үҙе аңлашылып торған риторик һорауын бирә.

"Һылыу ҡыҙҙай, түшенә
Дошман завод һалғанда,
Түҙеп торһа батырҙар,
Яуға сапмай, тик (яңғыҙ) ҡалһа,
Уға (Уралға. – Ә.С.) бала булырмы"

тигәне хаҡында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин. Ә ат уйнатҡан, ҡурай уйнатҡан, батырын да уға йәр булырҙай һылыуын да үҫтергән, Уралтау хаҡында:

Илгә (халыкка. – Ә.С.) төйәк булған тау,
Күп яуҙарҙа ҡан менән
Битен йыуған Уралтау, –

тип әйткәндә, бшҡорт иленең борон-борондан бик күптәрҙе ҡыҙыктырыуы һәм ылыктырыуы, уны яҡлаусыларҙың күп ҡаны түгелеүе күҙ уңында тотола, әлбиттә. Сөнки "Уралтау" һәм "Башҡорт иле" – башҡорт өсөн синоним.

Сәсәндәр Батыршаның ҡайҙа табан әйҙәүен төшөндөрөр өсөн, халыктың үҙ ижадынан таныш "Ҡуңыр буға" эпосынан мәғлүм Ҡуңыр буға юлы образына мөрәжәғәт иткәндәр:

Батыр булып, ат менһәм,
Һыу-сүл юлымды быумаç,
Юлыма үлән үçмәç,
Маяҡһыҙ ҙа яҙлыҡмаç –
Ҡуңыр буға юлы бар.

Мәғлүм булыуынса, Ҡуңыр буға юлы – ҡыл тарткан кеүек, төп-төҙ һәм бер ерҙә лә уны "һыу-сүл" киçеп үтмәй. Тимәк, ҡобайыр, Батырша(һ) халыкты әйҙәгән юлдың изге һәм хаҡ юл булыуын раçлаған.

Батырша(һ) исеменән был изге һәм хаҡ юлдан тайшанмау "ысулы" ла бирелгән. Ул иһә араға дошманды керетмәүҙән, ят бауырға ғына түгел, иң яҡынына ла сер сисеүҙән һаҡланыуҙан ғибәрәт:

Бығаса уңмаç яуҙарҙы
Бер Хоҙанан тимәгеҙ!
Яуҙы, илде муйырған –
Араға дошман ингәне,
Илде ятка биргәне;
…………………….
Сер һөйләгән дуçтарың,
Түшәктәге һөйгәнең,
Бер имсәктәй туғаның
Ситкә сереңбиргәне…

***в) Яулап алынған бәхет юлын һайлаусы Юлай улы Салауат батыр хаҡындағы эпик ҡобайыр.***

Иҙеүкәйҙе хәтерләткән мотивтар "Юлай улы Салауат" эпик ҡобайырында ла осрай. Туҡтамыш хан ил батырҙарын үҙенә алдырткандан һуң Иҙеүкәй халҡының ҡайҙа нисек йәшәүе менән танышырға ил аралап сығып киткәне кеүек, Салауат та "Киткән Уралға, Иҙел ашып Яйыҡҡа", "баяр, тархан, батшанан зар илаған" халыҡтарҙың асыулы икәнен белеп, "Ун ете йәшлек ир булған, Дуçы менән дошманды айырырлыҡ ир булған".

Ә инде ауға сыҡҡанында, Салауатка осрап, уға юл күрһәткән ҡарт "Урал батыр" эпосында Йәншишмәне эҙләп китеп барған Урал менән Шүлгәнгә осрап, уларға юл өйрәткән аҡ һаҡаллы ҡартты хәтерләтә.

Әммә, әгәр “Урал батыр”ҙағы ак һакаллы карт өйрәткән юл икәү булһа, Салауатка осраған карт өс юл күрһәтә. Окшашлыктағы айырма бының менән генә бөтмәй. “Урал батыр”ҙағы ак һакаллы карт күрһәткән юлдың береһе – бәхет иленә, икенсеһе көнө-төнө кайғы-һыкташ хөкөм һөргән илгә илтә. Артабан Урал менән Шүлгән ни эшләргә, ул юлдарҙы икәү-ара нисек бүлешергә тейеш, ул хакта акһакал бер ни ҙә өндәшмәй. “Әйттем – бөттө: минән эш калманы, калғанын үҙегеҙ карағыҙ”, – тигән кеүек, егеттәрҙең артабанғы яҙмышына битараф кала. Уның карауы, “Юлай менән Салауат” эпосындағы юл өйрәтеүсе Салауатка тағы бер осрай. Ошо үҙе үк уның егет яҙмышына битараф түгел икәнен күрһәтә. Карттың икенсе осрауы шуның менән әһәмиәтле, был юлайы ул Пугачевтың: “Азат булһын бары!” – тип яҙған хатын укыта. Шуның менән атаһының миҙалын тағып, отряд башында батша ғәскәренә ярҙамға барырға юл тоткан Салауаттың күҙен аса.

Карттың һүҙен ишеткәс,
Бүгәс хатын укығас,
Түшендәге миҙалын
Атып бәргән Салауат...
Яу асмайса Бүгәскә
Тура барған нан (икмәк. – Ә.С.) менән...

Карт бына шулай Салауаттың азатлык өсөн көрәшеүсе халык батшаһы Емельян Пугачевка кушылыуына сәбәпсе була. Хәйер, тәүге осрашыуы ук был исемһеҙ карттың Салауат менән етди кыҙыкһыныуын аңлата. Егеткә ул үҙе күрһәткән өс юлдың береһе – “өҙөк-өҙөк берләм юл”, икенсеһе – “бик боронғо иҫке юл”, өсөнсөһө – “тар булһа ла, һис сакта ла үлән үҫеп етекмәҫ” юл. Тәүгеһенең – тарханға мал көткән көтөүселәр моңланған, икенсеһенең бығаулы батырҙарҙы һөргөнгә оҙата торған, яуыз хакимдар үтә торған юл булыуы тураһында әйтә. Ошо мәғлүмәтте алғас та, “Урал батыр” эпосы менән таныш кеше: “Беренсе һәм икенсе юл Катил батша дәүләтенә илтә торған юлды хәтерләтә”, – тиһә, һис тә яңылышмаҫ. Ошо ассоциацияға ирештеме, ул өсөнсө юлды шул эпоста әлеге карт телгә алған бәхет иленә илтеүсе юл менән сағыштырырға тырышасак. Тик “Урал батыр”ҙағы бәхет иленән айырмалы рәүештә ул юлдың

“Батырҙарҙың атының
Тояғы менән каҙылған,
Күп батырҙар һөйәге
Маяк итеп каҙалған”

юл икәнен белгәс, баҙап калырға мөмкин. Шулай дөйөм мәғлүмәт биргәндән һуң, карт шул юлдан үткән Сәйет, Күсем, Акай, Караһакал, Батырша кеүек һәр кайһыһы үҙ дәүерендә башкорт халкын рус дәүләтенә кушылған сакта Ак бей батша Иван IV биргән хокуктарҙы

даулап, ихтилалға әйҙәүселәрҙе һанап китеүе була – “Урал батыр” эпосындағы аҡһаҡал көс түкмәй генә, әҙер хәлендә өлгәшмәле бәхет хаҡында һүҙ алып барһа, бындағы ҡарттың иһә, тел төбө менән кинәйәләп кенә, Салауатты көрәшеп яулана торған бәхеткә өлгәшергә саҡырыуы аңлашыла.

Эпос юл өйрәтеүсе ҡарттың тәржемәи хәлен бәйән итеп тормай. Әммә тәүге осрашыуҙа уҡ Салауаттың күҙенә ташланған уның ҡайһы бер һыҙаттары, күрәҙәлек итмәйенсә лә, уның кем булыуы хаҡында фекер тупларға форсат бирә. Йәш батыр ҡарттың маңлайындағы иҫке яраға, бармаҡтарының тупыслығына, күҙенең үткерлегенә иғтибар итә ҡуя. Шул билдәләре иҙеүселәргә ҡаршы көрәштәрҙә уның күптән ҡатнаша килгәнен аңлата ла ҡуя. Салауаттың атаһы ла шундайҙарҙан, үткән аяуһыҙ яуҙарҙа ҡатнашҡан кеше икәне лә әйтелә эпоста:

Салауаттың атаһы
Элек яуҙа булғанда,
Ямантауҙың буйында
Ике балаһы тыуып,
Мәмерйәлә үҫкәндәр.

Шул турала күңелендә тыуған хәтирәһен Салауат:

Ҡаяларҙан төшһәм, һаҙға батам,
Ҡара талдар үҫкән үҙендә;
Төҫтәре лә йәмһеҙ, еҫе тәмһеҙ –
Ҡан һөҙөгө сыға ла йөҙөндә, –

тип йыры менән ослап ҡуя. Салауаттың йыры халҡыбыҙҙың милли гимны хисабындағы “Урал” йырындағы

“Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам,
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың.
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батырҙар ҡандары...”

тигән һүҙҙәр менән ауаздаш. Ҡырҡылған талдан тамған ҡан образы кеүек үк, Салауат телгә алған һаҙҙағы “ҡан һөҙөгө” иле, ере, ирек өсөн башҡорт халҡының иҫәпһеҙ ҡорбандар килтереүен символлаштыра. Бынан тыш был йыр ваҡыт төшөнсәһенә лә эйә: ул Салауатҡа тиклем дә башҡорт илендә һанһыҙ изге яуҙар булыуын да төшөндөрә. Салауаттың йыры шулай уҡ фекерҙәштәр пароле, фекерҙәштәр ораны мәғәнәһенә лә эйә. Тап шул йыр яңғырауы сәбәпсе була ла инде Салауат янына үткән изге яуҙар ҡаһарманы булған теге ҡарттың килеүенә.

Эпоста Салауаттың оло яуға күтәрелерлек егет булып етеүе һәр яҡтан нигеҙләнә. Бүгәс батшанан хат алып, үҙен яуға өндәүсе тип танытҡан ҡарт ыңғайына үҙ яҙмышының киҫкен боролош яһауы билдәле рухи һәм физик әҙерлек талап иткән, әлбиттә. Салауат ошо талапҡа яуап бирерлек булғанмы һуң? Ошондай һорау тыуырын алдан белгәндәй,

сәсәндәр унының кесе йәштән үк мал-тыуар, ҡош-ҡорттоң үҙ-ара еңешеүен ҡарарға яратыуын, үҫә төшкәс, бәйгелә, майҙанда етеҙлеккә, таһыллыҡҡа, мәргәнлеккә көс һынашта, еңеү шатлығы менән еңелеү ғәрлеге ни икәнен белеп үҫеүенә иғтибар иттерә. Ун биш йәшендә "Ҡуян-маҙар атмайсы, Бүре, айыуҙы ғына тап итергә тырышҡан"лығы әйтелә.
Атаһы Аҙналы һымаҡ ғилем эстәргә лә өлгөрә Салауат.

Татарса ла уҡыған,
Урыҫса ла уҡыған,
Аҙналдан ҡала Уралда
Ике ҡәләм (ике телдә лә уҡый-яҙа – Ә.С.) белеүҙә
Ул икенсе ир булған.

Тупыс бармаҡлы исемһеҙ ҡарт тәү осрашҡанда, Салауаттың затын барлап, был турала егет өсөн бик үк күңелгә ятышлы булмаған һүҙҙәр әйтеүҙән тартынып тормай:

Олатайың Шәғәле
Ажырайып йөрөгән юл;
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп артмаҡҡа,
Олатайың Аҙналы –
Ул да йөрөгән оло юл, –

ти икенсе юлды тасуирлағанында. Көрәшселәрҙең яңы быуынын тәрбиәләүсе, көрәш эстафетаһын Салауатҡа еткереүсе ҡарттың был һүҙҙәре егетте генә түгел, эпосты тыңлаусы һәм уҡыусыларҙы ла уйға һалмалы. Ысынлап та, быуындан-быуынға эстафета тапшырыу мотивы эпостарҙа, ғәҙәттә, үткәндәрҙең изге традицияһын яңыһының дауам итеүсе булыуы юҫығында яҡтыртыла. Исемһеҙ ҡарттың һүҙҙәренән аңлашылыуынса, "Юлай менән Салауат" эпосы был трафарет алым ҡыҫаһын инҡар итә. Салауаттың олатаһы Аҙналы ла, унының атаһы Шәғәле лә батшаға, унының түрәләренә, баярҙарға ярҙам итеп, ошаҡ менән уларға ярап, үҙ кешеләрен ҡыйырһыта, үҙ атаһы иһә элек заводсыларға ҡаршы сыҡҡан, ете йыллыҡ һуғышта батырлыҡтар күрһәтеп миҙал алып, гонаһынан арынған. Ул шуға ҡыуана. Тимәк, ер талаусы заводсыларға сапҡындар яһауы, ахырҙа Пуғачевҡа ҡушылыуы менән Салауат ырыу-ғаилә традицияһына ла ҡаршы килә һәм уны еңеп сығыуға ирешә. Быныһы – бер. Икенсенән, исемһеҙ ҡарттан яугир тапҡырлығы менән, әрләү, хурлау ғына түгел, бер ни тиклем ҡарғыш ауаздары ҡушып, Салауаттың бабаһын, олатаһын, атаһын ҡылыҡһырлатып, эпосты ижад итеүсе сәсәндәр егеттең һүҙ күтәреүсәнлеген һынап ҡарауҙы асып бирергә теләгәндәрҙер. Салауат "ыһ" та итмәй. Тимәк, Салауат үҙен һүҙ күтәреүсән егет тип күрһәтә. Аяуһыҙ яуға инәсәк егет өсөн быныһы ла кәрәк һыҙат.

Салауат бына шулай ҙур әҙерлек менән Пугачев яуына ҡушылһа ла, был азатлыҡ хәрәкәте лә еңелә. Эпосты ижад итеүселәр бындай һөҙөмтәнең сәбәбен “яуға барған ирҙәрҙең теләге сыбар” (тарҡау) булыуҙан, “баярҙы үҙ еремдән ҡыуғас” етәр тип, “бер табандан тормай”, һәр кем үҙе йортон ҡайғыртыуҙан, һөҙөмтәлә “Салауат-Салауат булһа ла, Яңғыҙ батыр дошмандың яуына ҡаршы көс” була алмауынан күрә. Был һүҙҙәр “Ҡараһаҡал” эпосындағы

“Ил ҡаплаған дошманға<br>
Яңғыҙ батыр яу булмаҫ!<br>
Яңғыҙ толпар тояғы<br>
Дошманына шау булмаҫ!<br>
Ил ҡаплаған дошманға<br>
Батыр яуы эсендә<br>
Ярҙамсылар табылғас,<br>
Ҡараһаҡал батыр ҙа,<br>
Артҡа сикмәй, нишләһен?!”

тигән юлдарҙа әйтелгәнде хәтерләтә. Ике эпостың да бер үк мәғәнәләге һүҙҙәр менән тамамланыуы уҡ крәҫтиән яуын тарҡаулығының типик күренеш булыуына ишара яһай.

*г) “Байыҡ Айҙар сәсән”*

“Юлай менән Салауат” эпик ҡобайырына “Байыҡ Айҙар сәсән” эпосы яҡын. Унда ла дөйөм эпик традицияла һынланыш алған Салауат образын тулыландырырлыҡ һыҙаттар бар. Һунарға сыҡҡан Салауат кейек аулап өлгөрә алмай, иллә мәгәр ифрат ҡиммәтле табышҡа юлыға: уға Байыҡ сәсән осрай һәм ул ирек өсөн яуҙа үлгән батырҙар, ихтилалдарҙы ҡанға батырған караттар хаҡында һөйләп, “батырҙар юлы ереккән” (ташланған, онотолған. – Ә.С.), саң баҫҡан..., ҡылысым тутыҡҡан, ҡаяла ҡайраҡ тапманым”, тип, хәҙер тағы көрәшкә күтәрелергә форсат етеүен кинәйәләй. Кинәйәләп әйткәне батырҙар юлы онотолмаҫҡа, ҡылыс тутыҡмаҫҡа тейеш; ҡаяла ҡайраҡ табыу кәрәклеге – ҡылысҡа көс бирер ҡайраҡ кеүек, батыр илгә таянып эш итһә генә, юлы уңа тигәнде аңлата булыр.

Байыҡ сәсән йөҙөндә ил аҡылын таба Салауат. Шул уны изге ихтилалға дәртләндерә.

Байыҡ Айҙар сәсән образы “Юлай менән Салауат” эпосындағы исемһеҙ ҡарт образы менән ассоциациялаша. Шул ҡарт һымаҡ, ул да, кинәйәләп-кинәйәләп кенә, Салауатҡа аҡыл бирә. Ул да батырҙар юлын телгә ала. Телгә алып ҡына ҡалмай ул уны. Әгәр исемһеҙ ҡарт “күп батырҙар һөйәге маяҡ булып ҡаҙалған” юл, “тар булһа ла, һис саҡта үлән үҫеп етекмәҫ” булыуын әйтһә, йәғни быуын-быуын “Иле өсөн азатлыҡ Шул юл буйлап дауланған” икәнен һөйләп бирһә, Байыҡ сәсәндең, “батырҙар юлы ереккән” тигәне, яңынан азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелергә саҡырыу мәғәнәһенә эйә. Теге исемһеҙ ҡарт һымаҡ, үҙе лә

байтаҡ ихтилалдарҙа ҡатнашҡан ҡарт сәсәндең шулай, аңлағанға ишара, принцибы буйынса, кинәйәләп оло маҡсаттар хаҡында һүҙ алып барыуы унын ил аҡылын туплаған сәсән булыуына тап килә.

Байыҡ Айҙарҙың, ысынлап та, ил аҡылын кәүҙәләндереүсе ҡобайырҙа ярайһы ғына аныҡ асыла. Уның был һәләте – тәбиғәт биргән зирәклеге, сәсәнлек таланты менән генә түгел, тәржемәи хәленең бай булыуы менән дә аңлатыла. Ул Салауаттың атаһы Юлай менән батшалыҡҡа ҡаршы яуҙа ҡатнаша, эҙәрлекләүҙәрҙән йәшенеп, ҡасҡын тормошон башынан кисерә, аҙаҡ Салауат яуына килеп ҡушыла. Язаға тарттырылыуҙан ҡасып, ҡаҙаҡ иленә юлыға, ҡаҙаҡ аҡындары менән әйтештәрҙә ҡатнаша. Сит илдә лә аҡты – аҡ, ҡараны – ҡара, тип таныусы, тел аҫтына тел йәшерә белмәгән сәсән булып ҡала. Хатта ки теленең үтә тәртмә, һүҙенең мәргән, үҙенең баш эймәҫ булыуы уның эҙәрләнеүҙәренә сәбәп була.

Байыҡ сәсәндең төптән уйлап эш итеүсән, әйтер һүҙен елгә елгәрмәүсән, зиһенгә һеңерлек зирәклек менән әйтеүсән икәне, башҡорт ир-егетен француз яуына (1812 й.) оҙатыу картинаһында бигерәк тә тәрән мәғәнәле итеп асылған. Батшанан яуға саҡырыу фарманы килгән. Әммә йыйын тынып ҡалған. Был аңлашыла. Сөнки быуын-быуын ил ирке өсөн ихтилалдарға күтәрелгән башҡортто караттары менән ура торған батша бөгөн килеп шул ҡәүемдең ярҙамына өмөт итә. Шул саҡта, ҡобайырҙан аңлашылыуынса, Байыҡтың сәсән һүҙе хәл иткес әһәмиәт ҡаҙана. Ҡарт сәсән олатайҙарҙың Аҡ батшаға буштан-бушҡа ант итмәүен йыйынға йыйылған халыҡтың хәтеренә төшөрә. Ә туғанға биргән аҡ анттың изге булыуын, яҡшы атты нисек ҡарайһың, ундай антты ла шулай хөрмәт итеү лазым икәнен төшөндөрә. Ҡобайырҙа әйтелмәһә лә, күрәһең йыйында “Урыҫ нигә башҡортҡа туған булһын?!” тигән һорау тыуғандыр, бәлки, әйткәненән шундай һорау бирелерен аңлағанғалыр, Байыҡ сәсән “кем ул туған?” тигәнгә һорауға ла аңлатма бирә: бер әсәнән, бер атанан тыуған ғына түгел, бер һыуҙы һыулаған, бер үк ерҙә аунап үҫкән ҡәүемдәр ҙә туған, тимәксе. Ҡарт сәсәндең

“Башыңа бәлә килгәндә,
Яман булһа ла күргәндә, –
Шул яҡшы!
Ике туған талашыр,
Атҡа менһә, ярашыр!”

тигән нәсихәте бер башҡортҡа ғына түгел, дөйөм төрки ҡәүеменә уртаҡ йола ҡанунының, яңыса уҡылышы (новое прочтение) тип ҡабул ителеүенә булыша. Халыҡтың дәррәү күтәрелеүе – сәсән һүҙенең тәьҫирле булыуына дәлил. Тарихтан мәғлүм булыуынса, был яуҙа башҡорттарҙан 500-әр яугирҙан торған строевой 28 атлы полкы, уларҙы хеҙмәтләндереүсе тиҫтәләгән тыл полкы ҡатнаша. Казачий сословие

буларак, был һуғышта ла ҡорал, кейем-һалым, ризыҡ, аттар менән башҡорттар үҙҙәрен үҙҙәре тәьмин итә.

***

Теләнселәп алынған хәйер-саҙаҡа кеүек юғарынан ирек бирелерен саҙаҡ көтөп ятмаған башҡорт халҡы. Бәхет үҙенән үҙе килмәй. Яулап алынған бәхет кенә – ысын бәхет. Быныӊ өсөн ирекле булыуың шарт. Ирек иһә яуһыҙ, дауһыҙ яуланмай. Ә иректе халҡыбыҙ борон-борондан ике яҡлы – үҙенеӊ бойондороҡһоҙлоғо һәм оло Ватандыӊ бойондороҡһоҙлоғо юҫығында аңлаған. Ошо урында, сираттағы Ҡырым компанияһы башланғас, батша ғали йәнәптәре: “Башҡорттарым, ярҙамға килеӊ!” – тип оран ташлауы хаҡындағы риүәйәтте яңынан иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Белеүебеҙсә, был ваҡытта башҡорттар шул уҡ батшаға ҡаршы сираттағы ихтилалға күтәрелгән була. Ни эшләргә? Оҙаҡ уйланырға ваҡыт та самалы. Бер яҡтан, Аҡ бей батша – олуғ кенәз Иван Васильевичтыӊ “Жалованная грамота”лары менән нығытылған хоҡуктарҙы сикләүсе, шул сикләүҙәргә ҡаршы ихтилалға күтәрелеүселәрҙе баҫтырыусы, ҡанға батырып аяуһыҙ язалаусы батшаға ярҙам итеү – азатлыҡ хаҡына шаһит үлгәндәрҙеӊ рухы алдында оло гонаһ. Икенсе яҡтан, рус батша8ы Иван IV-неӊ өгөтө буйынса, Мәскәү дәүләте берләшкән бабаларыбыҙ, яу сыҡҡанда, батшаға ярҙам итергә ант иткән. Ошо урында, моғайын да, сәсәндәребеҙ һүҙ алып, Байыҡ Айҙар сәсән һымаҡ, олатайҙарҙыӊ Рус батшаһына тик торғандан тоғролоҡҡа ант итмәүе, анттыӊ үтәлеше фарыз икәнен аӊлатҡандыр. Ил ҡарттары, моғайын да: “Иле берҙеӊ – ҡәүеме бер”, – тип, батшаныӊ саҡырыуын ҡабул итергә өндәгәндер. Нисек булһа ла, булған, башҡорттар батша саҡырыуын ҡабул иткән. Ошо урында улар ауыҙынан батша ишетергә мәжбүр булған яуапты ла тағы бер тапҡыр иҫкә төщөрөү урынлы булыр. Белеүебеҙсә, улар, уртаҡ Ватанға хәүеф янағанда, бабаларыбыҙ антына тоғро ҡалыуҙарын раҫлап, уртаҡ дошманға ҡаршы яуҙа ҡатнашасаҡтарын ғына әйтеп ҡалмаған. Уртаҡ дошманды тар-мар итеү менән, үҙ иркетәрен даулап, властарға ҡаршы көрәште дауам итәсәктәрен дә белдергәндәр.

Яулап алынған бәхет юлын һайлаусы батырҙарыбыҙ хаҡындағы эпостарыбыҙҙыӊ ҡаһармандары ла, шул риүәйәт геройҙары һымаҡ уҡ, бына шул ике яҡлы, әммә икеле-микеле булмаған изге принциптарҙан сығып эш иткәндәр.

Башҡорттарҙыӊ батшаға риүәйәт шаһитлыҡ иткән яуабы рустыӊ бөйөк кенәзе Святославтыӊ үҙ дошмандарына яу асасағын көнәлгәре иҫкәртеп: “Иду на вы!” – тигәнен хәтерләтеүе хаҡында ла әйтелгәйне. Аҡай батыр ҡулға алынғас, башҡорттарҙыӊ батша властарына: “Күсем улы Аҡайҙы ҡайтарып бирегеҙ, ...үҙегеҙ Минзәлә ҡалаһына кире ҡайтығыҙ һәм сиктеӊ был яғына сыҡмағыҙ! Әгәр беҙҙеӊ талаптарыбыҙҙы

үтәмәһегеҙ, Аллаға тапшырып, һеҙгә яу асабыҙ”, – тип талап ҡуйыуы ла (“Аҡай яуы”) – Святославтың дошманды алдан иҫкәртеүен хәтерләтә. Тимәк, асыҡлыҡта (открытость) башҡорттар шул бөйөк кенәҙҙән был юлайы ла бер ҙә кәм түгел икәнлектәрен иҫбат иткәндәр.

* * *

Ниндәйҙер кимәлдә фрагменталь булһа ла, башҡорт халҡының эпик ҡомартҡыларына ҡыҫҡаса күҙәтеүҙәрҙән дә жанр, тема, йөкмәткe йәһәтенән дә, хронологик яҡтан да уларҙың күп яҡлы булыуы асыҡ күренә.

Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары араһында айырым урын алып торған мифологик эпостарҙа боронғо бабаларыбыҙҙың ил ҡороу өсөн ынтылыштары, тәбиғәт менән мөнәсәбәтте юлға һалып, уға һыйынып, унын менән һин дә мин килешеп йәшәргә теләүҙәре, һуңғыһын тәүгеһе өсөн төп шарт итеп иҫәпләүҙәре сағылыш алған. Шуға ла эпостарыбыҙың был өлөшө, бабаларыбыҙ шул изге эште әҙәм балаһы йәшәрлек итеп донъяны үҙгәртеп ҡороуҙан башлаған, тип раҫлай. Был йәһәттән “Урал батыр” эпосы айырыуса әһәмиәтле. Эпостарыбыҙҙың башҡаларының геройҙары Урал батырҙың вариҫтары кеүек ҡабул ителә. Улар, Урал батыр тыуҙырған шарттарҙы файҙаланып, Ер өҫтөндә, кешелек алдында тыуған башҡа проблемаларҙы хәл итергә ынтылыусылар рәүешендә кәүҙәләндерелә.

**Һорауҙар һәм эш**

1. Эпик ҡомартҡылар: уларҙың жанр йөҙө, форма (жанр күренеше йәһәтенән), тематик-хронологик яҡтан төркөмлнешен аңлатығыҙ.
2. Ниндәйерәк эпостарҙы мифологик эпостар төркөмөнә инденрәләр?
3. Башҡа эпик ҡомартҡыларыбыҙҙан «Урал батыр» ни яғы менән айырыла. Урал батыр менән Шүлгәндең эшмәкәрлеген анализлағыҙ, уларға үҙ баһағыҙҙы бирегеҙ
4. Урал батырҙың эшен дауам итеүсе батырҙар хаҡындағы эпостарҙың характерлы яҡтарын аңлатығыҙ.
5. Эпостапрыбыҙҙа“кеше һәм тәбиғәт” проблемаһының ҡуйылышы һәм художестволы хәл ителешен билдәләгеҙ.
6. “Йософ менән Зөләйха” дастанында тоғролоҡ һәм уғрылыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, атай һәм улан, ят һәм туған проблемаларының ҡуйылышы, әхлаҡи-этик юҫыҡта хәл ителеше.
7. “Буҙйегет”, Таһир менән Зөһрә”, “Ләйлә менән Мәжнүн” дастандары һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” кеүек бер береһнә оҡшаш булмаған эпик сюжеттарҙағы уртаҡлыҡтар хаҡында ни әйтә алырһығыҙ?

8. Тематика, проблематика, поэтика йәһәтенән тарихи эпостарыбыҙҙҙың мифологик һәм көнкүреш эпостарына сюжет һәм идея-тематика кимәлдәрендәге оҡшаш һәм улар менән уртаҡ һәм айырмалы яҡтары.

9. Тарихи эпостарҙа ырыуҙар берҙәмлеге, халыҡты туплау идеяһының асылышы һәм уның маҡсаты хаҡында әңгәмә ҡороғоҙ.

10. Башҡорт ихтилалдары хаҡындағы эпостарҙа халыҡ күтәрелешенең төп маҡсатын аңлатығыҙ. Рәсми тарихта улар ни өсөн берсә - рекцион хәрәкәт, берсә милли азатлыҡ хәрәкәте тип баһаланды? “Милли азатлыҡ хәрәкәте” тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Тарихи реалиялар күҙлегенән ҡарағанда башҡорт ихтилалдарының сәбәбен бүтән төрлө аңлатыу мөмкинлеге юҡмы? Башҡа төрлө аңлатыу мөмкинлегенә эпостарҙан яуап табырға буламы?

## Ҡыҫҡартмалар

Авт. – автор.
б. – бит.
БДУ БӘФК фф – Башҡорт дәүләт университеты Башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһының фольклор фонды.
БДУ нәшр. – Башҡорт дәүләт университеты нәшриәте.
БКИ – Башкирское книжное издательство.
БКН – Башҡортостан китап нәшриәте.
БНТ – Башкирское народное творчество.
БХИ – Башҡорт халыҡ ижады.
Гл. ред. – Главный редактор.
ҒА – Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Ғилми архивы.
Изд. испр. – Издание исправленное.
Исслед. – Исследование.
Канд. филол. наук. – кандидат филологических наук.
Кн. изд-во – Книжное издательство.
Ҡар. – Ҡарағыҙ.
Л. – Ленинград.
М. – Москва.
Мн. – Минск.
Мөхәрр. – мөхәррир.
оп. – опись.
Отв. ред. – Ответственный редактор.
Отд. – Отделение.
Пер. и коммент. – перевод и комментарии.
С. – Страница.
Спб. – Санкт-Петербург.
ТКН – Татарское книжное издательство.
Төҙ. – Төҙөүсе.
ф. – фонд.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


I БҮЛЕК. КӨЛӘМӘСТӘР ........ 5
1. Көләмәстәрҙе өйрәнеү тарихынан ........ 6
2. Көләмәстәрҙең килеп сығышы ........ 7
3. Көләмәстәрҙең миллилеге һәм социаль йөкмәткелеге ........ 11
4. Көләмәстәрҙең жанр сиктәре ........ 15
5. Көләмәстәрҙең тематик төркөмләнеше ........ 18
6. Көләмәстәрҙең жанр төрҙәре ........ 25
7. Көләмәстәрҙең поэтикаһы ........ 28
ӘҘӘБИӘТ ........ 38
Һорауҙар һәм эш ........ 40
II БҮЛЕК ........ 41
ЛЕГЕНДАЛАР ҺӘМ РИҮӘЙӘТТӘР ........ 41
1. Легенда һәм риүәйәттәрҙең килеп сығышы ........ 42
2. Этнонимик һәм этногенетк легендалар һәм риүәйәттәр ........ 45
3. Топонимик легендалар һәм риүәйәттәр ........ 50
4. Тарихи легендалар һәм риүәйәттәр ........ 59
5. Тормош-көнкүреш легендалары һәм риүәйәттәре ........ 76
ӘҘӘБИӘТ ........ 94
Һорауҙар һәм эш ........ 967
III БҮЛЕК ........ 97
БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ЭПИК МИРАҪЫ ........ 97
1. Эпик ҡомартҡыларҙы йыйыу һәм өйрәнеү тарихынан ........ 97
2. Башҡорт эпостарының төркөмләнеше ........ 104
IV БҮЛЕК ........ 108
МИФОЛОГИК ЭПОСТАР ........ 108
1. Донъяға “мәңге үлмәҫ төҫ” биреүсе Урал батыр ........ 108
2. Ике донъяны бер итеп, ер өҫтөндә Урал батырҙың эшен дауам итеүсе батырҙар хаҡындағы эпостар ........ 110
3. Эпик батыр никахы ........ 114
4. Мифологик эпостарҙа “кеше һәм тәбиғәт” проблемаһының ҡуйылышы һәм художестволы хәл ителеше ........ 116
5. Башҡорт халҡының мифологик эпостары һәм донъя мифологияһы ........ 118
V БҮЛЕК ........ 121
ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ЭПОСТАРЫ ........ 121
1.Тормош-көнкүреш эпостарында мөхәббәт һәм никах проблемаһы ........ 121
2. “Йософ менән Зөләйха” сюжетының фольклор менән мөнәсәбәте ........ 124
3. “Буҙйегет” дастанында башҡорт фольклоры менән уртаҡлыҡтар ........ 128
4. “Таһир менән Зөһрә” дастаны һәм “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәге араһындағы оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡтар ........ 130
5. Дастандың әкиәткә тартҡаны ........ 133
6. Тормош-көнкүреш тематикалы яҙма эпик ҡомартҡылар ........ 135

7. Иш янына – ҡуш булып, тормош-көнкүреш эпостары төркөмөн байытыусы ҡомартҡылар ........ 137
8. “Ҡыҙ намыҫы – ил намыҫы” икәнен раҫлаусы эпостар ........ 140
9. Иртәктәрҙә, ҡобайырҙарҙа һәм яҙма дастандарҙа ер яҙмышы хаҡында халыҡ уйланыуҙарының сағылышы ........ 142
VI БҮЛЕК ........ 145
ТАРИХИ ЭПОСТАР ........ 145
1. Ырыу-ара мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған эпик ҡомартҡылар ........ 145
2. Шәжәрәләргә теркәлгән эпик сюжеттар ........ 152
3. Хандар заманы хаҡындағы эпостар ........ 156
4. Тыйылған эпос ........ 165
5. Ҡаҙанға ҡаттан юл һалған, унда зат ҡалдырған батыр ........ 172
6. Ихтилал башлығының эпос ҡаһарманы булғаны ........ 176
Һорауҙар һәм эш ........ 197
Ҡыҫҡартмалар ........ 197

*Учебное издание*

Ахмет Мухаметвалеевич Сулейманов

# ПОВЕСТВОВАТЕЛЬНЫЙ ФОЛЬКЛОР БАШКИРСКОГО НАРОДА

*(На башкирском языке)*

Часть вторая

Редактор Н.Р.Ахтямова

Технический редактор И.В.Пономарев

Лиц. на издат. деят. Б848421 от 03.11.2000 г. Подписано в печать 29.12.2010.
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано на ризографе. Усл. печ. л. – 12,5. Уч.-изд. л. – 12,3.
Тираж 500 экз. Заказ №

ИПК БГПУ «Вагант» 450000, г.Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а